# Ағиҙел

Өфө,
декабрь
2011

12 (1064)

ӘҘӘБИ-НӘФИС ҺӘМ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ЖУРНАЛ
ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ
И ОБЩЕСТВЕННО-ПОЛИТИЧЕСКИЙ ЖУРНАЛ

Ойоштороусылары:

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте,
Башҡортостан Яҙыусылар берлеге,
Редакция коллективы.

Учредители:

Правительство Республики Башкортостан,
Союз писателей Республики Башкортостан,
Коллектив редакции.

1923 йылдың март айынан башлап сыға.
Башҡорт телендә айына бер тапҡыр баҫыла.
Издается с марта 1923 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.

АҒИҘЕЛ ● АГИДЕЛЬ

*Баш мөхәррир*

Әмир ӘМИНЕВ

*Мөхәрририәт:*

Мөхәмәт БАҒЫШАЕВ,
Рауил БИКБАЕВ,
Наил ҒӘЙЕТБАЕВ,
Ҡамилә ДӘҮЛӘТОВА
Рәмил ЙӘНБӘК *(баш мөхәррир урынбаҫары)*,
Марат КӘРИМОВ,
Фәнил КҮЗБӘКОВ *(бүлек мөхәррире)*,
Ноғман МУСИН,
Артур СУРИН,
Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,
Рәшит ШӘКҮР,
Сабир ШӘРИПОВ *(бүлек мөхәррире)*,

*Редакция хеҙмәткәрҙәре:*

Гөлназ Ҡотоева *(яуаплы сәркәтип)*,
Мәхмүт Хужин *(бүлек мөхәррире)*,
Ләйсән Мараҡанова *(өлкән мөхәррир)*,
Юлай Янбаев *(баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре буйынса урынбаҫары)*,
Гүзәлиә Тутаева, Рүзилә Саптарова *(корректорҙар)*,
Рәйсә Ҡамалетдинова, Ләйсән Хәзиева *(компьютерҙа йыйыусылар)*,
Роза Шәйнурова *(компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе)*,
Рима Нәзифуллина, Зөлфиә Биктимерова *(бухгалтерҙар)*.

Журнал Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм масса коммуникациялары өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттә 2009 йылдың 14 августында теркәлде.
Таныҡлыҡ ПИ № ФС77-37206.

---

Журнал редакцияла компьютерҙа йыйылды һәм биттәргә һалынды.
Баҫырға ҡул ҡуйылды 06.12. 2011. Офсет ҡағыҙы. Форматы 70х100 1/16.
“Times” гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма табаҡ 15,6. Иҫәп нәш. табаҡ 18,1.
Тиражы 3 262 экз. Һатыуҙа хаҡы ирекле. Заказ № 2.0207.11.

---

**Беҙҙең адрес:** 450001, Башҡортостан Республикаһы,
Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2, 4-се ҡат.
«Ағиҙел» журналы редакцияһы.
**Наш адрес:** 450001, Республика Башкортостан,
г.Уфа, проспект Октября, 2, 4-й этаж.
Наш адрес в Интернете: Agideljurn@mail.ru.
http://agidel.pressarb.ru.

---

Баҫма Матбуғат һәм киң мәғлүмәт коммуникациялары буйынса федераль агентлыҡтың финанс ярҙамында сығарылды.
Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агенства по печати и массовым коммуникациям.

---

Башҡортостан Республикаһының «Өфө полиграфкомбинаты» дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды.
(450001, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2).
Отпечатано в Государственном унитарном предприятии Республики Башкортостан «Уфимский полиграфкомбинат».
(450001, г.Уфа, пр.Октября, 2).

---

Банкыла беҙҙең реквизиттар: журнал «Агидель» ИНН 0274014887
р/с 40602810200830000004, к/с 30101810600000000770
филиал ОАО «Урало-Сибирский» банк г.Уфы, БИК 048073770

**© «Ағиҙел», 2011 (12,1064)**

# БЫЛ ҺАНДА:


ШИҒРИӘТ

**Рауил Бикбаев.** „Йәшәйбеҙ бит ике быуатта...“
Шиғырҙар. ...........................................................................5
**Әнисә Таһирова.** Көҙгө балан. Шиғырҙар. ...............................12
**Рәдиф Тимершин.** Хәҡиҡәткә күҙ йоммайым...
Шиғырҙар. ...........................................................................20

СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР

**Хәйҙәр Тапаҡов.** Ҡуласа. Хикәйә. ...........................................26
**Сәлмән Яҡупов.** Ҡуш ҡайындың береһе. Хикәйә. ..................45
**Радик Әхмәтов.** Эй, ағыла болот... Роман. Аҙағы. ....................51

*“Ағиҙел”дә ҡунаҡта – Силәбе ҡалаһының*
*М. Аҡмулла исемендәге әҙәби берекмәһе*

**Ҡамса Мортазин.** Һүрелмәй ижад ялҡыны. ..................................82
**Булат Батталов, Алевтина Вәлиева, Мәүлиҙә Ибраһимова, Дарвин Таһиров, Азамат Усманов, Венера Нуртдинова, Рим Рәхимов, Зимфера Ширванова, Айҙар Ишбирҙин, Эльвира Ҡолоева, Юлиә Вәлиева, Нәфисә Шакирова, Рафаэль Мөхәмәтйәнов.** Шиғырҙар. ......................................84
**Гөлсирә Ғүмәрова, Урал Ҡолошов, Альвина Мөхәмәтйәнова.**
Нәҫерҙәр. ...........................................................................92

ӘҘӘБИ ТӘНҠИТ

**Сәриә Рамазанова.** Рамаҙан Өмөтбаев – публицист. ....................95

ПУБЛИЦИСТИКА

**Рәүеф Шаһиев.** Һәйкәлгә лайыҡ шәхес. ........................................99
**Әхмәтзәки Вәлиди Туған.** Төркөстандың киләсәге. ....................102

*2011 – Башҡортостанда милләт-ара татыулыҡты нығытыу йылы*

**Тәлғәт Шаһманов.** Ауыл мәктәбенең әсе күҙ йәштәре. ...............106
**Ирек Агишев.** Вайымһыҙлыҡ һәм күндәмлек баҫа. ...................114

*Жәлил Кейекбаевтың тыуыуына 100 йыл*

**Зөһрә Кейекбаева.** Ебәрелгән һәм алынған хаттар. Аҙағы. .......120

РУХИ ТАМЫРҘАРЫБЫҘ

**Мәхмүт Хужин.** Быуаттар менән күҙләшергә килегеҙ! ................148

*“Ағиҙел” ҡунағы*

**Гөлназ Ҡотоева.** Әйтер һүҙем бар!
*(Әхәт Сәлихов менән әңгәмә.)* ......................................................151
**Мәхмүт Хужин.** Көнкүреш өлгөһө.
*(БР-ҙың торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры Ирек Ялалов менән әңгәмә)* ...................................................................157

СӘНҒӘТ

**Фәрзәнә Аҡбулатова.** Үҙ халҡының рух илсеһе. .........................163

САТИРА ҺӘМ ЮМОР

**Рәзилә Ырыҫҡужина.** Бәхетле ялҡау. **Әмир Сәйфуллин.**
Исем ҡушыу мәрәкәһе. Юморескалар. ..................................174

“АҒИҘЕЛ”ГӘ ХАТТАР КИЛӘ

“АҒИҘЕЛ” ЖУРНАЛЫНЫҢ 2011 ЙЫЛҒЫ ЙӨКМӘТКЕҺЕ

ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ

# В НАШЕМ НОМЕРЕ:

ПОЭЗИЯ

**Р. Бикбаев, А. Тагирова, Р. Тимершин.** *Стихи.*

ПРОЗА

**Х. Тапаков.** Карусель. *Рассказ.*
**С. Якупов.** Одна из белых берез. *Рассказ.*
**Р. Ахметов.** Эй, плывут облака… Роман. *Окончание.*

*В гостях у «Агидели» – литературное объединение имени М. Акмуллы из Челябинска*

**К. Муртазин.** Не угаснет пламя творчества.
**Б. Батталов, А. Валиева, М.Ибрагимова, Д. Тагиров, А. Усманов, В. Нуртдинова, Р. Рахимов, З. Ширванова, А. Ишбирдин, Э. Кулуева, Ю. Валиева, Н. Шакирова, Р. Мухаметьянов.** *Стихи.*
**Г. Гумерова, У. Кулушев, А.Мухаметьянова.** Новеллы.

ЛИТЕРАТУРНАЯ КРИТИКА

**С. Рамазанова.** Р. Уметбаев – публицист.

ПУБЛИЦИСТИКА

**Р. Шагиев.** Личность, достойная памятника.
**А. Валиди Туган.** Будущее Туркестана.

*2011 – Год укрепления межнационального согласия*

**Т. Шагманов.** Слезы деревенской школы.
**И. Агишев.** Равнодушие нас не украшает.

*100 лет со дня рождения Ж.Г. Киекбаева*

**З. Киекбаева.** Отправленные и полученные письма. *Окончание.*

КОРНИ ДУХОВНОСТИ

**М. Хужин.** Приходите на диалог с веками.

*Гость «Агидели»*

**Г. Кутуева.** Есть что сказать! *(Интервью с А.Салиховым).*
**М. Хужин.** Образец быта. *(Интервью с министром коммунально-жилищного хозяйства РБ И. Ялаловым)*

ИСКУССТВО

**Ф. Акбулатова.** Духовный посланец народа.

САТИРА И ЮМОР

**Р. Рыскужина.** Счастливый лентяй. **А. Сайфуллин.** Причуды имянаречения. *Юморески.*

ПИСЬМА В «АГИДЕЛЬ»

СОДЕРЖАНИЕ ЖУРНАЛА «АГИДЕЛЬ» ЗА 2011 ГОД

ЛИТЕРАТУРА, КУЛЬТУРА…

---

**Телефондар:**
Баш мөхәррир – 277-76-88 (факс)
Баш мөхәррир урынбаҫары һәм яуаплы сәркәтип – 274-89-65
Баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре һәм подписка буйынса урынбаҫары –292-77-60 (факс)
Шиғриәт һәм сәнғәт, тәнҡит, публицистика бүлектәре –277-87-73
Проза бүлеге – 277-87-50
Бухгалтерия – 277-78-90 (факс)

● Редакция фекере авторҙар фекере менән тап килмәҫкә лә мөмкин.
● Редакцияға килгән ҡульяҙмалар рецензияланмай һәм кире ҡайтарылмай.
● Журналда сыҡҡан яҙмаларҙы күсереп баҫҡанда «Ағиҙел»дән алынғанлығын күрһәтеү мотлаҡ.
● Нәшриәт ғәйебе менән киткән етешһеҙлектәр өсөн редакция яуап бирмәй. Улар хаҡында 223-76-62 телефоны менән хәбәр итергә кәрәк.



**Рауил**
**БИКБАЕВ**

# „ЙӘШӘЙБЕҘ БИТ ИКЕ БЫУАТТА...“

„Я устал от двадцатого века,
От его окровавленных рек.
И не надо мне человека,
Я давно уже не человек“.
Владимир Соколов

*„Эй арытты егерменсе быуат,*
*Ҡандар даръя булып түгелде.*
*Кәрәк түгел кеше хоҡуҡтары,*
*Мин бит күптән кеше түгелмен“.* —

*Ни ғазаптар кисергәндер шағир*
*Яҙмышына шулай тигәндә,*
*Йөрәккәйе талып китеп барҙы,*
*Яңы мең йыллыҡҡа килгәндә.*

*Аяҡ баҫтыҡ яңы мең йыллыҡҡа,*
*Йәшәйбеҙ бит ике быуатта!*
*Мең йыл буйы кеше ниҙәр күрер?*
*Уйлауы ла ҡыйын был хаҡта.*

*Башланып та өлгөрмәгән быуат*
*Нисәмә ҡат ҡотто осора...*
*Ниндәй шағир нимәләр тип әрнер*
*Быуат тамамланыр осорҙа?*

---

*Рауил Бикбаев (1938) — Башҡортостандың халыҡ шағиры, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы — Ҡоролтай депутаты, комитет рәйесе.*

***

*Аяҡҡынам әле ергә теймәй,*
*Әле ерҙән алам саҡ-саҡ һурып.*
*Әллә нисек йыртҡыланды донъя,*
*Йәшәлә бит бигерәк урыҡ-һурыҡ.*

*Йыртҡыланды тормош,*
*Йыртҡысланды.*
*Ябырыла йәнгә ҡоро шаулә.*
*Тарҡалғандай бөйөк дәүләтебеҙ,*
*Емерелде күңел?..*
*Тәүбә!*
*Тәүбә!*

***

*Хәйерсенең иң хәйерһеҙ көнө —*
*Төшмәүҙәре хәйер-саҙаҡа.*
*Донъя буйлап хәйер бирә-бирә*
*Хәйерсе ил булдыҡ аҙаҡтан.*

*Дауылдарҙы үткән карабыбыҙ*
*Төртөлдө бит килеп һай ергә.*
*Үтер микән был хәйерһеҙ көндәр?..*
*Йөҙ таланған, йөҙ алданған илем,*
*Ҡалып бара көнөң хәйергә...*

***

*Ни фәтүә дәүмәлдән, ҙурлыҡтан,*
*Үтһәләр ғүмерҙәр тик бушҡа?*
*Ҡаҡмаған һис бер Царь-колокол,*
*Атмаған ғүмерҙә Царь-пушка.*

*Ил — сабыр,*
*Ил — сыҙам,*
*Ил — күркәм.*
*Үтәй ул*
*Хакимдар ни ҡушһа...*

*Ғүмерҙә һуҡмаҫ Царь-колокол,*
*Атырға һәләтһеҙ Царь-пушка.*

***

*Аллаһ бар яһаған Уралтауҙа*
*Ҡорған халҡым тирмә-сатырын.*

*Илһамланып бында ижад иткән*
*Башҡорт бөйөк „Урал батыр“ын.*

*Ҡурайға рух бөркөп.*
*Аллаһ үҙе*
*Тотторғандыр башҡорт ҡулына.*
*Тылсым булып ҡурай яңынан тыуған,*
*Һуғарылып башҡорт моңона.*

*Был тормоштоң йәме, тәме итеп*
*Биргән Аллаһ күпме бал ҡортон.*
*Шулар араһында тик беҙҙеке*
*Йыя балдың иң-иң шифалыһын —*
*Тәрбиәһе менән башҡорттоң.*

*Париж урамдарын яңғыратҡан*
*Башҡорт аттарының дағаһы.*
*Аҙмы үндай хәлдәр...*
*Уҙғандары*
*Ғорурланып телгә алаһы.*

*Киләсәккә ниндәй дандар менән*
*Уйылып ҡалыр башҡорт тамғаһы?*
*Һеҙгә әйтәм, йәштәр!*
*Тыуыр көндөң*
*Ҡапҡаларын һеҙгә ҡағаһы.*

## Бында Һәҙиә Дәүләтшина тыуған

*Ниһайәт, һиңә*
*Төштө бит юлым,*
*Һәҙиә апайҙың*
*Тыуған ауылы!*

*Килдек Хәсәнгә,*
*Аһ, һуңлап, һуңлап.*
*Йөрәктә яра*
*Яна һулҡылдап.*

*Хәсәндәр гөрләп*
*Донъя көткәнде*
*Күрергә миңә*
*Насип итмәне.*

*Һыуҡайы Ырғыҙ,*
*Тауы — Мөһөрмән.*

Изге нигеҙҙе
Трактор һөргән.

Трактор һымаҡ
Заман үкерә,
Екерә, ҡыра...

Һәҙиә апайҙың
Иҫтәлегенә
Ауылдаштары
Ҡуйған таш тора.

Данлы төйәктән
Ҡалған ошомо?
Хәтер ташымы был,
Ҡәбер ташымы?

***

Мин дә түгел бер шаһзадә,
Һин дә түгел хан ҡыҙы.
Тик барыһын ярһыта шул
Ғишыҡ дәрте, ҡан ҡыҙыу.

Был саҡ әҙәм балалары
Бөйөктәрҙән бөйөктәр.
Үҙҙәре хас илаһиҙар,
Үҙҙәре хас кейектәр.

Тәхеттә ҡуҡырайғандар,
Тупһала тилмергәндәр —
Барыһы бер тигеҙ була
Наҙ-ләззәткә кергәндә.

Эй, ғәҙелһеҙ был яҙмыштар!
Тигеҙлек бары шунда:
Һөйгән йәрең ҡуйынында,
Тыуған ер ҡуйынында!

***

Эре утындарҙы башта
Ваҡ сыралар яндыра.
Илгә ут төртмәксе мөртәт
Башта йәштәргә ут төртә,
Йәштәрҙе тоҡандыра.

***

*Тибәһең, йөрәгем, ярһып,*
*Сама-сиктәрҙе үтеп.*
*Һәм бына типтең —*
*Үҙеңде*
*Сатнатыр сиккә етеп.*

***

*Барыһы ла тороп ҡала:*
*Дуҫтар ҡала, йәрҙәр ҡала.*
*Ғәзиз туғандарың ҡала,*
*Аунап үҫкән ерҙәр ҡала.*

*Буш ус менән китте кеше,*
*Нимә алған — кире бирҙе.*
*Үҙе менән алып китте*
*Бары серҙе,*
*Күпме серҙе!*

*Күпме серҙәр күмелә ергә,*
*Йәшерен аһтар, йәшерен анттар!*
*Тынлыҡ менән серҙәр сорнай —*
*Инеүем була зыяратҡа.*

***

*Берәү ил тип уттар йота,*
*Уҡъян тота, ҡалъян тота.*
*Берәү илдең елеген имә,*
*Ҡаҙы-ял йота, ҡалъя йота.*

***

*Һин үрләйһең, тиҙәр.*
*Үрләмәйем.*
*Түбән төшә бары күп заттар.*
*Эреләнмәйем.*
*Күренәмдер эре,*
*Ваҡланғанға байтаҡ ир-аттар.*

***

*Батырҙарҙың батырҙарын хатта*
*Шомландырмай ҡалдырмаҫ бер нәмә:*
*Нишләтһәң дә сабырлығым етер,*
*Аралай күр, Аллам, төрмәнән.*

*Нисек кенә донъя көтһәң дә бит.*
*Етәбеҙ шул ҡәбер-төрмәгә.*
*Ярай әле, кеше ул төрмәгә*
*Иҫен юйғас ҡына эләгә.*

***

*Бүлешкәнең матур бүләк булһын.*
*Телең әйткән изге теләк булһын.*

## *Донъяның сәйер сактары*

***

*Иртә ҡалҡҡан ҡояш бик һуң бата,*
*Бик һуң ҡалҡҡан ҡояш иртә бата.*

***

*Нимәләр генә*
*Ҡисермәй кеше.*
*Йыһандан оло,*
*Туҙандан кесе.*

***

*Кемгә — тантана,*
*Кемдер — тапала.*

***

*Бирәүҙәр — шәһит,*
*Бирәүҙәр — шаһит.*

***

*Атлығам да уҡталам,*
*Ҡаңғырып туҡтап ҡалам.*

***

*Элек ҡанун ҡурсалаған*
*Халыҡтыҡын ҡараҡтан.*
*Хәҙер ҡанун ҡамап тора*
*Ҡараҡтыҡын халыҡтан.*

***

*Яҙын ҡара ергә баҫыу — бәхет,*
*Ҡара көҙҙән — баҫыу аҡ ҡарға.*
*Аяҡ аҫтарыма аҡ ҡар төшәп,*
*Киләм.*
*Күпме ҡалған атларға?..*

***

*Ишелеп төшә был ямъыр*
*Көҙҙөң төпһөҙ күгенән.*
*Киләм әллә ер йөҙөнән,*
*Әллә диңгеҙ төбөнән.*

***

*Ҡыйыулыҡһыҙ хатта ҡойма ҡойоп булмай,*
*Ҡарап торһаң ҡыймай —*
*Ҡоймаҡ та ҡойолмай.*

***

*Ут ҡапҡандай ҡабалана,*
*Өтәләнә ут өткәндәй.*
*Ялға сығыр саҡта алға сыға,*
*Ялға сығыр саҡта яуға сыға,*
*Һай, был бәндә!*

***

*Ғәмһеҙҙең ҡайҙан булһын тәғәме?*
*Ғәмһеҙлек килтерә тәғәмһеҙлеккә.*
*Һөмһөҙ һөҙгәндә ойома ғәмһеҙ,*
*Яулап алына бар ғәҙеллектәр.*

***

*Башыңды эшләт, баш ват, тип*
*Уны гел аптыраталар.*
*Юҡ башты нисек эшләтһен?*
*Юҡ башты нисек ваталар?*



**Әнисә**
**ТАҺИРОВА**

## *Көҙгө балан*

*Көҙөм йырһыҙ быйыл,*
*Әллә ниндәй*
*Болоҡһоуҙар мине ҡаманы.*
*Бар күңелем,— гүйә, сәскәләре*
*Тажын ҡойған һағыш яланы.*

*Сайҡала ла хәтер*
*Алыҫ ҡалған*
*Ап-аҡ ҡылғандарға әйләнә.*
*Аҡ ҡылғандар буйлап йылдар елә,*
*Уйҙарыма уйҙар бәйләнә.*

*...Сәскә тулы ялан —*
*Аҡ сәскәләр.*
*Ҡәкүк күҙе, зәңгәр ҡыңғырау.*
*Һәр сәскәлә балҡый йәйғор төҫө,*
*Тирә-яҡта серле сыңғырау.*

*—Эй, ҡыңғырау,*
*Бигерәк матурһың шул!*
*Йәл булһаң да, өҙөп алайым.*

---

*Әнисә Таһирова (1941) Ишембай районы Маҡар ауылынан. Стәрлетамаҡ педагогия институтын тамамлай, «Башҡортостан ҡыҙы» журналы редакцияһында, Башҡортостан радиоһы һәм телевидениеһында, мәктәптә эшләй. Ике тиҫтәнән ашыу китап авторы. Ҡәләмдәшебеҙҙе күркәм юбилейы менән ихлас тәбрикләйбеҙ.*

*Баш осомда ҡына балҡырһың һин,*
*Мин ғәҙермын һиңә таң һайын.*

*Таждарынан наҙлап һөйә-һөйә,*
*Сәскә йыйып йөрөй ҡыҙ бала,*
*Янда ғына шишмә йырын көйләй,*
*Күктән уға ҡояш йылмая...*

*Алыҫтағы сағыу был хәтирә*
*Нурға күмде күҙгә яланды.*
*Ялманы ул минең баш осонда*
*Томрап бешкән күҙгә баланды.*

*Болоҡһома, ғүмер күҙем, һинең*
*Әле йылытырлыҡ нурың бар.*
*Ҡояш наҙын, ерең һутын алған*
*Сағыу балан төҫлө йырың бар!*

**2010**

***

*Өс таяныс беҙҙе кеше итә:*
*Ерең, һыуың, телең.*
*Ере барҙың — аҙымдары баҙыҡ,*
*Нур балҡыта йөҙөн.*

*Телем — моңло,*
*Уралтауҙың билен*
*Ағиҙелем ҡосҡан.*
*Рәсәй-илдең аҡ шоңҡары булып*
*Баға Башҡортостан!*

**2011, март**

***

*Урал ере Тәңре көсө менән*
*Диңгеҙ төптәренән терелгән.*
*Шул бөйөк көс менән ошо ергә*
*Ҡурай һәм уҡ-һаҙаҡ бирелгән.*

*Ябай түгел ошо ике тамға —*
*Ул Тәңренең мөһөр-билдәһе.*
*Был тамғала милләт азатлығы,*
*Ғорурлығы, сәме, ил ғәме.*

*Уҡ-һаҙағы сая башҡортома*
*Илде һаҡлар өсөн бирелгән.*
*Ә ҡурайҙың сихри моңдарынан*
*Гөл-сәскәләр балҡып терелгән.*

*Ошо сихри моңдан*
*Тау күкрәгән*
*Ярып сыҡҡан шишмә юл алған.*
*Ошо сихри моңдан*
*Батырҙарҙың*
*Ауыр яралары уңалған.*

*Башҡорт ерҙәренә кемдәр генә*
*Яҫҡынмаған, ҡараш атмаған.*
*Башҡорт ерен — осҡор уҡ-һаҙағы,*
*Башҡорт йәнен ҡурай һаҡлаған.*

*Батырлығың, тапҡырлығың менән*
*Күпме күтәрҙең һин ил данын!*
*Парижгарға еткән сая башҡорт,*
*Ниңә әле бөгөн баҙаның?*

*Нимә булды,*
*Ниңә милләттәштәр*
*Күтерҙәргә бора аҙымын?*
*Күпме йәндәр бөгөн һәләк булды*
*Йотоп утлы иблис ағыуын.*

*Иблис ҡотҡоһонан күпме ҡыҙҙар*
*Урамдарға сығып баҫтылар.*
*Дәһриҙәргә керһеҙ тәндәрен дә,*
*Аҙаҡ йәндәрен дә һаттылар.*

*Кемдер атлай намыҫ һуҡмағынан,*
*Йәшәй тоғро хеҙмәт, йәм өсөн.*
*Кемдер ҡаба нәфсе тоҙағына,*
*Йәнен ҡыя байлыҡ, дан өсөн.*

*Иблис ҡотҡоһона бирелгәнде*
*Яҙмыш теҙләндерер, ҡол яһар.*
*Хаҡлыҡ, сафлыҡ менән йәшәгәнде*
*Көслө рух һәм изге Моң һаҡлар!*

**2008**

## *Торатау*

*Уралымдың йөҙөк ҡашы — Торатау,*
*Уның менән ғорурлана Уралтау.*
*Юрматының аҫыл ташы — Торатау,*
*Торатауы менән бәҫле Уралтау.*

*Шәкетауҙы кимергән туймаҫ ҡомаҡ*
*Торатауға ҡомһоҙ моронон һуҙмаҡ.*
*Торатауҙың йөрәген ул уймаҡсы,*
*Хазинаһын кеҫәһенә ҡоймаҡсы.*

*Күктәремә баҡтым тулып моң-зарға,*
*Бер Хоҙайҙан ярҙам көтмәй юҡ сара.*
*Халҡыма ла барып етер, иншалла,*
*Уйҙарыма ҡайтты әмер-ишара:*

*«Торатау ул — изгеләр биләмәһе,*
*Унда бар фәрештәләр гөлләмәһе.*
*Торатауға кемдәр ҡыла хилафлыҡ —*
*Ҡаза күрер, юҡҡа сығыр һәммәһе.*

*Торатау — йәнде сафландырыр вәғәз,*
*Пәйғәмбәрҙәр доғаһы, таңғы намаҙ.*
*Торатауҙа һаҡлана диңгеҙ йәне,*
*Күкрәгендә күктәрҙән күскән ауаз.*

*Әгәр уға ҡағылһа иманһыҙ ҡул,*
*Терелер диңгеҙ, тулҡын үрә торор.*
*Йәшен йәшнәр, уттар яуыр күктәрҙән,*
*Ерҙәр аҡтарылыр хәтәр күкрәүҙән.*

*Торатау — ул тыныслыҡтың төйәге,*
*Аҡ фәрештә — был төйәктең эйәһе.*
*Имен булһын өсөн торған ерегеҙ,*
*Торатауҙы һәр саҡ һаҡлай күрегеҙ!»*

*Күңел тулы булғанда ла моң-зарға,*
*Юғарынан йән йылытҡыс нур яуа.*
*Халҡыма ла барып етер, иншалла,*
*Күктәремдән килгән әмер-ишара.*

**2010, октябрь**

## *Ҡар өҫтөндә миләш...*

*Ҡар өҫтөндә миләш тәлгәштәре*
*Шәлкем-шәлкем булып һибелгән...*
*Ап-аҡ ҡарҙа әллә усаҡ яна,*
*Әллә ал муйынса өҙөлгән.*

*Ә миләшкәй башын түбән эйгән,*
*Хәтерләйҙер үткән яҙҙарҙы.*
*Гәлсәр йылғаларҙың моңло йырын,*
*Йәйге, йылмайыулы таңдарҙы.*

*Заманында йәп-йәш миләшкәйҙең*
*Сағыу емештәре күп ине,*
*Серҙәштәре — ҡоштар,*
*Яратҡаны —*
*Алһыу таңдар, зәңгәр күк ине.*

*Тилбер ҡоштар күркәм көйҙәр менән*
*Байыттылар уны моңдарға.*
*Ә миләшкәй сағыу емештәрен*
*Ихлас бүләк итте уларға.*

*Бер-бер артлы етеҙ йылдар үтте,*
*Әрһеҙ ел-дауылдар ҡайттылар.*
*Усал елдәр сағыу тәлгәштәрҙе*
*Йолҡоп тирә-яҡҡа аттылар.*

*Өҙгөләнгән, йолҡҡоланған миләш*
*Һаман бирешмәне ҡыштарға.*
*Туңған килеш сағыу бөртөктәрен*
*Һаман бүләк итте ҡоштарға.*

*Ҡар өҫтөндә миләш ялҡынлана,*
*Һаман тере, һаман ул түҙем.*
*Ҡар тигәнем — тормош-даръя икән,*
*Аҡ ҡарҙағы миләш — мин үҙем.*

**2011, ғинуар**

***

*Болоҡһоған диңгеҙ шауы кеүек,*
*Һиңә ҡайта уйым.*
*Исемеңдең ете хәрефенән*
*Ҡаға ете тулҡын.*

*Инде үтәм ете артылышты,*
*Күҙҙәр артынан ҡыш.*
*Исемеңдең ете хәрефенән*
*Һаман ҡайта балҡыш.*

*Тик ҡыҫҡара бара ғүмер юлым,*
*Өмөтөм юҡ күпкә.*
*Инде әйҙәй мине ете балҡыш*
*Юғарыла, күктә.*

**2011**

***

*Алыҫта һин ҡалдың, алыҫта —*
*Инде ярты быуат артында.*
*Төшмәйем мин боҙло һыуҙарға,*
*Инде янмайым мин ялҡында.*

*Тыныс йәнем, шундай тып-тыныс,*
*Талғын ғына яуған ҡар кеүек.*
*Тыныс йәнем, шундай тып-тыныс,*
*Күҙөн тынып ҡалған яр кеүек.*

*Тыныс микән?*
*Яуған ап-аҡ ҡарҙар*
*Бер мәл мине өткән ҡар бит ул.*
*Был тыныс яр*
*Бер мәл йөрәкһенеп*
*Ҡарлуғасын көткән яр бит ул.*

*Тымыҡ был күл*
*Тәү ҡарашҡа тыныс.*
*Тәү ҡарашҡа тымыҡ моң ғына.*
*Был күл төптәрендә,*
*Күҙ йәшендәй,*
*Мөлдөрәгән шишмә урғыла.*

*Тыныс йәнем тәүге ҡарашҡа,*
*Әйләнгәндәр хистәр аҡ ташҡа.*
*Янартауҙар унда баш эйгән,*
*Күҙ йәшендәй шишмә йәшенгән.*

**2010**

## *Мөтәшағирға*

*Һандуғастың ғына үҙ тауышы,*
*Аҡҡоштарҙың ғына үҙ көйө.*
*Үҙ моңдары менән ҡыр-болондо*
*Яңғырата торна, көйөлдө.*

*Мин — шағирмын, тигән ҡай берәүҙәр*
*Бары тутыйғошҡа оҡшаған.*
*Башҡаларҙың моңон, һүҙен һүтеп,*
*Шиғыр ишаратын һуҡлаған.*

*Яҙыр һүҙен, әйтер һүҙҙәрен дә*
*Башҡаларҙан һүпләй ул тотош.*
*Бына шулай һәр бер һүҙҙе аңдып,*
*Гел ҡабатлап тора тутыйғош.*

*Йән иретер йыр-моң була алмаҫ*
*Тутыйғоштоң һүҙҙәр теҙеме.*
*Һандуғастың ғына үҙ тауышы,*
*Аҡҡоштарҙың ғына үҙ көйө.*

**2010**

***

*Болғауыр был тормош ҡосағында*
*Юл асыла ҡара йәндәргә.*
*Улар үсле ихлас күңелдәргә,*
*Улар үсле керһеҙ йәмдәргә.*

*Ҡара йәндәр һипкән ҡара көлдән*
*Төндө хәтерләтһә аҡ көнөм,*
*Мин һағынам һине алыҫ ҡалған*
*Аҡ ҡанатлы, ауан йәшлегем.*

*Ҡанаттарын елпеп аҡ күбәләк*
*Осоп ҡунған кеүек гөлдәргә,*
*Мин вайымһыҙ, яҡты ҡараш менән*
*Баға инем ҡайтҡан көндәргә.*

*Мәкерлене һулышынан тоя*
*Хәҙер минең һиҙгер күңелем,*
*Тоя күңел һәр яһалма һүҙҙең*
*Асылын һәм ысын түгелен.*

*Бәлки, тағы юлдарымды быуыр*
*Мәкер ауы, мәкер һөрөмө.*
*Ләкин беләм: хаслыҡ ҡылғандарҙың*
*Яҙмышы ла ҡара мөһөрлө.*

**2008, 2011**

***

*Ҡай берәүҙәр ғүмер буйы*
*Атланмаҡсы дан-атҡа.*
*Ҡемдер кемделер еңмәксе,*
*Әйләндермәк ҡурсаҡҡа.*

*Ҡемдер кемдәрҙелер һаман*
*Баҫтырмаҡ ҡыҙыу ташҡа.*
*Башҡаларҙы ҡол итмәксе,*
*Үҙе булмаҡсы ҡашҡа.*

*Йәнеңде һатмайым тиһәң*
*Иблис төкөргән ашҡа,*
*Үҙ-үҙеңә ҡол була бел,*
*Үҙ-үҙеңә бул батша.*

**2011, март**

***

*Ярһыуҙарым ярҙарына ҡайтты,*
*Инде бер ниҙе лә көҫәмәйем.*
*Ярға баҫып көтөр карабым юҡ,*
*Күктәрҙән мин йондоҙ эҙләмәйем.*

*Инде тыныс бағам*
*Дан артынан*
*Илерешеп баҡҡан бәндәләргә.*
*Бары йәнем көйә*
*Ер йәмдәрен*
*Тәләфләгән туймаҫ, ҡара йәнгә.*

*Саф тәбиғәт — минең йәшәйешем,*
*Уның менән ерҙә бар булғанмын.*
*Йырҙарыма ерҙән тул йыйғанмын,*
*Ерем наҙын туплап моң урғанмын.*

*Ҡәрәк миңә бары урман моңо,*
*Йылға көйө, шәфәҡ балҡыштары.*
*Ләйсән ямғыр күкрәп килгән саҡта*
*Яҙғы сәскәләрҙең алҡыштары.*

*Бал ҡорттары күсен айырғанда,*
*Моңсол ҡоштар бала осорғанда,*
*Ҡөҙрәтле күк йәйғор-доға менән*
*Ерем иңдәренән ҡосҡан саҡта, —*

*Мин яңынан бар булмышым менән*
*Күктән килгән моңға тартылам,*
*Башҡа миңә бер ни кәрәк түгел,*
*Ташламаһын бары йыр-донъям!*

**2011**



**Рәдиф**
**ТИМЕРШИН**

# ХӘҠИҠӘТКӘ КҮҘ ЙОММАЙЫМ...

## *Ҡешеләр араһында*

*Ғүмеремдә байтаҡ гиҙҙем*
*Тауҙарын да, далаһын да.*
*Яңғыҙ түгел, булдым гелән*
*Һеҙ — кешеләр араһында.*

*Хәҡиҡәткә күҙ йомманым —*
*Күрҙем ағын, ҡараһын да,*
*Туңдым да мин, уңдым да мин*
*Һеҙ — кешеләр араһында.*

*Дауа таптым сит-яттарҙың*
*Яҙмыш һалған яраһына;*
*Яуыз булып һаналманым*
*Һеҙ — кешеләр араһында.*

*Үҙ башыма ҡайғы төшһә,*
*Уны баҫыу сараһын да*
*Таба инем изге йәнле*
*Һеҙ — кешеләр араһында.*

*Яҡын иттем әҙәмдәрҙең*
*Бабаһын да, балаһын да...*
*Шатлыҡ сәсеп күп йөрөнөм*
*Һеҙ — кешеләр араһында.*

---

*Рәдиф Тимершин (1947) Яңауыл районының Мәсәғүт ауылынан. БДУ-ның филология факультетын тамамлай. Армияла хеҙмәт итә. Оҙаҡ йылдар «Һәнәк» журналы редакцияһында эшләй. Байтаҡ китап авторы.*

*Әммә бер мәл (ҡыҙғаныс хәл!)*
*Ҡешеләрҙән айырылдым.*
*Әйтерһең дә, ҡояш һүнде,*
*Пар ҡанатым ҡайырылды!*

*Күңелем ҡылдарына ҡунып*
*Һайрар ҡоштар тынып ҡалды,*
*Йәнде битарафлыҡ, шомлоҡ*
*Һәм ғәмһеҙлек һырып алды...*

*Сәфәр сыҡһам, белмәйем мин*
*Ҡай тарафҡа бараһын да.*
*... Ҡеше — Ҡеше була икән*
*Тик кешеләр араһында!*

## Тормош фәлсәфәһе

*Юғалтыуҙар һәм табыштар...*
*Бар ҙа үҙемә таман:*
*Тапҡан һайын юғалтам мин,*
*Юғалтҡан һайын табам!*

***

Бер туҡтауһыҙ мин һағынып торам.
Әнғәм АТНАБАЕВ

*Бер туҡтауһыҙ мин һағынып торам:*
*Сит ерҙәрҙә — илде һағынам,*
*Илдә — тыуған ерҙе һағынам,*
*Тыуған ерҙә — өйҙө һағынам,*
*Ә өйөмдә — һине һағынам.*

*Һин булмаһаң, тыуған өйөм бар,*
*Өйөм юҡта, тыуған ерем бар,*
*Тыуған ерем юҡта, илем бар,*
*Илем юҡта минең нием бар?*

## Тыуған төйәк

*Һинән көс-ҡеүәт аламын,*
*Һинән мин ялҡын алам.*
*Ни ҡәҙәрле алыҫайһам,*
*Шул тиклем яҡынаям!*

## Өфө — Силәбе юлдары

*(Йыр)*

*Өфө — Силәбе юлдары,*
*Юл буйҙары — ҡайынлыҡ.*
*Пар ҡайындарҙай инек бит,*
*Ниңә һуң айырылдыҡ?!*

*Өфө — Силәбе юлдары,*
*Юлдарында таш ҡына.*
*Таш яуһа ла ташлай алмам —*
*Күңелем һиңә ашҡына.*

*Өфө — Силәбе юлдары*
*Тауҙар аша үтә ул.*
*Тауҙай ҡайғы ишелһә лә,*
*Көткән йөрәк көтә ул.*

*Өфө — Силәбе юлдары —*
*Юҡтыр кеүек аҙағы.*
*Юлдар кеүек икһеҙ-сикһеҙ*
*Икән һөйөү ғазабы!*

*Өфө — Силәбе юлдары*
*Үтелер ул, үтелер,*
*Яҡынайыр йыраҡ юлдар,*
*Иркәм, һиңә килтерер!*

## Ҡуҙ-күмер

*Ағас ике ҡабат яна:*
*Башта ҡуҙ —күмергә ҡала,*
*Күмер иһә, ҡабат яныр,*
*Йәнә йылы бирә ала.*

*...Мөхәббәтем күптән ҡалды*
*Яныр һүнгән ҡуҙ-күмергә.*
*Шул ҡуҙ-күмер етер һымаҡ*
*Миңә тигән бер ғүмергә.*

## «Ку-ку»

*— Ку-ку?*
*— Ку-ку!..*
*Яҙҙар үткәс,*
*Ғүмеребеҙҙең көҙө еткәс,*
*Бергә оҙаҡ донъя көткәс,*
*Әйтәһене әйтеп бөткәс,*

*Бына шулай «һөйләшәбеҙ»,*
*Бына шулай «серләшәбеҙ»,*
*Бер-беребеҙгә, кәкүктәрҙәй,*
*«Ку-ку» тиеп өндәшәбеҙ.*

*«Ку-ку?» — тимәк, «Хәлең нисек?»*
*«Ку-ку!» — тимәк, «Хәл бер көйө!»*

*Башҡа әйтер һүҙ ҙә бөткән,*
*Һәм дә телдәр һәлбер көйө.*

*...Ә бит мин — «Һандуғас» инем,*
*Тыңлай инең һоҡланып һин,*
*Һин дә гөр-гөр гөрләй инең,*
*Тормай инең туҡталып һин.*

*Икебеҙ ҙә инде тындыҡ.*
*Икебеҙ ҙә «кәкүк» булдыҡ.*
*Етә тик бер һүҙҙе туҡыу:*
*«Ку-ку?» «Ку-ку!» «Ку-ку?» «Ку-ку!»*

## Илле йәшлек берәүгә

*Матур, бейек, затлы бер йорт*
*Илле йәй, илле ҡыш торҙо.*
*Тик унан һис фәтүә юҡ,*
*Сөнки бит ул гел буш торҙо.*

*Һайраны ҡош биш тиҫтә йыл,*
*Тауыш-моңо — иҫ китмәле!*
*Әммә уның һайрағанын*
*Һис берәү ҙә ишетмәне.*

*Шишмә аҡты ярты быуат,*
*Шифа ине һыуы нисек!*
*Юҡҡа аҡты, сөнки бер кем*
*Ҡараманы һыуын эсеп...*
*Һиңә лә илле йәш тулды.*
*Донъяға ни файҙаң булды?*

## Олоғайғас тыуған уй

*Бер уйлаһаң, кеше тыумаҫ борон*
*Үлә башлай.*
*Әммә быны — үлер саҡта ғына*
*Белә башлай.*

## Ғүмер аҙағына яҡынлашҡанда

*Ватылды ғүмер ваҡыты,*
*Ҡалды бары ватыҡтары.*
*Хатта шул ватыҡтарҙың да*
*Булмай икән артыҡтары!*

## Мәғәнәле көн

*Үтте көнөм. Бушҡа үтте, тиеп*
*Үрһәләнеп, сырай һытманым.*
*Ни өсөнмө? Бөгөн бер дуҫымды*
*Тыуған көнө менән ҡотланым!*

## *Яугир егеткә*

*Яуға атыл, атҡа һалып эйәр,*
*Батырҙарға, ҡыйыуҙарға эйәр,*
*Дошман һинең алда башын эйер,*
*Халҡың, ҙурлап: «Ысын егет!» — тиер.*

## *Белеп йәшә*

*Әй, дуҫҡайым, шуны белеп*
*Һин йәшә:*
*Алйот менән алйот ҡына*
*Телләшә!*

## *Яңылыш һәм яҙмыш*

*«Яңылыш аҙым яһаным!» тип*
*Уфтаныуың алдандыр —*
*Бәлки, шул аҙым үлемдән*
*Һине алып ҡалғандыр?!.*

## *Утлы минут*

*Алданып бер татлы минутҡа,*
*Ғүмерлеккә индем мин утҡа!*

## *Сәбәп*

*Ник яратмайым Төндө?*
*Үлтергәнгәләр Көндө...*

## *Бәйләнсеккә*

*Әгәр һис белмәһәң*
*Бәйләнергә кемгә,*
*Бик-бик иғтибарлап*
*Ҡара тирә-йүнгә.*

*Әгәр инде башҡа*
*Һис тапмаһаң сара,*
*Бик-бик иғтибарлап*
*Һин... көҙгөгә ҡара!*

## *Һин шул түгелме?*

*Йылмайыуың — гөлдәй матур,*
*Йөҙөң — сәскәләй сибәр...*
*Әммә, донъяла ағыулы*
*...Сәскәләр ҙә бар, тиҙәр.*

## *Көнсөл*

*Күҙе — гел ҡыҙығып ҡарай уның,*
*Йөҙө, — гүйә, йәшен болото.*
*Йылан кеүек саға, эттәй тешләй,*
*Ерҙә әхлаҡ барын онотоп.*

*Ул ҡайғыңа һинең шатлана гел,*
*Шатлығыңа мотлаҡ ҡайғыра,*
*Ҡөс ҡыҙғанмай, һиңә баҙ ҡаҙый ул,*
*Һиҙҙермәйсә, аҫтан, яй ғына.*

*Ҡөнсөл әҙәм эстән яна, һыҙа,*
*Этлек ҡыла ҡыла алғансы,*
*Һине ҡайғыларға һалғансы һәм*
*Үҙе көл-күмергә ҡалғансы.*

## Вайымһыҙ

*Алып һалмай арҡырыны буйға,*
*Баш ватмай ул, батмай хәсрәт-уйға,*
*Гүйә, килгән был зат ғүмер буйы*
*Күңел асыу өсөн һабантуйға!*

## Әрһеҙ

*Һағыҙаҡ күрмәгән*
*Тишек юҡ,*
*Был әҙәм кермәгән*
*Ишек юҡ!*

## Йомарт һәм һаран

*Йомарт борсолор: «Ҡәрәксә*
*Күрһәттемме йомартлыҡ?»*
*Һаран ҡайғырыр: «Йомартлыҡ*
*Күрһәтмәнемме артыҡ?!»*

## Ҡыҫыр ҡыуаныс

*«Иллә рәхәт тик тороу!» тип*
*Берәү ауыҙын йырған...*
*Юҡҡа ҡыуанаһың, мырҙам,*
*Тик тормаған — туҡ торған!*

## Дәғүәләшә белһәң...

*Былбыллыҡҡа дәғүә итмәй ҡарға,*
*Яҡшы белә үҙенең тауышын...*
*Исем китте! — Ҡарға тауышы менән*
*Ат ҡаҙанды йырсы танышым!*

## Юйғыс

*Юя-юя, үҙе лә ул*
*Юйыла, бөтә бит, ә!*
*Үҙе бөтһә бөтә, әммә*
*Тапты бөтөрөп бөтә!*

# *Сәсмә әҫәрҙәр*



**Хәйҙәр**
**ТАПАҠОВ**

## ҠУЛАСА

**хикәйә**

**1**

Эшҡыуар Мәликә Мансуровна Ишйәрованы көтмәгәндә ҡала хакимиәтенә саҡырҙылар. «Ололар көнө алдынан тағы ла байрам үткәреү өсөн аҡса һығырға-лыр уйҙары…» – тип екһенһә лә, ҡырамалай ҡырҡ мәшәҡәтен ҡуйып, барып әйләнергә булды. Ни тиһәң дә, урындағы етәкселек менән килешеп йәшәргә кәрәк – бөгөн ул ҡала хужаһына, иртәгә үҙенә лә, йөҙ һыуын түгеп, шул йорт ишеген асырға тура килеүе ихтимал.

Көндәлек эшендә һәр ваҡыт спорт стилендә кейенеп йөрөй, шулай ҡулайлыраҡ. Хакимиәттең яҙылмаған үҙ ҡанундары, унда был килеш күренеү ярамай һәм килешмәй. Шуға фатирына һуғылып, өҫтөн алыштырырға булды. Юл ыңғайы ювелир магазинына инеп, йөҙөнә семәрләп ҡиммәтле таштар батырылған көмөш беләҙек, супермаркеттан оло пакет тултырып тәм-том һатып алды ла ишекте асып инеү менән фатирҙы яңғыратты:

– Рәсимә? – Был ваҡытта ҡыҙының институтта икәнлеген белә күрә һораны, йоҡлап ҡалып ҡуймаһын был, тип хафаланыуы. – Әсәй, һин ҡайҙа?

– Рәсимә ни һинең артыңдан уҡ сығып китте уҡыуына, иртәнге сәйен эсереп ебәрҙем. Миңә ҡалһа, һеҙҙән китеп ҡайҙа ғына барайым… – Бөксәңнәп, тыш та быш итеп һөйләнә-һөйләнә, зал яғынан килеп сыҡҡан әсәһе яҙып ябынған яулығын төҙәткеләп ҡаршыһына баҫты.

Бирешә һуңғы осорҙа Маһира ҡарсыҡ, күҙгә күренеп бирешә. Ошоғаса тилбер йыбырлап йөрөп ятҡан, йорт мәшәҡәттәрен ауырлыҡһыҙ атҡарған ҡарсыҡтың былай ҙа йоҡа кәүҙәһе хәлһеҙләнеп бөгөлдө, түңһөҙ күҙҙәренең нуры ҡайтып, күгелйемләнгән күҙ соҡорҙарына һеңешә, бураҙналар сыбарлаған йөҙөнән ҡан әҫәре ҡасты. Атлағанда ла уң яҡ ҡабырға аҫтын услап йөрөүҙе ғәҙәт

*Хәйҙәр Тапаҡов (1955) Йылайыр районының Һабыр ауылынан. Стәрлетамаҡ педагогия институтын тамамлап, мәктәптә уҡыта, Сибай төбәк яҙыусылар ойошмаһы етәксеһе була. Әле «Атайсал» гәзитенең баш мөхәррире. Яҙыусылар союзы ағзаһы.*

итте, ашау-эсеүҙе лә онотто, көсләп саҡырмаһаң, өҫтәл янына килмәй ҙә. Йәнә йыш ятаҡлай һуңғы осорҙа, оло йәштә икәнлегенә һылтанып табиптарға күренеүҙән ҡырҡа баш тартһа ла, сәләмәтләнеүенә өмөтө һүрелмәгәндер, күрәһең, – үҙенсә дауаланып аҙаплана. Шулай ҙа зарын, уфтаныуҙарын тышҡа сығармай, шәлкемләп бәйләп киптерелгән әрем, меңъяпраҡты бергә ҡушып ҡайната ла ҡуйы сәй төҫөнә ингән төнәтмәне бисмиллаһын әйтеп, сытыраймай ғына эсеп ҡуя, шунан ҡыуарған, шау һөйәккә ҡалған ҡул һырты менән ирендәрен һыпырып, башҡарырҙай күренгән йорт мәшәҡәттәренә тотона ла китә. Йәлләй әсәһен, ауылдан ҡуҙғатып алып килеп, бында, туғыҙынсы ҡатҡа, бикләп ултыртыуына үкенә лә биреп ҡуя, мәгәр етмешен тултырған ҡарсыҡты ауыл ерендә ҡалдырыу – мөмкин булмаған эш. Йорт-ҡурамды туҙҙырғым килмәй, йәнә ҡош-ҡортомдо, бесәй-этемде кемдең ҡулына ҡаратып ҡалдырам, тип һуңғы көнөнә тиклем бында күсеп килергә теләмәй ҡырталашты. Ҡышынйәйен ҡала менән ауыл араһын тапап, ҡурсалау-хәстәрләүҙәрҙән арыған Мәликә әсәһен һуңғы сиктә күндерҙе тәки. Хәҙер йәне тыныс, көнитмеше теүәл: дүрт бүлмәле фатирҙа әсәһе менән институттың һуңғы курсында уҡыған ҡыҙы бергәләп көңгөр-ҡаңғыр йәшәп ятҡан көндәре. Хәлбүки, тормошоноң бөтөнлөгө китек барыбер: ҡыҙы Рәсимә бишенсе класта уҡыған йылы тау байыҡтырыу комбинатында баш инженер вазифаһында эшләп йөрөгән Зиннуры ҡапыл ғына йөрәк сиренән үлеп китте. Шаңҡыны, аптыранды, ҡайҙа барып бәрелергә белмәне башта. Шунан, иҫен йыйғас, хакимиәттә юрист вазифаһында эшләп йөрөгән еренән байтаҡ ҡына кредит алып, үҙенең шәхси эшен асып ебәрҙе. Хоҡуҡи өлкәләге белемен урынлы ҡулланып, сәмләнеп, ныҡышмал тотонғайны, кәсебе лә уңышлы ғына китте, матди хәле лә зарланырлыҡ түгел, уның менән партнерлыҡ итергә теләүселәр ҙә бихисап, аҡса тип тә йонсомай, танып белгән ҡала етәкселеге лә уға ихтирам менән ҡарай.

– Әйҙә әле… – Мәликә Мансуровна, сибек яурынынан ҡармап, әсәһен зал яғына ыңғайлатты, сығып диванға ултырғас, алдына бүләген һалды: – Ике көндән – ололар көнө, һине Рәсимә ейәнсәрең менән беҙ шул байрам айҡанлы ҡотлайбыҙ. Ошо беләҙекте икебеҙ исеменән ҡабул ит. Унан да ҡулай нәмә тапманым.

– Ай, Аллам, расхутланмаһаңсы шул ҡәҙәре, күстәнәсе тағы нимәгә, һыуытҡыс тулы тәғәм… – Шулай һөйләнһә лә, әсәһенең йөҙө яҡтырып китте, аҙыҡ-түлек тулы пакеттың эсенә ҡәнәғәт күҙ атты, ҡатын-ҡыҙ көйҙәләнеүе еңеп, затлы беләҙекте тупайған ҡушҡар тапҡырына элде лә ҡурайҙай беләген алға һоноп әйләндергеләне.

– Әсәй, һиңә бер ни ҙә йәл түгел, оҙаҡ йәшә, йәме, сәләмәт бул!

– Йә! – Ҡарсыҡтың йөҙөнән моңһоулыҡ күләгәһе йүгереп үтһә лә, ҡәнәғәт кеткелдәне. – Эштәрең нисек бара һуң, балам, иртән сығып китеп кис ҡайтаинең, бөгөн, ни сәбәптәндер, иртәләгәнһең.

– Тәгәрәп кенә китеп бара, ай аҙағында ике йыл элек ябылған теге ит комбинатының яртыһында колбаса цехын асабыҙ, йыл аҙағына ҡәҙәр һарыҡ йөнө, тиреләр ҡабул итеп, эшкәртә башлаясаҡбыҙ. Уның өсөн дә бина таптыҡ, шуны ремонтлап ебәргәндә, эсенә кәрәкле ҡорамалдар ҡуя башларға ла мөмкин.

– Ауыл шөғөлөн ҡыуалатаһың әләйгәс, ҡатын-ҡыҙға кейем-һалым, матурлыҡ салондары, сәс алдырыу урындарын асып, шуның мәшәҡәттәре менән шөғөлләнеү ҡулайлыраҡ түгелме?

– Һуң мин бит – ауыл балаһы, ер хәстәре йәнемә яҡын да, ҡәҙерле лә. Яҡынтирә райондарҙың береһендә тирмән асыу уйы ла бар әле. Урындағы халыҡҡа ҡулай, миңә отошло буласаҡ. Ир-егеттәр тотонмай тип, ҡул ҡаушырып ятайыммы тағы? Тик бына һуңғы йылдарҙа ҡабатланып килгән ҡоролоҡ ҡына бәкәлгә

һуға. – Тороп баҫҡан Мәликә Мансуровна үҙенең бүлмәһенә йүнәлде лә, кейем шкафын асып, өҫтөн алыштырырға керешеп китте, үҙе асыҡ ишек аша һөйләшеүен дауам итте. – Иртәләүемдең әтнәкәһе шунда: ҡала етәкселегенә саҡырҙылар.

– Улай икән… – тип һуҙҙы Мәһира ҡарсыҡ, уны, өй кешеһен, эш ығы-зығыһы бөтөнләй борсомай, шуға әңгәмәне үҙ яйына ҡайырҙы. – Районлар тураһында башлағасың, һорайым әле, йөрөгәнеңдә беҙҙең ауылға һуғылаһыңдыр ҙа?

– Хәҙер янымда булғасың, йәнә унда яҡын туғандар ҡалмағас, артыҡлап ҡайтҡы ла килмәй. Былай, булып киттем унда, ун – ун биш көн элек. – Саҡырылған урындарға тәғәйенләнгән костюм-күлдәген кейеп, трюмо алдына баҫты ла битйөҙөн рәткә килтерҙе, шунан зал яғына муйынын һондо. – Нишләп ҡапыл ғына ауыл иҫеңә килеп төштө әле?

– Һин онотһаң да, Сабир бер ҙә генә лә иҫемдән сыҡмай, килен булып төшөп, бауыр баҫып йәшәгән ауылым, ни тиһәң дә. – Мәһира ҡарсыҡҡа «ҡайтҡым килмәй» оҡшаманы шикелле, әсе ҡапҡандай, ризаһыҙ сытырайҙы. – Нишләптер ауылға туҡтап китеүең хаҡында бер тапҡыр булһа ла һүҙ ҡуҙғатманың, будты ул һиңә ят төйәк...

– Әйтһәм, өй беренсә төшөп һәр береһен теүәлләп һораша башлаясаҡһың. Әмин ауыл башлығы, теге Ҡара Гәрәйҙе күрҙем дә, йомошомдо йомошлағас, кире боролдом.

– Ауылдан сығышлай беҙҙең өй яғына ла күҙ һалғанһыңдыр әле?

– Һалмаған ҡайҙа! Бөткән. Ергә һеңешкән тауыҡ кетәгендәй генә нәмә ҡалған шунда.

– Улай тимә, кендек киҫелгән йорт бейеклеге менән түгел, булмышты арбап үҙенә тартып, саҡырып тороуы менән ҡәҙерле. – Әсәһе гелән һүҙҙәрҙе һайлап, уға ниндәйҙер мәғәнә һалып һөйләргә ярата. Шуларҙы әйтте лә, бераууыҡ тынып ҡалғас, фекерен йомғаҡланы: – Һин генә түгел, ағайың, апайҙарыңдың йылыһы һеңгән уға.

– Әсәй, һин ысын философ!

– Уныһы кем була тағы?

– Тәрән фекерле аҡыл эйәһе.

– Аҡыллымын тип әйтеүе – үҙе үк ахмаҡлыҡ, әммә белем алыуға килгәндә, йүнле уҡыу эләкмәне шул беҙгә – миңә лә, атайыңа ла. Ҡайтышлай беҙҙең ауылдан бире юл эсендә Ҡәнзәфәр ауылы ята бит әле, ауыл осондағы йортҡа ла иғтибар итмәгәнһеңдер инде?

– Ауылдағы һәр хужалыҡты ҡарап йөрөй алмайым! Ташландыҡ өй нимәгә ул миңә?! – Кейенеп бөткән Мәликә залға сығып баҫты. Яуап ярайһы уҡ тупаҫ ишетелде.

Күпте күргән әсәһе генә ҡылъяйманы:

– Унда һинең атайың йәшәгәнлекте беләһең. Өйө яғына һуҡмаҡ бармы, уға инеп-сығалармы икән, тим.

– Ҡараманым, күрмәнем, тим бит.

– Һе, сәйер холҡоң менән зерә лә аптыратаһың. – Яуап тағы оҡшаманы. Әсәһе һуҡ бармағы менән яҫы маңлайын ыуҙы. Үпкәләгәндә уның шулайта торған ғәҙәте бар.

– Ҡәнзәфәр ауылы аша үткәндә телефондан һөйләшә инем.

– Телефундан. Бына, аҡланыр яуабын да тапты. – Әрепләшеүгә тартым һөйләшеүҙе дауам иткеһе килмәгәнгәләр, һин дә мин һораны: – Атайыңдың һуңғы алған әбейе үткән йыл үлеп ҡалған, тип ишеткәйнем.

– Әсәй, ҡалала туғыҙынсы ҡатта йәшәйем тимәйһең, тирә-яҡтағы хәлдәрҙе белеп, белешеп ултырған көнөң.

– Һуң, белмәй тағы, яҙ көнө беҙҙең ҡаршы яҡ урамдағы Нурия килен килеп киткәйне бит хәлемде белергә, шул еткерҙе.

– Атайымдың был нисәнсе ҡатыны ине әле?

– Бына быныһы инде һин хисаптар һан түгел. – Иҫкәрмә йомшаҡ тауыш менән әйтелһә лә, ярайһы уҡ уҫал һәм ҡәтғи яңғыраны.

Тамам кәйефе киткән Мәликә Мансуровна ишеккә йүнәлде, шулай ҙа, мөмкин тиклем итәғәтлек күрһәтеп, әсәһенең байрам кәйефен һаҡларға тырышты:

– Әсәй, Рәсимә ҡайтһа, әйт, табын хәстәрләһен, өсәүләп ултырып алырбыҙ. Ни тиһәң дә, һинең йылына бер килгән байрамың, мине тегендә, моғайын да, оҙаҡ тотмаҫтар.

Ашығыңҡырап сыҡҡан икән дә баһа, сәғәтенә күҙ атты ла, ҡаланың үҙәк майҙанын үтешләй, машинаһын парк башланған юл ҡырына ҡайырып туҡтатты. Көн һалҡынса булһа ла, аяҙ һәм салт ҡояшлы. Парктағы ағас-ҡыуаҡтар көҙ төҫөнә төрөнөп, нурҙарға ҡойоноп ирәйеп ултыра. Күк йөҙө күҙҙе сағылдырғыс ҡуйы зәңгәрлеге менән, таш һуҡмаҡ ситендәге ҡыртышта морон төрткән йәшел ҡурпы йәм-йәшеллеге менән ер йөҙөндә һары көҙ, аҡ ҡыштан һуң, асыҡ төҫтәр хакимы наҙлы яҙ айы барлығын һәм уның да үҙ мәлендә күкрәп килерен иҫбат итәләр төҫлө. Эш көнө булһа ла, ял итергә сығыусылар байтаҡ ҡына күренгеләй: кемеһе ултырғыстарға ултырып, күҙҙәрен йомоп, йөҙөн йылы нурҙарға ҡуйып кинәнә, кемеһе, парлашып, ашыҡмай ғына таш һуҡмаҡты ҡыҙыра. Парктың уртаһында әйләнгән дәү шайтан ҡуласаһы яғынан шат тауыштар ишетелә. Килгән ҡунаҡтар ҡуласаның иң өҫтөнән ҡаланы тамаша ҡыла ала, унан бар тирә-йүн ус төбөндәгеләй күренә. Ҡолағында таныш шиғыр юлдары яңғырағандай итте:

*Әйләнә карусель, әйләнә,*
*Карусель ҡоролъан хәйләгә…*

Машинаһына инеп ултырып ҡуҙғалып киткәс тә, һәммә халыҡты бәүелмәле ултырғыстар беркетелгән оло дүңгәләгендә әүрәтеп әйләндергән шайтан ҡуласаһынан, теге шиғыр шауҡымынан арына алманы. «Ҡыҙыҡ был тормош тигәнең, хас та өҙлөкһөҙ әйләнеп торған карусель инде, бөгөн мин өҫкә ҡалҡып сығам, ә иртәгәһен түбәнгә түңкәрелеп, башҡаларҙың юғарыға сөйөлөүе бик тә ихтимал… Карусель ҡоролған хәйләгә… хәйләгә…»

Хакимиәткә килгәнсе тамам тынысланғайны. Башлыҡтың ҡабул итеү бүлмәһендәгеләр менән ихлас иҫәнләште лә бер яҡ ситкәрәк барып баҫты. Апаруҡ ҡына халыҡ йыйылған бында: таныштарын осратҡандар тауыштарын баҫып, шым ғына әңгәмәләшә, кәңәшмә-фәләнгә һирәк саҡырылғанға күрә үҙҙәрен әле ситен тойғандар битараф ҡиәфәттә төп бүлмәгә инеүҙе көтөп ойоп ултыра. Янына ҡалала бер нисә магазин, киоскалар селтәрен тотоусы Фәрит Яманғолов килә һалып етте лә, итәғәтле иҫәнләшкәс, ҡатын-ҡыҙҙарҙыҡы һымаҡ тауышы менән сыйылдап ҡыҙыҡһынды:

– Мәликә ханым, нишләп саҡырта икән хужа, белмәйһегеҙме? Үткәндә йыйып алып мейене сереттеләр, бөгөн тағы. Ололар көнөнә тип аҙыҡ-түлеккә биш процент ташлама яһаным бит инде, тағы ни етмәй икән быларға, ә?

Нишләптер өнәп еткермәй ошо Яманғоловты: ҡыҫмыр, хәйләкәр, шылғаяҡ әҙәм осраған һайын күңелендә ытырғаныу тойғоһо уята, бер зыяны теймәһә лә, уны ирештергеһе, асыуландырғыһы килә башлай. Һуңғы сиктә тыйыла, был кешегә ҡарата кире мөнәсәбәтен эсенә йома. Шул юл менән ике арала арауыҡ һаҡларға тырыша, бер өлкәлә, уртаҡ шөғөл атҡарғанға ғына уның менән

ҡатнашырға, аралашырға мәжбүр, әммә йәне тартмаған әҙәмгә сәбәпһеҙгә мөрәжәғәт итергә ынтылып та бармай. Был юлы ла Яманғоловҡа әсе төрттөрҙө:

– Әйтәм, кәүҙәң биш процентҡа йоҡарғандай күренә!

Яманғолов аҫҡа һалынған бирән ҡорһағын эскә тартып, уны ҡыҫҡа ҡулдары менән ҡармағас, үпкәләгәндәй һөйләнде:

– Ярай инде, мыҫҡыллама, йәме, былай ҙа бисә шул ҡорһаҡҡа аҙым һайын бәйләнә, беләһегеҙ килһә, ир кешенең кендектән юғары яғы яурынға иҫәпләнә.

– Әләйгәс, һеҙ киң яурынлы, оло кәүҙәле уҙаман булып сығаһығыҙ инде! – Тәбәнәк буйға, өрөп тултырылған туптай тыңҡыш кәүҙәгә, балаларҙың кейем элгесен хәтерләткән һалынҡы яурындарға күҙ атҡан Ишйәрова, сыҙап ҡала алмай, көлөп ебәрҙе лә, Яманғоловты ысынлап үпкәләтеүҙән тартынып, эшлекле дауам итте. – Аҙыҡ-түлеккә биш процентлы ташлама түгел, усҡа һалып иҫәпләмәле аҡсағыҙҙы әҙерләгеҙ, Фәрит Фәйзуллович! Уларға, – бүлмә ишегенә ымланы, – хәҙер үк кәрәк, шуның өсөн саҡыртҡандар ҙа! – Яманғоловтың ҡыҫмырлығын белгәнгә, уның ауыртҡан еренә һуҡтырып, мәғәнәле йылмайҙы.

– Ҡайҙа инде миндә аҡса, ундай нәмәне күргән дә юҡ һуңғы осорҙа, бөтәһе лә оборотта йөрөй бөгөнгө көндә, әлеге моментта бер тинһеҙ интегелә. Ысын! – Әңгәмәсеһен ышандырырға теләгәндәй, ҡоласын йәйҙе. – Күсереү юлы менән башҡарабыҙ барлыҡ финанс операцияларын, ҡағыҙҙарҙағы һандар ғына билдәләй аҡса күләмен, билдәле булыуынса, уның даирәһе тар һәм сикле. Өҫтәүенә, һалым, пенсия хеҙмәттәре муйынды быуа, тын алырмын тимә. Асыҡҡандан ҡаныҡҡан яман, тигәндәй, туя белмәйҙәр, асмәйелдәр. Үәт, замана китте, ә! – Йыуан, килбәтһеҙ аяҡтарын йәшергән һалынҡы салбар балаҡтарына һуҡты. – Урта эшҡыуарлыҡты үҫтерәйек, ярҙам итергә кәрәк, тип боғаҙ ярған булалар, ғәмәлдә иһә аҙым һайын аяҡ салалар, тәгәрмәскә таяҡ тығалар. Теге аҙнала пожарниктар килеп, етешһеҙлектәр табып бәйләнеп маташтылар, баҡтиһәң, уларға машиналарын ремонтлау өсөн аҡса кәрәк икән, кеҫәләген ҡырып-юнып һоғондорғайным, өндәре тығылды. Так што, хөрмәтле ханым, был донъяла ғәҙеллек бөттө…

Фәрит Яманғолов һандырауын тамамлап өлгөрмәне, бүлмә түрендәге өҫтәл артына ҡунған тәтәй ҡыҙ, алдындағы исемлеккә тағы ла бер тапҡыр күҙ атҡас, саҡырылғандарҙың йыйылып бөтөүен күреп, тиҡый ҡиәфәттә мөрәжәғәт итте:

– Инегеҙ. – Иҫкәртелгәндер, күрәһең, бойорғандай итеп өҫтәне: – Ололар түрҙә урынлашҡан, һеҙ ингән яҡтағы стена ҡырына ултырырһығыҙ.

– Беҙҙең урын һәр ваҡыт ишек төбөндә инде! – Алдан төшөп атлаған Ишйәрованың төртмә телләнеүен секретарь ҡыҙ ишетмәмешкә һалышып, эшем эйәһеләй, алдындағы ҡағыҙҙарына эйелде.

Башлыҡтың кабинетының түр яғы халыҡ менән тулғайны. Кәңәшмәләр үткәреү өсөн ҡырғараҡ ҡуйылған өҫтәл тирәләп башлыҡтың урынбаҫарҙары теҙелгән, ҡаршы яҡ стеналағы ултырғыстарға тиҫтәгә яҡын ҡарт-ҡоро һаҡҡан. Ишйәрова ишек төбөндәге ултырғысҡа абруйлы ғына урынлашҡас, сумочкаһын алдына һалып, былай ҙа ыҫпай таралған сәстәрен һыйпаштырҙы ла, мине ни өсөн саҡырҙығыҙ, тигән һораулы йөҙ менән башлыҡҡа төбәлде. Рөстәм Ишмөхәмәтович, инеүселәр урынлашып бөткәс, ҡалын ҡаштарын йәмерәйтеп, үсеккәндәй һөҙөп ҡарап һәммәһен теүәлләне лә тамаҡ төбө менән һүҙ алды:

– Йә, йыйылып бөттөк, буғай, – тәғәмдәрҙән һығылған өҫтәл артында ултырамы ни, һыйға саҡырғандай, ҡулдарын йәйҙе. – Хуш ҡылып, башлайыҡ! Хәйер, башлайыҡ, тиһәм дә, бына әле урынбаҫарҙар менән инәй-олатайҙарҙың ҡарттар йортонда нисек йәшәүҙәре хаҡында әңгәмәләшеп алдыҡ. Әйтергә кәрәк, республика етәкселеге, шулай уҡ беҙ ҡарттар йортон һәр ваҡыт контролдә тотабыҙ,

кисәге көн минең беренсе урынбаҫарым барып, ундағы йәшәү шарттары менән танышып ҡайтты. Шуға ла бөгөнгө ҡорҙоң ойошторолоуы бер ҙә осраҡлы хәл түгел. Ҡарттар йорто администрацияһы менән бергәләп уйлаштыҡ, кәңәшләштек тә, йыйылып алыу зарурҙыр, тигән дөйөм фекергә килдек. – Пластик һауыттан стаканға минералка һалып, ғолҡолдатып эсеп алды. – Билдәле булыуынса, илебеҙ оло быуындарға хөрмәт йөҙөнән йыл һайын уларҙың көнөн билдәләй. Беҙ был көндө ветерандарыбыҙға үҙебеҙҙең ихлас хөрмәтебеҙҙе күрһәтәбеҙ, рәхмәтебеҙҙе еткерәбеҙ, бүләктәр тапшырабыҙ. Әйтергә кәрәк, был хәстәрләү бер көндә генә башҡарылыр эш түгел, ололар хаҡында йыл әйләнәһенә ҡайғыртырға бурыслыбыҙ, сөнки улар быға лайыҡ…

«Тағы башланы… Ни тиһәң дә, элекке партком секретары шул, трибуна артына баҫып вәғәз һөйләргә күнеккән…» Тантаналы телмәрҙәрҙе, фәлсәфәүи сығыштарҙы, нотоҡ уҡыуҙарҙы үҙ итмәгән Ишйәрова башын аҫҡа эйҙе, башҡаларға һиҙҙертмәҫкә тырышып ауыҙын ҡаплап иҫнәп алды ла эстән генә асыласаҡ колбаса цехына нимәләр хәстәрләргә кәрәклеге хаҡында иҫәпләргә тотондо.

– Бына бөгөн, хөрмәтле йәмәғәт, эшлекле эшҡыуарҙар, арҙаҡлы ағай-эне, һеҙҙе ҡарттар йортонда көн күргән атай-әсәйҙәрегеҙ менән осраштырырға йыйыҙыҡ. Юғиһә, унда барыу юлын онотҡан икән бәғзе берәүҙәр.

Көтөлмәгән хәбәрҙән тертләп китте Мәликә Мансуровна, башын ҡалҡытып, алдында теҙелгән ҡарт-ҡороно теүәлләне, ҡарашын һаҡал-мыйыҡ ебәргән, башына йылтырап ҡатҡан теүәтәй кейгән, ҙур танауына ҡалын һөйәк тирәсле лупалы күҙлек атландырған йоҡа кәүҙәле ҡартта туҡтатты: «Атай бит был, атайым… Уны күрмәгәненә нисә йыл үтеп китте, олоғайған, танымаҫлыҡ булып үҙгәргән… Заманында баҫҡан урынында тороп сыҙамаған етеҙ хәрәкәтле, ҡырыҫ тауышлы, эшһөйәр кеше ине бит атаһы… Әүәле ошо кеше ғаиләһен генә түгел, тотош ауылды дер һелкетеп йәшәгән, тиеүгә кем ышаныр бөгөн?..»

Үткәндәрен хәтеренә төшөрөргә теләгән Мәликә Мансуровна маңлайындағы иҫке яра йөйөн ыуҙы, ә ул, тыштан бөтәшһәм дә, эстән һыҙам әле, тигәндәй, сәнсеп-сәнсеп һулҡып ҡуйҙы…

**2**

– Алдынғы тракторсы Мансур Булатов урып-йыйыу эштәре һөҙөмтәһе буйынса колхоздың ураҡ чемпионы тип билдәләнә һәм «Урал» мотоциклы менән бүләкләнә!..– Ауыл клубы бер аҙға ғына тын торҙо ла гөрләтеп ҡул сабырға тотондо, рәттәрҙә хуплау ауаздары ишетелде: «Маладис, ҡорҙаш, һынатмайһың, әй, бында мотоцикл алдың, районда, моғайын да, «Москвич»ҡа ултыртып ҡайтарырҙар!.. Мансур, һинән бер сирек, былай булғас, аҙна буйы туҡтамай йыуырға була!.. Сәхнәгә сыҡҡас, бер юлы рәхәтләндереп бейе лә ҡуй инде, ойотоп баҫҡаныңды күптән күргән юҡ!..»

Күтәрмәлә тәмәке тартҡандыр, ишекте шар асып килеп ингән атаһы ауыҙында быҫҡыған тәмәкеһен иҙәнгә ырғытып, кирза итегенең үксәһе менән тызыны ла, маҡтауҙарҙан күркәләй ҡабарып, үҙе менән бергә көҙгө һалҡын һауаны, ҡырҡыу папирос еҫен эйәртеп, ҡырып йыуылған иҙәндә бысраҡ эҙҙәр ҡалдырып, сәхнә яғына ыңғайланы. Шул мәлдә алғы рәттә ултырған бухгалтер Вәлимә эргәһенән үтеүсе иргә ишеттерерлек итеп кенә шыбырҙаны: «Мансурчик, ҡулсырчик, бөгөн кил, көтәм…»

Яратмай Мәликә шул ширҡандаҡ бисәне, күрҙе иһә, талағы таша башлай. Колхоз контораһында баш бухгалтер Яңыбай ағайҙың ярҙамсыһы булып ултырған ҡатынға, йомош табып, йыш һуғыла атаһы. Эйәреп барһа, атаһының

кәнсә күтәрмәһендә күренеүен көтөп ала алмай хәле бөтә. Ә тегеһе сыҒырҒа ашыҡмай, ваҡыт-ваҡыт тәҙрә аша тыш яҡҡа, ҡаршы яҡ урам ултырҒысында суҡайҒан ҡыҙына күҙ атып ала ла кире юҒала. Шулай итеп, хәтһеҙ ваҡыт көтөргә мәжбүр ҡыла: йылы көндәрҙә беленмәһә лә, һыуыҡтарҙа шоҡорайып, бысҡаҡта күшегеп этләнеүҙәре еңелдән түгел. Атаһы ниндәйҙер эске дәрт менән, күҙҙәре осҡонланып килеп сыҒа ла, фуфайка кеҫәһенән бәләкәй көҙгө киҫәге килтереп сыҒарып, ҡыҙыл таптар яҒылҒан биттәрен, муйынын ҡулъяулыҡ менән һөртөргә керешә. Ҡайтышлай магазинҒа һуҒылалар ҙа, төргәккә төрөп тәм-том һатып алҒан атаһы, ҡырыҫ ҡарап, уҫал киҫәтә: «Мә, кәнфит аша. Вәлимә апайыңа барҒанды әсәйеңә әйтеп ҡуйма! Ысматри, яңылыш ысҡындырһаң, Юлай аҒайыңа, Фәрзәнәгә, Фәһимәгә ҡушып һыҙырам!..» «Һыҙырам» һүҙенән үтә лә ҡурҡа Мәликә, ҡурҡһа ла, Ғаиләлә иң кесе бала булараҡ, уҒа ҡайыш тәтегәне юҡ әлегә. Хәйер, башҡаларҒа ла туҡмаҡ-йәбер әләгә һалып бармай, айыҡ саҡта атаһы йыуашайып, баҫалҡыланып ҡала, хәүеф-хәтәрҙән һипһенгән терпеләй эсенә йомола, ауыҙынан артыҡ хәбәр тартып алырмын тимә. Шундай саҡтарында ул, йөк атылай, эшкә егелә, алды-ялды белмәй көнө-төнө тир түгә, ҡайтып күренә белмәй, эстеме, йәненә шайтан инеп оялаймы ни – бар тирәяҒын ватып-емерергә әҙер. Атаһы әллә ярата, әллә яҡын күрә – уны гелән үҙе менән эйәртә. Бына әле лә башҡалар өйҙә ҡалды, улар икәүләшеп клубҡа килделәр. Бер төркөм бала-саҒа менән сәхнә алдындаҒы иҙәндә ултырҒан Мәликә, Вәлимә яҒына уҫал ҡарап: «Атайым Ҡулсыр түгел – Мансур батыр, – тип ҡысҡырҙы ла ҡыуанысл тауыш менән ары сәрелдәне, – атай, атаҡайым, мотоциклыңа иң тәүлә әсәйемде, шунан беҙҙе ултыртып ауыл буйлатып елдереп кенә йөрөтөрһөң, йәме!?.» Ә мотоциклдың асҡысын бармаҡтарында уйнатҡан атаһы уны, аяҡтары аҫтында буталҒан баланы, бар тип тә белмәй терәлеп үтте лә Вәлимәгә һирпелеп, шаян ҡаш һикертеп, күҙ ҡыҫты. Тегеһе, уның артынан эйәргеһе килгәнгәләр, кейемен кипсәлдергән тыҒыҙ кәүҙәһен уйнаҡлатып, ҡалҡына биреп ҡуйҙы.

Шатлығы эсенә һыймаҒан Мәликә йүгерә-атлай ҡайтып инде лә, ишек ябылыу менән, ҡыуанысл яр һалды:

– Әсәй, беләһеңме, атайыма колхоз мотоцикл бүләк итте! Шуның ҡыҙыл бант бәйләнгән асҡысын тотош ауыл халҡы алдында колхоз хужаһы Ғәлимйән олатай атайыма тотторҙо! Атайым сәхнәнән төшкән ыңҒайы мине күтәреп алды ла: «Һине мотоциклда елдереп алып йөрөйөм!» – тине. Әсәй, һине, таҒы Юлай аҒайымды, йәнә Фәрзәнә менән Фәһимәне лә бер юлы ултыртып алып ҡунаҡҡа ла барырбыҙ әле, тине.

– Тәтелдәмә әле, ярыҡ барабан, аҒайың, апайҙарың дәрес әҙерләй, һинең ише эшһеҙ түгел бит улар! – Түрбашта ҡамыр баҫҡан әсәһе, башын ҡалҡытып, орошмай Ғына иҫкәртте лә кире эйелде.

– Аңламайһығыҙмы әллә, беҙгә матас бүләк иттеләр, бер кемдеке лә юҡ, ә беҙҙеке бар! – Ҡуйырҙан ҡуйманы Мәликә, иҙән уртаһына баҫып, ҡулдарын һелтәп бытылдай бирҙе. Ҡаштарын йыйырҒан Юлай аҒаһының иҫе лә китмәне шикелле, мыштыр-мыштыр килеп сумкаһына китаптарын тултырырҒа керешеп китте, Фәрзәнә менән Фәһимә тырышып-тырышып дәфтәрҙәренә яҙыуҙарында булдылар. Ҡамырын әүәләп бөткән әсәһе табаҡтың өҫтөнә ашъяулыҡты бөкләп ябып ҡаҙанлыҡ яҒына индергәс, ҡомҒан менән ашыҡмай Ғына ҡулдарын сайҙы ла, тыныс өндәшеп, уның тыйып торҒоһоҙ тантанаһын һүрелтергә тырышты:

– Колхоз идараһының ҡарары хаҡында бер аҙна элек үк билдәле ине инде. Күрше Нәғимә инәйең инеп һөйөнсөләп тә сыҡты. Бөгөн сәхнәнән шул хаҡта әйткәндәр генә.

– Улайһа, нишләп һин дә барманың, ундай ҙур бүләкте етәкләшеп сығып алғанда ла аҙ әле!

– Атайың клубҡа йөрөгәнемде яратмай шул, колхозда хисапланмаған башың менән унда ни ҡалған һиңә, ти.

– Уның ҡарауы, һин өйҙә эшләйһең, әсәй, атайҙың ҡырҙан ҡайтырын көтөп алаһың, керҙәрен йыуаһың, тамағына йүнәтәһең, беҙҙе ҡарайһың.

– Шулай ҙа бит, ул уны беләме ярмуш…

– Нишләп атайыма гел исем тағаһығыҙ ул, Вәлимә апай уға бөгөн ҡулсыр тине, һин ярмуш тиһең.

– Ҡулсырлығын ул ғына белә торғандыр. – Арыған йөҙҙән борсолоу күләгәһе йүгереп үтте.

– Әсәй, әйҙә, былай итәбеҙ, хәҙер күмәкләп аш өйҙәге урындыҡ аҫтындағы тәмлекәстәрҙе бында сығарып өҫтәлгә ҡуйып, атайҙы ҡаршылайбыҙ. Ул ҡайтып инһен дә, әллә ҡәҙерле ҡунаҡ киләме беҙгә, тип уны көткәнде лә һиҙмәй аптырап торһон. Шунан көлөп ебәрһәк, бөтәһен дә аңлар, төшөнөр. Эй, мәрәкә булыр, ибет!?

– Атайың тиң-тошона бүләген йыуҙырып йөрөп һуң ҡайтыр шу, ә һеҙгә йоҡларға кәрәк… – Этеп алып барған ярһыуға ыңғайлай төшкән әсәһе, ҡулдарын алъяпҡысына һөртөштөрөп, юғалып ҡалды.

– Шулайтайыҡ инде, әсәй, ә беҙ ярҙам итербеҙ! – Мәликә өҫтөндәге йоҡа бишмәтен һалып ырғытты ла ҡамыр еҫе килгән еүеш ҡулға барып йәбеште. Әсәһе лә дәртләнеп китте шикелле:

– Ай, Аллам, белә тороп, әҙерләнмәй тик йөрөнөмсө, һин әйтмәһәң, белегем дә юҡ, шыпа. Балалар, ярҙамлашығыҙ, әләйгәс.

Октябрь байрамына, Яңы йылға тип һаҡлап тотҡан тәм-томдо өҫтәлгә теҙеүгә артыҡ күп ваҡыт китмәне. Өҫтәп картуф әрсеп бешерергә ҡуйҙылар, теге ҡалҡып өлгөрмәгән ҡамырҙы йәйеп, табикмәк әтмәләнеләр. Картуф әрсеү менән Юлай ағаһы булашһа, апалары табикмәк бешергән әсәләре эргәһендә өйрөлөп-сөйрөлдөләр, ҡыҙарып бешкән, хуш еҫ бөрккән түңәрәктәрҙе бер яҡ ситтәге тәрилкәгә һалып торҙолар, ә ул банкаларҙан һауыттарға сейә, еләк, ҡарағат, бөрлөгән ҡайнатмалары һалды. Ағаһы байрамға тигән матур күлдәген, ҡара сатин ыштанын кейеп алған булды, ә ҡыҙҙар сиратлашып сәстәрен тарашып, толомдарына таҫма таҡтылар, әсәһенең өҫтөндәге сәскә биҙәкле күлдәге лә бигерәк килешле. Бөтәһе лә әҙер булғас, өҫтәл тирәләй ултырып, атаһын көтөргә керештеләр. Үҙенә ҡалһа, бигерәк сыҙамһыҙ шул, бер нисә тапҡыр күтәрмәгә сығып әйләнде. Тупһаға һөйәлеп көҙгө төн ҡараңғылығына күпме генә өңөлөп төбәлһә лә, ҡапҡаны шығырҙатып асып инеүсе булманы. Ярты төн ауышҡансы ҡайтмаған атаны көтөп тә ала алмағас, ҡайҙа етте шунда ятып әүелйеп киттеләр.

Таҡта солан стенаһын таһыр-тоһор бәрелгеләп, ишекте шар асып, шунан ҡаҡлыҡтыра ябып ингән тауышҡа һиҫкәнеп уяндылар. Ишек яңағына йәбешеп болғаңлап, лаяҡыл иҫерек аталары баҫып тора ине. Ҡайтышлай бер нисә урында йығылғандыр: фуфайкаһы, салбары ҡойоланып бөткән, итектәре эт алғыһыҙ бысраҡ. Әсәһе диванға ҡырын ятып торған еренән ҡалҡынды ла, сәстәрен рәтләштереп, хәүеф-хафа көткәндәй йөҙөн һағайтып, бер яҡ ситкә баҫты. Юлай ағаһы, апалары ла, йоҡоларынан айный алмай аңҡы-тиңке килеп, иҫнәп ултыралар.

– Йә, бына мин ҡайттым! – Һалынып төшкән ялан башын кинәт ҡалҡытҡан ата кеше, ҡыҙарған күҙҙәрен хәтәр яндырып ҡарап, һөжүмгә күсте. – Йәнә ләх булғансы эскән, тимәксеһегеҙме? Имею право! Патаму што мин колхоздың ураҡ

батыры, бик белгеһеҙ килһә! Колхоздыҡы ғына түгел, райондыҡылыр ҙа әле. Ә һеҙ, – балаларына ҡамсылай һалынған ҡулын алға ташлап төрттө, – елкәмде кимергән паразиттар, башымды ҡымырйытҡан ас беттәр. Әсәйегеҙ – өҙләкһеҙ көсөкләгән кәнтәй һәм бездельник! Ма-Ма-Маһира, иреңдең тапҡан-таянғанына йәшәгәнлегеңде беләһеңме, йыбытҡы! – Быуындары тотмағанғалыр, ишек яңағына арҡаһы менән терәлгәйне, аяҡтары ал яҡҡа шыуып китеп, тырпырап иҙәнгә һуйҙайҙы, шунан өйәҙәй-йонсой ҡалҡынды ла ике ҡулына терһәкләнгән килеш шунда ҡалды.

– Мансур, әйҙә, сисендерәйем дә, ят инде. Һуң бит, балаларға таң менән мәктәпкә, һиңә лә эшкәлер. – Әсәһе, эйелеп, быуынһыҙ кәүҙәне ҡалҡытырға маташҡайны, көслө ҡул уны эләктереп алып, ситкә елтерәтте:

– Пашла вон, ду-ду-дура! Һин дә булдыңмы бисә! Вә…Вә… – Ни тиклем генә иҫерек булһа ла, артыҡ һүҙ ысҡындырғанын самалап, төҙәтә һалды. – Вәт, исмаһам, ҡайһы берәүҙәр йәшәй белә, өйҙәре таҙа, йыйыштырыулы, аш-һыуҙарынан өҫтәл һығыла, үҙҙәренән хушбуй еҫе аңҡый… – Ауыҙы ситенән һарҡҡан ялтыр шайығын ҡул һырты менән һыпырып, Юлайға ҡарашын атты. – Һ-һ-и-и-ин, күрше малайы, ниңә яңы эшләнгән ҡапҡаға инергә шөрләгән аңра һарыҡ ише, дәдәңә ҡарап таҫырайһың, ә?

– Мансур, балалар алдында әҙәплерәк ҡыланһаңсы, ниндәй дядя ул тағы? Ниңә үҙ малайыңды түбәнһетәһең шулай? – Әсәһе тыйырға итә.

– Мин әйткәс, күрше малайы! Какая гарантия, што ул уйнаштан тыумаған? Иҫбатла, што түгел! – Ауыҙын ҡулы менән ҡаплап, йәштәренә төйөлөп торған ҡатынына һуҡ бармағын төрттө. – Дакажи! Өнөң тығылдымы? То-то! Әйткәндәрем сәпкә тейгәс, ана бит, оятыңа сыҙай алмай, күҙҙәреңде шәмәртәһең…

– Мине һанламаһаң, балаларыңдан тартын, Алланан ҡурҡ, исмаһам!

– Алла? Алып килеп күрһәт хәҙер үк уны миңә, күрәйем, тотоп ҡарайым, ышанайым барлығына. Юҡ ул Алла! Һинең ише наҙан бисәгә, бәлки, барҙыр, ә ысынында иһә – юҡ! Был Сабир ауылында Мансур Зә-ә-әбирович Алла, прсиҙәтель түгел. Прсиҙәтель ул бары конторская крыса ғына. Эшсән кеше ауылға хужа булырға тейеш, сөнки ул ғына халыҡты туйҙыра һәм йәшәтә. Ғәлимйән ише боламыҡтарға етәкселек дилбегәһен тотторорға ярамай! Вапше-то, кем ул Ғәлимйән? Минең эргәлә сүп! Район хужаһы иң тәүлә минең менән күрешә, шунан һуң ғына уға ҡулын һона. Ызнашит, мин ул глаунай кеше ауылда! Вә…Вә…вәт, шулай тип әйттеләр бөгөн миңә ҡайһы берәүҙәр. Һәм ул… улар хаҡ, дөрөҫ тә әйтәләр! – Бумала башын артҡа ташлап, бер килке ойоп ултырҙы ла, ҡапыл һиҫкәнеп китеп, күҙҙәрен алартып тирә-яғын байҡаны, ҡарашы тағы Юлайҙа туҡталды. – Кү-ү-үрше-е-е малайы, кил әле яныма. – Һүҙһеҙ буйһоноп ҡаршыһына баҫҡан малайының еңенән тартты. – Ни сәбәптән кәртинкә һымаҡ кейенеп алдың, тәтәй малай? Хәҙер күлдәгеңде сис! Сис, сис!

Юлай сисенде лә, әллә һалҡындан, әллә тулҡынланыуҙан ҡош тәне ҡалҡҡан тәнен йәшереп, күлдәге менән яланғас ерҙәрен боҫормаланы.

– Ә хәҙер кей! Кей, кей! Тә-ә-ә-к, бик тә һәлкәү ҡыймылдайһың, инде кире сис! Сис, тим, инәңде! – Кеҫәһенән ҡапшап, тәмәке килтереп сығарҙы ла тоҡандырҙы. Быҫҡып ултырҙы берауыҡ. Түшәмгә шыйыҡ төтөн болото күтәрелде. Ҡулындағы шырпыны тоҡандырып, юғарыға күтәрҙе. – Ошо шырпы бөртөгө 45 секунд эсендә янып бөтә. Армиялағы ише, шул ваҡыт арауығында һин сисенеп, шунан кейенеп өлгөрөргә бурыслыһың. Кейен!.. Сисен!.. Кейен!.. Өлгөрә алмайһың, эшкинмәгән! – Шырпы ялҡынына бармағы өтөлгән ата ҡулын һелтәп ебәрҙе лә улының беләгенә йәбешкәйне, ең ҡултыҡ төбөнән бүҫелеп төштө.

Юлай сүкте лә, йөҙөн ҡушуслап, һыңҡылдап илап ебәрҙе. Әсәһе эйелеп улын ҡосаҡланы.

– Һин нишләп, йөрөмтәл кәнтәй, уйнаштан тыуған тыуманды яҡлайһың! Ул бит – һинең күршең Сәлимйән зимагурҙың балаһы!

– Алла алдында намыҫым таҙа, нишләп ғүмер буйы нахаҡҡа рәнйетәһең мине, Мансур! Бында Сәлимйән ағайҙың ни ғәйебе? Беҙ бит уның менән, ағалы-һеңлеле һымаҡ, бергә уйнап үҫтек…

– Уйнап түгел, уйнаш итеп, тиген! – Ауыҙы ситендә төтәгән тәмәкене алып, ласылдатҡансы төкөрҙө лә мейес көлдөксәһе яғына быраҡтырҙы.

Эшлекле, егәрле әсәһе көн дә йыуып алған иҙән тәмәке төпсөгө, шырпы бөртөктәре, итектәргә эйәреп ингән урам ҡойоһо менән ҡыйланды, бысранды. «Бая ауылдаштар алдында иҙәнгә төпсөгөн иҙеп хаяһыҙ ҡыланғайны, хәҙер өйҙө таплай… – Күҙәтеүсән, һынсыл Мәликәгә был оҡшаманы: – Инде һине етәкләп эйәреп йөрөһәмме!»

Атай кеше, кесе ҡыҙының уйын уҡығандай, уға ҡалҡып ҡараны. Мәликә сәстәрен ялбыратып, апаларын ҡурсырға теләгәндәй, алғараҡ сығып, ҡыйыу ҡарап баҫып тора. Ҡараштар сәкәште. Арыған, йоҡоһоҙлоҡтан ҡыҙарған, араҡы томаны шәүләләгән ҡараш һуңғы сиктә еңелде барыбер – ул ишек башында эленеп торған Аятел Көрсигә тайпылды, әммә изге яҙыу һипһендермәне иманһыҙҙы, киреһенсә, оторо ярһытты ғына. Өй хужаһы ҡулдарын болғап аҡырырға тотондо:

– Алып ырғыт был сепрәк киҫәген! Бер тапҡыр ясно излагал, мне кәжетсә, Алла юҡ, ул – томаналар уйлап сығарған әкиәт, һағым! Ә был суҫҡа балалары мине яратмайҙар! Яҡын күрмәйҙәр, үҙ итмәйҙәр, белеп, һиҙеп, күреп йөрөйөм. Һин дә яратмайһың! Боҙ ҡаялай һалҡынһың! Үҙең дә һалҡын, түшәгең дә. Ә бына Вә…Вә… – Телендә әйләнгән бәйләнсек өндән ҡотолорға теләгәндәй сәбәләнеп, ҡулдарын болғаны. – Вә- вә- вәссәләм, бөттө-китте!

– Һуң үҙең яраттырыр өсөн нимә лә булһа эшләнеңме, ә? Исмаһам, бер тапҡыр булһа ла ваҡытында, айыҡ ҡайтып ингәнең бармы, йә әйт!

– Өйрәтмә мине, һәпрә! Нисек теләйем шулай көн итәм, ҡасан теләйем шунда ҡайтып инә алам, мине тыймаҡсыһыңмы?

Атаһы, ултырған еренән ҡалҡынып, әсәһенә тибеп ебәрҙе лә, тегеһе килбәтһеҙ ялтанғайны, эсенә тондорҙо, шунан бөгөлөп иҙәнгә ҡолаған кәүҙәне йомарлап төйгөсләргә кереште. Фәрзәнә менән Фәһимә, шарылдап илап, мөйөшкә тартылдылар. Юлай менән икәүләп көрмәкләшеүселәрҙе аралаға ташланғайнылар – йоҙроҡ эләккән ағаһы диван яғына осто, ә ул сығыу яғына елтерәне лә маңлайы менән ишек яңағына бәрелде. Яранан сәсрәгән ҡан стенаға һибелде. Енләнгән ата, ырғып тороп, иҙәндә һуҙылған кәүҙәне типкеләргә тотондо, ыңғайы бер һонолоп өҫтәл япмаһын һыпра тартты, стена буйындағы серванттағы һауыт-һабаны алып, иҙәнгә бәрә башланы.

Иртәгәһен медпунктҡа алып барып, уның башын бәйләттеләр. Фельдшер Сания яра алыуҙың сәбәбен асыҡларға иткәйне лә, әсәһе, уйнап йөрөгәнендә яңылыш йығылып йәрәхәтләнде, тип аҡланды. Сания апай ҙа аңлағандыр, төшөнгәндер – бары мәғәнәле һирпелеп ҡуйыу менән генә сикләнде. Атаһы колхоздан эш хаҡы алғансы ярылған-сатнаған һауыт-һабаны тотонған булдылар, аҙна – ун көндән башындағы яраһы ла бөтәште, тик күңеленә төҙәлмәҫлек яра, атаһына ҡарата рәнйеш инеп ояларғайны инде…

Тағы беренсе сентябрҙа барғаны хәтерҙә. Мәктәп янындағы тантанаға барлыҡ ауыл халҡы йыйыла – мәшәҡәттәрен ҡуйып, һеперелеп олоһо ла кесеһе лә

килә. Беренсе класҡа барыусылар ата-әсәләре менән етәкләшеп атлайҙар, ғәҙәттә. Уны әсәһе оҙата барған булды. Был мәлдә атаһы төнгө эскелектән һуң, ах та ух килеп, башын ҡушуслап, диванда аунай ине. Ата-әсәһенең уртаһына төшөп атлаған Нәсимә, уларҙың тапҡырына еткәс, әсәһенең сығыуын көтөп ҡапҡа төбөн һаҡлаған Мәликәгә ҡайырылып телен күрһәтте, күр, йәнәһе, минең атайым һинеке ише эскесе түгел. Бәлки, улай тип тә кәмһетергә теләмәгәндер, күңеле китек Мәликә көндәшенең ым-ишараһын шулайыраҡ ҡабул итте һәр хәлдә.

Шул уҡ көндө кис ҡыҙмаса ҡайтып ингән атаһы ҡатынын, балаларын ҡыуып сығарып, ишекте шарт бикләп ҡуйҙы. Көҙ айының башы ғына булһа ла, төндәр һалҡынайтҡайны, яланаяҡ, күлдәксән сыҡҡанлыҡтан, тештәре тешкә теймәй дерелдәп өшөй башланылар. Күшеккән себештәрҙәй, әсәһенә һыйыналар, аяҡтарын тумбыҡтырмаç өсөн, сиратлап ишек ауыҙында ятҡан һеперткегә баçҡан булалар. Көтөп тә ишекте астыра алмағас, ярты төндә мал һарайының ҡыйығына үрмәләнеләр.

Тормоштарының йәме лә, рәте лә китте. Әсәһе, аптыраған көндәндер, ярҙам өмөт итеп колхоз идараһына, ауыл Советына мөрәжәғәт итеп ҡараны. Тегеләре ни, идараға саҡыртып тормай, өйгә килеп алдынғы тракторсыны еңелсә генә тәнҡитләйҙәр ҙә, боҙолошмай, һауыт-һаба шалтыратмай татыу ғына йәшәгеҙ инде, тип оло эш башҡарған ҡиәфәттә сығып китәләр. Һауыт-һаба шалтырау ғына түгел, шауҙырлап ватылыуы, ғаиләнең бөтөнлөгө йәнселеүе хаҡында ишетмәйҙәр, ишетергә лә теләмәйҙәр. Әкренләп йүгәндән ысҡына барған иргә шул ғына кәрәк тә: түрәләр әпәүләүенә арҡаланып, киләсәктә лә яҡланасағын, аҡланасағын белеп, тағы ла яһилланыбыраҡ типтерергә тотона. Ул яйлап өй имгәгенән шик-шөбһәгә һалған ауыл ҡазаһына, ике аяҡлы бәләһенә әүерелә барҙы.

Буранлы ҡышҡы кистәрҙең береһендә һуңлап булһа ла ҡайтып күренергә күнеккән атаһы бөтөнләй ҡайтманы. Әсәһе күтәрмәгә ҡат-ҡат инеп-сығып уны көттө, бешергән ашын да ҡайта-ҡайта йылытты. Балалар ғына атаһының ҡайтып күренмәүенә бошонманы. Ғәҙәттә, ул юҡта өйҙә йылы күтәренкелек хөкөм һөрә: Юлай радио-телевизор схемаһын сығарып, йәбештереү эштәре менән мауығып китә, Фәрзәнә, өлкән ҡыҙ булараҡ, бәйләү-сигеү эштәрен ҡулына ала, Фәһимә менән Мәликә, иҙәнгә һуҙылып ятып, һүрәт төшөрә. Ҡыҙҙарҙың һүрәттәре был осраҡта яҡтыраҡ, нурлыраҡ, матурыраҡ килеп сыға. Башҡаларға нисектер, Мәликәнең башында бер генә уй әйләнә: «Атайым бөтөнләй ҡайтмаһа ине…» Хоҙай Тәғәлә уның теләген ҡабул ҡылғандыр – атаһы икенсе көнгә лә, өсөнсө көнгә лә, аҙна аҙағына ла күренмәне. Икенсе аҙнаһына ауыл буйлап хәбәр таралды: «Мансур Вәлимә менән йәшәп ята икән!» Был хәбәр әсәһенә иртәрәк тә ишетелгәндер, бәлки, мәгәр был хаҡта өй эсендә һүҙ ҡуҙғатыусы булманы, дүрт баланың, исмаһам, береһе, атайым ҡайҙа, тип яңылыш булһа ла ысҡындырманы.

Эңер мәлендә ишек шаҡынылар. Тупһа ауыҙында атаһы тора, ғәжәпкә ҡаршы, айыҡ ине был юлы. Инде лә өндәшмәй генә түргә үтте, карауат аҫтынан юл сумкаһын сығарып, кейер кейемен шунда тултырырға кереште. Шөғөлөн ослағас, өҫтәл артына ултырып бер килке шымтайҙы, тамағы төбөнән ҡарлығыулы өн һығылып сыҡты: «Һеҙҙән китәм, Маһира… Былайтып күпме ҡаңғырырға мөмкин. Ғаиләмде ҡалдырып бәхетле йәшәй алмаçымды ла беләм, ни хәл итәйем, маңлайыма яҙғаны шулдыр…» Ишек төбөнә килде, көйәнтәләй бөгөлөп торҙо ла ҡараңғылыҡҡа атланы. Ҡайырылып ҡараманы.

Атаһы, эсеп йөрөһә лә, ғаиләне туйындырған барыбер – тиҙҙән ҡытлыҡ, юҡлыҡ үҙен һиҙҙерә башланы. Махсус белеме булмаған әсәһе ырҙын табағына иген

ағыулауға йөрөй. Иртән сығып китә лә эңер төшкәс кенә арып-талып, йөҙө һурылып ҡайтып инә. Ағыулау мәлендә, махсус һаҡланғыс булмағас, танау-ауыҙҙарын яулыҡ менән томалайҙар икән. Һарғылт-ҡыҙыл туҙан яулыҡты ғына түгел, әсәһенең тотош өҫтөн япҡан була. Инеү менән өй эсе зәһәр ағыу еҫенә тула. Хеҙмәт хәүефһеҙлеген һаҡлау ниәтенәндер, ферманан көн һайын ике литр һөт бирәләр. Уны һыйыр ағына ҡушып, көн аша ҡатыҡ итеп ойоталар. Ни тиклем ауыр булмаһын, әсәһе осто осҡа ялғай алды, балаларын ас та, яланғас та итмәне.

Йыл да тулманы, башын эсеүгә һалған тотанаҡһыҙ ирҙе Вәлимә лә ҡыуып сығарҙы. Тик атай кеше үҙ ғаиләһенә ҡайтырға теләмәне, ауыл осонда яңғыҙы көн иткән, медпунктта йыйыштырыусы булып эшләгән Вәғизәгә барып инде. Эсергә хирес икәү ҡушылғас ни, тормоштарының рәт-сүрәте күренмәне. Йыш ҡына урам буйлап эсергә эҙләп әйенселәү был икәүҙең йәшәү рәүеше ине.

Мәликәнең хәтерендә: мәктәптән сығып ҡайтып килә ине, ҡаршыһына етәкләшкән теге икәү осраны. Бер яҡҡа ҡайырылырға иткәйне, бит-йөҙө шешенке атаһы йүгерә-атлай уның ҡаршыһына килеп теҙләнде лә тилмереп күҙҙәренә төбәлде. Таушалған кәүҙә иҫереп болғаңлаһа ла, һалынҡы ҡабаҡтар аҫтынан ҡараған күҙҙәр һағышлы ине. «Бәләкәсем, һаумы? – Яуап ишетмәһә лә, ҡабаланып ары теҙҙе. – Ҡайһылай ҙурайып киткән булған… Ағайың, апайҙарың нисек? Юлай минән ҡаса, һөйләшергә лә теләмәй, урынһыҙға, сәбәпһеҙгә күп ҡыйырһыттым шул. Матур итеп йәшәгеҙ, һеҙ йәшәһәгеҙ, мин дә имен-аман булырмын…» – «Хәстрүш абышҡа, нимә унда һейгәгең менән шыбырҙашаһың? Ағыуға ҡатҡан Маһираңды, етемәктәреңде бик тә һағынып юҡһынһаң, тотмайым, ҡыуҙым-сығарҙым булыр, дүрт яғың ҡибла!» – Атаһы яр биреһеләй әрпеш кейенгән, туҡтамай бытылдап иләмһеҙ хәбәр һөйләгән эскесе ҡатындың артынан эйәрҙе.

Ни тиклем эсһә лә, атаһы тракторынан төшмәне, яҙлы-көҙлө ер һөрҙө, көҙ етте иһә – комбайнға ултырҙы, ҡыш көндәре ҡырҙан колхоз малына аҙыҡ ташыны. Тырыш, хеҙмәт өсөн генә тыуған тракторсыны эшенән бушатырға ашыҡманылар, уның етешһеҙлектәренә, ҡайһы саҡ ышанысты аҡламауына бармаҡ аша ҡаранылар. Эскән килеш трактор рычагы артына ултырыу – енәйәт ҡылыуға бәрәбәр: бер тапҡыр, ер һөрөп йөрөгән еренән янтайып, тракторын юл ситенә ауҙарҙы, икенселәй яңғыҙы көн иткән Фатима ҡарсыҡтың картуф баҡсаһының осонда урынлашҡан иҫке мунсаһын төкөп емерҙе. Һуңғы тапҡыр үҙе ҡазаланды – тракторында түгел, ҡышҡы селләлә иҫерек килеш оҙаҡ ятып, ҡул, аяҡ бармаҡтарын туңдырҙы.

Шул хаҡта ишеткәйнеләр, әсәһе район дауаханаһына йыйына башланы, Юлайҙы башҡаларға күҙ-ҡолаҡ итеп ҡалдырып, Мәликәне үҙе менән эйәртте. Ҡул-аяҡтары бинт менән сырмалған атаһын айырым палатаға һалып ҡуйғайнылар. Әсәһе карауат янына ултырҙы, ул баш осона баҫты.

Атаһының шырт баҫҡан йөҙө тартылып киткән, күҙ төптәренә ҡарағусҡыл күләгә ятҡан, етек сәстәре бумалалай тырпайған. Өндәшмәй суҡайҙылар. Ниһайәт, тамаҡ ҡырған атаһы тоноҡ тауыш менән һүҙ ҡатты:

– Бына, ятам әле, ғәрипкә әйләнеп, ҡул-аяҡты тупысайтып, бармаҡтарҙы киҫеп ырғыттылар…

– Ишеттем, шуға эште ҡуйып килеп етә һалдыҡ… Вәлимә йә Вәғизә килгәндәрҙер ул?

– Ҡайҙан… Белә күрә йәнгә теймә, йөрәкте өҙмә инде…

– Үпкәләмә, артығын һораным шикелле… Шуға килдек, беҙгә ҡайтырһың, башҡа кемгә кәрәгең бар… Мин, балалар шулай хәл иттек…

«Яңылыш һөйләй әсәйем, ул хаҡта һүҙ ҡуҙғатманылар ҙа баһа…» Мәликә, шулай уйлаһа ла, өндәшмәй ҡалды.

Атаһы берауыҡ һүҙһеҙ ятты ла башын ситкә ҡайырҙы. Эре күҙ йәштәре һурынҡы биттәре буйлап түбәнгә һарҡты. Ул илай ине. Ир кешенең илағанын күргәне булмаған, уның да күңеле тулып китте, иламаҫ өсөн аҫҡы иренен тешләне. Яңынан иңрәү һығылып сыҡты:

– Һине күп тапҡырҙар рәнйеттем, Маһира, кисерә алһаң, кисер… Балаларҙы ла, һине лә үҙемдән биҙҙерҙем… Аламалыҡтарымды бер кемгә лә япһармайым, әммә, ҡош ояһында ни күрһә, осҡанда ла шул, тиҙәр бит, минең дә баштан кирегә һапланды… Үҙең беләһең, атайым да эсеүгә һабышҡан кеше ине бит, ҡылыҡ-холҡо ла ауыр булды… Шуға ла бит беҙҙе, әсәйем мәрхүм булғас, ҡалалағы балалар йортона бирҙеләр. Атайымдан, артабан ҡаҙна йортонан күргән йәберрәнйеш ҡонон һеҙҙән алырға маташтым… Алйот… Аламалыҡ гонаһ тыуҙыра икән ул, әле килеп шуны аңланым… Хәҙер Юлайҙың, ҡыҙҙарымдың шундай булып китеүҙәренән ҡурҡам, уларҙың йәненә асыу орлоҡтары сәселгән бит, йәндәрендә бер шытым бирмәһә бер бирер… Ҡайтыуға килгәндә, юҡ… Сәләмәт аяҡтарым менән сығып китеп, ғәрип булып, бәйнәтемде һалып ҡайтмаясаҡмын… Минең холоҡто беләһең… Димләмә, булмай! Кисә, профкомын эйәртеп, Ғәлимйән ағай килеп китте, миңә район үҙәгенән бер өкәлтәк йүнләп йөрөйҙәр икән. Эш тураһында һүҙ ҡуҙғатыу – әлегә иртәрәк… Нисек тә йәшәрмен әле… Башҡаса килмәгеҙ, мине бахырға тиңләп йәлләү кәрәкмәй… Балаларҙы нисек тә әҙәм ит, Маһира, һин бит аҡыллы, егәрле, көслә ҡатын…

– Нишләп шул һүҙҙәреңде элегерәк әйтмәнең, Мансур?

– Йәнемә инеп оялаған иблис ирек бирмәне… Йә, бәхилләшәйек…

– Бәлки…

– Юҡ, сигенмәйем, был – һуңғы һәм кире ҡаҡҡыһыҙ ҡарарым…

– Үҙең ҡара, улайһа… Балаларға килеп йөрөргә рөхсәт бир. Һин бит атай…

– Ҡыуанып ризалашыр инем, тик уларҙа ундай теләк тыумаҫ шул… Тағы ла шуны әйтмәксемен: башҡаса сыҡма шул ағыуға…

– Ҡайҙа ғына барайым, аптырағандың көнөнән йөрөлә, аҡсаны ла арыу түләйҙәр унда.

– Сәләмәтлегеңде хәҙерҙән аҡсаға алмаштырһаң, балаларҙы кем үҫтерер? Ғәлимйән ағай менән һөйләштем-килештем, алдағы аҙнанан быҙауҙар ҡарарға сығырһың. Исмаһам, унда йылы, мәктәптән сыҡҡас, Юлай барып ярҙамлашыр, Фәрзәнә лә ҡул араһына кереп бара.

– Рәхмәт хәстәреңә. Хуш, Мансур…

– Хуш, Маһира…

Атаһы хаҡлы булып сыҡты: исмаһам, береһе уны күрергә, янына барып хәлен белергә теләмәне. Башта ла, һуңынан да. Ә атаһы, район үҙәгендә бер нисә йыл йәшәгәндән һуң, күрше Ҡәнзәфәр ауылына килеп төпләнде, үҙе кеүек бер ғәрип ҡатынға өйләнде. Бәлки, ғаиләһенә яҡыныраҡ булырға теләгәндер. Яттарҙың уйын ҡайҙан белмәк, тоймаҡ, кеше күңеле – ҡара урман, тиҙәр бит…

## 3

– Шулай итеп, иҫтәлекле, хәтерҙә ҡалырлыҡ осрашыуҙы дауам итәйек, хөрмәтле ағай-эне!.. – Рөстәм Ишмөхәмәтович ишек яғындағыларға мыҫҡыллы ҡарашын атты. – Беренсе һүҙҙе һеҙгә бирәйек, Мәликә Мансуровна, бәлки, атайығыҙға әйтер, ололар көнө алдынан уға еткерер теләктәрегеҙ барҙыр… Ысынын әйткәндә, Мәликә Мансуровна, һеҙҙең атайығыҙҙың ҡарттар йортонда йәшәгәнен белмәнем. Был

минең өсөн – көтөлмәгән һәм, өҫтәргә кәрәк, шатлыҡлы булмаған яңылыҡ... Һеҙҙең менән нисәмә йыл бергә-бергә, ҡулға-ҡул тотоношоп эшләргә тура килде, шул серҙе лә йәшереп тотҡанһығыҙ... Көтмәгән инем, көтмәгән инем! – Ҡулында әйләндергеләгән күҙлеген өҫтәлгә ырғытты ла, тәкәббер төбәлеп, креслоһында ҡайҡайҙы.

Башлыҡтың был хәрәкәтенә өйрәнеп бөткән,– тимәк, ул үҙен хаҡлы итеп тоя, тимәк, ул сығарған ҡарар ҡаты һәм аяуһыҙ буласаҡ.

Мәликә Мансуровна яй ғына ҡалҡты, сәстәренә ҡағылды, күлдәк итәген тартып төҙәтештерҙе. Тағы ла бер тапҡыр бүлмәләгеләргә ҡарашын һирпте, тишерҙәй итеп атаһына төбәлде:

– Һаумыһығыҙ, Мансур Зәбирович. Танынығыҙмы, был мин – Мәликә булам...

– Һауғынаһыңмы, балам... – Мансур ҡарт уң ҡулында ҡалған ике бөртөк бармағы менән лупа күҙлеген төҙәтте лә башын баҫты.

– Мин Һеҙгә бала түгел, шуны иҫегеҙгә һеңдерегеҙ! Яҡты донъяға тыуҙырыу ғына аҙ, атай исемен йөрөтөү өсөн ауыҙҙағы һуңғы телемде өҙөп ҡаптырып, баланы тәрбиәләп үҫтереү ҙә зарур. – Аяуһыҙ башлауын тойоп, баҫыла төштө. – Әсәйем дә миндә йәшәй, имен әлегә...

– Ишетеп ятам...

– Ишетәм тигәнсе, уны эҙләп табып, килеп хәлен белһәң, үҙеңдең ҡайҙалығыңды еткерһәң, арыу булыр ине. – Ары, рәсмилек һаҡлап ҡала алмай, «һин»гә күсте. – Юғиһә, атаһынан баш тартҡан енәйәтселәй мир алдында баҫып тороуы миңә лә еңел түгел.

– Ҡыҙым, бында тамсы ла ғәйебем юҡ, минең өсөн һинең менән осрашыу – көтөлмәгән хәл.

– Көтөлмәгәнме, әллә ҡыуаныслымы?

– Ҡыуаныслы...

– Тура баҫып, ҡырын һөйләмәйек, Мансур Зәбирович, ә мин был осрашыуҙа шашып ҡыуанырлыҡ сәбәп тапмайым. Һинең хәлеңде лә аңлайым, ҡыуаныуҙан бигерәк, тетрәнеп ултыраһыңдыр. Үҙеңә мәғлүм, быға өсөн йөйҙәр, күңелеңдә сырмалтҡан төйөндәр етерлек. – Башлыҡҡа ҡараны. – Рәхмәт, Рөстәм Ишмөхәмәтович, ҡайһылай ҙа матур, онотолмаҫ осрашыу ойоштороғанһығыҙ, бала сағыма ҡайтып урағандай булдым.

Башлыҡ, хәл-ваҡиғаны асығыраҡ күрергә теләгәндәй, күҙлеген кире алып кейеп, урыбаҫарҙарына мәғәнәле ҡарап ҡуйһа ла, яуап ҡайтарырға ашыҡманы. Мәликә дауам итте:

– Алдан уҡ иҫкәртәм, беҙҙең бөгөнгө әңгәмәләшеү еңелдән булмаясаҡ. Икәүҙән-икәү ултырып аңлашһаҡ, күпкә еңелерәккә төшөр ине лә бит, тик ни хәл итәһең, бары менән байрам. – Яман һулап ҡуйҙы ла ҡарашы менән бөршәйеп ҡалған кәлбер кәүҙәне өттө. – Беҙҙән ғүмерең буйы ҡасып-боҫоп йәшәнең, ә бына уның нилектән икәнлеген аңламаным, әле лә аңламайым. Һине ғәфү итә алмайым, атай, сөнки беҙҙә йәшәгәнеңдә гел әсәйҙе йәберләнең, кәмһеттең, мыҫҡыл иттең...

– Ҡыҙым!..

– Бүлдермә берүк, һуңынан аҡланырһың, әгәр аҡлана алһаң! Балаларыңа ни көн күрһәттең һуң? Һин булмағанда өйгә ҡот, йылылыҡ, яҡтылыҡ инеп ҡала торғайны, быныһын бөтәһенең алдында асыҡтан-асыҡ әйтә алам. Өйөн – боҙ һарайына, яҡындарын ҡурҡытыу, мыҫҡыллау объектына әйләндергән әҙәм үҙен ғаиләлә баш итеп иҫәпләй аламы? Юҡ! Хәҙер ҡара минең маңлайға, бынау йөйҙө хәтерләйһеңме? Хәтерләүең бик тә икеле, сөнки лайыҡыл иҫерек инең!

Балаһының ҡанын ағыҙған кеше атай исемен йөрөтөргә хаҡлымы? Тағы ла юҡ! Иртәгәһен, ғәфү үтенәһе урынға, яңынан тауыш ҡуптарып, әсәйемде урамға алып сығып типкеләнең, сәстәрен йолҡҡосланың. Ишек алдында елдә туҙышҡан сәстәрҙе ғүмеремдең һуңғы көндәренә ҡәҙәр онотаһым түгел. Тағы, эскән килеш тракторыңа ултырып алып, күршеләрҙең яңы ғына сыҡҡан ҡаҙ себештәрен тапаттың. Инәлеге имгәнгән, себештәре иҙелгән ата ҡаҙ ҡош теле менән ҡарғамаған тиһеңме!? Һин ғаиләң өсөн генә түгел, тотош ауыл өсөн дә имгәк инең, хөрмәтле алдынғы тракторсы! Ниндәй генә хеҙмәт булһа ла, ул иң әүәл аҡыл менән нығытылырға тейеш. Шул саҡта ғына ул йәмғиәт өсөн файҙалы. Һуҡыр, мәғәнәһеҙ хеҙмәт атҡарып, шуның емешенә, һөҙөмтәһенә ҡыуанырға беҙ бит ҡолдар түгел! Һин ғүмерең буйы ер һөрҙөң, иген һуҡтың, былар маҡтауға лайыҡ, тик ғаиләңдәгеләрҙең күңелен һөрөп аҡтарырға, йәндәрен туҡмаҡларға тейеш түгел инең…

– Ҡыҙым, үтенәм, етер…

– Юҡ, етмәне әле, бөгөн әйтмәһәм, был хаҡта тағы ла ҡасан әйтәм!

– Мәликә Мансуровна, әйткәндәрегеҙ аңлашылды. Һеҙ бер аҙ тынысланғансы, фекер туплағансы, бәлки, башҡаларҙы тыңларбыҙ, ә? – Осрашыуҙың көтөлмәгән йүнәлеш алыуынан юғалыңҡырап ҡалған башлыҡ сараға рәсми төҫ биреп, һөйләшеүҙе һәүетемсә йүнәлешкә борорға теләне. – Бәлки, Фәрит Яманғолов әфәндене тыңлап ҡарарбыҙ? Ни өсөн ҡәҙерле әсәһе бөгөнгө көндә ҡарттар йортонда көн итә икән?

– Әсәй үҙе теләп китте, фатирығыҙ тар, мин түгел, үҙегеҙ һыя алмайһығыҙ әле, ҡарт кешегә пакуй кәрәк, тине. – Урынынан теләр-теләмәҫ ҡалҡҡан Яманғолов, ҡорт саҡҡандай, сәбәләнеп китте.

Яманғолов һүҙ алғас, урта төштә ултырған, ҡойто ғына кейенгән һикһән йәштәр самаһындағы әбей иҙәнгә һалынып тиерлек төшкән итәген һыпырғылап, ҡымғырлай биреп ҡуйҙы, ап-аҡ сәстәрен, тәрән һырҙар сыбарлаған маңлайын ыуҙы ла ҡулы менән тештәр тойолмаған мөйтәңләк иренле ауыҙын ҡапланы. Күренеп тора: нәҫ баҫҡан, фани донъяға ҡул һелтәгән ҡарсыҡтың ризаһыҙлығын әйтергә лә, бәхәсләшергә лә, үҙ-үҙен ятларға ла яйы юҡ. Тоҙ төҫөн алған күҙҙәр генә бар тирә-яҡҡа рәнйеп, үпкәләп ҡарайҙар.

– Фатирығыҙ нисә бүлмәле, Фәрит Әлтәфович? – Быны социаль мәсьәләләр буйынса урынбаҫар һораны.

– Һуң, тар ғына дүрт бүлмәле өкәлтәк инде шунда: зал, йоҡо бүлмәһе, малайҙың бүлмәһе, тағы минең эш кабинеты, бөттө-китте. Етмешенсе йылдарҙағы йорт планировкаһы бит беҙҙә, дөйөм майҙан бөгөнгө бер бүлмәле фатир кимәлендәй генә.

– Тормош хәлең үтә лә ауыр икән дә баһа, Фәрит Әлтәфович, шуға иртәгә үк уны яҡшыртыу йәһәтенән ғариза яҙып килтер! – Башлыҡ, әсе ҡапҡандай, йөҙөн сирҙы.

– Што һеҙ, кәрәкмәй, быныһы артыҡ, мин бит скромный кеше! – Кинәйәне аңламаған Яманғолов үҙенекен тыҡыны. – Әсәйемә килгәндә, айына бер барып, уның хәлен белеп, йәшәү шарттары менән танышып, бағыусыларына ҡәтғи талаптар ҡуйып торабыҙ. Што һин, контроллəү необходимо, как никак мине бағып үҫтергән бит ул!

– Әсәйегеҙгә матди ярҙам күрһәтәһегеҙме һуң? – тине иҡтисад буйынса урынбаҫар.

– Ә кәк же! – Яманғолов ҡупырайҙы – Мәҫәлән ололар көнө айҡанлы барлыҡ аҙыҡ-түлеккә биш процент ташлама яһаным, әсәйем генә түгел, барлыҡ әсәләр ҡыуанһындар әйҙә!

– Рөстәм Ишмөхәмәтович, Фәрит Әлтәфовичтың әсәһенең тормош хәлен контролләүен, бәлки, аҙаҡҡараҡ ҡалдырырбыҙ, мин бит әле әйтеп бөтмәнем. – Урынында тапанған Ишйәрова турайып баҫты.

– Разве я против, улар һораны, мин яуап бирҙем. – Бәйләнеүҙән ваҡытлыса булһа ла ҡотолған Яманғолов, ултыра һалып, күршеһенең яурыны артына боҫто.

– Мансур Зәбирович! – Тарҡалған уйҙарын тупларға теләгән Мәликә бер аҙ тын торҙо. – Юлай ағайымды Афғанстандан ҡурғаш табутҡа тығып ҡайтарғандарында уны ерләү мәлендә тотош район халҡы йыйылды, ә һин ҡайҙа инең?

Мансур ҡарт ҡалҡты, көҙгө елдә тирбәлгән ағастай бәүелеп торҙо, бер яҡҡа ҡырын шылған түбәтәйен төҙәтте, танау осона шылған күҙлеген алып, күрмәлекһеҙ пинжәгенең түш кеҫәһенә тыҡты ла, тупыс ҡул һырты менән йәшләнгән күҙҙәрен ыуғас, ауыр тын алып, быуылғандай ғыжылданы:

– Эргәгеҙҙә инем, балам, зыярат эргәһендәге сауҡалыҡта ағасты ҡосаҡлап үкһей инем… Ауыл халҡына, райондан килгәндәргә күренергә батырсылыҡ итмәнем. Уларҙың хөкөм иткән асыулы ҡараштарын күтәрә алмаҫ инем барыбер… Шунан, төн еткәс, зыяратҡа инеп, таң атҡансы Юлай улым менән һөйләшеп, серләшеп ултырҙым… Билләһи, тауышын ишеттем уның, ул да мине асыҡ ишетте һәм аңланы… Алла бар был донъяла, балам, йәшәй-йәшәй шуға инандым. Намыҫ – әҙәм балаһына Алла тарафынан бирелгән һәләт… Ә мин намыҫһыҙ йәшәнем, ғәйеплемен, һеҙҙән ярлыҡау, кисереү өмөт итмәйем…

Атаһының һуңлаған үкенеү һүҙҙәрен ишеткән Мәликә Мансуровна сыҙап ҡала алманы – йәшенә төйөлөп, сығыу яғына атланы. Уны тоткарлаусы булманы.

## 4

Ҡайтышлай паркка һуғылды, урталағы эскәмйәләрҙең береһенә ултырҙы. Көн үҙәгендә шайтан ҡуласаһына ултырып әйләнергә теләүселәрҙең һаны бермә-бер артҡан, ана, әле генә түбәндәге ҡыҙый юғарыға сөйөлдө лә, аҫҡа ҡарап, атаһына шат тауыш менән ҡысҡырҙы: «Мин өҫтә, ә һин – аҫта!» Ҡыуаныстан ирәйгән тегеһе лә ҡоласын йәйеп һөрәнләй: «Һин гел шулай юғарыла бул, ҡыҙым!»

Был юлы ҡаршы сығыусы булманы. Әсәһе бүлмәһендә ятып тора ине. Мәликәнең төпсөнөүенә лә битараф ҡул һелтәп яуап бирҙе: «Ҡарт кешенең сырхауы бөтәме, бөгөн һаумын, ти, иртәгәһен ҡараһаң – ерләргә алып китеп баралар…»

– Үтенәм, күңелгә шом һалып, юҡ-бар һөйләмә берүк.

– Шом тип, тормошта була торған хәл, нимә, әллә мине бөксәңдәтеп яныңда ғүмер буйы йөрөтөргәме иҫәбең?

– Йәшә әле, әсәй.

– Ярай әләйгәс, һин ҡушҡас, йәшәрмен. – Маһира ҡарсыҡ һүнгән күҙҙәрен көлдөрҙө. – Үҙеңде ни йомош менән саҡырғандар һуң?

– Хакимиәт башлығы ҡарттар йортонда йәшәүселәрҙе күрһәтергә йыйған… – Артыҡ хәбәр ысҡындырыуын һиҙгән Мәликә тотлоғоп ҡалды.

– Кемдәрҙе инде?

– Ҡалала йәшәгәндәрҙе.

– Һуң, кисә генә, ололар көнөн үткәреүгә ярҙам йөҙөнән мул ғына аҡса бүлдем, тип әйтә инең дә баһа. – Зирәк, отҡор әсәһе һөйләшеүҙе элә һалып алып, дауам итте. – Ҡарттарҙы мәжлескә йыйғас, моғайын да, араларында берәй танышың булғандыр, юғиһә, һиңә өндәшә булалар будты.

– Мәжлес-табындарын күрмәнем.

– Башта – кәңәш-төңәш, һыйы аҙаҡтан инде, йолаһы шул. Унда, ҡарттар йортона, тирә-яҡ райондағыларҙы ла урынлаштыралар шикелле.

– Бәлки, шулайҙыр ҙа, уныһы миңә ҡараңғы… – Был турала ары һөйләшкеһе килмәүен белдереп, ситкә ҡайырылды.

Был ишараны өнәмәгән әсәһе ҡырт киҫте:

– Ҡасандан алып әсәйеңә һыртыңды ҡуя башланың әле?

– Иғтибар менән тыңлайым, әсәй.

– Тыңлаһаң шул: Нурия килен үткәндә һүҙ араһында Мансур олатайҙың йортона ингән һуҡмаҡты үлән баҫҡан ине, уны ҡарттар йортона алып киткәндәрме-ниме, тип тә ишеттем, тине. Саҡырылған ҡарттар араһында һинең атайың юҡ инеме?

Оло кешене әүрәтеп уратып-суратыуҙан, ялғанлауҙан фәтүә ҡалманы:

– Эйе, атайым да бар ине.

– Әйтәм бит, күңелем һиҙә ине. Атайың бер нисә тапҡыр төшөмә лә инде, беҙҙең йортҡа килгән дә ишекте шаҡый, үҙе инергә ҡыймай икән тип күрәмсе, өҫтөндә лә һап-һары күлдәк, бит-йөҙө лә еҙ самауыр ише һарғайған, имеш. Ә һин ғүмереңдә лә ялғанлай белмәнең, ҡыҙым, нимә әйтереңде әле күҙҙәреңдән күрәм. Арып киттем, яңғыҙым ғына ҡалайым әле. – Кипкән ирендәрен яланы.

– Бәлки, сәй ҡойорғалыр, әсәй? Рәсимә ҡайҙа йөрөй әле, институттан ҡайтманымы?

– Ҡайтты ла, кейенеп-яһанып, әллә ниндәй кисә була, тип сығып та йүгерҙе. Сәй ҡойоп мәшәҡәтләнмә, яңы ғына, һин ҡайтыр алдынан, эстем сәйҙе. Бер аҙ яңғыҙым ятып торайым.

– Ну, Рәсимә, елғыуар, һикрәндәк, мин уға нимә тинем әле, әйткәнем бер ҡолағынан инә, икенсеһенән сыға.

– Бөтә балалар ҙа бер иш вайымһыҙҙар, һин дә минең өсөн шулар иҫәбендәһең. Бар, тыныслыҡта ҡалдыр, тинем бит.

Әсәһенең ятаҡлап тороуын күреп өйрәнмәгән Мәликә эшенә йүгерергә ашыҡманы. Өҫтөн алмаштырҙы ла, залға сығып, папкаһындағы ҡағыҙҙарға тағы ла бер тапҡыр күҙ йүгертте, ундағы һандарҙы ҡушып-алып иҫәпләй башланы.

Уңарсы хәлһеҙ саҡырыу ишетте:

– Мәликә, ин әле… – Ашығып бүлмәгә ингәйне, әсәһе күҙ ҡарашы менән эргәһендәге ултырғысҡа ымланы. – Ултыр ошонда. Атайымды күрҙем, тип күңелемдең тыныслығын алдың бит әле. Төҫ-башҡа нисегерәк һуң?

– Арыу. Элекке кеүек.

– Мине тынысландырам тип, тағы алданың. Әбейһеҙ ҡарт ҡарауһыҙ бала менән бер була, мөҙөргәндер, бирешкәндер.

– Әлләсе, көн һайын күреп йөрөмәгәс, артыҡ үҙгәреш һиҙмәнем.

– Бына шул-шул, һиңә күпме әйттем, ауылға барғаныңда инеп хәлен белеп сыҡ, тип. Тыңламаның.

– Һуң, ул икенсе әбей менән йәшәй ине лә.

– Йәшәһә һуң. Һин бит уның балаһы. Миңә ярамаһа ла, һиңә килешә. Моғайын да, әбейе бороп сығармаҫ ине әле.

– Үҙең дә беләһең, әсәй, ысынын әйткәндә, уны бер ҙә күргем килеп тормай. Беҙҙе етем итеп бала саҡта уҡ ташлап сығып китһен дә, инде килеп, уны ҡайғыртып йөрөйөммө тағы?

– Бына, ниһайәт, дөрөҫөн әйттең. Ялғанламаның. Һиҙәм, тегендә лә тотош халыҡ алдында шул хәбәрҙе ярып һалғанһыңдыр. Һинең шарҙауай-яндырайлығыңды беләм мин.

Мәликә башын эйҙе.

– Хәҙер әйт, балам. – Башы аҫтындағы яҫтығын төҙәтештерҙе, сал сәстәрен яулығы аҫтына йәшерҙе. – Ҡасан да булһа һеҙҙең алдығыҙҙа атайығыҙҙы әрләгәнем йә кәмһеткәнем булдымы?

– Юҡ…

– Тағы өҫтә: атайың өйҙә тауыш ҡуптарғанда урамға сығып, уны ғәйбәтләп исемен һатып йөрөнөммө? Үҙем үк яуап бирәм: юҡ! Һарай башында ҡунһаҡ ҡундыҡ, күрше-күлән алдында түбәнһенеп, ауыҙҙағы ҡанды яттар алдына төкөрөп йөрөмәнем.

– Ә ул һине, беҙҙе күпме ҡыйырһытты, кәмһетте.

– Бынһына ла яуабым әҙер: тимәк, хата үҙемдә лә булған. Ирҙе ир иткән дә ҡатын, хур иткән дә ул.

– Атайым алдында һинең ғәйебең низә, әсәй?

– Тәңре алдында, атайың алдында выжданым саф, гонаһтарым юҡ, мәгәр ғәйептәрем, боҙоҡһоҙ хилафлыҡтарым һис шикһеҙ булғандыр. Төп етешһеҙлегем – уны етерлек дәрәжәлә тота алмауҙалыр. Әгәр ҙә мәлендә ҡатылыҡ күрһәтеп, ғаиләмдең бәхете өсөн йәнтәслим көрәшһәм, был хәл дә килеп сыҡмаҫ ине. Ә мин, етәктәге быҙау ише, барына күнеп, баш эйеп йәшәнем.

– Барыбер төп ғәйеп атайымда ине бит.

– Кешене бер яҡлы ғына ғәйепләргә ярамай. Хаҡлыҡ өсөн шуны ла өҫтәйем: атайың баштан уҡ икенсе юлдан киткән, аҙашҡан кеше ине, ғүмере буйы үҙенең асылын эҙләп бәргеләнде, ғазапланды… Ары бүлдермәй генә тыңла, сөнки тегендә, йыйылыусыларҙы шаҡ ҡатырып, атайыңа ниндәй ғәйепләүҙәр ташлағаныңды һүҙһеҙ ҙә төшөндөм. Тоҫмаллап, тойомлап шуларға яуап бирергә иҫәбем. Атайыңдың мине, һеҙҙе яратыуы хаҡында әйтмәксемен. Сәйер яңғыраймы? Шулай булһа ла, тыңла һәм аңларға тырыш.

Мин Юлай ағайыңа ауырлы йөрөй инем. Ауырлы ҡатын уныһына-быныһына һайланыусан булып китә бит. Бер көн иртәнсәк, уны аптыратып, хәбәр һалдым: «Мансур, бағыр балығын тотоп ҡарағым килә…» Аңламай аңшайып тора был.

– Ундай балыҡ Һаҡмарҙа юҡ, Маһира.

– Беләм, шуны тотоп ҡарағым килә, алып килеп күрһәт тә кире ебәрерһең…

– Мин бит балыҡсы түгел.

– Ярай инде, күрһәткем килмәй, тиген дә ҡуй! – Турһайып ситкә боролдом.

Ялға ҡаршы юҡҡа сыҡты атайың. Әйтмәй-нитмәй ҡайҙалыр китеп юғалды. Бер тәүлек үтеп, икенсеһенең ярты төнө ауышҡас, ишек һуға был. Асып ебәрһәм, ҡулындағы өс литрлыҡ банкаға теге мең төҫтәре менән йымылдап балҡыған батша балығын һалған атайың тора! Өшөп-туңып бөткән, ни тиһәң дә, ҡырпаҡ ҡар яуған ноябрь урталары ине. Беҙҙән етмеш-һикһән саҡрымдағы Ете Бөгөлдө уратып аҡҡан тау шишмәһе Ерекленән алып ҡайтҡан бағырҙы. Балыҡсы булмай тороп нисек эләктергәндер ул был хәйләкәр, өркәк, йылғыр балыҡты, бер Хоҙай белә…

Шул илаһи мәлде хәтеренән үткәргән әсәһенең йөҙө яҡтырып китте.

– Атайыңдың оҫта бейеүсе икәнлеген белмәйһеңдер ҙә әле. Һеҙ иҫ белгәндә бейемәй ине шул, сөнки бейеү өсөн дә иң әүәл күңелдең дәрте, йөрәктең ашҡыныуы кәрәк. Әгәр ул сәнғәт юлынан китһә, бәлки, икенсерәк яҙмышҡа ла дусар булыр ине. Тәү тапҡыр, ҡыҙ саҡта, уның үҙенән бигерәк бейеүенә ғашиҡ булғайным мин. Бейеүе менән арбай ине һәммәһен, һеңдерә баҫып тыпырлағанында йөрәктәр елкенер, хатта аҫҡаҡ-тупыстар, сыҙамай, урындарында һелкенеп ултырыр ине. Хәтеремдә, Фәрзәнә апайың тыуған көндө йәштәр клубта концерт ҡуйған. Шунда атайыңдың осоп-ҡунып, кис буйы сәхнәнән төшмәй бер үҙе концерт ҡуйыуын әле лә хәтерләп һөйләйҙәр. Ә һуң һинең тыуған көнөңдә, таң һыҙылыр-һыҙылмаҫтан, бер ҡосаҡ муйыл сәскәләрен ҡосаҡлап ҡайтып инеүе!

Һине яратып һөйҙө лә кире ер һөрөргә сығып йүгерҙе. Шунан аҙаҡ атайыңдың һеҙҙе яратмауына кем ышаныр?! Тағы ауылдың етем-еһеренә ҡырҙан ҡороһары тейәп апҡайтып ауҙарыр ине гел генә. Быны уға хужаһы ла, ауыл башлығы ла ҡушмай, үҙ белдеге менән, миһырбанлы йәне ҡушҡанса башҡара. Быйна, атайымдан гонаһһыҙ фәрештә лә яһап ҡуйҙың, тиһеңме, юҡ, улай тип иҫбатларға йыйынмайым, һиндә атайыңдың, минең ҡаныбыҙ аға, шуны ғына әйтмәксемен. Атай-әсәйҙе һайламайҙар, шуны онотма. Ҡәҙерҙәрен һуңлап беләбеҙ шул, улар күҙҙәрен мәңгелеккә йомғас, иҫебеҙгә төшә лә, тик һуң була. Әҙәм балаһының кендеге фанилыҡта ике тапҡыр киҫелә, тыуғас һәм икенсе тапҡыр – ата-әсәһен юғалтҡас. Һуңғы киҫелеү әллә күпмегә фажиғәлерәк, аяныслыраҡ, шуны хәтереңдән сығарма... Был донъяла бер кем дә мәңгелеккә тыумаған, иртәме-һуңмы бөтәбеҙ ҙә әхирәткә юлланабыҙ. Һуңғы үтенесем шул, сөнки эргәбеҙҙә әле һин генә: Юлай ағайың мәрхүм, Фәрзәнә апайың ер аяғы ер башы Алыҫ Көнсығышта, Фәһимә бөгөн сит ил тип иҫәпләнгән Ҡаҙағстанда. Шулай булғас, бөтә ауырлыҡ һинең иңеңә төшә лә инде. Мине ауылға алып ҡайтып ерләрһең, атайыңды ла йәнәшәмә һалырһың...

## 5

Ерләү эштәре менән сабыулағанда беленмәгән икән, яңғыҙы ҡалғас, Мәликә Мансуровнаның балтаһы һыуға төшөп, һеңгәҙәп ҡалды; ҡулына эш бармай, нимәгә тотонһа ла таралып бара төҫлө, өҙлөкһөҙ йөрәге һыҡрап иңрәй. Еңел һөйәкле, етеҙ хәрәкәтле ҡураныс әсәһе янында ҡая таш артындағылай ышыҡ, хәүефһеҙ булған икән дә баһа.

Етеһен уҡытҡан көндө магазинға барып күстәнәстәр һатып алды ла ҡала ситендә урынлашҡан ҡарттар йортона йүнәлде. Ана ул, диуарҙай ҡалҡҡан таш йорттарға берекмәй, етемһерәп бер яҡтараҡ яңғыҙы һерәйгән. Башҡа йорттар алдындағы майҙансыҡтарҙа шат балалар тауышы ишетелеп ҡалып, үткән-һүткәндәр хәрәкәте ниндәйҙер йәнлелек хасил итһә, бында шомло һәм шул уҡ ваҡытта сәйер тынлыҡ. Ҡаҡшап-иҫкергән, «хрущевка» атамаһын йөрөткән өс ҡатлы харабаның бер ишекле подъезына инеүсе-сығыусы күренмәй, рамдары серей башлаған тәҙрәләргә лә ҡалын ҡорғандар тартылған, тимәк, унда йәшәүселәр бер кемде лә көтмәй, булмыштарын өмөтһөҙ нәҫ баҫҡан. Ишек төбөндә аҡ халатлы, мөләйем йөҙлө, урта йәштәрҙәге ҡатын ҡаршы алды:

– Һаумыһығыҙ. Һеҙгә кем кәрәк?

– Мансур Булатов. Ул, моғайын, бында йәшәйҙер.

– Эйе, ярты йыл самаһы инде. Кеме булаһығыҙ?

– Кесе ҡыҙы.

– Саҡырырғамы?

– Юҡ, әлегә кәрәкмәҫ... Әгәр мөмкин булһа, уға ошо күстәнәстәрҙе тапшырығыҙ, зинһар?

– Тапшырам, әлбиттә. – Инеүсенең икеләнеп ҡалыуын күреп, һорай һалды. – Һеҙ тағы ла килерһегеҙ, тип ышанам.

– Килермен. – Үҙ-үҙен ышандырырға теләп, ҡабатланы: – Килермен, тик... һуңғараҡ. Һау булығыҙ.

Ҡатын эйәреп сығып, ул күҙҙән юғалғансы ҡарап, оҙатып ҡалды.

Үтешләй ағастарға күмелгән, парк уртаһында урынлашҡан теге шайтан ҡуласаһы яғына күҙ атты. Дәү ҡояшты хәтерләткән ҡуласа үҙенең әйләнәһенә олоһон-кесеһен, бәхетлеһен-бәхетһеҙен, иманлыһын-иманһыҙын, ҡотлоһон-ҡотһоҙон, шатын-болоҡһоуын бергә туплап, уларҙы бер юғарыға сөйөп, бер түбәнгә төшөрөп яй ғына әйләнә лә әйләнә...



**Сәлмән**
**ЯҠУПОВ**

# ҠУШ ҠАЙЫНДЫҢ БЕРЕҺЕ

## ХИКӘЙӘ

Заманында үҙ тиҫтерҙәрем араһында дан тотҡандарҙың береһе булдым. Юҡ-юҡ, әле һеҙ уйлағанса шаталаҡ, һуғыш суҡмары түгел, ә гармунсы ғына. Өҫтәүенә, йырсы ла. Тальянкамды һуҙып, ауыл көйҙәрен һыҙҙырып ебәрҙемме — бөтә ауыл халҡы ҡапҡа алдына сығып тыңлар ине.

— Э-эй, ошоноң тауышы!.. — тиешер ине ҡатын-ҡыҙ, әбей-һәбей.

— Өҙҙөрә лә һуң!.. — тиешер ине ир-егет, ҡарт-ҡоро, көнләшеп. Ҡайһы бер гармун яфалаусылар араһында үсләшкәндәр ҙә аҙ булманы. Кеме күректе тишкеләп китә, кеме тел төймәләрен шаҡарып-һындырып ташлай... Булды инде. Ҡайҙа байрам, ҡайҙа туй — мин шунда, ҡайҙа уйын, кис ултырыу — мин шунда, һәр ерҙә лә почет елле.

Ул осорҙа миңә ун ике-ун өс йәштәр самаһы ине. Ә гармунда уйнарға нисек өйрәндемме? Быныһы ла хикмәтле. Әле мәктәпкә төшмәгән, моңло гармун тауышына ғашиҡ, ауыҙ-морон һыуын йыя алмай йөрөгән иҫәүән бер малай инем. Бер көндө урам аша ғына йәшәгән күршебеҙ төрлө-төрлө төҫтәге нур һибеп-емелдәп торған гармун күтәреп ҡайтып инде. Шул көндән алып, кис ҡорон, болдорона сығып ултыра ла әллә нәмәләр ҡысҡырта башлай. Көй тиһәң, көйгә оҡшамай. Ҡайһы бер телдәрен, минең көйгән йәнде үсекләгән төҫлө, ҡат-ҡат, ҡат-ҡат баҫып йөҙәтә. „Их, үҙемдеке булһа ине шул гармун! — тип үкенесле хыялланып, һәр кис ҡапҡа алдындағы бүрәнә өҫтөндә тегене тыңлап ултырам. Эргәһенә барып, бер аҙ бысҡылдатып ҡарарға ҡыйыулыҡ етмәй. Ул һиңә тәтәй түгел. Минекеләр ундай гармунды бер ҡасан да алып бирмәйәсәк. Ә күрше — „быса" ғына... Яралы йөрәгемә тоҙ һала...

Бер көн әсәйем Алмабикә апайҙы сәйгә саҡырҙы. Үзбәкстанда йәшәгән

---

*Сәлмән Яҡупов (1951) Мәләүез районының Түбәнге Таш ауылында тыуған. Нөгөш урта мәктәбенән һуң Өфө дәүләт сәнғәт институтын тамамлап, театр һәм кино актеры һөнәренә эйә була. Мәләүез мәҙәниәт йорто директоры, аҙаҡ халыҡ театры режиссеры вазифаларын башҡара. 1990 йылдан мәктәптә уҡытыу эшендә.*

инәйем ҡунаҡҡа ҡайтҡайны. Ҡулъяулығы менән асҡыс тотҡан: өйөн йоҙаҡлап килгән. Өйҙәрендә бер кем дә юҡ, тимәк. Ә гармун — өйҙә! Сәй мәжлесе оҙаҡ була торған. Уларҙың йоҙағы сөй менән дә асыла. Бөтә тәүәккәллекте йыйып, һыпырттым өйҙәренә. Күҙ алдымда йәйғор төҫтәре уйнатҡан гармундан башҡа бер ни ҙә күренмәй. Таҡтанан сөй һурып алып, йоҙаҡты соҡой башланым. Асылып китте был. Хәҙер алда иң ҡурҡыныс, иң ауыр юл ята. Гармундары — төпкө өйҙәренең мөйөшөндәге комод өҫтөндә. Нисек кенә алып сығырға? Бер килгәс — артҡа боролоу юҡ! Ҡараҡлыҡмы был, әллә түгелме? Ҡулдарымды алға һуҙып теге мөйөшкә табан юл тотам һәм нимәгәлер баҫам. „Ғарҡ" итеп ҡалды.

— Кем йөрөй?! — Ҡалын ир тауышы яңғыраны. Күрше! Жыулап китте йөрәк, саҡ-саҡ йығылып китмәнем. Сығып һыпыртырға ишекте күреп булмай. — Кем һин? — Тауыш тағы ла көслөрәк яңғыраны. Ләм-мим. Ҡойолдом да төштөм ҡурҡышымдан. Уның тороп килеүен ишетәм, һәм шул уҡ секундта ҡаты көслө ҡул минең ыштан балағымдан эләктереп тә алды... Тапҡан ҡайҙа ятырға! Бөттө! Бөттө... Был мине хәҙер типкеләп кенә сығарып ебәрә икән...

— Бы-бы... ми-ми-ми...

— Кем?! — Ыштан балағымдан һелкетә тартып ҡуйҙы. Уныһы саҡ төшөп китмәне. — Нимә эшләп йөрөйһөң?

— Ми-ми-ми...

— Ғәфүрме?

— Ыһы!

— Ә-ә, нимә, Алма апайың ебәрҙеме? Мин йоҡлайым. Ике сәғәттән тағы ла көтөүгә. Көтөү көтөүе анһат эш түгел, көнө буйы йүгерергә кәрәк. Бар, шулай тиң.

Минең эскә йылы йүгерҙе. Хатта ҡыйыуланыбыраҡ та киттем шикелле.

— Ә гармунында бер аҙ ғына уйнап торорға буламы? Болдорҙа ғына?

— Юҡ, ҡустым. Минең йоҡом килә. Хәйер, гармун тотҡаның бармы һуң һинең? Ул бит ни тәк просто! Талант кәрәк!

— Ҡунаҡҡа барғанда Нурислам ағайымдың гармунында бер аҙ уйнағайным...

— Һе, уйнағайным!.. Прәме уйнағанһыңдыр инде! Ул һиңә — тоттоң да уйнаның түгел, ҡустым. Ана, мин күпме яфаланам, суртым да килеп сыҡмай.

— Ә-әҙ генә... Ипле генә... — Ныҡышам мин.

— Әгәр ҙә мәгәр хәҙер үк уйнай алһаң — мин уны бөтөнләй һиңә бирәм. Әгәр ҙә мәгәр булдыра алмаһаң — башҡа былай килеп бимазалама! Аңланыңмы? Тураҡлап ташлайым үҙен! Йә, ал, ана, комод өҫтөндә. Бер уянғас... — Һәрмәнеп гармунды таптым да иҙәнгә ултырҙым. Ул шырпы сыйҙы, тәмәкеһен ҡабыҙҙы. Ут яҡтыһында күҙҙәренә иғтибар иттем: юҡ, асыулы түгел һис тә, хатта киреһенсә — уның йөҙөндә ҡыҙыҡһыу төҫмөрләнә ине. Мин, бөтә оҫталығымды һалып, өйрәнә башлаған берҙән-бер көйөмдө, — „Түңәрәк күл"де уйнай башланым... Көй бөткәс, ипле генә тороп, гармунды комод өҫтөнә ҡуйҙым.

— Молодец! Тағы ла ниндәй көй беләһең?

— Ошоно ғына.

— Шулай ҙа — молодец. Молодец! Ә бына минең бер нисек тә килеп сыҡмай. Мунсаға ла барып ҡараным. Юҡ и все! Давай тағы ла уйна! — Мин шатланып тағы ла „Түңәрәк күл“де урай башланым. — Давай, давай! — Оҡшап ҡалды тегегә. Ултыра торғас, мөңрәп ебәрҙе.

— Улай түгел, бына былай бит ул! — Шелтәләп тә ебәрәм. Ул тырышып яңынан мөңрәй башлай. Аҙаҡ үҙем ҡушылам. Шулай ултырған саҡта Алмабикә апай дөбөр-шатыр ҡайтып инде.

— Һин — нимә, ен алмаштырҙымы әллә үҙеңде?! — тине ул, аптырап. Кәрәсин лампаһына ут ҡабыҙып маташа. — Таң һыҙыла башланы бит!

— Бына, әсәһе, Ғәфүр ҡустым менән көй өйрәнәбеҙ.

— Шул ғына етмәгәйне. Тапҡанһығыҙ ваҡыт. Ят. Йоҡла. Серем ит. Һин дә ос өйөңә, әсәйең юғалтып торор. Иртәгә лә көн бар. Марш!

— Во! Ысынлап та! — ти күрше. — Давай, көтөүгә кил. Гармунды алып ҡайт та иртәгә Аралға кил, йәме? Вәт әй, суҡынған малай, нисек оҫта уйнай!

Иртәгәһен әпен-сөпөн генә сәй эстем дә, йәнемдән дә ҡәҙерлерәк гармунды әсәйемдең иҫке яулығына төрөп, саптым Аралға. Мин килгәндә күршем Оло Таш өҫтөндә „Түңәрәк күл“де һыҙғырып көйләп ултыра ине. Мине күргәс, шатланып китте теге.

— Һа-ай, афари-ин! Әллә килә, әллә юҡ, тип кенә уйлап ултыра инем. Давай, иң тәүҙә һин уйна. Ҡарап торормон да уйнап ҡарамын, һин өйрәтеп торорһоң. Батамы?

— Әйҙә һуң. Тик һин иғтибарлы бул!

Уйнайым. Аҙаҡ ул уйнап ҡарай. Юҡ! Юҡ инде! Оҙаҡ ҡына шулай яфаланғас, гармунға һуғып, асыуланып ҡуйҙы.

— Булмағас булмаҫтыр инде, ҡустым. Давай, һин уйна, мин лутсы тыңлап ултырырмын.

Уны йәлләһәм дә, гармундың тәтеүенә шатланып бөтә алмайым. Ул — мал ҡыуа, мин уның артынан йөрөп гармунда уйнайым... Ҡараһам, мал-тыуар, ашауын ташлап, минең янға йыйыла башлаған, аптырашып ҡарап торалар.

Иртәгәһенә түҙмәне күрше.

— Их-ма! Йә, ярар, ҡустым, гармунды үҙеңә ал да уйнай ғына бир. Минән булманы. Әгәр ҙә былай көтһәк, һыйырҙар тамам һөтһөҙ ҡаласаҡ. Ана бит, нишләп торалар! — тине ул, көрһөнөп. — Аҡсаһын берәй ҡасан индереп бирерһегеҙ әле.

Шул көндән яңы дәүер башланды. Көн дә яңы көй өйрәндем. Оҙаҡ та үтмәне, атайым ҡайҙандыр өп-өр яңы тальянка алып ҡайтып бирҙе. Бына бит ул: әле берәү ҙә юҡ ине, хәҙер — бер үҙемә ике гармун!..

***

Унынсы класты тамамлап йөрөгән саҡ. Ауыл йәштәре ниңәлер хәтәр дәртләнеп китте. Матур ғына концерт әҙерләп, ете-һигеҙ саҡрым алыҫлыҡта ятҡан күрше ауылға барҙыҡ. Шунда, үҙ ғүмеремдә тәүге тапҡыр, бер ҡыҙыҡайға ғашиҡ булдым. Йылмайыуҙары, буй-һыны, йөрөштәре, күҙ ҡараштары... Сәхнә ситенә менеп ҡунаҡлаған бер еүеш танауҙан ипле генә итеп тегенең исемен һорашам. Сәлимә икән. Ҡалай матур исем. Концерт башланды. Егет-ҡыҙҙар йырлай, бейей, ә мин шаршау артында гармунда

уйнайым. Ниһайәт, миңә лә сират етте. Алып барыусы шаҙра Хисами:

— Ғәфүр Бәширов башҡарыуында „Зәңгәр күлдәк“, — тип иғлан итһә лә, үҙем сыҡҡас, ҡул сабыуҙарҙы баҫып:

— „Сәлимәкәй“, — тип төҙәттем. — Сәлимәгә бағышлана.

Әлеге еүеш танау сырҡылдап көлөп ебәрҙе. Еңе менән ялтырап торған танау аҫтын һөртөп:

— Сәлимә апай, — һиңә! Әле генә һорашып торҙо! — тип яр һалып ҡысҡырмаһынмы, әй. Гө-өр итеп ҡалды тамаша залы. Күҙ сите менән генә Сәлимәгә ҡарап алам, ул яулығы менән йөҙөн ҡаплаған. Гармунымды һыҙҙырып ебәреүгә зал тынып ҡалды. Йөрәгемде сихырлап өлгөргән шул ҡыҙыҡайға ҡарап, аңлайышһыҙ тәүге хис-тойғоларым даръяһына сумып, йырлап ебәрҙем...

Йыр йырланып бөтөр-бөтмәҫтән аяғүрә тороп ҡул саба башланылар. Дер һелкенеп торҙо зал, йыр оҡшап ҡалды. Ҡат-ҡат сығарып йырлаттылар. Шыбыр тиргә батып бөттөм. Концерттан һуң уйын башланды. Йәштәр араһында Сәлимә күренмәне. Төштә генә күренгәндәй булды ла ҡуйҙы. Гармунымды ҡосаҡлап, таң атҡас ҡына ҡайтып индем. Был хыялыйҙың хыялы хыял ғына булып ҡалған, тип уйлайһығыҙмы? Юҡ шул! Ике ауылдың араһын көн дә тапаным, күрше ауыл малайҙары менән һуғышып, дуҫлашып бөттөм — Сәлимәне бер кемгә лә бирмәнем. Был донъяға беҙ бер йән булып тыуғанбыҙ булып сыҡты. Ул минең хыялымдың иң яҡты бер йондоҙо булды! Сәлимәкәй, Сәлимә...

***

Хеҙмәткә алдылар. Диңгеҙ-океандар гиҙеп, ярты донъяны урап сыҡтым. Шиғыр юлдары менән көн дә хат оҙаттым, һағыныу һәм матур хыялдар гөлләмәләре менән көн дә хат алдым. Ике йыл шулай булды. Ҡапыл хаттар туҡталды. Ғазап башланды. Ай үтте, ике, өс ай... Хат артынан хат яҙҙым, һәм бер көндө сит ҡул менән яҙылған хат килеп төштө. Атаһы яҙған. „Яҙғы ташҡында, һыуҙа бата башлаған малайҙарҙы ҡотҡарған сағында, үҙе фажиғәле һәләк булып ҡуйҙы...“ Йәшен һуҡтымы ни — аҫты өҫкә килде донъямдың. Их, Сәлимәкәй, Сәлимә... Нисек мәрхәмәтһеҙ был донъя! Хәҙер нишләрмен һуң һинһеҙ, һинһеҙ был тормошта нисек кенә итеп йәшәрмен?!

...Ҡара бушлыҡта көн артынан көн уҙҙы. Хеҙмәт срогым тулды. Тағы ла ике йылға тороп ҡалдым, күңел һыҙлауҙары баҫыла төшһөн тинем... Тыуған ауылыма ҡайтып төшкәндә, халыҡ бесәнгә сыҡҡайны. Эштең иң ҡыҙыу осоро. Әйберҙәремде солан артына урынлаштырҙым да, тирә-яҡты бер аҙ күреп ҡайтыу ниәте менән, Таллы тауына менеп киттем. Аҙаҡ күрше ауыл зыяратына юл алдым. Таба алманым Сәлимәмдең ҡәберен. Кисләтеп кенә ҡайтып индем. Мине өй тулы туған-тыумаса ҡаршы алды. Таң һыҙылғансы ултырҙыҡ.

Икенсе көндө, гармунымды алып, Нөгөш буйына сыҡтым. Элек һәр йәй, Өстирәк янында усаҡ яғып, уйын ойоштора торғайныҡ. Бында бөтә тирә-яҡ йәштәре йыйыла. Уйындың дәррәү сағы тура килде. Ике гармун, бер нисә ҡурай көс түгә, түңәрәк эсендә ете-һигеҙләгән пар туҙан туҙҙыра. Уларға ситтән генә бер аҙ ҡарап торҙом да гармунымды һуҙып ебәрҙем...

Онотмағандар әле мине, онотмағандар! Көйгә ҡушылып ҡул сабыуҙар китте, гармун-ҡурайҙар ҡушылды, һәр төрлө ауаздар яңғыраны.

Ах, кемде күрәм... Өнөммө был, әллә төшөммө... Үҙ күҙҙәремә үҙем ышанмайым... Мөғжизә! Ҡыҙҙар араһынан, әкиәт һылыуы булып, Сәлимәм килеп сыҡты ла, оялсан ғына атлап, ҡаршыма килеп баҫты. Һис кенә лә үҙгәрмәгән... Хатта тағы ла һылыуланып киткән. Шул уҡ ҡыйғас ҡаштар, шул уҡ оҙон толомдар, муйылдай ҡара күҙҙәр... Телһеҙ ҡалдым...

— Сәлимәкәй?..

— Һеҙ... һеҙ Ғәфүр ағаймы?

— Бәй! Мин, әлбиттә!

Ә ниңә шулай һорай ул? Әллә, хат яҙған булып, мине хөкөм итәме?

— Мин бит, мин! — Гармунымды атып бәреп, үҙен күтәреп алып өйрөлткөм, бөтә донъяға оран һалып ҡысҡырғым килде, ләкин быуындар ҡатты, күҙ алдары ҡараңғыланды, йөрәк хәлһеҙләнде...

— Мин — Ғәлимә. Сәлимәнең һылыуы!

Ғәлимә? Һылыуы? Тимәк... Бер секунд эсендә кисергән ғазаптарым яңынан терелде... Ни өсөн, ни өсөн пәйҙә булдың һин, Ғәлимә, мәңге уңалмаҫ яраларымды әйләндереп?! Ҡуш ҡайындың береһенә оҡшатҡаным бар ҙаһа үҙен.

— Ә мин һеҙҙе яҡшы хәтерләйем. Элек һәр кис һайын гармун уйнап, йырлап, беҙҙең өй алдынан үтә торғайнығыҙ. Ә Сәлимә апайым илай торғайны... — Ул бороллдо ла, йәштәр төркөмөн йырып, илай-илай, яр буйлап йүгереп китеп барҙы. Ҡараңғылыҡҡа сумды.

— Ғәлимә... Ғәлимә, тим... Туҡтасы!

Ул көндө Ғәлимәне, йыуата-йыуата, ауылдарына, өйҙәренә ҡәҙәр оҙата килдем.

— Ул бит һеҙ тип хыялланып, һаташып бөтә ине. Бәхете ҡыҫҡа ғүмерле булды. Ә мин, иҫәүән, ул саҡта унан көнләшә торғайным һеҙҙе. Гармун тауышын ишетһәм, шундуҡ апайым күҙ алдыма килеп баҫа.

— Минең дә!

Ул тағы ла илай. Әрнеп, буҫығып илай.

— Ғәлимә... Ғәлимә, тим... Йә, ярай, етер инде! Нишләмәк кәрәк хәҙер! — Күңелдән үҙем дә үкһейем. Тик йыуатыр кеше юҡ. Ҡапҡа алдарында һөйләшеп оҙаҡ ултырҙыҡ. Таң һыҙылғансы. Ауыл осон сыҡҡансы ул ҡарап тороп ҡалды.

Аҙна самаһы ял итеп, иректә күңел йөҙҙөргәс, әле яңыраҡ ҡына башлаған Нөгөш һыуһаҡлағысы төҙөлөшөнә эшкә урынлашырға барҙым. Алдылар. Шатлығымдан осоп-ҡунып ҡайтып килгәндә, Таш күпер янында, көтмәгәндә, Ғәлимәне осраттым.

— Бә-әй, бында нисек килеп сыҡтың?

— Ике туған апайым төҙөлөштә эшләй. Анауындағы вагончикта йәшәйҙәр. Бына, күрергә тип килдем дә... йөрөйөм әле... Ә һеҙ?

— Ә мин эшкә урынлашып ҡайтып киләм. Бында оҙаҡламай ҙур төҙөлөш башланасаҡ. Ана тегендә йорттар төҙөйәсәктәр, ике тау араһында бейек плотина буласаҡ, һәм ошо төпкөл киләсәктә оло шау-шыуға күмеләсәк. Ҡайнап торасаҡ бында тормош! Күҙ алдыңа килтерә алаһыңмы?

— Әлегә юҡ әле. Ә шулай ҙа... мин мөғжизәгә ышанам. — Ғәлимә, толом остарын бармаҡтары менән уйнатып, керпектәрен аҫҡа сәнсте.

— Томра бөгөн. Түҙер әмәл юҡ. Хәҙер бына һыу ҡойоноп алғанда...

— Улайһа, Нөгөшкә төшәйек. Ана ғына ята бит.

— Ысынлап та.

— Йә, кемәлү-үк?! — Яулығын болғай-болғай, шаяра-көлә минән алда Нөгөшкә табан йүгерә ул. Сисенеп һыуға сумам, һыу шундай йылы, тап-таҙа, шундай рәхәт.

— Әйҙә һин дә.

— Хәҙер мин һыуҙан ҡурҡам. Ошонда ғына көтөп ултырырмын, йәме?

— Һин бит яңғыҙ түгел. Эргәндә мин бар.

Ул баш сайҡай. Мин һыуға сумам. Бер аҙ йөҙөп күңел булғас, уның янына сығып, ҡырсынға ятам. Эҫе ҡырсынташ тәнде өтә, утлы табамы ни! Ғәлимә өндәшмәй генә һыуға ҡарап ултырҙы ла, яулығын алып, арҡамдағы һыу бөрсөктәрен һөртә башланы.

— Ғәфүр?

— Эйе? — Ғәлимәнең тәүге тапҡыр яҡын күреп өндәшкән һүҙе булды ул. — Һин нисек уйлайһың, мине эшкә алырҙармы икән? Мәктәпте тамамланым. Аттестат ҡулда. Тик һөнәрем генә юҡ.

— Бер һүҙһеҙ! — Ырғып тороп ултырам мин. — Маладис! Һин бит фәрештә йәнле кеше. Апайың шикелле!.. Эх, Сәлимәкәй, Сәлимә...

— Ғәфүр ағай!.. — Шундуҡ дерелдәп ирендәре яуырыныма ҡағыла, ҡайнар усы ауыҙымды ҡаплай, ҡайнар тамсылар өтөп ала...

— Апайыңды мин бер ҡасан да онота алмаясаҡмын, Ғәлимә. Ул — минең хыял йондоҙом! Уға тик үрелеп тә, ҡағылып та булмай. Ул алыҫ, ләкин яҡты!..

Ғәлимә ҡайнар ҡулдары менән минең еүеш сәстәремдән һыйпай, сеңләгән тауышы ҡолағымда боҙолған гармун моңдарын хәтерләтә... Өҙөлгән гармун моңдарын... Мин уның усына битемде ҡаплайым, ирендәремде тейҙерәм, күҙҙәремде йомам.

— Ғәфүр! Ғәфүр ағай!.. Ғәфүр, тим!..

Ошо тауыш мине үҙ наҙы, үҙ барлығы менән бөгөнгәсә оҙата йөрөнө. Ҡырҡ биш йыл буйы бәлә-ҡазанан һаҡлап килде. Фәрештә тауышы шикелле һигеҙ бала үҫте. Һәр кем үҙ яҙмышы, үҙ бәхете менән таралышты. Ҡоштар ояһы үҙ дәүерен кисерҙе.

...Моңһоуланып киткән саҡтарымда, тальянкамды алып, болдорға сығып ултырам. Оҙон ғүмерҙәргә һуҙылып, өҙөлөп ҡалған „Сәлимәкәй“ көйөн уйнайым. Артымда Ғәлимәмдең йән-һулышын тоям. Пеләшләнә башлаған башымдан һыйпай, аҙаҡ ҡайнар ирендәре менән ҡағыла, ҡайнар күҙ йәштәре өтөп ала... Мин уның усына битемде ҡуям, ирендәремде тейҙерәм, күҙҙәремде йомам. Тап йәш саҡтағыса. Ҡолағыма ҡасандыр элекке күршем бүләк иткән гармун тауышы ишетелә... Күҙҙәремде асам. Ғәлимәм мунса яғына ишаралап эйәк ҡаға. Унда минең иң бәләкәс ейәнем ҡасандыр көтөүсе бүләк иткән гармунда, бар донъяһын онотоп, „Сәлимәкәй“ көйөн уйнап маташа...

**Радик**
**ӘХМӘТОВ**

# ЭЙ, АҒЫЛА БОЛОТ...

## Роман*

Бер аҙна ял итте Фаил. Йорт тирәһендә ҡышҡы һил осор булғанлыҡтан, бауыр эш юҡ ине. Бер аҙ утын ярҙы, районға барып, хәрби иҫәпкә баҫып ҡайтты. Аҙаҡ эш һорап колхоз идараһына юл тотто. Хужалыҡ рәйесе Венер Ниғмәтуллович, ашығып ҡайҙалыр китергә йөрөгән еренән, Фаилды танып иҫәнләште лә бүлмәһенә алып инеп китте. Шунда уҡ телефон трубкаһын ҡулына алып: «Рәсил Рифҡәтович, был мин, Ғирфанов, – тип һөйләшә башланы. – Һин аҙ ғына көт, берәй сәғәттән килеп етермен. Ашығыс эш килеп сыҡты. Ниндәй эш, тип, Өфөнән иптәштәр килеп төштө. Әйттем бит, барырмын, тип. Һөйләштек. Йә, ярай, көт!»

– Ҡалай үҫеп, таҙарып киткәнһең, һалдат бутҡаһын юҡҡа ғына ашамағанһың, – тине рәйес, Фаилға ҡарап.

– Уны ашай ҙа белергә кәрәк, Венер Ниғмәтуллович, кемгә нисек бит...

– Уныһы дөрөҫ. Һинең иҫән-һау ҡайтыуыңа шатмын. Бик яҡшы ғаилә ҡороп ебәргәнһең. Ҡотлайым. Нәзирә беҙҙең ауылға килеп эшләй башлағас, клуб та йәнләнә төштө. Драмкружок асып ебәрҙе, йыр-бейеү ансамбле ныҒынып килә. Теге йылдарҙы ауыл йәштәрен клубҡа ҡыуып керетеп булмай ине, хәҙер ҡарты-йәше лә әүәҫ йөрөй. Хатта ҡарсыҡ-ҡорсоҡтар Нәзирәнән спектаклдә ҡатнашыу өсөн роль һорап йөҙәтә икән. Ҡатыныңа рәхмәт, эше яҡшы. Һүҙен йыҡҡан юҡ, булдыра алғанса ярҙам ҡулы һуҙабыҙ. Бына яңыраҡ ҡына бер гармошка, милли кейемдәр алып бирҙек. Йә, хәҙер һине тыңлайым, алда ниндәй пландар? Ауылда ҡалырғамы, әллә...

– Эйе, иҫәп – ауылда ҡалыу, Венер Ниғмәтуллович. Атайымдың йорто иркен, һыйырбыҙ, тип уйлайым. Ныҡлап аяҡҡа баҫып киткәс, берәй йорт һалып инергә булыр. Ситтә күп йөрөнөм, туйҙырҙы.

– Дөрөҫ әйтәһең, Фаил. Ситтә йөрөүҙең заманаһы, ҡыҙығы үткән инде.

– Мин һеҙгә эш һорап килдем. Бер аҙна ял иттем, етте. Дүрт йыл төрлө баранка әйләндерергә тура килде, армияла дивизион командирын да йөрөттөм. Берәй машинаға ултырта алмаҫһығыҙмы, тигәйнем.

---

*Аҙағы. Башы 11-се һанда.

– Пәнәтне! Бөгөн генә һине ултыртырҙай машина юҡ, Фаил. Бәлки, бүтән берәй эшкә? Бер шулай Ниғмәт ағай менән районда ҡайтып киләбеҙ ҙә, ул бик әсенеп һинең тарихыңды һөйләп бирҙе. Дипломын яҡларға өс ай ҡалғас, осраҡлы хәл сығып...

– Булды ундай хәл. Иҫкә төшөргө лә килмәй.

– Бәлки, Фаил, малсылыҡҡа эшкә барырһың? Иртәгәнән мал врачы итеп ҡуйыр инем йә фермаға мөдир итеп...

– Ауыр һорау, Венер Ниғмәтуллович. Һүҙ юҡ, был вазифаларҙы башҡара алыр инем. Әлбиттә, күп нәмә онотолған, ләкин...

– Әллә тәүәккәлләй ҙә ҡуябыҙмы?

– Дөрөҫөн әйткәндә, Венер Ниғмәтуллович, малсылыҡҡа күңелем ятмай минең. Мин техника яратам. Бәләкәйҙән шофер булырға хыялландым, тик атайым техникумға өгөтләне. Берәй техника менән бәйле эш юҡмы?

– Бар инде ул, Фаил, нисек булмаһын. Электрик, МТМ-ға слесарь, токарь кәрәк.

– Слесарь тиһегеҙме? Машина-трактор ремонтлау буйынсамы?

– Ул ғына түгел, сәсеү агрегаттарын да яҙғылыҡҡа әҙерләү күҙҙә тотола.

– Аңланым. Алығыҙ слесарь итеп.

– Алам, әлбиттә. Иртән ғариза яҙырһың, документтарың да булһын, унан завгарҙы күреп һөйләшерһегеҙ, ул аңлатыр ҡалғанын.

Киске аштан һуң Ниғмәт ағай менән Фаил араһында ҡыҫҡа ғына һөйләшеү булып алды.

– Улым, ҡаршы килмәһәң, ултырып бер аҙ серләшәйек әле. Һинең ҡайтҡаныңды көс-хәл менән көтөп алдыҡ. Әле күргән кеүек тә булманыҡ. Үҙеңә тейешле отпускыңды ял итеп бөтөрөргә ине. Ә һин колхоз рәйесенә эш һорап барғанһың.

– Эйе, атай, барҙым шул. Йәй осоро булһа – бер хәл. Ҡыш уртаһы, йорт тирәһендә әллә ни эш юҡ. Нәзирәнең ата-әсәһе, туғандары менән дә күрештек. Өйҙә ҡаңғырып ятҡансы тинем дә...

– Венер нисек ҡаршыланы?

– Асыҡ йөҙ менән. Ҡайҙалыр китергә ашығып йөрөй ине, мине таныгас, туҡталып торҙо. Бүлмәһендә оҙаҡ ҡына һөйләшеп ултырҙыҡ. Мал врачы урыны бар, ферма мөдире итеп тә ҡуйырға була, тигәйне.

– Һуң?

– Малсылыҡ тармағына бармайым, тинем.

– Ниңә инде, ҡулымдан килмәҫ, тип ҡурҡтыңмы?

– Ҡурҡҡан юҡ та, атай. Беренсенән, ҡулда дипломым юҡ, икенсенән, уҡығандар онотолған. Техникумдан ҡыуылғас, малсылыҡҡа эшкә бармам, тигәйнем. Атай, һин ғүмерең буйы мине ветеринар итәргә хыялландың, тик барып сыҡманы. Хоҙайҙан яҙмағандыр инде. Күрәһең бит, мин техника, машина тип янам. Шулай булғас, ниңә гел генә бер балыҡ башын кимерергә...

– Яҡшы. Башҡаса был турала һүҙ ҡуҙғатыу юҡ. Һине өйрәтеп, әйтеп торған өҫтөнән, һаман үҙеңдекен ҡайыраһың. Еңмеш малай...

– Шулай кәрәк, атай! Насар сифаттыр шул?

– Хәҙер нимә эшләмәк итәһең? Минең белеүемсә, хужалыҡта эйәһеҙ машиналар юҡ.

– Булмаһа, берәй ҡасан яңыһы ҡайтыр. Иртәгәнән МТМ-ға слесарь булып барам. Аҙаҡ күҙ күрер. Һин борсолма, атай, барыһы ла һәйбәт булыр.

Фаилдың ҡарарына Нәзирәһе лә ҡаршы килмәне:

– Һиңә эшләргә, һин ғаилә башлығы, үҙең беләһең, – тип кенә ҡуйҙы.

МТМ-нан Фаил майға, мазутҡа ҡатып, бысранып ҡайтһа ла, эшенән ҡәнәғәт булды. Ҡыйратылып, һүтелеп, эшләмәҫ хәлгә килгән агрегаттарҙы, трактор-машиналарҙы йүнәтеп, кәрәкле детален алмаштырып, йән керетеп ебәрһә, эшенән ҡәнәғәт була. Ләззәте һуң?! Ураҡҡа төшөр алдынан Фаилды колхоз механигы итеп үрләттеләр. Өйҙәге яҡындары, бер яҡтан, ҡыуанһа, икенсе яҡтан, көйөндө. Сөнки ул көнөн төнгә ялғап эшләне. Йортҡа инеп, дүрт-биш сәғәткә башын мендәргә һалып тора ла яңынан баҫыуға, комбайндар эргәһенә ашыға. Ураҡ оҫта ойоштороғанды, ныҡышмал булыуҙы талап итә шул.

Механик вазифаһын Фаил дүрт йыл арыу-талыу белмәй тартты, ен һымаҡ эшләне. Ғаиләһендә лә үҙгәрешһеҙ ҡалманы: икенсе бала булып ҡыҙҙары Әлфиә донъяға килде. Ошолай йылдар бер-береһен алмаштырған арала ситтән тороп Бәләбәй техникумының механика бүлегенә уҡырға инде. Ә алда уны тағы ла әллә күпме үҙгәрештәр, төрлө һынауҙар көтә ине.

Шулай бер көндө райондың партия комитетына саҡырттылар.

– Иптәш Кәримов, – тип рәсми телдә башланы һүҙен беренсе секретарҙың ярҙамсыһы Әнүәр Хәсәнович, – беҙҙең «первый» һине саҡыртты, үҙ исеменән һөйләшергә ҡушып, обкомға китте. Һиңә беҙҙең районда бик етди белгес тип ҡарайҙар, йәш булыуыңа ҡарамаҫтан, яҡшы механикһың. Эш шунда: райком гаражына һәйбәт механик кәрәк. Иптәштәр менән уйлаштыҡ та һинең кандидатураңда туҡталырға булдыҡ. Партия ағзаһы буларaҡ, беләһең: бында баш тартып, ҡаршылашып тороу ҡаралмаған. Әйтелгән икән – эшләнергә тейеш. Бөгөн – ун етенсе октябрь, ә егермеһе райком гаражында механик вазифаһын үтәй башлайһың. Һорауҙар бармы?

– Һорауҙар күп, Әнүәр Хәсәнович. Колхоз, беҙҙең персидәтель ебәрерме? Ғаилә нимә әйтер.

– Э-э-э, исемең кем әле, ә-ә, Фаил ҡусты: мин һиңә әйтәм, юҡҡа башыңды ватма, уныһы һинең эш түгел. Һинеке ана – туғандарың, ғаиләң менән һөйләшеү, бер-ике көндә бөтә эшеңде теүәлләп, тапшырып ҡуйыу. Ун туғыҙы килеп, ятаҡтан урын алырһың. Һуңғараҡ ғаиләңде күсерербеҙ, иң мөһиме – ҡурҡма! Кем дә шулай башлай, шулай үрләй, үҫә. Һин булдыра алмаҫлыҡ эш барҙыр шул. Киләсәк тураһында уйларға кәрәк, ҡусты, балаларың тураһында. Һөйләштек, мә «биште»! Булды! Һау бул!

«Бына һиңә, әбекәй, Юрьев көн!» Ҡайҙа һәм кем ауыҙынан ишетте һуң әле Фаил был әйтемде? Әллә тарих биттәрендә уҡынымы? Хәйер, барыбер түгелдер шул. Нимә эшләп райком баҫҡысынан төшөп барғанда иҫенә төштө һуң был «Юрьев көн»? Әгәр ҙә киҫкен, бығаса уйланылмаған тәҡдимдәр яһалып, тормошта ҙур үҙгәрештәр көтөлә икән, ошо әйтемде иҫкә төшөрөүсәндәр. Бик ябай ғына әйткәндә, «тот ҡапсығыңды » тигәнде аңлата.

Ауылға ҡайтып барышлай төрлө шикләнеүҙәр тыуҙы Фаилдың башында. Ғаиләһе янына инеп тә тормай, матайын тура колхоз идараһына борҙо. Венер Ниғмәтуллович үҙенең бүлмәһендә баш бухгалтер менән отчет ҡағыҙҙарын йәйеп һалып, финанс мәсьәләләрен тикшереп ултыралар ине.

– Ә, Фаил, ин әйҙә, ултыр. Дөрөҫ булһа, һине райкомға саҡыртҡандар икән.

– Эйе. Мин районға киткәндә һеҙ юҡ инегеҙ. Бына әле шунан ҡайтып төшөүем.

– Йә, йә, тыңлайым.

– Әнүәр Хәсәнович, райком гаражына механик булып эшкә киләһең, тине. Беренсе секретарь Миңнияр Сәғитович Өфөгә киткән, ҡайтҡас та һеҙҙең менән элемтәгә сығырға тейеш икән...

Шул саҡ өҫтәлдәге телефон шылтыраны.

– Тыңлайым. Эйе, Миңнияр Сәғитович, – тип яуапланы рәйес. – Эйе. Беләм. Кәримов әле миндә ултыра. Һөйләне, һөйләне. Яҡшы. Ярай. Эшләрбеҙ, Миңнияр Сәғитович! Ебәрәһе килмәй ҙә һуң, һеҙ бойорғас... Эйе, эйе. Аңланым. Һәйбәт. Бесәнгә төштөк. Ярарлыҡ. Төрлөсә. Шулай тинеләрме? Миндә лә шик бар ине шул. Ярай. Ваҡытында эшләрбеҙ. Әлегә бар. Кем белә? Ярай, һау булығыҙ. – Башлыҡ трубканы һалды ла Кәримовҡа боролдо: – Бына шулай, Фаил ҡусты. Аңлағанһыңдыр, сам шылтыратты. Һине колхоздан ебәрәһе килмәй ҙә, ә мәжбүрмен. Һин дә, мин дә партия ҡайҙа ҡуша – шунда... Иртәгәнән эштәреңде Зиннур ағайыңа тапшыр, теге беренсе бригадалағы помпотехҡа. Баш инженер урынына ҡуйырға йөрөй инем үҙеңде. Һәр кем үҙенә яҙылған яҙмышын үҙе күтәрергә тейеш. Онотма. Әле ғаиләң бында ҡалалыр бит? Ярай, һиңә уңыштар теләйем.

Фаил ата-әсәһе йортона бик һуң ҡайтты. Ғүмер буйы һаҡланып килгән йолаға ҡаршы килеп буламы һуң? МТМ-ла бергә эшләгән егеттәрҙе, үҙе хөрмәт иткән иптәштәрен һыйламай-бәхилләмәй китә алмай ине. Һәр ваҡыттағыса, төрлө көләмәстәр, анекдоттар һөйләнелде. Берҙе Фаил һөйләп ташланы: «Бер малайҙан: «Атайың ҡайҙа эшләй?» – тип һорайҙар икән. «Райкомда», – тип яуап ҡайтарған. «О-о-о – тиҙәр икән тегеләре, һоҡланып. – Кем булып?» «Конюх», – тигән хәйләһеҙ малай. «Һи-и-и», – тип күңелдәре ҡайтҡан һораусыларҙың.

– Бәй, һин дә конюх та баһа райкомда, – тиеште дуҫтары, көлөшө-көлөшә,– тик һин тимер аттар ҡараусы.

«Фаилды районға, райкомға күсерәләр» тигән хәбәр уның үҙенән алда йөрөй булып сыҡты. Ишекте асып ингәс тә, Ринат улы:

– Атай, райкумда һиңә машина бирәләрме? – тигән һорау менән ҡаршыланы.

– Улым, берәү түгел, биш машинам буласаҡ.

– Районға китереңде беҙгә ҡайтып та әйтмәйһең, ә бөтә ауыл ауыҙында тик ошо яңылыҡ, – тип үпкә белдерҙе Нәзирә.

– Ваҡыт булдылыр шул? Тәүҙә – Венер Ниғмәтулловичта, аҙаҡ эште Зиннур ағайға тапшырып йөрөнөм. Унан һуң егеттәрҙе лә һыйламай булмай ине.

Миңнеямал апай ҙа улының был ҡарарын хуплап барманы, шелтә ҡатыш:

– Тимәк, беҙҙе ташлайһың инде? Баш тартып булмай инеме ни? – тине.

– Әсәй, аңла мине! Бер нисек тә ҡарышып булмай. Унда әйттеләр икән – бөттө. Миңнияр Сәғитович үҙе Венер Ниғмәтулловичҡа шылтыратты, эшен тапшырһын, егермеһенә эшкә килһен, тине.

– Ә беҙ? Беҙҙең турала уйланыңмы? Әллә был һорау ҡыҙыҡһындырмаймы? – тип һораны ҡатыны иламһыраған тауыш менән.

– Һин, Нәзирәкәйем, нимә һөйләйһең? Ҡайҙан уйлап сығарҙың булмағанды? Ғаиләңде бер аҙҙан күсерербеҙ, тинеләр, әлегә ятаҡтан урын бирәләр. Көн дә булмаһа ла, аҙнаһына бер-ике тапҡыр ҡайтырға тырышырмын. Партияға инмәгән булһам... – Өйҙәгеләрҙән тик Ниғмәт ағай ғына ҡыуанысын йәшерә алмай, йөҙө йылмайыуҙан туҡтамай ине.

– Дөрөҫ, улым. Үҫер кәрәк, үҫер. Райком тиклем райкомда механикһың. Маладис! Әсәйең хафалана, тик бел, Фаил, ул да ғорурлана. Һинең олпат кеше булырыңа һәр саҡ ышана инем.

Егермеһе көндө иртәнге һигеҙҙә Фаилды райкомдың беренсе секретары Миңнияр Сәғитовичтың бүлмәһенә саҡыртып алдылар. Был иркен, матур итеп йыһазландырылған кабинетта партияға алынғанда бюро ағзалары алдында баҫып торҙо ул. Әле лә, тупһанан атлап ингәндә, ҙур тулҡынланыу кисерҙе .

– Әйҙәгеҙ, ултырығыҙ,– тип йомшаҡ ҡына йылмайҙы Миңнияр Сәғитович.

– Бына ошо инде беҙҙең йәш механик,– тине ярҙамсыһы Әнүәр Хәсәнович.

– Әллә мин был белгесте белмәй тиһегеҙме, фамилияһын ғына түгел, исеме менән әйтеп бирә алам. Яңылышмаһам, Кәримов Фаил, ә атаһы Ниғмәт ағай менән беҙ күптәнге таныштар. Һеҙгә, Фаил Ниғмәтович, мәғлүм булһын, райком менән исполком гараждары йәнәш һалынған. Әлегәсә беҙ механик тотманыҡ, ләкин, машиналар һаны артҡанын иҫәпкә алып, механик вазифаһын булдырырға ҡарар иттек. Транспорттың йөрөшө, төҙөклөгө бөгөнгө талаптарға ярашлы булһын тиһәң – улар ышаныслы булырға тейеш. Мәсьәләнең икенсе яғы ла бар: еңел машиналарҙың бер өлөшө иҫкерҙе, йөрөү ресурстары көндән-көн кәмей. Шуға беҙ иптәштәр менән уйлаштыҡ та һеҙҙе бында саҡырырға булдыҡ.

Һеҙҙән, Фаил Ниғмәтович, һәр етәксегә беркетелгән еңел машинаның төҙөк булыуын, гараждан ваҡытында сығарылыуын, хәрәкәт хәүефһеҙлеген тәьмин итеү, шоферҙарҙың оҫталығын камиллаштырыу өҫтөндә эшләү талап ителә. Хәйер, һеҙҙе өйрәтеп тороуҙың кәрәге лә юҡтыр. Әнүәр Хәсәнович һеҙҙе хужалыҡ менән таныштырыр, водителдәр менән һөйләшегеҙ. Уңыш теләйем. Һорауҙарығыҙ булһа, инегеҙ, минең ишек һәр ваҡыт асыҡ.

Яңы эш, таныш булмаған коллективҡа барып инеү, аралашып китеү, үҙеңде таныттырыу бер кемгә лә еңел бирелмәйҙер. Шуныһы ла билдәле: райком шоферҙары үҙҙәрен өҫтөнөрәк ҡуйыусан. Тәү мәлдә аралашыу, һөйләшеү ҙә әллә ни булманы, тегеләр яғынан бер төрлө һағайыу, ситләшеү көслө ине. Тора-бара аралары күҙгә күренеп яҡынайҙы. Егеттәр менән уртаҡ тел табыу өсөн Фаилға психолог та булырға тура килде: һәр береһенең характерын өйрәнеү, эшкә ҡарата дөрөҫ мөнәсәбәт булдырыу...

Баштараҡ, эшләй башлағандың беренсе аҙналарында, Фаил шоферҙарының эштән ҡалып, гараж эсендә йыйылып эскәндәрен күрмәне. Һәр хәлдә, уға күрһәтмәй, белдермәй эсә торған булғандарҙыр, кем белә? Һуңғараҡ Рәлиф исемлеһе: «Механик, беҙҙең менән берәй йөҙ грамм ебәрәһеңме?» – тигән тәҡдим яһаны. Бик ҡыйын мәсьәлә ине был Фаил өсөн. Ҡатышмаһаң да ярамай – үҙ итмәйәсәктәр, ситкә этәрәсәктәр. Бер ҡушылдыниһәң – гел генә бергә эсергә тура киләсәк. Тәү тапҡырға ризалашты. Эскәндең һуңында береһе: «Механик, ҡасан һинең должносыңды йыуабыҙ?» – тип ысҡындырҙы. Икенсе көндө Фаилға, бер литр араҡы алып, егеттәрҙе һыйларға тура килде. Ләкин ул яҡшы белә: эскәндәге аралашыу һинең абруйыңды күтәрмәй, үҙ-ара яҡынайыу өсөн ҡыҫҡа ғына бер аҙымдыр ул...

Ысын абруйҙы бары эш, белем менән нығытыу кәрәклеген Фаил һәйбәт аңлай ине. Механик булараҡ, үҙен эре тотманы, гараж ҡапҡаһынан ғына бойороп, ҡысҡырынып та йөрөмәне. Ремонт эштәрендә һәр ваҡыт ҡатнашты, шоферҙарға ярҙам итте. Кәрәк саҡта ең һыҙғанып машина аҫтына сумғыланы. Беренсе көндәрҙә шоферҙарҙың Фаилдан көлөп, шаяртып алған саҡтары ла булғыланы. Машинаның берәй ерен һүтеп, урынына икенсе, эшкинмәгәнде ҡуялар ҙа ярҙам итеүен һорайҙар. Тора-бара механикты бер нисек тә алдатып булмаясағына, белеме төплө икәненә, ҙур практикаға эйәлегенә төшөнгәс, шаяртыуҙары үҙенәнүҙе бөттө. Гараж эсендәге бер төпкөлдә оҙаҡ йылдар йөрөтөлмәгән, шаҡтай

таушалған ГАЗ-69 машинаһы тора ине. Бушыраҡ ваҡыттарында Фаил уны һүтеп, ҡайһы бер деталдәрен алыштырып, яңынан йыйҙы. Буяп та ебәргәс, танымаҫлыҡ булды был һигеҙ урынлы еңел машина. Биш йыл буйы Фаил рулдә үҙе йөрөнө: ҡайҙа ғына барманы, нимә генә ташыманы, тик бер ҡасан да юлда ватылып, яңғыҙы тороп ҡалманы. Иркәләп, үҙенсә яратып, уға «Колымага» тип исем дә ҡушты.

Район үҙәгенә килеп өс ай эшләгәндән һуң, уға яңы һалынып бөткән йорттан ике бүлмәле фатир бирҙеләр.

Нәзирә район мәҙәниәт йортона методист булып эшкә урынлашты. Драмтүңәрәк ойоштороп ебәрҙе, Фаилды ла ылыҡтырҙы. Бергәләшеп тирә-яҡ ауылҡалаларҙа спектаклдәр ҡуйып йөрөнөләр. Дүрт йыл үтеүгә, был коллектив «халыҡ театры» тигән юғары исемгә лайыҡлы булды.

Әлбиттә, Фаил спектаклдәрҙә уйнау менән генә сикләнмәне – сәхнәгә сығып йырлағанын халыҡ ҡул сабып, алҡышлап көтөп ала ине. Йыр-моң бәйгеһендә хатта лауреат исемен яуланы. Шул йылдарҙа ауыл хужалығы институтының механизация факультетын ҡыҙыл дипломға тамамланы.

* * *

Райкомдың беренсе секретары Миңнияр Сәғитовичты һуңғы ете йыл буйы Илдус исемле шофер йөрөттө. Олпат кәүҙәле, ҡырҡ биш йәштәрҙәге ир ине ул. Һүҙгә һаран булды, шуға үҙенә «Немой» тигән ҡушамат таҡтылар. Уның һөйләме күп тигәндә ике-өс һүҙҙән тора. Баштараҡ Миңнияр Сәғитовичҡа шоферының аҙ һүҙле булыуы сәйер тойолһа ла, йөрөй-йөрөй күнде. Уның ҡарауы, юлда юҡ-бар һүҙ менән аптыратмай, уйларға ҡамасауламай, машинаһы һәр саҡ әҙер. Машинаһына биргән иғтибарҙы ул хәләл ҡатынына ла биреп еткермәгәндер... Маҡтаулы ғына эшләп йөрөгәнендә Илдус көтмәгәндә ҡаты ауырып китте. Хужаһы менән Өфөнән урап ҡайтып, машинаһын урынына ҡуйып та бөттө – гараж ишеген асҡан еренән ҡапыл һушын юғалтып, таш иҙәнгә ҡоланы. «Тиҙ ярҙам» менән Илдусты дауаханаға илттеләр. Баш мейеһенә ҡан һауған... Ә иртәнге еттеләрҙә Фаилды Миңнияр Сәғитович бүлмәһенә саҡырҙылар.

– Фаил Ниғмәтович, ишеткәйнегеҙме, минең шоферҙы больницаға һалғандар. Киске туғыҙ тирәһендә баш врач шылтыратты.

– Ишеткәйнем, Миңнияр Сәғитович. Нисек, диагноз ҡуйғандармы?

– Хәлдәр шәптән түгел, Фаил Ниғмәтович, ярты кәүҙәһен паралич һуҡҡан. Инсульт ...

– Үтә мәкерле сир, уны тиҙ генә еңерем тимә.

– Инсульт нимәнән барлыҡҡа килә ул? Нимә сәбәпсе була?

– Беренсенән, юғары ҡан баҫымы, икенсенән, атеросклероз – ҡан тамырҙарының тығылыуы һөҙөмтәһендә лә булырға мөмкин.

– Ғәжәп, медицина өлкәһендә белемегеҙ докторҙыҡынан кәм түгел... Сер булмаһа, ҡайҙан беләһегеҙ быларҙы?

– Сер юҡ, Миңнияр Сәғитович. Ҡасандыр, ветеринария техникумында уҡып йөрөнөм, шунан иҫтә ҡалған...

– Тимәк, һеҙҙең ветеринар һөнәрегеҙ ҙә бар?

– Ҡыҙғаныսҡа ҡаршы, Миңнияр Сәғитович, диплом алырға өс ай ҡалғас китергә тура килде. Йәшлектең бер йыртыҡ бите...

– Нимә эшләйһең инде, Фаил Ниғмәтович, беребеҙ ҙә фәрештә түгел. Мин

бына нимә тураһында уйлап ҡуйҙым: әгәр ҙә Илдус беҙ юлда саҡта һушын юғалтҡан булһа...

– Бәхетегеҙ бар, тип әйтәйемме, Миңнияр Сәғитович.

– Булмаһа, мин ошо бүлмәлә ултырыр инемме?

– Элгәре Илдус ағайҙың, берәй ерем ауырта, тип йөрөгәнен хәтерләмәйемсе.

– Мин дә уның сирләп берәй көн эшкә сыҡмаған сағын иҫләмәйем. Һаулығы ике кеше ғүмеренә етер кеүек ине...

Әйҙәгеҙ әле, былай эшләп ҡарайыҡ: айырым график төҙөгөҙ ҙә, гаражда эшләгән шоферҙарҙы поликлиникаға ебәреп, төрлө яҡлы медицина тикшеренеүҙәре үткәртеп алайыҡ.

Баш врач берәй медсестраны беҙҙең гаражға беркетһен. Шоферҙарҙың көндәлек ҡан баҫымдарын үлсәп тороу мотлаҡ. Шунһыҙ булмай.

– Яҡшы, эшләрбеҙ.

– Һеҙгә, Фаил Ниғмәтович, икенсе шофер алғансыға ҡәҙәр мине йөрөтөп торорға тура килер. Механик вазифаһы ла һеҙҙең өҫтә ҡала.

Шулай итеп, уйламағанда ғына, Фаилға ГАЗ-24 еңел машинаһында райкомдың беренсе секретарын йөрөтөү форсаты тейҙе. Эш өҫтөндә, һиҙелмәй генә өс ай ваҡыт үтте. Илдус больницанан сыҡмай тороп икенсе шофер алырға ҡыйынһындылар. Дауахананан ул икенсе группа инвалидлығы менән сыҡты. Тулыһынса һауыға алманы, бахырың.

Ике эштә көн-төн сабып, Фаил ярайһы арыны. Был турала райком секретарына әйтмәй булдыра алманы.

– Миңнияр Сәғитович, инде миңә нимә эшләргә: механик эшендә йөрөргәме, әллә Һеҙҙең шоферығыҙ булып ҡына ҡалырғамы? Ике йөктө тартыуы ауыр бит әле.

– Фаил туған, нисектер һиңә өйрәнелде лә инде. Бөгөндән ышаныслы һәм тәжрибәле машина йөрөтөүсе эҙләгәнсе, бәлки, икенсе механик табыу мәсьәләһе еңелерәк булыр. Был, әлбиттә, минең тәҡдим генә, ҡарар түгел. Миндә ҡалаһың икән – хуп, юҡ икән – эшең ҡулыңда.

– Һеҙҙе йөрөтөргә, Миңнияр Сәғитович, мин риза, ышанысығыҙ өсөн рәхмәт. Ә механик... «Сельхозтехника»ла күптәнге танышым эшләй, бик булдыҡлы егет. Бәләбәйҙә техникумда бергә уҡығайныҡ. Минеңсә, ҡаршы килмәҫ.

Фаил руль артында ултырып йөрөүҙән айырым ләззәт, кинәнес тапты. Машинаһы йылдар әйләнәһенә төҙөк, ваҡытында ҡаралған, майланған, гелән юлға әҙер. Миңнияр Сәғитовичты ун йыл йөрөттө ул. Уйлап ҡарағанда, аҙ түгел, кеше ғүмеренең етенән бер өлөшө тигән һүҙ. Райком секретарының уң ҡулы итеп булмаһа ла, һәр хәлдә һул ҡулы итеп хис итә ине ул үҙен. Күп ваҡытта Миңнияр Сәғитович шоферының урынлы кәңәштәренә ҡолаҡ һалды. Бергәләп үтә ҡатмарлы тойолған проблемаларҙы төрләсә тикшереп сығалар, дөрөҫ һығымтаға киләләр. Миңнияр Сәғитович яуаплы һәм ҡатмарлы партия эшендә үҙен һәләтле етәксе итеп танытты. Ҡарап тороуға үтә ябай, киң күңелле кеше булып күренһә лә, бергә эшләгән партия һәм хужалыҡ әһелдәре уның принципллы, үҙ һүҙендә ныҡ тороусан, талапсан икәнлеген яҡшы белә.

Хакимлыҡты өҫтөн иткән, бойороу менән мауыҡҡан әҙәмдәрҙе йәне менән һөймәй беренсенең. Тәжрибәле етәксе булараҡ, үҙенә буйһонған кешеләргә ҡаты бәрелеп, юҡ-барға ҡысҡырынып, йәндәрен өтөп бармай. Киреһенсә, йомшаҡ, баҫалҡы тауыш менән әйтелгән һүҙҙәре теләһә ниндәй ҡәтғи бойороҡҡа ҡарағанда ла үтемлерәк, аңлайышлыраҡ, фәһемлерәк.

Миңнияр Сәғитович төҙ кәүҙәле, киң яурынлы, башҡаларҙан бер баш ҡалҡыу. Ул тәбиғи көсө менән дә танылған ине. Үҙенең һөйләүе буйынса, йәшерәк

сағында көрәш буйынса республика, зона ярыштарында ҡатнашып йөрөгән. Егерме бер йәшендә кандидат, егерме дүрттә СССР-ҙың спорт мастеры исеменә лайыҡлы булған. Бәлки, тағы ла юғарыраҡ уңыштар яулар ине лә, бер күнегеү ваҡытында штанга яңылыш ҡулынан ысҡынып, арҡаһына төшә лә умыртҡа һөйәген һындыра. Больница палатаһы, бер нисә ҡатмарлы операция... Оҙаҡ айҙар буйы көнө-төнө махсус күнекмәләр. Билдәле, ҙур спортты бөтөнләйгә оноторға тура килә.

Мәгәр бер заман Фаилға, ирекһеҙҙән, Миңнияр Сәғитовичтың көсөн һынап ҡарарға осраҡлы форсат килеп сыҡты. Яҙғы сәсеү осоро. Арыу-талыуҙы белмәй, әле бер хужалыҡҡа, әле икенсеһенә сабалар. Бер ҡараһаң – улар сәсеү агрегаты ҡырында, икенсе ҡараһаң – ырҙын табағында.

Бер шулай сәсеү һүлпән барған колхозға ҡараған өсөнсө бригаданың сәсеү агрегаттарына барыу өсөн оло юлдан баҫыу юлына боролдолар. Йәйге юлда урыны менән туҙан оса, ә ҡайһы бер ерҙә кибеп өлгөрмәгән ләпек өҫтөнән барыла. Ҡапыл алда яҙғы ташҡын ваҡытынан һыу тулып ҡалған соҡорға тура килделәр.

– Батмабыҙ микән? – тине Фаил. – Соҡор ҙур ғына...

– Әйҙә, аҡрынлап барып ҡара, – тине Миңнияр Сәғитович.

Мөмкин тиклем яй тиҙлек менән йыйылған һыуҙы йырып сығырға була, Фаил машинаһын ҡуҙғатты. Кинәт нимәлер дөп итеп ҡуйҙы. Һүҙһеҙ ҙә аңлашыла: алғы уң тәгәрмәс тәрән соҡорға төшөп ултырҙы. Машинаның алды ҡыйшайып, артҡы өлөшө күтәрелгән хәлдә ҡалды.

– Приехали, Миңнияр Сәғитович! Һеҙ ултырып тороғоҙ, мин момент: сабам трактор артынан, берәй сәғәттән килеп етермен. – Фаил кирза итеген кейә һалды ла йүгерә-атлай китеп барҙы. Ҡайҙалыр алыҫта трактор тырылдағандай итте, Фаил тура шул тауышҡа ҡарай йүнәлде. Ярты сәғәт тигәндә янып-бешеп сәсеүселәр эргәһенә килеп етте. Ауылда тыуып үҫкән һәм бер телем икмәктең ҡайҙан килгәнлеген белгән ир-егеткә сәсеү агрегатын туҡтатыу тураһындағы уй башына ла кереп сыҡманы. Фаил сәсеү орлоғо ташыусы «Беларусь» тракторын көтөргә булды. Уңарсы бер сәғәт ваҡыт та үтеп китте. Ниһайәт, трактор баҫыуға килеп туҡтаны. Фаилдың ике һүҙе етте: арбаһы ысҡындырылған «Беларусь», пырхылдап, машина батҡан урынға йүнәлде.

Фаил тракторҙан һикереп төштө лә, ни әйтергә белмәй, берсә ситтәрәк йылмайып торған Миңнияр Сәғитовичҡа, берсә ҡоро ергә сығарылған машинаға күҙ йөрөтөп, һүҙһеҙ ҡалды.

Ул да булмай, тракторист ағай ҙа ергә төшөп, Фаил менән Миңнияр Сәғитович янына баҫты:

– Ҡайҙа һеҙҙең батҡан машинағыҙ, әллә шаярттығыҙмы? – тип йылмайҙы, тирә-яҡҡа күҙ һалып. – Ошо йыйылған бер күнәк һыуҙа батып ултырҙығыҙмы? Энекәш, күрһәт шул соҡорондо. – Ахырыһы, райком секретарын һәм уның шоферын көлкөгә ҡалдырырға уйланы. Ҡулына кәкре тайаҡ тотто ла – йәнәһе, соҡорҙоң тәрәнлеген үлсәй – һыуға инде: – Бында бит тауыҡтың да биленән ге... – Һүҙен әйтеп тә бөтөрмәне, үҙе эҙләгән һәм тапҡан соҡорға күкрәктән төштө лә китте...

Бындай ҙа кәмит күренеште Миңнияр Сәғитовичтың күптән күргәне юҡ ине – ирекһеҙҙән йылмайып ебәрҙе лә тракторсыға ярҙамға ашыҡты. Ә Фаил? Ул бөгөлөп-һығылып, һыны ҡатып көлдө .

– Яҡшы соҡор тапҡанһығыҙ, – тигән булды тракторист ағай, ҡар һыуы менән тулы итеген һелкә-һелкә.

– Тракторист туған, былай кәмит эҙләп йөрөмәгеҙ, бөгөнгө һымаҡ, яңынан соҡорға төшөүегеҙ бар... Ә мин көтөп ултырманым, машинаның алғы тәгәрмәсенән күтәрә һалып артҡа этәрҙем дә, моторҙы ҡабыҙып, ҡоро ергә сығарып ҡуйҙым. Ә һеҙгә, шоферымдың һүҙен йыҡмай, тыңлап килгәнегеҙ өсөн рәхмәт. Сәсеүҙе туҡтатып торорға мәжбүр иткәнем өсөн ғәфү үтенәм.

– Миңнияр Сәғитович, борсолмағыҙ, агрегат эшләй, иген сәсәләр. Мин был ағайҙың орлоҡ алып килгәнен көтөп торҙом. Аҙаҡ трактор арбаһын ысҡындырҙыҡ та – бында.

– Дөрөҫ эшләгәнһегеҙ. Сәсеүҙе минутҡа ла туҡтатырға ярамай.

Фаил машинаһы ҡырына килде, елкәһен ҡашып алды ла, кинәт, ҡулын салбар кеҫәһенә тыҡты. Усында төрлө асҡыстар менән бергә һары төҫлө зажигание асҡысы ла ята ине...

– Миңнияр Сәғитович, моторҙы нисек ҡабыҙҙығыҙ? Ашығып, асҡысты үҙем менән алып киткәнмен. Һеҙ Илья Муромец булдығыҙмы әллә?

– Нимә, Фаил, ошонда аҡланып торайыммы? Муромец булмаһам да, миндә көс барлығын beләһең дә баһа...

– Умыртҡа һөйәгегеҙҙе һындырһағыҙ? Һеҙгә бер ҡапсыҡ картуф та күтәрергә ярамағанлығын беләһегеҙ бит. Һаҡланырға кәрәк. Китегеҙсе, ат та сығара алмаҫ ине. Ә Һеҙ...

– Йә, булды инде, Фаил! Мин һиңә мәктәп уҡыусыһылыр, тиргәмә әле. Башҡа улай итмәм. Әйҙә, китә һалайыҡ. Бөгөн Фрунзе колхозына ла һуғылаһы бар. Киске алтыла – пленум...

Ошо ваҡиғанан һуң Миңнияр Сәғитович оҙаҡ ҡына һыҙланып, ни ултыра алмай, ни тиҙ генә тороп китә алмай яфаланып йөрөнө, торараҡ ике аҙналап дауаланыу курсы алырға тура килде үҙенә.

Йыл артынан йыл уҙҙы. Фаилдың райком гаражына килеүенә ун биш йыл тулды. Алты йыл элек Нәзирәһе өсөнсө балаһын тапты. Шәп малай хәҙер Илфат: балалар баҡсаһына үҙе бара, үҙе ҡайта, яңыраҡ дзюдо секцияһына йөрөй башланы. Ҙур улдары Ринат урман хужалығы техникумының һуңғы курсында уҡый. Ҡыҙҙары Әлфиә 8-се класта, музыка мәктәбендә лә дәрестәр ала. Әсәһе һымаҡ, культура-ағартыу училищеһына уҡырға барырға хыяллана.

Ниғмәт ағай менән Миңнеямал апай ауылда икәүҙән-икәү йәшәп ята. Фаил юлы төшкән һайын ата-әсәһенең хәлдәрен белешеп сыға. Йәйен-көҙөн ғаиләһе менән ҡайтып ярҙам итеп торалар. Олоғая ла төштөләр инде, етмеште ҡыуалар. Уҙған аҙнала Фаил ауылға ҡайтҡас, Ниғмәт ағай бик борсоуло тауыш менән:

– Улым, күреп-белеп тораһың, беҙҙең дә йәш бара, элгәре булған көс-ғәйрәт юҡ. Әллә, мин әйтәм, үҙебеҙгә генә ҡайтып йәшәйһегеҙме? – тип һораны.

– Тимәк, атай, ҡайтанан – ауылға... Уйлар кәрәк, Нәзирә лә бар бит әле, ул ни тиер? Районда үҙебеҙ ҡорған, нығытҡан донъябыҙ бар, ун биш йыл торолған, күнегелгән. Дуҫтар, таныштар... Әйҙә әле, атай, саҡ ҡына икенсерәк һөйләшәйек. Һин дә, әсәй, тыңла, ултырып тор. Ҡыҫҡаһы, донъяғыҙҙы, малдарығыҙҙы һатаһығыҙ ҙа беҙгә күсеп киләһегеҙ.

– Атаһы, бәлки, районда берәй арзаныраҡ йорт һатып алырбыҙ, – тип һүҙгә ҡушылды Миңнеямал апай.

– Кит инде, әсәй. Беләһең бит: өй иркен, һыймайбыҙҙыр шул. Унан, беҙ ҙә оҙаҡламай бер Илфат менән генә тороп ҡаласаҡбыҙ.

– Һин, Миңнеямал, уйлап һөйлә. Районда табырһың арзан йортто. Тауыҡ кетәгенән саҡ ҡына ҙурыһына ла алты-ете мең һорайҙар, ә беҙҙеке һымаҡтар ун биш – ун һигеҙ меңдә торһа әле...

– Атаһы, ә, атаһы, тим...
– Һуң ишетәм дә баһа.
– Беҙҙең йортҡа күпмерәк бирерҙәр ине икән?
– Бына күрҙеңме әсәнде, өйҙө лә һатырға итә. Улай булғас, мине лә һатып ебәр инде, бер-ике мең генә торамдыр әле...
– Ошо Ниғмәт гел шулай, сурюзно була белмәй, һинең һымаҡ ҡартласҡа йөҙ һум бирһәләр ҙә шатланырһың.
– Шатланмай тор, ярайммы! Ауылда нисәмә йорт буш ултыра, сөнки алыусы юҡ, ә беҙҙекенә алты-ете мең бирһәләр, шөкөр итерһең.
Оҙаҡ гәпләшеп ултыра торғас, көс-хәл менән, Фаил ата-әсәһен үҙҙәренә килеп торорға күндерҙе. Йорт-ҡураларын һатыу тураһында бер нисә белдереү яҙҙылар. Хәйер, ауыл ерендә кем инде белдереү яҙып маташа, ана, урамдағы берәй кешегә әйт – кисен бар ауыл беләсәк.
– Малдарығыҙҙы ла осоророға кәрәк, – тине Фаил. – Бергәләшеп бер һыйыр аҫрай алырбыҙ әле. Туйғансы ял итерһегеҙ, баҡсала йәшелсә үҫтереп һатырһығыҙ. Һин, атай, кролик үрсетерһең. Беҙҙә, үҙегеҙ беләһегеҙ бит, утын әҙерләргә кәрәкмәй, һыу йортта, мунсаға ла индерелгән. Әбрәкәй тигән нәмә тышта ла, өйҙә лә бар. Бөтә ҡала уңайлыҡтары, ҡыҫҡаһы.
– Әй, уныһы, – тип ҡул һелтәне Ниғмәт ағай. – Иҫән-һау кешегә әҙер утынды алып инергә, ҡоҙоҡтан бер көйәнтә һыу кертергә – нимәһе бар. Тик бына иҫәнлек китә, иҫәнлек. Шулай булмағанда йәшәр инек әле беҙ ауылда, эйеме, әсәһе? Ул да сирләштереп тора, һыҙлана. Әллә инде, мин әйтәм, берәй Янғантауға алып барырға инде.
– Атай, уныһы өсөн ҡайғырма, үҙем алып барырмын, барып алырмын...
– Һуң мин унда бер үҙем нимә эшләйем, – тип ҡуйҙы Миңнеямал апай борсоулы тауыш менән.
– Әсәй, бер үҙеңде кем ебәрергә тора әле, бараһығыҙ атай менән бергә. Үҙәк больница беҙҙән алыҫ түгел, дауаланырға була.
– Һөйләмә инде, улым, хөкүмәт бәлнисын, хәлең уға ҡалһа... Иң яҡшыһы – сирләп ятмай ғына теге донъяға китеү.
– Эйе шул, атаһы, түшәктә йылдар буйы тилмереп ятырға Хоҙай ҡушмаһын, – тип ҡеүәтләне ҡартының һүҙен Миңнеямал апай.
– Һеҙгә был турала һөйләп торорға иртә әле.
– Һай, Фаил! Ғазраил фәрештә кешенең йәшен һорап торһа икән дә ул... Киләлә йәнеңде тартып ала, һиҙмәй ҙә ҡалаһың...
– Әйҙә әле, атай, башҡа нәмә тураһында һөйләшәйек.
– Улай тимә, Фаил! Һөйләшеү кәрәк ул, белеү яҡшыраҡ. Ҡайҙа тормош – шунда үлем. Аллаһы Тәғәлә шулай яратҡан, шулай ҡушҡан...
Һин беләинеңме, бәлки, ишеткәнһеңдер, күрше районның «Заря» колхозына оҙаҡ йылдар Анисимов етәкселек итте.
– Нисек белмәҫкә, атай! Уның хужалығында булғаным да бар. Миңнияр Сәғитович менән ул ойошторған пикникта һыйланырға ла тура килде. Бик ҡунаҡсыл кеше. Нимә булған, атай?
– Кисә иртән ҡапыл ғына вафат булып ҡалған. Уйлап ҡара: утыҙ биш йыл колхоз рәйесе булып, тәүлегенә ун биш – ун һигеҙ сәғәт аяҡ өҫтө, бер тапҡыр ҙа отпуска алмайынса эшлә лә эшлә. Бына, алтмышымды тултырып пенсияға сыҡһам, ял итер инем, тип әйткән бахырың. Өс көн, ни бары өс көн үткән пенсияһын оформить иткәненә...
– Бына һиңә кәрәкһә! Ҡарамаҡҡа ниндәй таҙа кеше ине бит. Буйы ике

метрҙан ашыу. Өҫ-баш, аяҡ кейемдәрен спецзаказ биреп тектергән. Ғәләмәт кеше булған ул.

– Колхозы республикала алдынғыларҙан булды.

– Әле лә иң ҙур килем алған хужалыҡ ул, атай.

– Ен һымаҡ ашай ине лә. Эйе, эйе. Дүрт кеше ашағанды бер үҙе ашар булған...

– Унынһын белмәйем. Ултырып бер һауыттан ашарға тура килмәне.

– Ошондай бер ҡыҙыҡ нәмә һөйләйҙәр уның тураһында. Бер көҙгө бысраҡ, ҡараңғы төндә Анисимов шоферы менән йыраҡ сәфәрҙән ҡайтып килгән. Оҙон юлда асығып, йонсоп, ярты төндә күптәнге ызнакумдарында ҡунып китергә уйлаған. Хужа кеше, һуң булыуға ҡарамаҫтан, ҡатынын уятып, ашарға әҙерләргә ҡушҡан. Күп тә үтмәй, өҫтәлгә бер шешә араҡы, рюмкалар, йоҡа ғына телемдәргә теленеп сало, һуған, икмәк ҡуйылған. Төнгө ҡунаҡтарҙы өҫтәл артына, тамаҡ ялғап алырға тип ултыртҡандар.

Юлсылар бик асыҡҡандар, аҙыҡты тиҙ генә ашап та бөткәндәр. Анисимов шунда шоферына:

– Васька! Бар әле, машинанан беҙҙең ашамлыҡтарҙы алып ин, – тигән һәм һиҙҙермәй генә шоферына күҙ ҡыҫып алған.

Бер минуттан өҫтәлгә өс шешә араҡы, беләк буйлығы колбаса, ике арыш икмәге ҡунаҡлаған. Анисимов хужабикәнән бысаҡ һорап, колбаса менән икмәкте өҫтәл тултырып ҙур-ҙур киҫәктәргә киҫкеләгән. Аҙаҡ, сүмес алып, ике шешәне бөткәнсе ҡойған да, «За здоровье хозяев!» тип, бөтөргәнсе эсеп тә ҡуйған.

«Хәҙер ашарға ла була, әйҙә, хужа ағай, беҙҙең аҙыҡты ла ауыҙ итеп ҡара, ҡалған шешә һеҙҙең икегеҙгә», – ти икән.

Хужаның күҙе маңлайына менә...

Йоҡларға ятҡанда өҫтәл өҫтө шыр яланғас булып ҡала. Иртәнсәк ҡунаҡ өҫтәленә бер күнәк картуф, табағы менән ит, ун ҡаҙаҡ сало, өс икмәк, ике сирек самогон ултырталар. Ләкин улар, хужаларҙы йәнә хайран ҡалдырып, ярты сынаяҡ сәй эсәләр ҙә рәхмәт әйтеп сығып китәләр.

Бына шулай, атай. Ызнакумдарын шулай аҡылға ултыртып киткән ул заманында. Ә күсенеү мәсьәләһен һөйләштек, эйеме?

***

Йәй айҙарында, «Миңнияр Сәғитович районлан китә, Өфөгә эшкә алалар», тигән хәбәр таралды. Нимә генә һөйләмәнеләр, нисек кенә борғоламанылар, ниндәй генә бәхәстәр тыуҙырманы был хәбәр. Фаилдың иҫе китмәне, әллә ни ышанып та барманы. Яңы йыл алдынан хужа шул турала үҙе һүҙ ҡуҙғатты:

– Һиҙәм, минең китеүем тураһында төрлө һүҙ йөрөй. Моғайын, һин дә ишеткәнһеңдер. Мине ысынында Өфөгә министр урынбаҫары итеп күсерәләр. Әлегә тиклем ризалыҡ бирмәй йөрөнөм, минең урыным бында, ҡалала йәшәргә яратмайым, тинем. Ләкин беҙгә оҙаҡламай айырылышырға тура килер. Һинең менән оҙаҡ йылдар матур эшләнек, татыу йәшәнек. Һин бик тоғро, намыҫлы кеше булдың. Шуның өсөн миңә һине юғалтыуы ауыр. Ошондай фекер бар: бәлки, һинең менән Өфөлә лә бергә эшләп ҡарарбыҙ? Нимә әйтерһең?

– Нисек, Миңнияр Сәғитович? Мин дә... Өфөгәме?..

– Эйе, эйе, Фаил! Үҙеңдең, ғаиләңдең ризалығы була икән – квартираға гарантия бирә алам. Әйҙә, уйла!

– Тәҡдимегеҙ өсөн рәхмәт, Миңнияр Сәғитович. Һеҙ һәр саҡ ҡайғыртыусан кеше булдығыҙ. Мин, һис шикһеҙ, ҡаланы яратам, айырыуса Өфөнө. Моғайын, ғаиләм дә шатланыр, риза булыр.

Тик беләһегеҙ бит, минең ата-әсәйем етмешкә етеп килә, улар инде ҡалаға бармаясаҡ. Бер килке үҙҙәрен беҙгә килеп торорға көскә күндергәйнем, шунда ла атай өйөн һатырға йәлләне, алыусыһы ла бар ине. Йортона йәш уҡытыусылар ғаиләһен индереп, беҙгә күсеп килеп ҡарағайнылар, биш ай торҙолармы, юҡмы, ҡайтабыҙ, үҙебеҙҙең йортто һағындыҡ, тип ҡаңғырта башланылар. Өй иркен, бөтәһе лә йорт эсендә, йүнле эш юҡ: ял итергә лә ҡунаҡҡа йөрөргә, нимәгә һеҙгә шул ауыл,– юҡ, аңламай ҙа ҡуялар. Тәки ҡайтарып ҡуйырға тура килде үҙҙәрен. Тыуған тупраҡ тарта ул, бигерәк тә шунда тыуып-үҫеп, ғүмере буйы йәшәгән оло кешеләрҙе. Бының өсөн уларға асыуланып та булмай, ярамай ҙа. Инде әсәй, һеҙ ауылға ҡайтып йәшәгеҙ, тип илай. Беҙ һеҙҙә тора алманыҡ, бында бергә торайыҡ, тип атай ҙа теңкәгә тейә...

– Күренеүенсә, һин, Фаил, ата-әсәйең ҡырына ҡайтыу, унда тормош ҡороуҙы күңелеңдә йөрөтәһең, шул хаҡта уйланаһың. Әлбиттә, ата-әсәңде ҡартайған көндәрендә ҡарарға бурыслыһың. Мин тағы ла шуны әйтә алам: йөрәгең ҡушҡанса эшлә, йөрәгеңде тыңла. Бына шул. Был турала яңынан һөйләшербеҙ әле. Минең бер ай тирәһе эшләйһе бар, февралгә тиклем. Уйла, Фаил!

Көткән ай бик тиҙ килеп етте. Миңнияр Сәғитович башта Өфөгә үҙе генә китте, ике ай тигәндә ғаиләһен күсереп алды.

Оҙаҡламай Фаил яңы райком секретары менән осрашты. Беренсе күреүҙә үк Әхнәф Солтановичтың ғәйрәтле, уҫал һәм талапсан икәнлеге күҙенә салынды. «Бындай кеше менән эшләүе ауыр буласаҡ», тип уйланы шофер. Хәйер, ошо сифаттарға эйә булмаған райком секретары була микән? Әллә хәҙер үк, кисекмәҫтән ғариза яҙып ҡуйырғамы? Яңы эшкә килгән етәкселәрҙең Фаил һымаҡ оҙаҡ йылдар бер хужаны хеҙмәтләндергән шоферҙарға ҡарата шөбһәләре арта төшә, үҙ итеп бармайҙар, шунлыҡтан уларҙы тиҙ арала алыштырыу сараһын күрәләр – был да билдәле.

Киске етеләрҙә райком гаражына Әхнәф Солтанович үҙе килеп керҙе. «Волга» машинаһының төҙөклөгө, эш шарттары тураһында ентекләп һорашып алды. Таңғы дүрттәр тирәһендә колхозға китәсәктәрен белдерҙе, шул ваҡытҡа әҙер булырға ҡушып сығып китте.

Фаилға иртә тороп өйрәнәһе юҡ та юҡлығын, ләкин иртә таң менән хужалыҡҡа барыу осраҡтарын ул хәтерләмәй. Машинаһын гараждан сығарып көткән арала, Әхнәф Солтанович та килеп етте. Ул ваҡытлыса ҡунаҡхана йортона урынлашҡан икән.

Гараж ҡапҡаһынан сығып киткәндән алып оҙон юл буйы үҙ-ара һүҙ ҡушманылар. Фаил кисәге кисерештәренән айный алмай, шуға сырайы һытыҡ, кәйефе төшөнкө. Райком секретары ла уйға батҡан. Колхоз үҙәге Ташҡайырға етәрәк, Әхнәф Солтанович машинаны туҡтатыуҙы һораны. Асыҡ һауаға сыҡҡас, пальто яғаһын күтәрҙе. Йоҡоһон ҡасырыр өсөн төрлө хәрәкәттәр яһап алды ла:

– Мин ошо ерҙә ҡалам, – тине. Фаилдың аптырауының сиге юҡ ине, күҙе аҡайҙы.

– Һеҙҙе Әхнәф Солтанович, ҡасан килеп алырға?

– Юҡ, Фаил, кәрәкмәҫ, килеп йөрөмәгеҙ. Минең өсөн борсолмағыҙ, эш бөткәс, районға ҡайтарырҙар, – тип ҡуйҙы.

– Һеҙҙе, колхоз идараһына ҡәҙәр алып барайыммы? Йә хужалыҡтың рәйесе йәшәгән йортҡа тиклем? – Икеләнеберәк һорап ҡуйҙы Фаил.

– Юҡ, юҡ! Мин йәйәүләп, ашыҡмай, яйлап ҡына, ҡышҡы урам уртаһынан һауа һулап, ауылдың йоҡоһонан уянғанын күреп, әтәстәр ҡыҫҡырғанын, һыйырҙар мөңрәгәнен тыңлай-тыңлай барып етермен әле. Ишетәһегеҙме, бер эт

ярһый-ярһый өрә, тауыш бирә, уға тағы  бер нисәһе ҡушыла... Күҙегеҙме, бер йортта ут тоҡанды, тимәк, тормош дауам итә. Яратам мин ауыл иртәһен. Ауыл тынлығын тыңларға яратам. Ҡалала тынлыҡ булмай. Ә ҡала иртәһе икенсерәк ул, тәбиғи кеүек түгел, шомло ла, тауышлы ла...

– Әхнәф Солтанович!  Ауылда тыумаған, ерҙе һөймәгән кеше был тиклем ихлас, илһамлы һөйләй алмаҫ ине. Тынлыҡты тыңларға мөмкин икәнлеген  белмәй инем әле.

– Мин, Фаил, заманында колхоз системаһында агроном булып эшләнем. Шуға ауыл тормошон ишетеп кенә белмәйем.

– Һеҙгә, Әхнәф Солтанович, бер һорауым бар, үтенес  тип әйтәйемме?

– Тыңлайым!

– Бынан алыҫ түгел бер ауылда атай-әсәйемдәр йәшәй. Рөхсәт итһәгеҙ, инеп хәлдәрен белеп сығырға ине...

– Бер һүҙһеҙ. Ата-әсә менән күрешеү, ошрашыу һәр саҡ мотлаҡ. Һинең тупһанан атлығып ингәнеңде күреп ҡалай шатланасаҡтар!  Дөрөҫмө? Уларҙың нурлы, бәхетле йөҙҙәрен күреү өсөн бер ниндәй ҡаршылыҡ та, тотҡарлыҡ та  булырға тейеш түгел.  Был – изге эш.

Йәнтөйәгенә еткәндә ваҡыт иртәнге алтыны күрһәтә ине. «Ауыл әлегә йоҡлай», – тип уйлап ҡуйҙы ул, урам буйына теҙелешеп ултырған  хужалыҡтарға күҙ һалып. Уттарын тоҡандырған йорттар һирәк, тегенән-бынан ғына күренеп ҡала.  Атаһы йортонда  яҡты  күреп, Фаил бөтөнләй аптырауға ҡалды: мал-тыуарҙары юҡ, нимә ҡалған уларға иртә таңдан тороп ултырырға? Күрәһең, ғүмер баҡый иртә тороп ғәҙәтләнгәнгә, йоҡолары туйғандыр. Олоғая төшкәс, кеше аҙ йоҡлаусан була шул. Машина йорт ҡаршында туҡтап, утын һүндергәс, әсәһе тәҙрәгә ташланды, ә инде улының ҡапҡанан инеп килгәнен шәйләп  алғас,  ишек асырға соланға йүгереп сыҡты.

– Фаил, әллә бер-бер  хәл булдымы? – Улының тыныс, мөләйем йөҙөн күргәс, тынысланғандай итте. – Балалар, килен иҫәндәрме? Ҡайҙан былай? Бик иртәләгәнһең...

– Барыһы ла һәйбәт, әсәй, иҫән-һауҙар. Ә атай ҡайҙа?

– Атайың тормаған әле, йоҡлай. Төнгә ҡәҙәр китап уҡып ултырҙы ла... Хәҙер уятам.

– Кәрәкмәй, әсәй, йоҡлаһын. Районға яңы  секретарь килде. Өфөлә, обкомда, эшләгән. Бөгөн, иртәнге дүрт тә тулмаҫ борон, Ташҡайырға алып сығып китте. Үҙе хужалыҡта ҡалды, ә мин һеҙҙе күреп, хәлегеҙҙе белеп сығырға булдым. Ринат көнөнә генә ҡайтып  китте. Уға ла аҙ ғына ҡалды уҡып бөтөрөргә,  отметкалары гел генә «бишле». Нәзирә эштә, бер көйө. Юҡ, сирләмәй...

– Был сикратарҙы ла йөрөтөр итәһеңме ни, балам? Артыҡ уҫал түгелме?

– Таң һарыһынан йөрөгән кеше уҫал булмай тиме? – Атаһы ҡыҫылды лаһа әңгәмәгә.

–  Һаумы, атай! – Фаил, урынынан йәһәт кенә тороп, атаһына ҡаршы атланы.

– Йә, иҫән ҡайттыңмы, улым? Бары ла һәйбәт, тиһеңме? Яраған, яраған...

–  Әллә әсәйем менән һөйләшкәнде  ҡасып тыңлап торҙоң инде?

– Мин һеҙгә шпиондыр шул? Әсәң кем менән һөйләшә икән, әллә ҡартайған көнөндә тилерә башланымы, тип ҡурҡып киттем. Унан һинең тауышыңды ла танып алдым, әһә, мин әйтәм, малай ҡайтҡан, ызначит, торор кәрәк.

– Ну, хәйләкәрһең дә инде һин, атай. Һине алдар өсөн Столыпин башы ла етмәҫ ине...

– Кем булған уныһы? Башы әллә ҙур булғанмы?

– Батша заманында күренекле дәүләт эшмәкәре, реформатор  һаналған.
– Эйе, беләм, ти, мин шул рифматур һүҙен, аңлайым, ти... Әйҙәгеҙ, иртәнге сәйҙе эсеп алайыҡ.
– Әйҙә инде, Фаил, хәҙер һөйлә! Нисек унда яңы райком секретары? Яңы һепертке яҡшыраҡ һеперә, тиҙәр...
– Нисек итеп әйтергә? Бик эшлекле зат. Белемле. Ҡасандыр агроном булып эшләгән. Ауылға, ергә ярһына. Русса әйтмешләй, жилкаһы бар. Шулай булғастын...
– Үҙең нимә эшләргә уйлайһың? Килен нимә әйтә?
– Килендең ни тиһен, атай. Ул нисек тә риза.
– Миңнияр Сәғитович тәки Өфөгә китеп барҙымы?
– Китмәй ҡайҙа барһын, күсергәндәр икән. Мине лә әйҙәләне, бергә эшләрбеҙ элгәре һымаҡ, фатир алып бирермен, тигәйне.
– Һуң... Һин?..
– Һеҙҙе нисек ҡалдырып китәйем, ти? Бына, кәңәшләшергә тип ҡайттым. Ихтимал, машина йөрөтөүҙе ташлармын.
– Шунан ни эшләргә итәһең инде?
– Шунан шул. Һеҙҙең ҡырға ҡайтырға иҫәп. Колхозда эш бөтмәгәндер. Ҡулда көс бар, диплом кеҫәлә...
– И-и, раббым, Хоҙай насип итеп, теләгәндәрем ҡабул булһын ине. Бисмиллаһир рахмәнир рахим!
– Һин, Миңнеямал, ләпелдәмәй тор әле, быз-быз итәһең дә йөрөйһөң. Беҙҙең малайға ла аҡыл керер итә әллә?
– Ни һөйләйһең, атаһы? Фаилыбыҙ малайҙыр шул? Ул өс бала атаһы лаһа. Ниңә ул аҡылһыҙ булһын... Һин, Ниғмәт, һүҙеңде үлсәп һөйлә!
– Үлсәнгән, әсәһе, үлсәнгән. Һин ирҙәр һүҙенә  ҡыҫылма, йәме. Булмаһа, бар, ашарға ултырт. Улыңды, сәйҙән башҡа, «уттан сыҡҡан» менән һыйланыңмы һуң?
– Иртүк ниндәй һый,  ти, ул, атай?  Һин әсәйгә ҡаты бәрелмә.
– Ҡатын-ҡыҙ ваҡыты менән үҙ урынын белергә тейеш. Ә һиңә, Фаил, йәнә бер әйтәм: етте, ташла шул машинаңды, нәсәлник йөрөтөү ҙә  булдымы эш? Уның ҡоло булып йөрөү нимәгә хәжәт? Шул ергә бар, бында борол, туҡтат, ары кит, имеш...
– Туҡтап тор, атай. Һин барын да аңғарып бөтмәйһең.
– Нимәһен аңлайһың? Уны ғына аңларға Ломоносов башы кәрәкмәйҙер. Алып бар ҙа ҡаңғырып көтөп ултыр. Улар унда ҡунаҡ булһындар, ҡуян бәлеше ашаһындар, хәмер һемерһендәр, ә һин? Сәғәттәр буйы тилмереп ултыр... Торған йортона килтереп ҡуй, шул-шул минутҡа һуңламай барып ал. Тьфү... Һин хәҙер егерме йәшлек малай-шалай түгелһең. Күҙгөгә ҡара, башыңа  сал төшкән. Йәшерәктәр эшләһен.
– Атай, тим, ҡыҙма әле, мин бит...
– Туҡтатма мине, Фаил!  Һиңә күптән инде әйтергә тип йыйынып йөрөйөм, тыңла! Эскелек менән мауыҡмайһың – уныһы өсөн маладисһың; ғаиләң, килен-балалар олатай ҙа өләсәй тип үлеп тора – быныһы өсөн дә маладисһың; йортоңда бар нәмә бар, гаражыңда «Москвич» машинаң ултыра – тағы  маладисһың.
Барыһы ла – һинең һәм беҙ яратҡан килендең тырышлығы арҡаһында табылған мөлкәт бит. Бер нәмә лә юҡтан бар  булмай, үҙеңә мәғлүм. Инде, улым, һине дүртенсе тапҡыр ҙа маладис тип маҡтарға баҙнатым етмәй...
– Өс тапҡыр маладис ишетеү насармы ни, атай?  Һинең ауыҙыңдан сыҡҡас, бер тапҡыр Герой исеменә торош итәлер?

– Герой, имеш... Бына секретарың Геройҙы алыр әле, ә һиңә кукиш... Һинең йәштәге кешеләр үҙҙәре секретарь була, рәйеслекте әйтеп тә тормайым...

Һинең башың бәләкәйҙән затлы эшләй ине бит, уҡып кеше булырһың, институт бөтөрөрһөң, ҙур ғына етәксе, колхоз рәйесе, директор булырһың, тип көткәйнем. Их, Фаил, Фаил... Һинең үҙеңде «Волга»ларҙа йөрөтөрлөк кеше инең дә баһа. Ауылда йәшәп, эшләп кенә ундай үрҙәргә үрмәләп була. Башта ветеринар, мөдир, бригадир булып, халыҡ менән аралашырға өйрәнгәс, эш ысулдарын, етештереү тармаҡтарын, юлдарын үҙләштергәс – аҙаҡ етәксе ҡамыты еңелерәк була. Һин техникумдан киткәс, минең бар өмөтөм селпәрәмә килде. Инде армиянан ҡайтып, механик булып эшләй башлағайның – өмөт яңынан ҡабынған һымаҡ булғайны, тик һине райком тартты. Ярай, унда механик эшен дауам иттең, унан шул уҡ руль, шул уҡ машина, райком шоферы... Мин үҙ ғүмеремдә руль артына ултырманым, мотоцикл, велосипед кеүек тимер кәзәләргә атланманым. Ғүмерем буйы ат менән эшләнем, атҡа табынып йәшәнем.

Шуғалыр ҙа һеҙҙә, районда, ерегә алманыҡ. Һин шулай уҡ иртән китәһең, кисһеҙ ҡайтмайһың. Ә өйҙә әсәйең менән беҙгә һөйләшер кеше, барыр ер юҡ. Бергә ултырып ашарға ла ваҡытығыҙ етмәй: берегеҙ ҡайта, икенсегеҙ киткән була. Вокзалдағыса, өҫтән-мөҫтән ашаштыралар ҙа йәнә үҙ эштәре менән сабалар. Ярай әле, тиген, баш эшләп ҡалып, йортто һатмай киткәнбеҙ. Шунан әсәйең менән уйлаштыҡ-уйлаштыҡ та киренән ауылға ҡайтырға булдыҡ.

– Һөйләгәндәрең раҫ, атай. Һине тыңлап, һүҙеңдән сыҡмай ғына йәшәгәндә, моғайын, берәй түрә булыныр ине. Тик мин шофер булғаныма үкенмәйем. Ҡултыҡ аҫтына ҙур папка ҡыҫтырып, донъяла мин бар әле, тип, һынынды тура тотоп, күкрәгеңде киреп йөрөгәнсе, үҙ эшеңде белеп йәшәүгә ни етә!

Мин хәҙер урта йәштәмен, күпте кисерҙем, аңланым. Йәшәгән йылдарыма, эшләгәндәремә отчет яһай алам да кеүекмен. Алдағы көндәремдә яңы йүнәлеш, үҙгәрештәр көтөлә икән, мин уға әҙер. Ғүмеремдә хаталар ебәргеләнем, ҡайһыларын төҙәттем, ҡай саҡта улар мине йыға һуҡты. Ләкин ятып ҡалманым, күтәрелдем. Һәр кешенең үҙ тәҡдире, тиҙәр. Ә русса әйтмешләй, каждый несет свой крест. Алланан нимә яҙылған – шуны һуңғы һулышыңа ҡәҙәр тартырға тейешһең.

– Бына нисек? Маладис! Ҡасандан Алла һүҙен ҡыҫтыра башланың әле?

– Йәшәй-йәшәй үҙгәрәһең икән ул, атай. Миңә ҡырҡ алты йәш, үҙең әйтмешләй, аҡыл ултырыр йәштәмен. Колхоз идараһына барып, йәш хужанан эш һорар итәм. Ферма мөдиреме, ветеринармы, бригадир ҡамытымы – ҡайһыһы ла ярай. Аҙаҡ инде, ғариза яҙып, күсенеү эштәрен ҡайғыртырға ҡала. Йортто һатмаҫҡа уйлайым, балалар бар.

– Бына был, исмаһам, беҙҙеңсә! Әсәһе, ҡайҙа, килтер сәйеңде, ташы ашыңды! Өсәү ултырып тегенеһен дә, быныһын да эсеп алайыҡ, булмаһа.

Сәғәт һигеҙҙе һуҡҡанда, Фаил идара болдоро иҙәнен арҡыры-буй аҙымлап йөрөй ине. Ниһайәт, туғыҙынсыла Рим Барыевич машинаһында килеп төштө. Фаил менән иҫәнләште лә үҙ бүлмәһенә әйҙәләп алып инеп китте.

– Йә, Фаил ағай, ниндәй елдәр ташланы үҙеңде? Нишләп бер үҙең? Яңы «первый»ҙы ҡайҙа ҡалдырып киттең? Беҙҙең берәй фермала йөрөп ятмаймы?

– Әхнәф Солтанович бөгөн күрше колхоз менән таныша. Мин ауылға атай-әсәйҙе, шунан һине күреп-һөйләшеп китергә тип һуғылдым.

– Йә, йә, тыңлайым!

– Мин, Риф Барыевич, ауылға ҡайтырға булдым. Бөтөнләйгә. Атай-әсәйҙе ҡарар кәрәк бит, олоғаялар, үҙҙәренә генә йәшәү ауырлашты.

– Нимә-нимә? Һин аҡылыңдан яҙҙыңмы, Фаил ағай? Кеше нисек ауылдан ҡасырға белмәй, ә һин? Ҡарттар, ауыл тормошона бер өйрәнгәс, үҙ алдарына йәшәйҙәр инде ул. Шуның өсөн донъяңды пыран-заран килтереп ташлап китәһеңме? Уйла, дуракланма, тим мин һиңә. Тыңла, һуңынан рәхмәт әйтерһең...

– Юҡ, Рим Барыевич, өгөтләмә мине! Мин һиңә эш һорарға килдем.

– Ниндәй эш? Әхнәф Солтанович һине райондан ебәрер тиһеңме? Әллә үҙе эш эҙләтеп сығарып ебәрҙеме? Булмаҫ тимә, «первый» бик уҫал күренә.

– Ҡарале, Рим ҡусты, улары һиңә ҡағылмай. Ебәрәме, ебәрмәйме – минең проблема...

– Миндә эш юҡ, һин аңлайһыңмы? Бөтә урындар – занято. Иҫке газикка ултыраһыңмы һуң? Пожалуста! Бер ҙә булмаһа, мине йөрөтөргә кил. Шоферымды хеҙмәткә алып китәләр.

– Юҡ, Рим Барыевич, машинаға ултырмайым. Етте. Планымды тултырҙым. Ярай, юҡ тек юҡ. Мин киттем, тик бел: өс көндән һин дә районда булмаясаҡһың...

– Тороп тор, Фаил ағай, ашыҡма әле... Һинең тағы ла ниндәй һөнәрҙәрең бар?

– Бына күр! Механиклыҡҡа техникум, институт дипломдары кеҫәлә. Ветеринар эшен дә беләм. Заманында техникумдың ветеринария бүлегендә өс йыл уҡыным.

– Улай булғас, һин беҙҙең өсөн хазина ла баһа, ә мин шофер итеп кенә белә инем, сразы әйтергә булған... Тыңла әле, Фаил ағай, миңә бөгөндән бер һөтсөлөк фермаһына ветеринар талап ителә. Тағы ла урын бар, уныһы ла малсылыҡ менән бәйләнгән; рәсми телдә «малсылыҡта ҡул эштәрен автоматлаштырыу һәм механизациялау буйынса инженер» тип атала. Йә, Фаил ағай, ҡайһыһын һайлайһың? Шигем ҡалманы, мин тәҡдим иткән эштәр һиңә ят түгел.

– Әлбиттә. Һин, Рим Барыевич, бында өс йыл ғына эшләйһең әле. Армиянан хеҙмәт итеп ҡайтҡас, мин дүрт йыл ошонда механик булып йөрөнөм, аҙаҡ райком гаражына механик итеп күсерҙеләр.

– Бына нисек? Белмәгәс һуң инде... Йә, үҙең һайла эште.

– Улайһа, һөйләштек. Бир ҡулыңды! Осрашҡанға ҡәҙәр.

Улдарына инженер вазифаһын тәҡдим итеүҙәрен белгәс, Ниғмәт ағай менән Миңнеямал апай балалар һымаҡ шатланды. Фаил үҙе лә ҡәнәғәт кеүек. Тик был һөйләшеү ауыр бирелде уға, шатлығы йөҙөнә яҙылған булһа ла, ул тыштан маска функцияһын ғына үтәне, ата-әсәһе өсөн генә эшләгән ине. Ә эстә? Бесәйҙәр тырнаша, күңелендә көҙөк ҡалды. Ни тигәндә, колхоз рәйесе үҙен төрлө яҡлап асып һалды. Ни өсөн ул Фаилдың ауылға ҡайтыуына теше-тырнағы менән ҡаршы? Ниңә тәүҙә үтә ҡырыҫ һөйләште? Эшкә алырға иҫәбе юҡ ине. Сәбәп ниҙә? Ҡурҡты, тиһәң...Уға нимәһенән ҡурҡырға? Фаил уның эш урынына дәғүә итмәй. Эйе, һин шулай уйлайһың, ә Рим Барыевич үҙе? Уны аңлар өсөн башты эшләтеү ҙә кәрәкмәй. Сөнки ауылда Фаилды беләләр, алтын ҡуллы механик, оҫта ауыл хужалығы белгесе икәнлеге барыһына ла мәғлүм. Рим Барыевич ахырҙа эш тәҡдим итмәй ҡалай итһен? Фаилдың райком секретарҙары менән «һин»гә һөйләшеп йөрөгәнен, бик йылы һәм дуҫтарса мөнәсәбәттә булғанын белмәйҙер шул?

Төш алдынан ғына Фаил район үҙәгенә ҡарай юл алды. Бер-ике көн борсоған уй-тойғолары ла тарала бара һымаҡ. Уйсан йөҙөнә ҡәнәғәтлек рәүеше ингәндәй. Ҡояшлы февраль көндәренең береһе. Күҙҙе емелдәгән ҡар сағылдыра. Машина алға елә. Ошолай ҡояшҡа табан, бер ҡаршылыҡһыҙ, туҡталмайынса барырға ла барырға ине...

Шулай итеп, Фаилдың тормошонда тағы ла бер боролош билдәләнә. Ризалашырмы ҡатыны? Нисек кенә булмаһын, ул ғаиләһен күндерәсәк. Әхнәф Солтанович, минән ҡурҡып ҡасаһың, тип әйтер инде. Фаил яңынан тыуған ауылына йәшәргә ҡайтасаҡ, унан ары бер ергә лә, һис ҡасан да китмәйәсәк. Ниғмәт ағай менән Миңнеямал апай ҙа ҡартлыҡ көндәрендә ҡайғы-хәсрәт күрмәй, тәрбиәле ҡулдарҙа оҙаҡ итеп йәшәрҙәр әле.

Һөт төҫөндәге «Волга» машинаһы, утыҙ-ҡырҡ хужалыҡтан торған ауылды урап үтеп, аҫҡа, ағас күпергә, яҡынлаша башланы. Ағас күперҙең өҫкө өлөшөндә ике-өс кеше машина көтөп тора. Күпергә биш-алты метр ара ҡалды. Ҡапыл... күпер уртаһына, санаһын һөйрәтеп, дүрт-биш йәшлек бала йүгереп сыҡты, гүйә, шул урында, уртала, ҡалҡты! Фаилдың йөрәге «жыу» итеп, туҡталғандай булды, тормозға баҫыу файҙаһыҙ, боҙлауыҡлы күперҙә машина туҡтамаясаҡ. Малайҙы ҡотҡарыу өсөн берҙән-бер сара... Фаилдың хәрәкәттәре етеҙ – ҡапыл машинаһын һулға ташланы: «Волга» күпергә бер метр ҡала ултыртылған бетон бағанаға буферы менән килеп бәрелде. Ҡарға яртылаш күмелгән, аҡлы-ҡаралы һыҙыҡтарға буялған бағана машина тиҙлеген үҙенә алып, шартлап урталайға һынды. «Волга», инерция көсөн баҫа алмай, һаман һул яҡҡа ыңғайланы. Ҡаршыһында уны тотоп ҡалырҙай кәртәләр булмағас, буйһоноуҙан ысҡынған машина күпер аҫтына өңкөлдө лә, өс тапҡыр әйләнә-әүмәкләй барып, тәгәрмәстәрен күккә ҡаратып, йомшаҡ ҡар өҫтөндә ҡатып ҡалды.

Күҙ алдында, секунд эсендә булған был ҡот осҡос һәләкәтте күҙәтеп торған юлсылар, ҡарға бата-сума, күпер аҫтына йүгерештеләр. Ҡурҡыуынан иларға ла оноҡҡан бала, ҡулына санаһының бауын ҡыҫып ураған килеш, күпер уртаһында тора. Ул әле генә аварияға сәбәпсе булғанлығын аңланымы? И, сабый, сабый, үҫеп еткәс, уның ғүмерен өҙмәҫ өсөн ҡанын да, иң ҡәҙерле ғүмерен дә аямаған шофер кешегә рәхмәттәреңде әйтерһеңме?..

Бер аҙҙан авария булған урынға, юлдың ике яғына ла, үткенсе машиналар теҙелеп китеште. «Волга»ны тәгәрмәстәренә баҫтырып, һул яҡ ишеген ҙур ҡыйынлыҡ менән шаҡарып асҡас, йөҙө аҡбурҙай ағарынған, башы ҡаты яраланған Фаилды машина эсенән көскә сығарып, ергә һуҙып һалдылар. Һүҙҙәрен аңлап алырҙай түгел, тик ирендәре генә ҡыбырҙап ҡуя... Башында тәрән асыҡ яра, унан һарҡып ҡан аға. Район үҙәк дауаханаһына алып килеп, операция өҫтәленә һалғанда, Фаил иҫендә түгел ине инде.

Тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһендә салон эсендә табылған домкраттың, әйләнеп йөрөп, Фаилдың баш һөйәгенә эләккәнлеге асыҡланды. Күтәрткестең осло ҡырыйында ойошоп ҡатҡан ҡан эҙҙәре шул хаҡта һөйләй. Бында тик бер нәмә аңлашылмай ине: ни тип, ниндәй иҫәп менән Фаил ул домкратты пассажир салонында йөрөткән? «Һалып торған да оноҡҡан» тигән һығымтаға килделәр... Яҙмышына сәбәп...

* * *

Райүҙәк ҡунаҡханаһында ҡыш көндәре юлаусылар һирәкләнә. Ябай ғына йыһазландырылған бүлмәләрҙең береһенә ике тәүлек элек телефон элемтәһе урынлаштырҙылар.

Әхнәф Солтанович бүлмә ишеген аса ғына башлағанда, телефон зыңғырланы. Трубканы ҡулына алыу менән, ул ҡатыны Зөһрәнең борсоулы тауышын ишетте.

– Киске 8-ҙән шылтырата башлағайным, – тине ул, һүҙҙәренә баҫым яһап. – Әллә берәй нәмә булдымы, Әхнәф? Беҙ ҡурҡышып бөттөк.

– Кит инде, Зөһрә. Бер нәмә лә булманы. Хужалыҡтан ҡайтып бүлмәгә инеүем булды – телефон зеңгелдәй.

– Төнгә ҡәҙәр нимә эшләйһең унда? Һин нисек унда? Тамаҡ туйҙырҙыңмы һуң? Район ниндәй тәьҫир ҡалдырҙы?

– Зөһрә, ниндәйҙер һығымта яһарға иртәрәк. Бына бөгөндән райондың хужалыҡтары менән таныша башланым. Тәьҫораттар ни, һөйөндөрә торғандары ла, көйөндөрә торғандары ла бар.

– Булыр инде, Әхнәф, ауыр икәнлеген аңлап торам. Берүк үҙеңде һаҡла!

– Әлбиттә. Үҙең нисек? Балалар?

– Бары ла һәйбәт, элеккесә. Беҙҙә, үҙең беләһең, сумаҙан кәйефе. Эшкә барғы ла килмәй.

– Шулайҙыр инде. Зөһрә, бер-ике ай көтөргә тура килер. Квартира мәсьәләһен ошо бишйыллыҡта хәл итергә тырышырмын.

– Ой-ой, Әхнәф, һин нимә һөйләйһең? Балаларымды алырмын да, барҙыҡ индек номерыңа.

– Рәхим ит, Зөһрәкәй! Әй, шәп булыр ине. Дүртәүләшеп 15 квадрат метрҙа рәхәтләнеп, иркенләп, ҡыуыш уйнап йәшәр инек...

– Ҡара һин уны, арымағанһың да, шаяртып һөйләргә лә хәлең бар...

– Һинең менән һөйләшкәндән һуң бөтә арығандарым ҡайҙалыр оса ла китә.

Әхнәф Солтановичтың кәйефе күтәрелде. Тамаҡ эсенән көйләй-көйләй ятырға йөрөгәнендә, яңынан телефон шылтыраны:

– Эйе, тыңлайым. Хәбиров!

– Ғәфү итегеҙ, Әхнәф Солтанович. Һуң булһа ла, Һеҙҙе борсорға тура килде. Үтә ашығыс хәл.

– Кем менән һөйләшәм? Үҙегеҙҙе танытығыҙ.

– Район үҙәк дауаханаһының баш врачы Абдуллин Ринат Саҙрыевич.

– Тыңлайым.

– Әхнәф Солтанович, беләһегеҙме-юҡмы икән, һеҙҙең шоферығыҙ – Кәримов Фаил автокатастрофаға эләккән.

– Үҙе иҫәнме? Хәле нисек?

– Хәле ауыр, Әхнәф Солтанович. Килтергәндән бирле аңына килмәне. Ҡаны күп юғалтҡан. Реанимацияла ята.

– Уф, Алла! Ниндәй тәжрибәле шофер...

– Уның ғәйебе юҡ, Әхнәф Солтанович. Машинаһы алдына йүгереп сыҡҡан баланы тапатмайым тип, күперҙән ҡолаған.

– Минең яҡтан ниндәй ярҙам кәрәк?

– Әхнәф Солтанович, кисекмәҫтән Өфөгә, Хирургия-травматология үҙәгенә, алып барырға кәрәк.

– «Скорая помощь» юҡмы ни?

– Машина менән оҙаҡ. Икенсенән, сирлене һелкетеп алып барырға ярамай. Тик вертолет кәрәк, Әхнәф Солтанович. Сирле иртәнгә ҡәҙәр... Ай-һай... Мөмкин тиклем тиҙерәк операция өҫтәленә һалыу мотлаҡ. Мин санитар авиацияға шылтыратып ҡараным – береһе батыҡ, икенсеһе алыҫ районға сирле ҡатын ҡырына осто, тинеләр.

– Аңлашылды, ярай улайһа, элемтәлә булығыҙ!

Аэропорт етәкселәренә шылтыратыу һөҙөмтә бирмәне. Кеме генә төнгө 12 тулғанда эш урынында ултырһын инде! Нисек тә берәй юлын табырға кәрәк. Тик обком аша эш итергә ҡала. Миҙхәт Закировичтың квартираһына? Юҡ, әллә нимә булғанда ла – юҡ. Ә-ә, обкомдың икенсе секретары Веселков Геннадий Михайлович менән улар дуҫтарса мөнәсәбәттә инеләр бит. Телефон сымының теге осонда баҫалҡы тауыш ишетелде:

– Әхнәф! Ярҙам кәрәкме? Һөйлә!

– Әүлиә икәнһегеҙ, Геннадий Михайлович. Яман хәл килеп сыҡты. Мине йөрөткән шофер автокатастрофаға эләккән. Уны вертолет менән Өфөгә алып китеү фарыз. Иртәнгә ҡәҙәр ҡалдырһаң, һуң булыр, тиҙәр.

– Ә,үҙең? Үҙең һуң, Әхнәф?..

– Мине «Знамя» колхозында ҡалдырғас, ҡайтарып ебәргәйнем. Ҡайтҡан сағында...

– Ярай, һорашып торорға ваҡыт юҡ. Һуңынан һөйләрһең. Ҡайғырма, Әхнәф. Беҙ атҡара алмаған эш барҙыр шул. Көт, үҙем шылтыратырмын.

Әхнәф Солтанович шунда уҡ баш врачҡа элемтәгә сыҡты.

– Ринат Саҙрыевич, был мин, Хәбиров. Сирлене әҙерләй тороғоҙ. Хәле элеккесәме?

– Үҙгәреш юҡ, Әхнәф Солтанович. Нисек , вертолет булырҙаймы?

– Ҡыҫҡаһы, әҙер тороғоҙ. Ҡарағыҙ әле, Ринат Саҙрыевич, вертолет килә ҡалһа – ҡайҙа ҡаршы алырға, ҡайҙа ултыртырға, уйланығыҙмы?

– Әлбиттә, Әхнәф Солтанович. Яраҡлы тигеҙ майҙан дауахананан ике йөҙ метр алыҫлыҡта ғына.

Трубканы ҡуйыуы булды, ишек шаҡынылар.

– Асыҡ, инегеҙ, – тине райком секретары, одеялды карауат өҫтөнә һуҙынҡырап.

Бүлмәгә бер түгел, дүрт кеше килеп инде: милиция начальнигы, икенсе, өсөнсө секретарҙар, райисполком рәйесе.

– Иптәш майор, нисек ЧП сыҡҡан Фаил менән?

Милиция начальнигы һөйләгән арала, яңынан телефон зеңләне.

– Тыңлайым. Хәбиров!

– Әхнәф, был мин – Веселков. Тәки барын да аяҡҡа баҫтырҙым, әй! – тине Генадий Михайлович күтәренке тауыш менән. – Вертолеты ла бар, дежур осоусылары ла. Обком вертолеты осасаҡ. Миҙхәт Закировичтың персональный борты. Бер сәғәттән вертолет һеҙҙә булыр. Осоу аппаратын майҙанға ултыртыу өсөн аныҡ ориентир кәрәк булыр. Шул, төшөр урын тирәләй 10–15 машина фарҙарын ҡабыҙып торһондар, аңланыңмы, Әхнәф Солтанович?

– Әлбиттә, Генадий Михайлович. Ҙур рәхмәт.

Бөтәһе лә беренсе секретарға төбәлде.

– Иптәштәр, беҙҙең ваҡыт самалы. Геннадий Михайлович, бер сәғәттән вертолет һеҙҙә булыр, тине. Шуға ҡәҙәр уны ултыртыр өсөн майҙан әҙерләргә кәрәк. Иптәш майор, һеҙ ике тиҫтә машина табыу хәстәрлеген күрегеҙ. Үҙәк дауахана тирәһенә йыйыла торһондар.

Майҙансыҡ уңайлы булып сыҡты. Ятҡан ҡары ла ҡалын түгел, әйләнә-тирә лә, вертолетҡа ҡурҡыныс булырҙай юғары вольтлы электр линияһы ла юҡ. 16 машинаны уратып теҙгәндәр. Фарҙарҙы тоҡандырғас, майҙансыҡтағы ориентирҙы осоу аппаратынан ғына түгел, айҙан да күрерҙер ине. Төнгө 2-ләр тулғанда рация аша «вертолет на подлете» тип хәбәр иттеләр. Шунда уҡ «Фары!» тигән команда бирелде. Ярты минут үтеүгә, тимер ҡош, прожекторын яндырып, төрлө төҫтәге уттарын емелдәтеп, ергә төшә башланы. Шул саҡ көслө динамиктан милиция начальнигының тауышы яңғыраны:

– Всем в укрытие, по машинам!

Вертолет винттары күтәргән аҡ буран бөтә тирә-яҡты ҡуйы томан эсенә

күмде. Бик ваҡытлы иҫкәртеү ине. Иҫәпкә алмаған йә ишетеп өлгөрмәгән бер нисә кеше ел ҡыҫымына ҡаршы аяғында саҡ тора.

Винттар әйләнеүенән туҡтағас ҡына, яралыны носилкаһы менән вертолет салонына керетеп һалдылар. Фаилды оҙатып барыусы ике ирекәй урындарын алыу менән, двигатель яңынан үкерҙе һәм вертолет, төнгө ҡараңғылыҡты йырып, күккә олғашты. Артынса күтәрелгән ел бураны баҫыла төшкәс, Әхнәф Солтанович «Волга»һынан төштө лә кемделер күҙләй башланы. Шул арала уның ҡырына ыҫпай ғына кейенгән ир заты һәм мамыҡ шәленә бөркәнгән ҡатын яҡынлашты.

– Баш врач Абдуллин. Эргәмдә – Нәзирә Ғәббәсовна, Фаилдың тормош иптәше, – тип таныштырҙы ул үҙҙәре менән.

– Һаумыһығыҙ, Нәзирә ханым! Ҡайғығыҙҙы уртаҡлашам. Шулай булырын кем уйлаған... Бәлә аяҡ аҫтында йөрөй шул. Улай-былай, берәй нәмәгә мохтажығыҙ юҡмы? Ярҙам?..

– Юҡ, юҡ, Әхнәф Солтанович... Вертолет саҡырғанығыҙ өсөн рәхмәт әйтергә тип килдем. Йөрәк һыҡрап торһа ла, күңел бер аҙ тынысланғандай итте, Әхнәф Солтанович. Ринат Саҙрыевичҡа ла ҙур рәхмәт.

– Нәзирә һеңлекәш, инаныс булһын ул, шунда ғына ҡайғыны баҫыуы еңелерәк. Һеҙҙең түҙемле булыуығыҙҙы теләйем.

– Үҙемде лә шулай йыуатам, Әхнәф Солтанович. Фаилдың организмы көслө лә... Белмәйем инде...

– Һеҙ, Ринат Саҙрыевич, ваҡыты менән Өфөгә элемтәгә сығығыҙ. Мине лә курста тотоғоҙ!

– Әлбиттә, Әхнәф Солтанович.

* * *

Фаилды вертолет менән Өфөгә оҙатҡас, Нәзирә төнө буйы иңрәп, йоҡоһоҙ сыҡты. Балалары ла ҡайғылы, әсәләрен ҡосаҡлай ҙа илайҙар. «Исмаһам, һин илама, беҙгә ҡыйын», – тигән була бахырҡайҙар. Иртәнге 9-ҙа Нәзирә үҙәк дауахананың баш врачы бүлмәһе ҡаршында түҙемһеҙлек менән кәңәшмә бөткәнен көтөп тора ине. Ләкин иртәнге кәңәшмә 50 минутҡа һуҙылды. Аҡ халатлы медперсонал эш урындарына таралғас, Нәзирә Ринат Саҙрыевич бүлмәһенә бәреп тигәндәй инде.

– Ә, һаумыһығыҙ, Нәзирә Ғәббәсовна! Әйҙә, рәхим итегеҙ. Ултырығыҙ.

– Ринат Саҙрыевич, Өфөгә шылтырата алдығыҙмы? Фаилдың хәле нисек икән? Нимә тиҙәр?

– Бөтөрөнмәгеҙ, Нәзирә ханым, Фаил, беләһегеҙ, көслө кеше, выдюжит.

– Шулай була ҡалһа икән дә...

– Иртәнге 8-ҙә Өфө менән элемтәлә булдым. Төнгө 3-тә операция өҫтәленә һалғандар. Операцияны өс сәғәт ярым яһағандар. Әле реанимацияла. Йәнә бер ҡатмарлы операция көтөлә, тик уныһы... ирегеҙ һушына килгәс.

– Әйтегеҙ дөрөҫөн, Ринат Саҙрыевич: Фаилдың иҫән ҡалырына өмөт бармы? Миңә нимә эшләргә? Иремә ниндәй ярҙам итә алам? Уны ҡарар кеше кәрәк икән, мин юлға әҙер.

– Беҙҙең эштә ышаныслыһыҙ булмай. Врач этикаһына таянып әйткәндә, Нәзирә Ғәббәсовна, шанс – иллегә илле. Хирургтарҙың ҡулдары нисек кенә алтын, тәжрибәле булмаһын, Һеҙҙең тылсымлы, нәфис һүҙҙәрегеҙ, ягымлы тыныс ҡарашығыҙ уға төп ҡеүәт буласаҡ. Шулай икән, Нәзирә Ғәббәсовна, Һеҙгә ирегеҙ ҡырында булыу хәйерле.

– Фаил ятҡан хирургия үҙәгенә нисек барып етергә һуң?

– Бына һеҙгә адрес. Хәйер, мин иртәгә үҙем Һаулыҡ һаҡлау министрлығына йыйынам,теләһәгеҙ, Һеҙҙе лә алып китә алам. Ирегеҙҙең ата-әсәһенә был фажиғә тураһында ишеттерҙегеҙме?

– Юҡ шул, Ринат Саҙрыевич. Ҡурҡып торам. Төштән һуң, берәй машина эҙләштереп, ауылға әйләнеп килергә ине.

– Мәшәҡәтегеҙ былай ҙа муйындан. Көндөҙгө икелә машина Һеҙҙе ҡапҡағыҙ төбөндә көтөр.

– Мең-мең рәхмәт Һеҙгә, Ринат Саҙрыевич!

Оло кешеләргә улдары тураһында ҡайғылы хәбәрҙе ишеттереүе Нәзирәгә анһат булманы. Асылына төшмәй, өҫтән-өҫтән һөйләнһә лә, Ниғмәт ағай менән Миңнеямал апай, ҡоттары осоп, ҡойолдо ла төштө. Нәзирә, мин Фаилды ҡарарға барам, тигәс, килендәре бер сынаяҡ сәй эскеләгәнсе, йыйынып, төйөнсөктәрен төйнәп тә ҡуйҙылар.

Фаилдың ғүмерен һаҡлап ҡалыу өсөн оҙаҡҡа һуҙылған көрәш башланды. Сирле ете көн тигәндә һушына килде, күҙҙәрен асты. Уны реанимациянан ике кешелек палатаға күсерҙеләр. Карауаты янында ултырып торған Нәзирәһен күргәс, Фаилдың йөҙөнә бәхетле йылмайыу сыҡты, ирендәрен көскә ҡыймылдатып: «Рәхмәт!» – тип бышылданы. Был теге донъянан ҡайтҡан кешенең тәүге еңеүе ине.

Фаилды алдағы көндәрендә тағы ла ауыр һынау көтә. Эшләнәсәк операция үтә ҡатмарлы булырға оҡшай. Төрлө медицина тикшеренеүҙәре үткәреү кәрәк булды. Японияла сығарылған компьютер-тамограф тип аталған прибор Өфөлә юҡ икән. Фаилды самолет менән Мәскәүгә алып барып, баш ҡаланың ғилми-тикшеренеү институтының баш мейеһе травматологияһы клиникаһына һалдылар. Илдең иң атаҡлы хирургтары донъя практикаһында үтә лә һирәк осрай торған операцияны уңышлы яһаны. Биш сәғәткә һуҙылған операция һөҙөмтәһендә баш һөйәге яртылаш, мейеһенең дүрттән бер өлөшө алып ташланылды. Донъяла мөғжизә юҡ, йә иһә, һирәк осрай, тиҙәр. Бар икән дә мөғжизә, бар! Һауыҡты Фаил. Һай, һере лә икән үҙе, тинеләр Мәскәү шөһрәттәре; көлдәктә тыуған, тип таң ҡалды Өфөнөң медицина остаздары. Өс ай үтеүгә «Знамя» колхозына рәйес булып ҡайтҡас, «аһ» тип ҡалды бар район. Фаил Мәскәү травмотолия институтынан ҡайтҡас, санаторийҙа дауаланыуын дауам иттерҙе, унан йәнә алты аҙна өйөндә врачтар күҙәтеүе аҫтында реабилитация курсы үтте. Уның һуңында өсөнсө группа инвалидлыҡ биреп, эшкә яраҡлыһың, тип ҡыуандырып, ҡанат ҡуйып ҡайтарҙылар.

Икенсе көндө иртә менән Фаил райком йортона килде. Әхнәф Солтанович уны шунда уҡ ҡабул итте һәм атайҙарса ҡосаҡлап ҡаршыланы. Хәйер, Фаил Мәскәүҙән ҡайтҡас, улар бер осрашҡайнылар. Ҡатыны Зөһрә ханым менән, сирленең хәлен белергә тип, бер кис ултырып киткәйне Әхнәф Солтанович.

– Фаил, һине һауығыуың менән тәбрикләйем, мин бик шат. Тәбиғәттән килгән тимер һаулығың, Хоҙай биргән көслө ихтыярың, ҡатыныңдың мөхәббәте һине аяҡҡа баҫтырырға ярҙам итте, тиһәм?..

– Һис шикһеҙ шулай, Әхнәф Солтанович. Әле әйткәндәрегеҙгә Һеҙҙең эскерһеҙ ярҙамығыҙҙы, шул уҡ вертолет, Мәскәүгә алып киткән санитар самолетын да ҡушһаң, терелмәй ҡайҙа барырға тейеш инем мин? Барыһы өсөн дә рәхмәт, Әхнәф Солтанович.

– Эйе, Фаил, ҡатын-ҡыҙҙың naҙлы ҡулдары, яғымлы ҡарашы, тылсымлы һүҙҙәре һаулығыбыҙға ярҙам итә.

– Әхнәф Солтанович! Мин һеҙгә кәңәшкә килдем, – тине Фаил күңелһеҙ генә, үҙен ғәйепле һиҙгән кеүек.

– Аңланым һине, нимә әйтереңде белеп торам. Эш тураһында һөйләшергә килгәнһең. Һинең эш урының һине һәр саҡ көтә, Фаил. Теләйһең икән, райком гаражында механик булып ҡал, мине йөрөтөргә уйың булһа, әйҙә, иртәгәнән «Волга»ға ултыр.

– Әхнәф Солтанович, рәхмәт. Мин нисектер... ҡапылдан быны көтмәгәйнем. Унан, мин Һеҙҙе йөрөтөп тә өлгөрмәнем. Нимә ҡылаһың, яҙмышыма шулай яҙғандыр...

– Нимә эшләп инде, Фаил? Һин әллә үҙеңде ғәйепле һанайһыңмы? Киреһенсә, һин – герой! Намыҫлы, үҙ-үҙен аямаған, кешелекле булғанға, бала ғүмерен һаҡлап ҡалыу өсөн ғәзиз ғүмереңде, иҫәнлегеңде...

– Әхнәф Солтанович, зинһар, кәрәкмәй. Миңә ул фажиғәле көндө күҙ алдыма килтереүе лә ауыр. Бер ниндәй герой ҙа, батыр ҙа түгел мин. Кем дә шул аҙымды эшләр ине. Иң мөһиме: бала ла, мин дә иҫән. Әхнәф Солтанович, мин «Профессиональ шофер эшен ташларға!» тигән уйға килдем. Атай-әсәйем ауылда йәшәргә саҡыра.

– Ауылда күңелеңә оҡшаған эш табылырмы һуң?

– Рим Барыевич миңә малсылыҡ тармағы буйынса инженер эше тәҡдим итте. Минең техникум, институт бөтөргәнгә дипломдарым бар. Шулай булғас, эше табылыр.

– Белмәй инем. Атайың шоферлыҡты ташларға өндәйме?

– Эйе, атайым ғүмере буйы мине етәксе ролендә күргеһе килде, руль артында йөрөгәнемде өнәмәне.

– Һине ниндәй кимәлдәге етәксе итеп күрергә теләй һуң? Райсовет рәйесе? Райком секретары? Әүҙеңдең колхоз рәйесе булғың килмәйме?

– Мине үҫмер сағымдан машиналар, шофер һөнәре ылыҡтырҙы. Шуға шофер булғаныма бер ҙә үкенмәйем. Ә инде рәйес эшенә килгәндә... риза йә юҡ тип әлегә аныҡ ҡына әйтә алмайым.

– Миңә лә 15 йыл элек, 27 йәштә инем, ошо уҡ тәҡдимде яһанылар. Так что минең баштан үткән хәл. Уйлап ҡара әле, Фаил. Әллә тәүәккәлләйбеҙме?

– Аңламаным, Әхнәф Солтанович.

– Хәйләкәрһең. Однако же. Еще как аңланың. Ике көн элек «Знамя» рәйесен эштән бушатырға тура килде.

– Марат Йосоповичтымы? Тәүләп ишетәм.

– Нәҡ үҙен. Әйҙә әле, Фаил, «Знамя»ға колхоз председателе булып бар. Әйткәндәй, һеҙҙең ауылдан Ташҡайырға нисә саҡрым?

– 6-7 тирәһе булыр.

– Әлеге заманда был оло ара түгел. Йә, нисек? Атайыңды шатландырырһың, исмаһам.

– Атайым шатланыр ҙа ул, ә Нәзирә? Көсөм етерме? Ҡаты сирҙән һуң. Әхнәф Солтанович, уйларға кәрәк, төрлө яҡлап анализларға.

– Эйе, эйе, бар, күршеләрең, үткән-һүткәндәр менән кәңәшләшеп кил... Һин – партия ағзаһы, икеләнеп торорға хаҡың юҡ. Партия ҡайҙа кәрәк тип таба – шунда китәһең. Әйткәйнем инде, мин дә был юлды үттем, миңә лә ҡаты ҡағылдылар. Һиңә, Фаил Ниғмәтович, сәғәт ярым ваҡыт. Бюро ағзалары йыйылғансы уйла, ҡатының менән кәңәшләш. Сәғәт унда кәңәшмә залында бул.

* * *

«Көтмәгәндә генә яҙмыш йәнә бер сюрприз яһаны», – тип уйланды яңы билдәләнгән рәйес ауылына ҡайтып барған саҡта. Бюро ни бары ете минут барҙы. Өс минут Әхнәф Солтанович һөйләне, ике минут Фаил. Һуңғы икеһендә Фаилдың ҡулын ҡыҫып ҡотланылар ҙа: «Иди, принимай колхоз», – тип сығарып ебәрҙеләр. Сәғәт ярым тирәһе райком алдындағы скверҙа икеләнеп, хистәренә бирелеп ултырҙы Фаил. Исмаһам, Нәзирәһе лә ауылда булып ҡалды шул. Рәйес эшенән баш тартыу мөмкин түгел, бюро ағзалары быны енәйәт менән бер күрәсәк.

Ултырыш залына ингәндә лә Фаил конкрет ҡарарға килмәгәйне, нимә әйтерен дә уйлап еткермәгәйне. Хәйер, унан һорап та торманылар. «Кәримов Фаил Ниғмәтович шул хужалыҡҡа тәғәйенләнә...» Ә Фаил нимә һөйләне һуң? Юҡ шул, белмәй ул нимә һөйләгәнен, ниндәй һүҙҙәр тапты икән теле? Моғайын: «Тырышырмын, аҡлармын», – тип әйткәндер. Иҫендә юҡ шул, томан эсендә ултырған һымаҡ булды уға. Бәлки, төш кенәлер? Тыуған йортона ҡайтып ингәндә, атаәсәһе, Нәзирәһе, кесе ҡыҙы төшкө ашҡа ултырған ине. Фаил өндәшмәй генә ҡулын сайҡаны ла өҫтәл артына үтте. Үҙе һүҙ башларға ҡыйманы. Нәзирәһе түҙмәне:

– Йә, нисек йөрөп ҡайттың?

– Һәйбәт.

– Рим Барыевичты күрҙеңме? Осраштығыҙмы?

– Юҡ шул. Ә ул нимәгә?

– Нисек инде, Фаил, ул хужа кеше, ул эш бирә, теләмәй икән – ишеккә күрһәтә, – тип һүҙгә ҡушылды атаһы.

– Хәҙер мин үҙем хужа. Улыңды инде «Фаил Ниғмәтович» тип йөрөтөрҙәр, – тине ул ғорур ғына һәм төшкә тиклем булған ваҡиғаны һөйләп бирҙе.

– Аллаһым мине ишетте булһа кәрәк. Инде үлһәм дә үкенмәйем, – тип атаһы һикереп тә торҙо, йүгертеп бер шешә араҡыны өҫтәлгә шап иттереп килтереп тә ултыртты.

– Атай, миңә әлегә ярамай. Беләһең бит – баш...

– Ә кем һиңә араҡы ҡойорға тора әле? – тип яуап ҡайтарҙы атаһы ҙур кинәнес менән. – Эсмә, улым, беҙгә күберәк эләгер.

– Атаһы, эскесе кешеләй ултырған булаһыңсы...

– Бөгөн исторический момент, төшөрмәй ярамай. Әсәһе, һиңә лә бер йотом һалам.

– Фаил, ҡайҙа китергә самаланың? – тип һораны Нәзирә, ғәжәпләнеүен йәшерә алмай.

– Ташҡайырға барып ҡайтырға кәрәк. Хужалыҡ ҙур. Алыш-биреш эштәрен оҙаҡҡа һуҙмаҫҡа ине.

– Ярай, улым, үҙең беләһең. Һине өйрәтәһе түгел. Хәйерле сәғәттә яуаплы эшеңә тотонорға яҙһын. Әйҙә әле, әсәһе, килен, шуның өсөн берәрҙе күтәреп ҡуйыйыҡ.

– Әйҙәгеҙ, әйҙә, минең иҫәнлеккә эсеп ебәрегеҙ, юғиһә Горбачев илдә «ҡоро закон» планлаштыра икән.

– Улым, әллә «еүеш закон» да бармы?

– Еүеше, әсәй, өҫтәлдә ултыра, ә ҡороһо эсеүҙән тыйылыуҙы талап итә. Магазинда араҡы-вино һатылмаясаҡ, уны етештереү туҡтатыласаҡ.

– Ну и дурак! – тип һиҙмәҫтән әйтеп ҡуйҙы ла Ниғмәт, аҙаҡ уңайһыҙланып китте. – Дөрөҫ политика түгел был. Мин, например, эскесе түгел, бына көн дә һалмышҡа әүәҫ әҙәм нимә эшләргә тейеш? Һин уға теләһә ниндәй закун керет, алкаш икән – ул эсәсәк. Берәүҙәре баҙҙа бал әсетеп эсер, икенсеһе сәмәй ҡыуып

күңелен наҙлар, ә инде өсөнсөләре йәшертен, ҡаса-боҫа самайын һатыуға ҡуясаҡ. Халыҡ барыбер берәй юлын уйлап таба ул.

– Дөрөҫ, атай, уйлап еткерелмәгән кампайнейщина был. Бәлки, Горбачевҡа халыҡ менән дә кәңәшләшергә кәрәк булғандыр. Эскелеккә ҡаршы көрәште бөтә яҡлап та алып барыу хәйерле, бер ҡарар йә тыйыу нигеҙендә уны еңеп булмаясаҡ.

– Миңә оҡшай был закон, ҡатын-ҡыҙ, балалар өсөн яҡшы, – тип үҙ фекерен белгертте Нәзирә.

– Һеҙҙең менән әңгәмә һәйбәт тә ул, тик миңә ҡуҙғалырға ваҡыт. Төнгә ҡалмай ҡайтырға тырышырмын.

– Ярай, имен йөрө.

* * *

Һуңғы алты йыл Әхнәф Солтанович Ҡамышлы районы партия ойошмаһын етәкләне. Фаил Ниғмәтовичтың «Знамя» колхозында рәйес вазифаһын башҡарыуына ла биш йылдан ашыу ваҡыт үтеп китте. Уларҙың эшләү осоро бер совет кешеһен дә битараф ҡалдырмаған көсөргәнешле 1985 – 1990 йылдарға тура килде. Ул йылдарҙа экономик үҫештең тотҡарланыуы, бер урында тапаныуҙар, айырыуса дәүләт өсөн стратегик һаналған машиналар төҙөү тармағының артта һөйрәлеүе 1985 йылдың апрелендә СССР-ҙың беренсе һәм һуңғы президенты Горбачев тарафынан илдә үҙенең «үҙгәртеп ҡороу» тип аталған программаһын индерә башлауға сәбәп булды. Илебеҙҙә ошо ике йүнәлеште көсәйтеү, халыҡтың көнкүреш-тормош шарттарын яҡшыртыуға йүнәлдерелгән сара ине был. Ләкин яңы курсты ысынбарлыҡҡа, халыҡ хужалығына индереү процесы еңелдәрҙән түгел ине. Үҙгәртеп ҡороу программаһы уңышлы барған хәлдә, илебеҙ, халыҡ өсөн үтә лә әһәмиәтле һәм отошло булаһы икән. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Горбачев тәҡдим иткән «перестройка» үҙ юлын һәм сиселешен тапманы. Ни өсөн тигәндә, бының сәбәптәре әйтеп бөтөргөһөҙ күп булды. Эскеселек менән көрәшеү һәм эшләмәй табыш алыуға өлгәшкәндәргә ҡаршы йүнәлдерелгән саралар уңышһыҙлыҡҡа осраны. Төрлө яңылышыуҙар, үҙ принциптарынан тайпылыу осраҡтары, иреккә сығарылған асыҡлыҡ сәйәсәте, ҡәрҙәштәре араһында берҙәмлек булмау арҡаһында бик ваҡытлы уйланылған үҙгәреш программаһы, тейешле аңлау һәм халыҡ араһында, яҡлау тапмай, юҡҡа сыҡты. 80-се йылдар аҙағында халыҡтың көнкүреш шарттары, мөмкинселеге һәм сығанаҡтары насарланыу, магазин-сауҙа системаһында аҙыҡ-түлек кәштәләренең бушап ҡалыуы һөҙөмтәһендә, хөкүмәткә, Дума депутаттарына, президент Горбачевтың эшмәкәрлегенә ризаһыҙлыҡ белдереү, ҡаршы сығыу, забастовка ойоштороу осраҡтары йышайҙы. Ул йылдарҙа инфляция күтәрелде, аҡса үҙенең әһәмиәтен юғалтты. Күп төрлө тауар дефицитҡа әйләнде. Спекуляция сәскә атты, айырыуса сауҙа тармағында киң ҡолас алды, бер-бер артлы иҫерткес эсемлектәр, шәкәр, сәй, тәмәке кризистары барлыҡҡа килде. Хеҙмәтсән халыҡ еңел машинаға, көнкүреш техникаһына сикһеҙ ҡытлыҡ кисерҙе. Был инде СССР-ҙа тәрән кризис хөкөм һөргәнлеге тураһында һөйләй ине. Ошо революцион йылдарҙа халыҡтың иғтибары үҙен популист итеп танытҡан һәм сирек ҡәҙәре генә эҙәрләүҙәргә дусар ителгән Ельцинға күсте. Илдең сәйәси сәхнәһенә яңы лидер күтәрелеп килә ине. 90-сы йылдың уртаһында ул – Юғары Совет рәйесе, ә бер аҙҙан РСФСР-ҙың беренсе президенты итеп һайланды.

Аҙаҡ, 1991 йылдың авгусында, илде тетрәткән һәм йәмғиәтте Граждандар һуғышына килтерә яҙған путч, компартияның тыйылыуы һәм бөтөрөлөүе, декабрь айында бөйөк державаның тарҡалыуы Горбачев һәм Ельцин исеме менән тығыҙ бәйләнгән.

Инде Рәсәй илендә дауыллы йылдар һәм көсөргәнешле ваҡиғалар туҡталыр, илебеҙҙең экономикаһын, халыҡтың тормош шарттарын яҡшыртыу программаһы эшләп китер, тип өмөтләнеп торғанда, йәнә болғансыҡ, революцион хәлдәр килеп тыуҙы. 1993 йылдың октябрендә – Ельцин яҡлы демократтар менән таратылған Дума депутаттарының асыҡтан-асыҡ ҡан ҡойоуға барып еткән хәрби бәрелешеүҙәре... Был ваҡиғалар Рәсәй тарихына уйылған ҡара таптарҙыр... Мәскәү урамдарын дер һелкетеп, тамсы ғәйепһеҙ кешеләрҙе танкылар менән тапатһындар әле... Беҙ Алла урынына табынған Аҡ йортто иһә танкылар залпы менән утҡа тотһондар...

1994 йылдың декабре. Туғандаш республикаға ҡаршы ҡорал күтәреү, ундарса йылдарға һуҙылған хәрби конфликт, һуғыш, юғалтыуҙар... Шуға ҡәҙәр Дудаевтың ҡорал туплағанын, боевиктар әҙерләүен, бер нәмә булмағандай, күҙәтеп ятырға кәрәк инеме?.. Ошонан һуң үҙебеҙҙе демократтар йә иһә халыҡты яҡлаусылар, уларҙың ихтыяждарын тәьмин итеүсе депутаттар тип күкрәк ҡағабыҙ түгелме... Етмәһә, Рәсәй – демократия төҙөүсе дәүләт, тип ғорурланған булабыҙ тағы...

...Биш йыл рәйес булып эшләү дәүерендә Фаил Ниғмәтович етәкләгән хужалыҡ районда ғына түгел, республика күләмендә лә алдынғылар сафына сыҡты, миллионер колхоз исемлегенә инде. Ауыл хужалығының барлыҡ тармаҡтарынан да һәйбәт табыш алынды, шуға килем дә юғары ине, етештергән продукцияларҙың үҙҡиммәте кәмене, етештереүсәнлек, игенселектән һәм малсылыҡтан алынған продукция күрһәткестәре ҡырҡа күтәрелде. Колхозда төҙөлөш эштәре йәйелдерелде. Ташҡайыр ауылында белгестәр һәм йәш колхозсылар өсөн ылыҫ ағасынан ун ике йорт ҡалҡып сыҡты. Был урамды Йәштәр урамы тип исемләнеләр. 800 баш һауын һыйырға иҫәпләнгән комплекс сафҡа индерелде. Өлгәшкән уңыштары өсөн хужалыҡ рәйесе Фаил Ниғмәтович «Почет Билдәһе» ордены менән наградланды. Был күрһәткестәр, әлбиттә, райком секретары Әхнәф Солтановичты ла шатландыра ине. Фаил Ниғмәтович менән бер-береһенә ярҙам ҡулы һуҙып эшләгәнгә, аралары яҡынайҙы. Ваҡыт үтә тора, үҙ-ара ихтирамлыҡ тойғолары ҡаҡшамаҫ ирҙәр дуҫлығына әйләнде. Һирәк-һаяҡ, бушыраҡ ваҡыттарында ғаиләләре менән бергә тәбиғәт ҡосағында ял иттеләр. 1990 йылдың яҙында Фаил Ниғмәтович «Знамя» колхозы рәйеслегенән райкомдың икенсе секретары итеп үрләтелде. Ул ғаиләһе менән яңынан район үҙәгенә күсеп килде. Тик атаһы, Ниғмәт ағай ғына, улының дәрәжәле эшкә күсерелеүен күрә алмай ҡалды.

Шуны иҫләп, Миңнеямал апай Ниғмәтенең ҡәберенә килде.

– Улың райкум секретары булып ултырҙы. Юҡ, атаһы, Әхнәф Солтановичтың секретарь-машинисткаһы түгел, эйе, машина йөрөтөүсеһе бар. Мин ни, Ниғмәт, үҙең беләһең, ҡалай итеп ауылда яңғыҙым ҡалайым, үҙҙәре менән районға алып киттеләр. Ә йортто?.. Ташкент ҡалаһынан һеңлем балалары менән ҡайтып тора башланы, – тип ҡартына яңылыҡтарын һөйләп, маҡтанмай түҙә алманы бисара йән. Был хәлдәрҙе ишетеп, Ниғмәт ағай ҙа шатланып яталыр әле... 1990 – 2000 йылдарҙа ауыл хужалығы тәрән кризис кисереү сәбәпле, мал комплекстарының хәле ауырлашты, әһәмиәте кәмене, ваҡ тип иҫәпләнгәндәре ябылды, юҡҡа сыҡты, тарҡалыуға, таланыуға дусар ителде. Нәҡ ошо йылдарҙа «Ауыл хужалығында ҙур үҙгәрештәр, йәғни аграр реформирование көтөлә» тигән һүҙҙе ҡуйырта башланылар. Әлбиттә, Әхнәф Солтанович, Фаил Ниғмәтович һәм башҡа район, республика етәкселәре өсөн был күктән төшкән яңылыҡ түгел ине. Илдә башланған «перестройка» шауҡымы халыҡ хужалығы тармаҡтарына ла теймәй-ҡағылмай үтер, тигән өмөттәр аҙ ине. Әйтергә кәрәк, Горбачев

эшләгән дәүерҙә эшҡыуарлыҡ эшмәкәрлеген йәйелдереү, кооператив төҙөү тураһында закондар донъя күрҙе. Ауыл хужалығында аренда, ҙур булмаған хужалыҡтарҙы, фермаларҙы, предприятиеларҙы хужалыҡ иҫәбе системаһына күсереү, иркен баҙар мөнәсәбәттәренә күсеү мөмкинлектәре асылды.

Дөрөҫөндә иһә, хөкүмәт тарафынан үҙаллылыҡ, баҙар экономикаһына күсеү тураһында ыңғай һүҙ алып барылһа ла, яңы барлыҡҡа килгән, ойошҡан кооператорҙар, аренда һәм хужалыҡ иҫәбенең өҫтөнлөгөн татып өлгөргән айырым коллективтар өсөн госзаказ, план, лимит төшөнсәләре бөтөрөлмәне, ә элгәреләй ҡалдырылды. Улар етештереү тауарҙарын иркле һатыу-алыуҙан, хаҡ ҡуйыуҙан мәхрүм ителде. Бер яҡтан, ойоштороу һәләте булғандарға ҙур мөмкинселек асылһа, шул эшләр ереңдә хужа бул, мул табыш ал, үҙеңде бөтә яҡлап күрһәт, тигән тенденция булдырылһа ла, шул уҡ ваҡытта иркле, үҙ аллы эшләргә ынтылғандарға тотҡарлау, аяҡ салыу, күп төрлө директиваларға буйһондороу осраҡтары саманан тыш күп булды.

Бер көндө Фаил Ниғмәтович менән Әхнәф Солтанович киске унға ҡәҙәр ауыл хужалығының үҙҙәрен борсоған киләсәге тураһында әңгәмә ҡороп ултырҙылар. Улар, яҡын дуҫтар булғанлыҡтан, бер-береһенә рәсми телдә мөрәжәғәт итеүҙән күптән баш тартҡайны.

– Нисек уйлайһың, Фаил, – тип һораны Әхнәф Солтанович дуҫынан, – Аграр реформа программаһы ауыл хужалығын берәй ыңғай хәлгә килтерерме, әллә кәмәнең осло моронын ярға терәтеп ҡуйырҙармы?

– Дөрөҫөн әйткәндә, Әхнәф, тәүге 10 – 15 йыллыҡта төртөлөп тороуы ла ихтимал. 60 йыл шул уҡ совхоз-колхоз системаһы совет халҡын ашатып килде. Ниндәй ауырлыҡ менән коллективизация, колхоздар ойошторолғанын беләһең бит. Хәҙер килеп уларҙы бөтөрөү, үҙгәртеү тураһында һүҙ бара. Колхоздар былай ҙа формаль рәүештә кооператив хужалыҡтар ҙа баһа. Нимәгә йәнә үҙгәреш? Ауыл ерендә эшләрҙәй кешеһе бар, ере, төп средстволар, мал һаны, техника етерлек. Ошоноң өҫтөнән нимә етмәй? Рустар әйтмешләй: «Сами, своими руками создаем себе трудности, потом их героически преодолеваем».

Беҙҙең халыҡ шуға өйрәнгәндәр инде. Булғанды һаҡламайбыҙ, ҡәҙере юҡ. Ысында иһә был – хужалыҡтың аҫтын өҫкә килтереү тигән һүҙ бит. Аҙаҡ ҡайтанан тергеҙә алырбыҙмы? Ҡыйратылғандың нимәһе ҡала һуң?

– Хафаланыуың аңлашыла, Фаил, мине лә шундайыраҡ уйҙар борсой. «Реформа» һүҙе ҡурҡыта, тип әйтәйемме... Бер һүҙ менән әйткәндә, шигем ҙур минең. Хужалыҡтарҙы реформалауҙы өс йүнәлештә алып барырға мөмкин, тип әйтәләр. Беренсеһе – яңы хужалыҡ итеү ысулы, хосуси милек нигеҙендә хөкүмәт ярҙамынан сикләндереү.

Күптән түгел Рәсәй Хөкүмәтенең колхоз-совхоздарҙа үҙгәртеп ҡороу үткәреү тураһындағы ҡарары сыҡты. Хәйер, һин ул ҡарар менән танышһың. Радикал-демократтар, эре колхоз-совхоздарҙы бөтөрөп, банкротҡа сығарып, ҙур булмаған крәҫтиән-фермер хужалыҡтары төҙөргә хыяллана. Икенсе йүнәлеште яҡлап сыҡҡан аграр чиновниктар колхоз-совхоз системаһын һаҡлап ҡалып, уларға оператив үҙаллылыҡ биреүҙе өҫтөн күрә. Фаил, һиңә нисектер, миңә был юл нығыраҡ оҡшай. Ә инде өсөнсө йүнәлештең ысынбарлығы шул: колхоз-совхоздар системаһын тарҡатмай, икенсе төрлө хужалыҡ итеү күҙ уңында тотола. Әйтәйек, общество, товарищество, кооператив, крәҫтиән-фермер хужалығы һ.б.

– Әхнәф, дөрөҫөн әйткәндә, беренсе йүнәлеш тураһында һөйләү әлегә урынһыҙ. Сөнки беҙҙең илдә фермерҙар һаны күп түгел. Улар етештергән продукция ни бары ике-өс процент тәшкил итә. Бөгөнгө көндә, фермерҙар хәрәкәте барған саҡта, илдең халҡын улар аҙыҡ-түлек менән тәьмин итерҙәр, тигән уйҙы башҡа

килтереү ҙә мөмкин түгел. «Фермер хужалыҡтары тиҙ арала колхоз-совхоз производствоһын алыштыра алыр» тигән уйҙырмалар утопия һымаҡ яңғырай. Минеңсә, икенсе йүнәлештең өҫтөнлөгө бар. Колхозға үҙаллылыҡ бир әле – тау аҡтарырға ла көстәре етә. Нимә үҫтерергә, сәсергә белерҙәр ине.

– Һай-һай, Фаил, әллә һин колхоз производствоһын яҡлау иҫәбенә адвокат һөнәрен дә үҙләштерҙеңме?

– Ха-ха-ха! Ярай, мин адвокатура менән шөғөлләнә башланым, ти, ә партия, райком бөтөрөлһә, һин ҡайҙа барырһың? Хәйер... Эйе...

– Ҡурҡма, дуҫҡай, арендаға 100 гектар ер алып, иген үҫтерермен. Һин механик та баһа, минең артелгә эш һорап килерһең әле. Шунда ҡарарбыҙ, һине Т-16 тракторына ултыртырғамы, әллә йәйәүләп...

– Ваҡланма, Әхнәф, булғас-булғас, К-700 тракторы булһын...

– Шутка. Шулай ҙа ул, Фаил. Ерҙе крәҫтиәнгә бушлай, пай формаһында таратып биреү планлаштырыла.

– Ҡаршылыҡ юҡ, Әхнәф. Алты гектарҙы законлы рәүештә бирҙек тә, ти. Аҙаҡ? Ул уны нисек эшкәртә? Һәр шәхси хужалыҡҡа бер техника бирәмеге бирә алмайбыҙ бит.

– Уныһы шулай. Һәр колхоз ағзаһына ер таратыуҙан ул фермер булып китә алмай. Шуға күрә ул ерен йә арендаға бирергә мәжбүр була, йә һатып ҡотола. Иҫбатлау кәрәкмәй, бер кем дә яңғыҙы ерҙе эффектлы эшкәртә алмай, ауыл хужалығы продукцияһын ҙур күләмдә етештереү мөмкин түгел. Әлбиттә, шәхси хужалыҡ менән шөғөлләнеүселәр күп, тик ауыл ерендә йәшәгән халыҡтың 15 проценты ғына үҙ аллы, үҙ көсө менән ниндәй ҙә булһа продукция етештереүҙе үҙ итә. Билгеле, үҙе өсөн түгел, һатыу өсөн. Ғаилә подряды менән күп тигәндә ярты гектар ерҙә йәшелсә үҫтереп, баҙарҙа һатып була. Йә ике-өс һауын һыйыры тоторға мөмкин.

– Тимәк, Әхнәф Солтанович?

– Тимәк шул, Фаил Ниғмәтович: ауыл ерендә ниндәй генә хужалыҡ итеү формаһы булмаһын, «Один в поле не воин» тигәндәй, кооперация ойоштороу, берләшеү талап ителә. Шуға беҙгә хужалыҡтарҙы һаҡлап ҡалырға кәрәк. Булһын ул артель, кооператив ассоциация, ООО, СПК, крәҫтиән-фермер хужалығы булмағайы черт булһын, тик хужалыҡтарҙы тарҡатмаҫҡа, бүлдермәҫкә, малдарҙың һанын кәметмәҫкә – шунда беҙ еңеүсе, шунда районыбыҙ йәшәйәсәк, шунда уның киләсәге... Ошо эштәрҙе үҙебеҙгә маҡсат итеп ҡуяйыҡ әле, йәштәш.

– Мин әҙер, Әхнәф! Һөйләшкәнсә эш итәйек.

Йылдан артыҡ эшләп ҡалды Фаил Ниғмәтович райком системаһында. Райком ишектәренә йоҙаҡ эленде, ҡыҙыу баштар партбилеттарын усаҡҡа ырғытты, абайыраҡтары ҡумтаға йәшерҙе. Күп тә үтмәй, Әхнәф Солтанович район Советы башҡарма комитеты рәйесе булып ултырҙы.

Фаил Ниғмәтовичты ла үҙенән алыҫлаштырманы. Башта ул хакимиәт башлығының төҙөлөш һәм төҙөкләндереү буйынса урынбаҫары ине, ә инде Әхнәф Солтанович йөрәгенә ауыр операция яһатып, 58 йәшендә хаҡлы ялға киткәс, уның урынына Ҡамышлы районы хакимиәт башлығы булып ҡалды.

Фаил Ниғмәтович район башҡарма Советының эшмәкәрлеген, эш стилен бер бөгөн генә ишетеп белмәй. Инде нисә йыл райсоветта урынбаҫар йөгөн тартты ла баһа. «Зам эшен тарттың-тартың да Әхнәф Солтановичтың урынын тартып алдың», – тип шаярҭҡайны Өфөләге танышы бер ултырғандарында. Тик хакимиәт башлығы өҫтәле артында ғына көтөлмәгән яңы эштең ни ҡәҙәр ҡатмарлы һәм үҙенсәлекле икәнлегенә төшөндө Фаил Ниғмәтович. Егерменсе быуат тамамланырға ике йыл ҡала, ә эшләнәһе, сиселешен көткән проблемалар,

ай-һай, муйындан... Аграр реформа, үҙенең йомғаҡлау һыҙығына етә алмай, йә урынында тыпырсына, йә төрлө яҡлауҙар, ҡаршылыҡтар аша яй ғына алға барған кеүек. Ваҡыты менән ҡыҫа ла кеүек, сигенергә лә мәжбүр. Үтә лә ауыр осор. Айырыуса кешеләрҙең бөгөнгө көнгә мөнәсәбәттәре, киләсәккә ҡарашы борсой хакимиәт башлығын. Союз бөтөрөлгәнгә ете йыл, ә күптәр совет илен, коммунистар режимын һағынып иҫкә ала.

Кешеләр, етәкселәр ауыҙынан йыш ҡына «Партия ил менән етәкселек иткәндә һәйбәтерәк йәшәлә ине, арзансылыҡ булды, аҡсаның тауар һатып алыу һәләте ҙур ине, аҙғынлыҡ, тәртип боҙоу, коррупция аҙ ине» тигән һүҙҙәрҙе ишетергә була. Күрәһең, коммунистар заманынан ҡалған стереотип йоғонтоһо көслө әле беҙҙең замандаштарҙа. Айырыуса пенсия йәшендәге оло кешеләргә хас был. Яңылыҡҡа ынтылған йәштәр иһә Ельцин биргән үҙаллылыҡ менән ҡыҙыҡһына, уның төрлө мөмкинлектәр асҡан сәйәсәтен өҫтөн күрә.

Фаил Ниғмәтович етәкләгән районның иҡтисады аҙыҡ-түлек продукцияһы етештереү менән бәйле булғанға, ул бар энергияһын, ваҡытын ауыл хужалығына бағышланы.

Бер ял көндө ул эш бүлмәһендә оҙаҡ ҡына яңғыҙы ултырҙы. Эштәрен йомошлап йөрөүсеһе юҡ. Исмаһам, фекер йөрөтөп, үҙендә борсоған уйҙарға бирелеп, үткән йылдарға әйләнеп ҡайтырға була, тип уйлап та өлгөрмәне, күҙ алдына 1991 йылдың декабрь айы килеп баҫты. Билдәле, кемдең инде шул көсөргәнешле, аянһыслы йылдарҙы йыш иҫенә төшөрөргә йөрәге етһен. Шул айҙа Ельциндың Рәсәйҙең бар өлкәләренә, республикаларына ҡағылған указы донъя күрҙе. Указдың эстәлеге совхоз-колхоз системаһын тамырынан үҙгәртеп, хужалыҡтарҙың бар мөлкәтен бушлай, хосуси милеклеккә фермерҙарға һәм шәхси хужалыҡтарға таратып биреү тураһында ине. Ә финанс ауырлыҡтары кисергән, кредит бурыстарын һәм эш хаҡын бирә алмаған хужалыҡтар бөтөрөлөп, банкротҡа сығарыла, тиелә ул законда. Үҙгәртеп ҡороу программаһын ике ай эсендә үтәй башлау мотлаҡ ине. Күп өлкәләрҙә был ҡарар административ һәм экономик баҫым аҫтында тормошҡа ашырылды. Махсус рәүештә хужалыҡтарҙы тарҡатыу ниндәй нәтижәгә килтерҙе һуң? Беренсенән, ауыл ерендә эшһеҙлек хөкөм һөрә. Эшкә яраҡлы йөҙ кешенең егермеһе эш менән тәьмин ителгән, ә ҡалғандары? Йәш көстәр иһә ҡалаға ағыла, төҙөлөш, транспорт тармаҡтарында, тәртип, мөлкәт һаҡлау учреждениеларында эш урыны таба. Ауылда ҡалғандары, үҙен ҡайҙа ҡуйырға белмәй, эскелеккә һабыша. Икенсенән, кешелә аҡса сире асылды. Ҡай берәүҙәр өсөн берҙән-бер ынтылышҡа, тормош маҡсатына әйләнде. Был сир кешенең зиһенен ағыулай, нәфсеһе туйһа ла – күҙе туймай йә киреһенсә. Бисара әҙәм тәбиғәттең, тормоштоң күркәмлеген, баласағаһының шатлығын күрмәй ҡала... Ә инде хужалыҡтарға килгәндә, колхоз-совхоздар бөтөрөлөү менән башланды уларҙың мөлкәтен үҙләштереү, талау, урлыҡ, малды шәхси хужалыҡтарға көсләп таратыу. Ошо йылдарҙа мастерской тулы техника: машина-тракторҙар, ферма тулы малдар ҡанатланып ҡайҙалыр осто... Ҡайҙа ҡарама, ниндәй өлкәгә ҡағылма, бер үк шомло күренеш: күҙ күреме етмәҫ эшкәртелмәгән, һөрөүҙе күрмәгән баҫыу-яландар, ишектәҙрәләре һалынып төшкән, урланған-ҡыйратылған, ел уйнап торған мал торлаҡтары, бомбаға тотолғандай ятҡан иҫәп-хисапһыҙ таланған комплекс биналары... Шул ташландыҡтарҙы бер күрҙениһәң, йәшәйештең йәме, ғәме китә, күңелгә ҡара ҡором ултыра.

Ә бар ине бит шул ферма-комплекстарҙың гөрләп торған саҡтары...

Фаил Ниғмәтовичтың күҙ алдына баҫҡан йөрәк тетрәткес күренештәр, әлбиттә, уның сит ерҙәрҙә, төрлө төбәктәрҙә күргәндәре ине. Ә уның тыуған

районында нисек һуң, үҙе етәкләгән районда? Аллаһы Тәғәләм күрһәтмәһен, тип әйтергә генә ҡала... Бында хужаһыҙлыҡҡа, тарҡатыуға юл ҡуйманылар Әхнәф Солтанович менән Фаил Ниғмәтович эшләү дәүерҙәрендә. «Колхоз» һүҙе тәүге мәлдә аңлайышһыҙ булып яңғыраған СПК, ОАО, ООО, КФХ-ларға алыштырылһа ла, хужалыҡтарҙа иген баҫыуҙары шул уҡ майҙанды биләй, район буйынса мал һанын да элекке кимәлдә тотоп киләләр, ауыл хужалығы техникаһын да таратмай һаҡлап ҡала алдылар. Шуға күрһәткестәре лә шатландырырлыҡ, өлгө итеп алырлыҡ. Әлбиттә, төрлөһө булды: ҡыҙғанысы, көйҙөргәне, хәлһеҙерәк хужалыҡтарҙың бер нисә йыл эш хаҡы бирә алмаған саҡтары ла.

1999 йылдың ҡарлы-буранлы ҡыш айында экономикаһы аҡһаған, хәлһеҙерәк хужалыҡҡа юлы төштө. Кооператив рәйесе менән ауыл урамынан килә ятҡанда, ҡаршыларына саналы ат осраны. Санаһына өйөп силос тейәлгән, өҫтөнә мул итеп бесән түшәлгән. Туҡтаттылар.

– Аҙыҡты ҡайҙа алып бараһың былай? – Һорамай түҙмәне рәйес, шартлар сиккә етеп. Үҙе бер ҡыҙарҙы, бер ағарынды район башлығы алдында.

– Билдәле,– өйгә. – Күҙ ҙә йоммай яуапланы йөк өҫтөндәге ир, бер ни булмағандай.

– Һиңә әйтәм, тыңла! Хәҙер үк атыңды бор, кормаңды ҡайҙан алғанһың – шунда илтеп бушат. Юғиһә...

– Нимә, юғиһә... Бороло̆рға уйламайым да, миңә ҡысҡырынма, ҡурҡмайбыҙ. Корма минеке, һинеке түгел. Мин фермала мал ҡараусы. Үҙемә тейешлеһен алдым.

– Нимә, милиция саҡыртҡанды көтәһеңме?

– Саҡыртырҙан алда эш хаҡы түлә. Дүртенсе йыл бер тинһеҙ үҙең эшләп ҡара. Алдай ҙа эшләтәһең. Обещалщик. Аҡсаһыҙ нисек йәшәйһең, тип бер ҙә һорамайһың. Аҡса түлә йәшәрҙәйен – бер һәнәк тә алмам. Ә погонлылар менән мине ҡурҡытма. Өс сабыйымды ашатһаң-эсерһәң – пожалуйста. Көпә-көндөҙ урлаша, тип ултыртһындар әйҙә. Донъяның барын да күрҙем, төрмә камераһы күрәһе ҡалған ине... Исмаһам, үкенесле булмаҫ.

– Етте, замолчи. Хәҙер үк ауыҙыңды йом. Йөгөңдән төш, беҙҙең янға кил. Нисек һөйләшергә өйрәтермен.

– Как бы не так. Төшәһем юҡ, хыть сәсрәп кит, – тип һүҙ бирмәне мал ҡараусы. – Эштән ҡыуып ҡайтараһыңмы? Әйҙә. Түлке бел: иртәгәһен үк арттан саптырып киләһең дә баһа. Бушлайға ҡайһы дурагы фермаға эшкә килһен.

Фаил Ниғмәтович ҡыҫылманы, һүҙ ҡатманы. Бик сетерекле, ләкин донъяла була торған хәл ине. Ул рәйестең еңенән тартып ҡуйҙы, унан ҡулын урам барышына һелтәне.Рәйес бер һүҙһеҙ аңланы.

– Ярай, юлыңда бул. Ҡайт. Ҡара уны, йәнә урлашып йөрөһәң...

Мал ҡараусы, ҡотолғанына ышана алмай, атын алға ҡыуҙы. Рәйестең эш бүлмәһенә инделәр. Хужа өндәшмәй. Үтә уңайһыҙ хәлгә тарыны шул. Фаил Ниғмәтович тынлыҡты боҙҙо.

– Хәҙер аңлашыла, Рәмил Кашапович. Бына ни өсөн фермала тәртип юҡ, һөт юҡ. Яҙ уртаһында мал аҙығығыҙ бөтә. Унан район буйлап темеҫкенеп йөрөйһөң: бир әле силос, бир әле үтескә фураж. Шул да булдымы эш. Ул скотник урлашмай ҡалай итһен, үҙебеҙ шуға юл ҡуябыҙ. Был практиканды туҡтат. Иртәгәнән ҡалмай, әлеге мал ҡараусыға эшләп алғанын ведомость менән бир.

– Фаил Ниғмәтович, бәлки, һуңғараҡ. Кассала бер тин юҡ.

– Касса кәрәкмәй. Пинжәгеңдең эске кеҫәһенән сығарып бир. Ҡалғандарға ла өлөш сығар. Һиңә өс ай ваҡыт. Өс ай эсендә эш хаҡы буйынса бурыстарыңды бөтөр. Береһе лә, аҡса юҡ, тип һыҡрап йөрөмәһен. Ишеттеңме, Рәмил Кашапович?

– Юҡ! Эйе, ишеттем. Ҡайҙан ул ҡәҙәре аҡса алайым мин?

– Уныһы, рәйес иптәш, һинең проблема. Теләйһең икән, үҙеңдең иҫәбеңдән ал. Етмәһә, яңы йортоңдо һат. Ферма малына теймә. Әгәр ҙә ары эшләргә уйлаһаң, мин әйткәнде онотма. Һиңә өс ай. – Рәйескә ҡаты бәрелдеме Фаил Ниғмәтович?

«Тимәк, был хужалыҡта уғрылыҡ сәскә ата, – тип уйланды район хакимиәт башлығы, ҡайтыр юлға боролғас. – Ә Рәмил Кашапович минең алда ғына шулай уҫал булып ҡыланды, скотникка юрамал ғына, показательный шелтә бирергә ҡыйышты».

Шулай ҙа булғылай шул. Һәр саҡ барыһы ла шыма бармай.

Фаил Ниғмәтовичтың алдағы йылдарында ла эшләргә пландары ҙур ине. Эшләйһе эштәрен: иҡтисады ҡаҡшаған хужалыҡтарҙы аяҡҡа баҫтырыу, яңы техника һатып алыу, колхоз малдарының һанын арттырыу проблемаларын һәр саҡ күҙ уңында тотто. Ошо мәсьәләләрҙе сисеү, ғәмәлгә ашырыу өҫтөндә көн-төн, арыу-талыу белмәй эшләне лә эшләне. Хатта һаулығының хөртәйә барғанлығын һиҙмәй ҙә ҡалды шикелле ул... Әллә белдермәнеме? Бәлки, шулайҙыр ҙа. Теүәл биш йыл дауамында ул район хакимиәте башлығы йөгөн тартты. Нәзирәһе инде ете йыл пенсияла, биш ейән-ейәнсәрен тәрбиәләргә ярҙамлаша.

Ял көнө ине. Фаил Ниғмәтович бик йонсоғанға оҡшай, иртәнге унға тиклем уятмауҙарын һорап, йоҡо бүлмәһенә инеп китте. Иртәнге ун булды, ун бер ҙә тулып үтте. Нәзирә иренең оҙағыраҡ йоҡлауын теләй ине, шуға Фаилды уятырға ашыҡманы ла. Ун икенсе яртылар тирәһе еткәс, ул йоҡо бүлмәһенә шым ғына инде:

– Фаил, йоҡоң туйғандыр, әллә тораһыңмы?

Ире өндәшмәне. Ҡатынды билдәһеҙ ҡурҡыу тойғоһо солғап алды. Фаилдың күкрәгенә башын һалып, йөрәк тибешен тыңларға булды. Тәненең сәйер һалҡынлығын тойоп, ҡатып ҡалды. Өҙөлөп һөйгән кешеһенең йөрәге типмәй ине.

– Фаил! Нимә... Нимә булды һиңә? – Нәзирә ағарынған ирендәрен ҡанатҡансы тешләп, күҙ йәштәренә быуыла-быуыла бүлмәнән сығып йүгерҙе.

Юл өҫтөндә муйыл, сирень ағастары, ҡуйы ҡыуаҡлыҡтар менән уратылып ауыл зыяраты һуҙылып киткән. Уның урта өлөшөндә сәскәле үлән араһында йәнә бер ҡәбер ҡалҡып сыҡты. Гранит ташынан һалынған һәйкәл ҡалын суйын сынйыр менән әйләндерелеп алынған.

Зыяратҡа табан ике еңел машина боролоп, яй ғына яҡынлаша башланы һәм буяулы ҡапҡаға етәрәк туҡтап ҡалды. Бер аҙҙан унлаған олоһо-кесеһе ҡәберҙе уратып баҫты. Тауыш-тындары юҡ.

Олпат йәштәрҙәге ир ҡәбер ҡаршыһында ҡатып ҡалған. Әллә Әхнәф Солтановичмы? Эйе, нәҡ үҙе. Уның ирендәре нимә тип шыбырҙай һуң?

– Фаил Ниғмәтович! Фаил дуҫым, мин йәнә һинең ҡырҙа. Инде ҡырҡ көн һин беҙҙең арала юҡ. Йөрәгем һыҡрап, иламһырап торһа ла, күңелем, аң-зиһенем быға әле лә ышанмай. Дуҫҡай, был донъянан иртә киттең, һине һаҡлап ҡала алманыҡ – шуныһы аяныс. Һин һәр саҡ күҙ алдымда. Һине үҙем ҡәбер эйәһе булғансыға ҡәҙәр онотасағым юҡ. Тыныс йоҡла, дуҫҡай.

Мөләйем, оло йәшендә лә төҫ ташламаған Нәзирә ханым да үтә бойоҡ. Ауыр кисерҙе ул иренең үлемен.

– Ҡәҙерлем, һөйөклө Фаилым менән, был мин, Нәзирәң. Бына балаларыбыҙ менән йыйылып килдек әле. Ауыр һинһеҙ, Фаил. Түҙеп торғоһоҙ ауыр. Бер

көнөбөҙ һине иҫкә алмай үтмәй. Төндәр буйы һине һағынып меңдәргә ҡапланам да илайым. Фаил, бел: минең өсөн был яҡты донъяла йәшәүемдең ҡыҙығы ҡалманы. Бары тик балаларыбыҙ хаҡына йәшәйем. Улар булмаһа...

Нәзирәнең аяҡ быуындары йомшарып, ул ергә теҙләнгән килеш ҡулдары менән һалҡын гранит ташын ҡосаҡлай, иркәләй. Бөтә тәне менән ҡалтыранып: «Ниңә беҙҙе ташлап киттең...» – тип бер үк һүҙҙәрҙе ҡабатлай ҙа ҡабатлай. Күҙҙәренән мөлдөрәп аҡҡан йәш бөрсөктәре ҡәбер өҫтөнә тама.

Шул арала улдары, иҫтәренә килеп, әсәләренә ярҙамға ташланды. Икеһе ике яҡ терһәгенән тотоп, машинаға сығарып ултырттылар. Бына йәнә машиналар моторы ҡабынды.

Фаил, Фаил Ниғмәтович, ишетәһеңме? Балаларың, Нәзирәң, дуҫтарың тағы ла килерҙәр әле. Ҡәҙерле кешеләрең һинең ҡәбереңә һәр саҡ тере сәскә һаласаҡ.

Ошо ауыр юғалтыуҙан һуң өс йыл ваҡыт үтеп китте. Әхнәф Солтановичҡа ла был йылдарҙа ҡайғы артынан ҡайғы килде лә торҙо. Йыл ярым элек һөйөклө ҡатыны, айға тиңләгән һәм әүлиәләй күргән Зөһрәһе, яман шеш сире менән оҙаҡ ауырығандан һуң, ирен, балаларын ҡалдырып, мәңгелеккә китеп барҙы.

Сыҙай алмаҫлыҡ ҡайғынан бына-бына күҙе асыла башлаған йыл ине, тағы ла ҡот осҡос бәлә килде: утыҙ алты йәшлек кенә ҡыҙы Өфөгә командировкаға барғанда юл фажиғәһендә һәләк булды... Шул ваҡыт, ҡара һыҙыҡтар эсендә нисек йәшәне һуң Әхнәф Солтанович? Юғалып ҡалмаҫҡа, теҙләнеп ҡатмаҫҡа ҡайҙан көс тупланы икән? Көслө характерлы һәм ихтыярлы кеше булараҡ, үҙен теҙгендә тотҡандыр, моғайын. Был йөрәк тетрәткес ҡайғыларҙан һуң йәнә бер йыл үтте. Ғүмере буйы кеше араһында ҡайнаған кешегә яңғыҙы көн күреүе үтә лә ауыр ине.

Тәүәккәлләргә булды Әхнәф Солтанович. Бер көндө Нәзирәгә барҙы ла уның ҡулын һораны. Һәүетемсә генә һөйләште. «Яңғыҙ көйө һиңә лә, миңә лә ҡыйын, ҡартая барған көнөбөҙҙә бергә йәшәйек, бер-беребеҙгә терәк булайыҡ», – тине. Нимә-нимә, Әхнәф Солтановичтан бындай тәҡдимде Нәзирә көтмәгәйне, әлбиттә. Оҙаҡ уйланғандан һуң ҡатын тәҡдимде кире ҡаҡты. Бер уйлағанда, Фаилдың үлгәненә өс йыл, шәриғәт ҡанундарына ла ҡаршы килмәй. Бәлки... Юҡ, юҡ, балалары нимә әйтер? Аңларҙармы? Ә Фаилы алдында... хыянат түгелме был? Ошо уйҙар ҡатынды икенсегә кейәүгә сығыу уйынан тамам дүндерҙе.

Әхнәф Солтановичтың бик тиҙ бирешергә иҫәбе юҡ. Ул ныҡышмалы рәүештә Нәзирәгә иғтибар күрһәтә килде, гел генә сәскәләр гөлләмәһе бүләк итте, кәрәгенсә ярҙам ҡулы һуҙҙы. Ике йыл буйы Нәзирәнең ризалығын көттө ул. Аҙаҡҡы сиктә был хаҡта Нәзирәнең балалары әсәләре менән үҙҙәре һөйләште.

– Әсәй, үҙеңде лә, кешене лә яфалама. Тилмереп йөрөмәгеҙ. Әхнәф Солтанович – һәйбәт кеше, атайыбыҙҙың дуҫы, ҡауышығыҙ ҙа ҡуйығыҙ, – тинеләр.

Балаларының ҡаршылығы булмағас, ҡатын Фаилы янына барып әйләнде. Һуңғы йылда Әхнәф Солтанович менән килеп сыҡҡан мөнәсәбәте тураһында һөйләне, ғәфү үтенде, ризалығын һораны. Нимә әйтһен инде Фаилы... Ул ҡаршылыр шул. Нәзирәһенең бәхетле булыуын, әшнәһе Әхнәф Солтанович менән йәшәүен ул да теләп яталыр әле...

Күктә болоттар йөҙә. Ҡайҙарға юл тоттоғоҙ, ниңә өндәшмәйһегеҙ? Әй, ағыла болоттар...

## «Ағиҙел»дә ҡунаҡта – Силәбе ҡалаһының М. Акмулла исемендәге әҙәби берекмәһе

### ҺҮРЕЛМӘЙ ИЖАД ЯЛҠЫНЫ

Был – республиканан ситтә башҡорт һәм татар яҙыусыларын бергә туплап, уңышлы эшләп килгән берҙән-бер әҙәби берекмә Рәсәйҙә. Силәбе өлкәһендә әҙәбиәтте пропагандалау, үҫтереү һәм ижади көстәрҙе туплау буйынса мөһим эш башҡара. Берекмәлә барлығы 41 ағза. Шуларҙан башҡорт яҙыусылары – 29, татар ҡәләмдәштәребеҙ – 12.

Арғаяшта (етәксеһе – Айҙар Ишбирҙин), Ҡоншаҡта (Венера Нуртдинова), Сосновкала (Урал Ҡолошов) район әҙәби берекмәләре эшләй. Быйыл Магнитогорскиҙа «Урал ынйылары» (етәксеһе – Файза Мәғәсүмова), Мейәстә «Мейәс буйы» (Зөһрә Ильясова) исемле әҙәби берекмәләр ойошторолдо.

Силәбелә яҡташ яҙыусыларҙың исемдәрен мәңгеләштереү буйынса ҙур эштәр башҡарыла. 2000 йылда Ҡоншаҡ район китапханаһына Ҡадир Даян исеме бирелде, 2004 йылда уның исемендәге премия булдырылды. Арғаяш районының Мәүлит башланғыс мәктәбендә Кәтибә Кинйәбулатованың 90 йәшлек юбилейы айҡанлы таҡтаташ ҡуйылды. Сосновка районының Тәгеш ауылында Ғәлимов Сәләмдең тыуған йортона ла таҡтаташ ҡуйылғайны, быйыл иһә район хакимиәте, тыуыуына 100 йыл тулыу айҡанлы, уның исемендәге премия булдырҙы. Силәбелә Рамазан Шәғәлиев йәшәгән йортҡа таҡтаташ ҡуйыу, уның исемен мәңгеләштереү – милли ойошмаларҙың әлеге бурысы – буйынса ла һүҙҙән эшкә күскәнбеҙ инде.

Әҙәби берекмә ағзаларының ижады төрлө юлдар менән нәшер ителә. Әхмәт Рафиҡов, Алевтина Вәлиева, Жәнфиҙа Ваһапова, Урал Ҡолошов, Венера Нуртдинова, Мәүлиҙә Ибраһимова, Дарвин Таһиров китаптары уҡыусыға үҙнәшер юлы менән барып етте. 2007 йылда Татарстан китап нәшриәте «Силәбе моңнары» (төҙөүсеһе – Рәфис Ҡорбан) исемле әҙәби йыйынтыҡ менән һөйөндөргәйне. 2010 йылда Силәбелә «Арғаяш башҡорттарының рухи донъяһы» (төҙөүселәре – Ҡамса Мортазин, Рафаэль Мөхәмәтйәнов) тигән китап Арғаяш район хакимиәте ярҙамында донъя күреп, райондың барлыҡ китапханаларына таратылды. Быйыл иһә Башҡортостан «Китап» нәшриәте әҙерләгән «Силәбе башҡорттарының әҙәбиәт антологияһы» (төҙөүсеһе – Ҡамса Мортазин) исемле фундаменталь хеҙмәтебеҙҙе ҡулыбыҙға алып шатлыҡ тойғоһо кисерҙек, уны ла өлкәнең туған тел уҡытылған мәктәптәренә еткереү буйынса эшләйбеҙ. Антология берекмәнең 50 йыллығына һөйөклө республикабыҙҙан оло бүләк булды, бының өсөн нәшриәткә сикһеҙ рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ.

Мәктәптәр менән ижади бәйләнештәр өҙлөкһөҙ дауам итә. Осрашыуҙар, әҙәби кисәләрҙән тыш, йыл һайын мәктәп уҡыусыларының ижади семинарҙары ойоштороло. Уларҙың һөҙөмтәһе – әҙәби йыйынтыҡтар төҙөлә. «Ынйыҡай» (2007), «Тамсыҡай» (2008), «Радуга» (2010), «Беҙ үҙебеҙ – башҡорттар»

(2011) исемле әҙәби йыйынтыҡтар шулай тыуҙы. Ҡоншаҡ районының Тәхәлем урта мәктәбе уҡыусыһы Альвина Мөхәмәтйәнованың «Төймә лә бүләк» исемле китабы 2009 йылда төбәк-ара ижади конференцияла баһаланып, нәшер ителгәйне. Быйыл ул Өфөлә Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатын тамамланы.

«Терәгебеҙ – Башҡортостан, ут күршебеҙ – Учалы, һеҙҙең менән дуҫ булыуға ерҙә ниҙәр етә һуң?!» тигән шиғыр юлдары телгә үҙҙәренән-үҙҙәре килә. Учалы яҙыусылары, уҡытыусылары, мәғариф хеҙмәткәрҙәре күрһәткән хөрмәт – йөрәк түрендә. Мәүлит Ямалетдин, Зилә Шәрәфетдинова, Рәмзилә Ғәлимова, Фәнил Бүләков, Мөнир Ихсанов һ.б. исемдәр, үҙҙәре Ирәмәлдәй, алыҫтан беҙҙең яҙмышты һиҙгер күҙәтәләр.

Йыл һайын Учалыға – Изге Әүлиә шишмәһенә сәфәребеҙ дауам итә. Ундағы осрашыуҙар йәнле дәрес булып хәтерҙә ҡала. Абҙаҡ, Туңғатар, Кәрим, Иҫке Байрамғол, Мулдаҡай урта мәктәптәрендә ойошторолған йөкмәткеле осрашыуҙарҙан һабаҡ ала силәбеләр. Ҡалыптарға һыймаҫ дәресте йыл һайын Учалы район мәғариф бүлеге, уның талымһыҙ методисы Шәрәфетдинова Зилә Ғизетдин ҡыҙы ойоштора. Шундай төбәк-ара бәйләнештәр һәм хеҙмәттәшлек рухыбыҙҙы изге эштәргә көйләй.

Арғаяш районының Өйәлге күле буйында Салауат Юлаев һәйкәле янында «Башҡорт шиғриәте байрамы» уҙғарыу матур йолаға әйләнде. Йыл һайын әҙәби берекмә ағзалары унда майҙан тота. Арғаяш район хакимиәте һөҙөмтәле, әүҙем шағирҙарға Рәхмәт хаттары, аҡсалата премиялар тапшыра. Арғаяш районындағы шиғриәт байрамы, Ҡоншаҡта йыл һайын Ҡадир Даян исемендәге премия лауреаттарын билдәләү шағирҙарға, журналистарға һәм тыуған яҡты өйрәнеүселәргә ҡанат ҡуя, уларҙы ижадҡа илһамландыра.

Силәбе ере шуның менән дан тота: бында – дөйөм төрки халыҡтарын берләштергән бөйөк шағир-философ Мифтахетдин Аҡмулла ерләнгән; бында – Даян, Сәләм, Хәй тыуған; бында – һоҡландырғыс шағирәбеҙ Кәтибә Кинйәбулатованың иле! Былар үҙҙәре үк алдыбыҙға яңы бурыстар ҡуя. Әҙәбиәтте үҫтереү – төп маҡсатыбыҙ. Был – тамаҡ ярып, күркәк ҡағып ҡына башҡарыла торған эш түгел, йөрәк һәм аҡыл гармонияһына, таһыллыҡ һәм сабырлыҡ кеүек сифаттарға таяна. Ҡадир Даяндың тыуыуына 100 йыл тулыуға бағышлап «Яугир-шағир Ҡадир Даян һәм уның яҡташтары» тигән буклет шул изге ниәттән төҙөлдө, берҙәм эштең матур күренеше булды.

Әҙәби берекмә бөгөн үҙ янына ижади көстәрҙе тупланы, уның йөрәге ил менән бергә тибә. Аҡмуллабыҙ һалған аҡ юлдан тайпылышһыҙ бара, ата-бабалар аманатына тоғро ҡалып, киләсәккә ҙур ышаныс менән баға. Уның артабан да шулай ырамлы аҙымдары өсөн йәмғиәттәге статусын үҙгәртеү, яҙыусылар ойошмаһы кимәленә күтәрелеү өсөн уңайлы шарттар тыуҙырыу – беҙҙең бөгөнгө иң ҡырҡыу, иң актуаль проблема.

Әҙәби берекмәнең илле йыллыҡ тарихын иҫәпкә алып, Мифтахетдин Аҡмулланың тыуыуына 180 йыл тулыу уңайы менән, халҡыбыҙҙың рухи үҫешенә ныҡ булышлыҡ иткән Силәбе өлкә әҙәби берекмәһен БР Яҙыусылар союзының республиканан ситтәге беренсе филиалы итеүҙе Башҡортостан Президенты алдында юллау – көн талабы.

**Ҡамса МОРТАЗИН,**
**М. Аҡмулла исемендәге әҙәби берекмә етәксеһе.**

**Булат БАТТАЛОВ**

## Ер шарының уртаһында

*Ике-өс саҡрым ине бала саҡта*
*Уратып алған донъя – Ер шары.*
*Тыуған өйөм – үҙәк, ҡалған ерҙәр*
*Уның сите ине ни бары.*

*Йылдар уҙған һайын Ер киңәйҙе,*
*Осо-ҡырыйы ла юҡ икән.*
*Тик, әлекке һымаҡ, Ер шарының*
*Уртаһында тыуған өй икән.*

## Ерек

*Ерек ягып йылытырмын,*
*Тип ышанма өйөңдө.*
*Бауыры туң кешегә һин*
*Бәйләмә өмөтөңдө.*

*Шартлап яна, атҡы ата –*
*Күрҙегеҙме еректе!*
*Тик ул күпме шартламаһын,*
*Мейесең бит һүренке…*

*Имәнле урманда йәшәп,*
*Терәлмәйек ереккә.*
*Өйөбөҙҙө йылыт(а) алыу*
*Үҙебеҙҙең ирлектә.*

---

*Булат Батталов (1928) Башҡортостандың Әбйәлил районы Асҡар ауылынан. Һөнәре буйынса — таусы-инженер. М. Аҡмулла исемендәге әҙәби берекмәнең тәүге ағзаларының береһе. Шиғырҙары «Солнце на ладони», «Силәбе шишмәләре», «Аҫылташтар йыйыр саҡ», «Силәбе башҡорттарының әҙәбиәт антологияһы», «Төрки халыҡтарының донъя антологияһы» кеүек йыйынтыҡтарға ингән. «Тау юлдары», «Һағыныу» исемле китаптары донъя күрҙе.*

**Алевтина ВӘЛИЕВА**

## Үҙем башҡорт

*Үҙем башҡорт – Салауат тоҡомонан,*
*Үҙем ярһыу – Үҙәнһыу тулҡынынан,*
*Үҙем ҡыҙыу – Янгантау ялҡынынан,*
*Үҙем сабыр – Ҡаратау ҡултығынан.*
*Сабырлыҡ мираҫ – ата-бабам булмышы,*
*Рухым һүнмәҫ – йөрәгемдә ерем һулышы.*

## Егет булһа

*Егет булһа – ут булһын,*
*Әйткән һүҙе уҡ булһын;*
*Уйы таҙа, пак булһын,*
*Эше гәҙел, хаҡ булһын;*
*Башын бирмәҫ ат булһын,*
*Үткер, изге зат булһын;*
*Ҡыуған юлы аҡ булһын,*
*Бысраҡлыҡтар ят булһын!*

---

*Алевтина Вәлиева (1931) Башҡортостандың Салауат районы Ҡаратаулы ауылынан. М. Аҡмулла исемендәге әҙәби берекмәнең почетлы ағзаһы, уның әҙәби консультанты. Шиғырҙары «Силәбе шишмәләре», «Аҫылташтар йыйыр саҡ», «Силәбе башҡорттарының әҙәбиәт антологияһы» кеүек йыйынтыҡтарға ингән. «Күҙгә моңдар» исемле шиғырҙар китабы авторы.*

**Мәүлиҙә ИБРАҺИМОВА**

## Әсәм теле

*Ниндәй матур һөйләй башҡорт,*
*Тыңлағыҙ әле!*
*Ниҙәр әйтәһе килгәнен*
*Аңлағыҙ әле.*

*Халыҡ юҡҡа сығыр, әгәр*
*Телде белмәһә;*
*Ғөрөф-ғәҙәттәр юғалыр,*
*Йырҙы һөймәһә.*

*Әсәм теле – ҡоштар теле,*
*Һин уны ярат!*
*Ҡоштар кеүек һайрай-һайрай,*
*Илемә тарат!*

## Күңелем, гүйә, алмағас…

*Күңелем, гүйә, алмағас,*
*Япраҡ ярҙы көҙ еткәс.*
*Күгемдә бер болот та юҡ,*
*Ҡояшым шундай көләс.*

*Былбыл ҡунып ботағына,*
*Әй, һуҙа ла көйҙәрен.*
*Ғүмерлеккә булһын ине*
*Яҙғы сыуаҡ көндәрем.*

## Тауыҡ менән Әтәс

Мәҫәл

*Тауыҡ йомортҡа һалған,*
*Ә һайыҫҡан урлаған.*
*Шул йолҡошо хәйлә менән*
*Тауыҡ затын хурлаған.*

*Әтәсте тауыҡ ороша:*
*– Асыҡ ауыҙһың, – тиеп, –*
*Әтәс булып, кәпәс кейеп,*
*Йөрөйһөң тиреҫ тибеп.*

## Ҡартлыҡ килә

*Дөбөр-шатыр ҡартлыҡ килә,*
*Ҡурҡыта бит, ҡәһәрең.*
*Ғазраил ҡарт алып китер,*
*Һорап тормаҫ мәһәрен.*
*Ай-һай, дуҫтар, һай, дуҫтар,*
*Һорап тормаҫ мәһәрен.*

*Сәсте ағартырға бирмәй,*
*Буяйыҡ төрлө төҫкә.*
*Йөрәгебеҙ дөп-дөп типһен,*
*Бирелеп наҙлы хискә.*
*Ай-һай, дуҫтар, һай, дуҫтар,*
*Бирелеп наҙлы хискә.*

*Тештәр төшөп бөтөп бара,*
*Ҡуйҙыртайыҡ протезды,*
*Ҡартайыуға юл бирмәйсә,*
*Күрһәтәйек протесты.*
*Ай-һай, дуҫтар, һай, дуҫтар,*
*Күрһәтәйек протесты.*

*Аяҡ-ҡулдар эшләгәндә,*
*Бейеп тә ебәрәйек.*
*Һандуғастар һайрағанда,*
*Йырлап та ебәрәйек.*
*Ай-һай, дуҫтар, һай, дуҫтар,*
*Бирешмәйек ҡартлыҡҡа.*

---

*Мәүлиҙә Ибраһимова (1948) Силәбе өлкәһе Ҡоншаҡ районы Ҡорман ауылынан. Шадринск дәүләт педагогия институтының математика факультетын тамамлай. Ҡоншаҡ районы мәктәптәрендә 35 йыл эшләп, хаҡлы ялға сыға.*

*«Ғүмер йомғағымды һүтәм әле» — авторҙың тәүге шиғырҙар китабы Силәбелә донъя күрә. Ҡадир Даян исемендәге премия лауреаты.*

## Дарвин ТАҺИРОВ

### *Быуындарҙы ялғап йәшә!*

*Шөкөр, тимен, тамырҙарым минең*
*Бик-бик алыҫтарҙан башлана.*
*«Быуындарҙы ялғап йәшә» тигән*
*Атам аманатын ташламам.*

*Тамырҙарым – төптә, ә нәҫелем –*
*Аҡ ҡайындай, йәшел олондар.*
*Өс улым бар, өмөттәрем минең –*
*Әйтерһең дә, уттай ҡолондар.*

***

*Дубылғы ла ағас, ай, ҙур булмай,*
*Дубылғылар үтә лә юл булмай.*
*Ҡайҙа ғына барһаң, улдар булһын,*
*Улдар барҙа атай хур булмай.*

***

*Яман күҙ оят белмәй,*
*Ялған тел аят белмәй.*

***

*Яҡшылыҡ та, яманлыҡ та – тормош мәктәбенән.*

---

*Дарвин Таһиров (1930) Силәбе өлкәһенең Ҡоншаҡ районы Тәгеш ауылында тыуған. Троицк педагогия училищеһының башҡорт бүлеген, Силәбе дәүләт педагогия институтының география факультетын тамамлай. Силәбе өлкәһенең Арғаяш, Ҡоншаҡ райондары мәктәптәрендә директор, уҡытыусы булып эшләп, хаҡлы ялға сыға.*

*«Тайна солдатского молчания» исемле проза, «История моей жизни» тигән автобиографик, «Исемдәрҙә ауыл тарихы» тигән топонимика һәм «Аманат» исемле шиғыр китаптары авторы.*

*Рәсәй Федерацияһының мәғариф алдынғыһы, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Ҡадир Даян исемендәге премия лауреаты.*

## Азамат УСМАНОВ

### *Әбйәлилем**

*Ҙур бер аҡлан булһа Тыуған илем,*
*Тик бер сәскә шунда Әбйәлилем.*
*Бала саҡтан беләм буйын, иңен –*
*Урман, тау, яланда шаулай иген…*

*Ялтырап ята уның күлдәре,*
*Күлдәрҙән киң халҡым күңелдәре.*
*Килегеҙ һеҙ, дуҫтар, һабантуйға,*
*Йырлашып ҡайтырбыҙ таң атыуға.*

*Күптәр Әбйәлилдән китһәләр ҙә,*
*Сит ерҙәрҙе төйәк итһәләр ҙә,*
*Күңелдәрен күмһә йылдар шауы,*
*Гел саҡырып тора Ҡырҡты тауы.*
*Әбйәлилем, Әбйәлилем!*
*Тыуған илем!*

### *Аҡ миҙгелдәр**

*Муйыл күпереп сәскә атһынмы,*
*Ерҙе ҡаплап тәүге ҡар яуһынмы –*
*Хыял илтә бала саҡтарыма,*
*Йәшлегемә, тыуған яҡтарыма…*

---

**М. Дәүләтбаев музыкаһы.*
**Салауат Низаметдинов музыкаһы.*

---

*Азамат Усманов (1959) Башҡортостандың Әбйәлил районы Ҡаҙмаш ауылында тыуған. Өфө сәнғәт училищеһында уҡый, Өфө сәнғәт институтының театр бүлеген тамамлай. Салауат дәүләт башҡорт театры артисы, Магнитогорск дәүләт телерадиокомпанияһының «Йәнтөйәк» башҡорт редакцияһында журналист була. Әле Магнитогорск ҡалаһында йәшәй, сауҙа компанияһында администратор булып эшләй.*

*Аҡтан-аҡ, пактан-пак миҙгелдәр*
*Килһендәр, килһендәр, килһендәр.*

*Ҡырпаҡ ҡарҙа тәүге эҙ ҡалдырып,*
*Көндәр буйы аяҡты талдырып,*
*Барлыҡ хәсрәттәрҙе онотҡандай,*
*Ҡанатланам яңы йыр отҡандай.*

*Аҡтан-аҡ, пактан-пак миҙгелдәр*
*Килһендәр, килһендәр, килһендәр.*

*Тәүге ҡар, шау сәскә – ап-аҡ миҙгел,*
*Яралы күңелде дауалай гел.*
*Аҡтан-аҡ, пактан-пак хыял төҫлө,*
*Аҡ миҙгелһеҙ йәшәй алмам төҫлө…*

*Аҡтан-аҡ, пактан-пак миҙгелдәр*
*Килһендәр, килһендәр, килһендәр.*

## *Иҫке өй**

*Бик йыш төштә күрәм иҫке өйҙө,*
*Иҫке өйөм – бала саҡтың йөҙө…*
*Үткәндәрҙе күрһәм иҫке өйҙә –*
*Яҡты уйҙар үҙәгемде өҙә…*
*Иҫке өйҙө бик йыш төштә күрәм…*

*Таралыштыҡ, ҡанатыбыҙ нығып,*
*Ҡайтҡылайбыҙ һирәк, бик һағынып,*
*Гел ҡайтабыҙ тура яңы өйгә,*
*Теүәлләнә донъя ҡайтҡан көйгә…*
*Иҫке өйҙө бик йыш төштә күрәм…*

*Иҫке өйөм – ул бит ҡош ояһы:*
*Олатайым, атайым донъяһы.*
*Иҫке өйөм – баҙар, ығы-зығы –*
*Әсәйҙең дә әле йәп-йәш сағы…*
*Иҫке өйҙө бик йыш төштә күрәм…*

---

**Салауат Низаметдинов музыкаһы.*

**Венера НУРТДИНОВА**

## *Уйланыу*

*Иртә таңда кинәт уянам да*
*Үткән юлдарыма күҙ һалам.*
*Хәтеремдә сиртеп уятам да,*
*Әкрен генә һорап, һүҙ алам.*
*Килеп еттем дәме ҡартлығыма,*
*Тотоп торам көҙгө япрағын.*
*Ниңә ҡунған минең ҡулдарыма,*
*Һағынып тыуған тупрағын?*
*Яҙмышымы, елгә йәбештереп,*
*Ник осорған уны йыраҡҡа?*
*Бишек-ҡулдарымда тибрәндереп,*
*Хәбәр һалырғамы ҡолаҡҡа?*
*«Ғүмер бирәү генә, зарланмайса,*
*Йәшә уның белеп ҡәҙерен.*
*Яуызлыҡтар ҡылма, пак бул,*
*Яҡты булһын тиһәң ҡәбереӊ.*
*Изге эштәреңдән, сауаптарҙан*
*Урыныңды йомшаҡ түшәрмен…»*
*Бала сағым, йәшлек, уҙған ғүмерем*
*Әрәм үткән булһа, нишләрмен?*

## *Аҡ төҫ*

*Тыуыу менән аҡҡа төргәнгәме,*
*Ап-аҡ төҫтө бигерәк яратам.*
*Аҡ төҫтәргә ҡарап пакланам да,*
*Аҡ төҫ күрһәм, ихлас шатланам.*

*Аҡлыҡ – сафлыҡ, тиеп, аҡты кейеп*
*Йөрөгән беҙҙең ата-бабалар.*
*Улар кеүек, аҡ күңелле булып*
*Үҫһен ине барлыҡ балалар…*

---

*Венера Нуртдинова (1939) Татарстандың Аҙнаҡай районы Һуҡайыш ауылынан. Алабуға китапхана техникумын, Ҡазан дәүләт университетының тарих-филология факультетын тамамлай. Татарстанда китапхана мөдире, уҡытыусы булып эшләй. Силәбе өлкәһенең Ҡоншаҡ районы мәктәптәрендә уҡытыусы булып оҙаҡ йылдар эшләгәндән һуң, хаҡлы ялға сыға.*

*Ҡоншаҡ районындағы әҙәби берекмә етәксеһе. Ҡадир Даян исемендәге премия лауреаты. «Ғүмер — миҙгел» исемле шиғырҙар китабы авторы.*

*Ваҡыт еткәс, ҡабат аҡҡа төрөнөп,*
*Мәңгелеккә китеп бараһы.*
*Тыуғас – аҡлыҡ, ғүмер бөткәс –*
*аҡлыҡ,*
*Ап-аҡ булһын шулар араһы,*
*Аҡ булһасы шулар араһы.*
*Ниндәй бәхет – изге эштән торһа*
*Йәшәү менән үлем араһы.*

**Рим РӘХИМОВ**

## Һөйөү

*Күптәр әле әйтә, ысын һөйөү*
*Юҡ ул, тиҙәр, булмай донъяла.*
*Китаптарҙа була, киноларҙа*
*Ысын һөйөү, әгәр булһа ла.*

*Нисек инде булмай яныһ һөйөү,*
*Мөхәббәтһеҙ нисек йәшнәргә?*
*Татлы хисһеҙ, тағы бер хыялһыҙ*
*Был донъяла нисек йәшәргә?*

*Ниндәй йәшлек, әгәр бер тапҡыр ҙа*
*Икәү йөрөп ялан гиҙмәгәс?*
*Ҡоштар тыңлап, кисен йондоҙ*
*һанап,*
*Болондарҙа сәскә өҙмәгәс?*

*Ниндәй көслө, яҡты һөйөү хисе,*
*Йөрәк ялҡындары беҙҙәге.*
*Яңылышмайыҡ, дуҫтар, бар ул ерҙә*
*Һөйөү уты – тормош беҙҙәге.*

## Онотмайым

*Күҙ алдымда һинең алһыу йөҙөң,*
*Нурҙар һипкән ҡара күҙҙәрең,*
*Йөрәгемдә һаман сыңлай әле*
*Һинең әйткән наҙлы һүҙҙәрең.*

*Юлдарымда әгәр һинән яҙһам,*
*Йәшәү йәмен нисек табырмын?*
*Күңел һыҙлауҙарын дауаларға*
*Шифа һүҙҙәр ҡайҙан алырмын?*

*Бер һин генә минең яҡын дуҫым,*
*Бер һин генә тормош юлдашым.*
*Тик һин генә йәнде һайратыусы,*
*Күңел ҡошом – йөрәк моңдашым.*

---

*Рим Рәхимов (1948) Силәбе өлкәһенең Ҡоншаҡ районы Иркәбай ауылында тыуған. Троицк ҡалаһында ауыл хужалығы техникумын тамамлай. Ҡоншаҡ районының «Дружный» совхозында механизатор, бригадир, управляющий булып эшләп, хаҡлы ялға сыға.*

**Зимфера ШИРВАНОВА**

## Һинең исем

*Уйымда гел – һинең исем,*
*Һинең үткер ҡарашың...*
*Уйымда тик һин, бергенәм,*
*Һинең атлап барышың.*
*Исемеңде әйтеү менән*
*Ай йылмая төндәрен.*

*Ә йондоҙҙар, бәхет юрап,*
*Төрләндерә төштәрен.*
*Һинең исемде ишеткәс,*
*Бар йыһан моңға сума,*
*Шул моңдарҙан ҡанатланып,*
*Осорта ла осорта.*

---

*Зимфера Ширванова (1970) Силәбе өлкәһенең Ҡоншаҡ районы Ҡаҙаҡбай ауылынан. Силәбе дәүләт университеты филология факультетын тамамлай. Тәхәлем урта мәктәбендә туған тел уҡыта, унда «Шишмәкәй» әҙәби түңәрәге ойоштора. Әлеге ваҡытта Ҡоншаҡ район телевидениеһында журналист булып эшләй.*

## *Мөхәббәт түгелме икән?*

*Әгәр һинең күңелеңдә*
*Хистәр тулыша икән,*
*Тиктомалға әгәр үҙең*
*Юғалып ҡалаң икән;*

*Тынғы тапмай, төндәрең дә*
*Йоҡоһоҙ үтә икән,*
*Тыңла әле йөрәгеңде –*
*Һөйөү түгелме икән!*

**Айҙар ИШБИРҘИН**

## *Аҡ ҡайын*

*Ултыртманыҡ, үҙе үҫте*
*Баҡсабыҙҙа аҡ ҡайын.*
*Ярамай, тип әйтһәләр ҙә,*
*Тейҙертмәне атайым.*

*Аҡ күлдәгең, ҡупшы алҡа –*
*Килешә һиңә, ҡайын.*
*Әй, һоҡланып маҡтар ине,*
*Юҡ шул хәҙер атайым.*

*Ҡайын – ҡайғы, тиһәләр ҙә,*
*Ел-дауылдан һаҡлайым,*
*Матур тормош, аҡ бәхетең*
*Алда, тигәс атайым.*

## *Хат көтәм*

*Хатым барып еттеме икән*
*Әсәйемдең ҡулына,*
*Ҡыуаныр ҙа, яуап итеп,*
*Яҙыр микән улына?*

*Ара йыраҡ, әммә уны*
*Яҡынайта хаттарың.*
*Әсәй, һинең һәр һүҙеңде*
*Доға итеп ятлайым.*

*Хафаланма минең өсөн,*
*Барыһы ла ал да гөл.*
*Ауырлыҡтарҙа фатихаң*
*Ярҙам итә миңә гел.*

---

*Айҙар Ишбирҙин (1983) Арғаяш районының Илембәт ауылында тыуған. Ҡурған өлкәһе Сафакүл районының Абултай урта мәктәбендә уҡытыусы, «Замандаш» гәзитенең хәбәрсеһе булып эшләй. Башкорт дәүләт университетының филология факультетын тамамлай. Арғаяш районының мәҙәниәт бүлегендә эшләй. Арғаяштағы «Таң нурҙары» әҙәби берекмәһе етәксеһе.*

**Эльвира ҠОЛОЕВА**

## *Һай, Салауат, Салауат!*

*Һай, Салауат, Салауат,*
*Башҡортомдоң ҡото һин,*
*Батырлыкта өлгө һин,*
*Илгә рухи терәк һин.*

*Илдә йәшәй эштәрең,*
*Йөрәктәрҙә – йырҙарың.*
*Һинең данлы исемеңде*
*Ҡабатлайҙар ҡырҙарым.*

*Һай, Салауат, Салауат,*
*Һинең даның Илемдә;*
*Батырлыҡҡа әйҙәй-әйҙәй,*
*Мәңге йәшәр телемдә.*

---

*Эльвира Ҡолоева (1987) Арғаяш районының Ҡорман ауылынан. Силәбе дәүләт университетының филология факультетын тамамлай. Әле Ҡорман урта мәктәбендә уҡытыусы булып эшләй.*

## Тыуған ил

*Уйҙарымда бер моңһоу йыр*
*Аға ла аға.*
*Әллә ниндәй һағыш булып,*
*Йөрәкте ҡаға.*
*Ағастағы япраҡ кеүек*
*Кеше яҙмышы.*

*Тыуған ерҙе ташлап китеү –*
*Йәнем һағышы.*
*Яҙмышымды ҡулға алам,*
*Мин – башҡа бала.*
*Япраҡ кеүек осмам ситкә,*
*Илемдә ҡалам.*

**Юлиә ВӘЛИЕВА**

## Шиғырҙарым

*Шиғырҙарым – юлдаштарым,*
*Рухи донъям өлгөһө.*
*Шиғырҙарым – дуҫ-иштәрем,*
*Күңелемдең көҙгөһө.*

*Улар – минең ҡояшым хәс,*
*Ә нурҙары – һүҙҙәрем.*
*Тирә-ягым шундай күркәм:*
*Ҡамашалар күҙҙәрем!*

*Шиғыр – ғүмер асылдарым,*
*Ташта үҫер гөлдәрем.*
*Шиғыр – тормош фасылдарым,*
*Һеҙһеҙ йәмһеҙ көндәрем.*

*Йыйырмын мин бер саҡ яҙҙың*
*Иң сағыу шәлкемдәрен.*
*Ана шулай өләшермен*
*Күңелем елкәндәрен.*

---

*Юлиә Вәлиева (1982) Силәбе өлкәһенең Ҡоншаҡ районы Баязит ауылынан. Силәбе дәүләт университетының филология факультетын ҡыҙыл дипломға тамамлай. Силәбе ҡалаһында уҡытыусы булып эшләй.*

**Нәфисә ШАКИРОВА**

## Дуҫтарым – гөлдәрем

*Гөлдәремә һыу һибегеҙ –*
*Ҡоромаһын гөлдәрем.*
*Гөлдәр менән һеҙҙән башҡа*
*Бар һуң минең кемдәрем?*

*Гөлдәремә һыу һибегеҙ –*
*Тамырҙары кипмәһен.*
*Гөлдәр кеүек, һеҙҙең йөҙҙәр*
*Күңелемдән китмәһен.*

*Гөлдәремә һыу һибегеҙ,*
*Һыу һибегеҙ – йәлләмәң.*
*Һыу һибелгән гөлдәр кеүек,*
*Һеҙҙе күрһәм – йәнләнәм!*

## Ҡадир Даянға

*Ҡоншаҡ халҡы бөгөн байрам итә*
*Иҫкә алып данлы Ҡадирын.*
*Тыуған көнө менән тәбрик итә,*
*Хөрмәт итеп атлы шағирын.*

*Ҡоншаҡ урамдары гөрләп тора,*
*Йыр-моң тулған һәр бер өйөнә.*
*Килендәре бейеп-бейеп китә*
*Даян яҙған йырҙың көйөнә.*

*Сабаҡлы күл үлеп һағынғандай,*
*Онота алмай шағир эҙҙәрен.*
*Һағыштары, ярҙарына һыймай,*
*Ватыр төҫлө февраль боҙҙарын.*

---

*Нәфисә Шакирова (1952) Силәбе өлкәһе Ҡоншаҡ районының Солтан ауылынан. Силәбе дәүләт педагогия университетының география факультетын тамамлай. Ҡоншаҡ районының Солтан урта мәктәбендә уҡытыусы булып эшләй. 2008 йылда Рәсәй Федерацияһы Президенты грантына лайыҡ булды.*

**Рафаэль МӨХӘМӘТЙӘНОВ**

## *Башҡорттарым, артыу кәрәк!*

*(Аҡмуллаға эйәреп)*

*Башҡорттарым, артыу кәрәк, артыу кәрәк,*
*Арабыҙҙа яңғыҙҙар күп, тыуым һирәк.*
*Уралдағы туплан-туплан йылҡы кеүек,*
*Башҡорттарым, өйөр-өйөр булыу кәрәк!*

*Берҙе бергә ҡушыу менән ғаилә булмай,*
*Балаһыҙ йорт-маҙар икән, гәме булмай.*
*Атам-бабам ишле итеп донъя көткән,*
*Ишһеҙ йортта ни мәғәнә, йәме булмай.*

*Боронғолар, берҙе юҡҡа һана, тигән,*
*Икәү булһа, уны бергә тиңлә, тигән.*
*Икәү ишле, өсәү көслө, дүртәү дәртле,*
*Бишенсеһе тыуҙы ниһә, шатлан, тигән.*

*Башҡорттарым, бөгөн беҙгә бик күп кәрәк,*
*Ирек өсөн көрәш асһаң, белем кәрәк.*
*Ерҙә һүнмәй атай йортон һаҡлау өсөн,*
*Башҡорттарым, артыу кәрәк, артыу кәрәк!*

## *Ни ҡала?*

*Фани донъя, гүйә, – йүгәнһеҙ ат,*
*Әллә ҡайҙа саба туктамай.*
*Әҙәм балалары гәмһеҙ йәшәй,*
*Киләсәген бер ҙә уйламай.*

*Аҡса, аҡса, тиеп күҙҙәр тонған,*
*Йәнен-тәнен һата аямай.*
*Иртәгәне ишәк ҡайғыртмаҫ шул,*
*Ана шуны ғына аңламай.*

*Беҙҙән киләсәккә ниҙәр ҡалыр:*
*Бейек йорттар, затлы һараймы?*
*Гараж тулы импорт машиналар,*
*Ғәрип бәндә илгә яраймы?*

*Зәғифләнә бара йәндәребеҙ,*
*Телем тигәс, йөрәк теленде.*
*Илмәнтауҙай, рухым ҡубарыла,*
*Маңҡорт баҫыр микән илемде?*

---

*Рафаэль Мөхәмәтйәнов (1938) Арғаяш районының Бәләкәй Уҫман ауылынан. Башҡорт дәүләт университетының филология факультетын тамамлай. Суфин башланғыс мәктәбе уҡытыусыһы, Бәжекәй урта мәктәбендә директор, уҡытыусы булып оҙаҡ йылдар эшләп, хаҡлы ялға сыға.*

*Районда ҡоролтай рәйесе, «Арғужа» гәзите мөхәррире була. Арғаяш халыҡ театрында һәүәҫкәр артист, «Әйтер һүҙем бар» исемле тәүге район әҙәби йыйынтығын төҙөүҙә ҡатнаша.*

*Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы, Арғаяш районының почетлы гражданины, Рәсәй Федерацияһының «Мәғариф» өҫтөнлөклө программаһы буйынса уҙғарылған конкурста Президент грантын яулай.*

**Гөлсирә ҒҮМӘРОВА**

# Аҙашҡан яҙмыш

### Нәҫер

Һыуыҡ. Ел ыжғыра. Ямғыр быҫҡаҡлай. Эттәр олой. Ағастар яуынға күшеккән. Ҡара болоттар ағыла ла ағыла…

Әлиә яуапһыҙ мөхәббәте тураһында иҫкән елдәргә һөйләй. Уны тирә-яҡ ойоп тыңлай. Тәбиғәт, әйтерһең дә, яралы яҙмышты ҡыҙғанып илай ҙа илай…

Әлиә күршеһе Камилды өнһөҙ генә оҙаҡ өҙөлөп яратты. Әммә татлы хистәрен уға әйтмәне. Сөнки егет унын бала-саға уйынан көләр һымаҡ тойолдо.

Йыл артынан йылдар үтә. Әлиә йомоҡ ҡына, үтә сиселеп бармаҫ ҡыҙға әйләнә. Аҙ һүҙле, эшкә шәп ҡыҙ мәктәпте уңышлы тамамлай. Юғары уҡыу йорто ишектәре уға еңел асыла. Ундағы хыял тауҙары егәрле ҡыҙға еңел яулана. Билде биштән быуып эшкә тотонғас, студент йылдары уға юрист дипломын тоттороп үтеп тә китә.

Ә бөгөн шатлыҡ тулы бокалдар гәлсәр сың ҡоя. Биш йыл эсендә өйрәнгән курсташтар хушлаша. Был ғүмерҙең ҡәтғи ҡанунымы, әллә бәхетле һыналышмы?

Әлиә дуҫтары менән хушлашып, тыуған ауылына ҡайтты. Ата-әсәләре уны сабыр көтөп алдылар. Өйҙә туғандары дипломлы белгесте йола буйынса ололаны, байрам ашы күңелдәрҙе иретте. «Мәнфәғәтен күр, балаҡай!» , «Ҡул артың еңел булһын!», «Ҡотло булһын!» – Теләктең иң изгеләре яуҙы тыуған йортта.

Ә кискә әхирәттәр, класташтар килде. Йәшлек дәрте уларҙы клубҡа тартты. Ауыл урамында көслө музыка ағыла. Әлиә был көндө ашҡынып көттө. Тик ниңә уны ҡапыл ниндәйҙер сәйер кисереш сорнап алды әле? Әллә бөгөн күңелдең күккә ашҡан сағымы?

Клуб. Йәштәр күңелле бейей. Әлиә, егетте күргәс, саҡ атылып торманы. Ә тағы… Әлиә урынына кире ултырҙы. Ниндәй һылыуҡай?.. Ә улар ҡулға-ҡул… Башына һалҡын һыу ҡойғандай булды ошо мәлдә. Ул кемгәлер өндәште, ләкин был ҡойонда уны ишетеүсе булманы. Әйтерһең дә, яңы ғына шатлыҡ тулы гәлсәр бокалдар ташҡа төшөп ватылды. Был бокалдар түгел, ә унын яҡты хыялдары селпәрәмә килгәндәй булды...

Мөхәббәт… Әлиәнең йөрәге йыш-йыш тибә, аяҡ быуындары йомшара бара. Ул бер нисә минутҡа тын ҡалды, унан клуб ишеге асылды. Әллә ниндәй көс, әллә саялығы уны хәрәкәткә килтерҙе, аяҡтар ерҙе тоймай... Урам... Сауҡалыҡ... Юл... Нимәлер яҡтыра... Тәгәрмәстәр шулай ҡыҙҙар кеүек сыйылдаймы?..

***

…«Хушлашмайса киттем түгелме? – тирә-яҡта тынлыҡ. – Аҫта Ер йәйрәп ята, ә өҫтә Күк ҡатламы ҡалай алыҫ! – тағы ла яуап юҡ. – Ер менән Күк араһы – улай булмай! Булмай! Булмай!»…

---

*Гөлсирә Ғүмәрова (1982) Арғаяш районының Бәжекәй ауылынан. Силәбе дәүләт университетының филология факультетын тамамлай. «Арғужа» гәзитенең хәбәрсеһе булып хеҙмәт юлын башлай. Әле Силәбелә балалар баҡсаһында тәрбиәсе булып эшләй.*

*Унын тәүге хикәйәләре «Силәбе шишмәләре» (2002), «Тәүге ҡарлуғастар» (2009), «Арғаяш башҡорттарының рухи донъяһы» (2010) исемле йыйынтыҡтарҙа донъя күрә.*

«Ғүмер – ул иң ҡәҙерле бүләк. Уның ерҙә тәғәйен эше бар. Яҙмышта аҙашыу, һиңә билдәләнгән миссияны үтәмәү – гонаһ! – тине тауыш күктән. – Ниңә сабыр итмәнең? Һине алда башланмаған яңы донъя көтә ине. Ниңә асыл башыңды үҙ ҡулдарың менән буш тәгәрмәстәр аҫтына һалдың? Күктәге ожмах бейектә, ә Ерҙәге ожмахтан кем туйған? Ер менән Күк араһында аҙашыу йәл!»

***

...Ә ел тағы ажарлана ла ажарлана. Әле йорт-ҡураны, юлдарҙы туҙҙыра, яландарға, урмандарға артылып иҫә. Үҙ-үҙенең сәсен йолҡҡан бәндә кеүек, ағастарҙың япраҡтарын тағата. Ҡара болоттар ергә түгелә лә түгелә....

**Урал ҠОЛОШОВ**

## *Рәхмәт көсө*

*Рәхмәтең менән бергә йөрө –*
*Ғүмерең булыр моңло бер йыр.*
Әйтем

Ер йөҙөндә Аҙашма исемле бер терпе йәшәгән, ти. Бер ваҡыт ул урман буйлап еләк-емеш эҙләп сығып киткән. Урман ситендә Аҙашма ҡып-ҡыҙыл булып бешкән алмаларға күмелеп ултырған Алмағасты күреп ҡалған. Терпе үрелеп-үрелеп ҡараған, ләкин бер алманы ла өҙә алмаған.

Аҙашма, бүтән йәнлектәр кеүек, ағас буйлап үрмәләй белмәгән. Ул шулай ауыҙ һыуҙарын ҡоротоп Алмағас тирәләй йөрөгәндә, Минтимә исемле һайыҫҡан осоп килгән, ти. Шунан Аҙашма уға ярҙам һорап мөрәжәғәт иткән. Минтимә, үҙенең оҫталығын күрһәтеүгә уңайлы мәл сығыуына ҡыуанып, терпегә иң ҙур, иң бешкән алманы өҙөп биргән. Ә терпе, ҡыуанысынан рәхмәт әйтергә лә онотоп, ҡайтып киткән. Минтимә: «Был терпе тәрбиәһеҙ икән, миңә рәхмәт тә әйтмәй китте», – тип һөйләнеп ҡалған, ти.

Уның был һүҙҙәрен ишетеп ҡалған Алмағас, үпкәләп: «Минтимә, һин нимә үҙеңдең йылғырлығың менән маҡтанып ултыраһың? Мин булмаһам, терпегә ул алманы ҡайҙан алып бирер инең?» – тигән. Шул ваҡыт уларҙы ишетеп торған Ер-Әсә телгә килгән: «Мин булмаһам, ай-һай, Алмағас, һинең алмаларың да, үҙең дә булыр инегеҙ микән?»

Быларҙың бәхәсен ишетеп, Һауа, Ҡояш һәм Ғаләм асыуланған. Бар тирә-яҡ ҡараңғыланып, көслө ел-дауыл ҡупҡан. Өйөнә ҡайтып барған терпе аҙашҡан. Ул шулай тағы ла Алмағас янына килеп сыҡҡан. Ҡараһа, бөтә алмалар ҙа ергә ҡойолған, ағас башында етемһерәп кенә һайыҫҡан Минтимә ултыра, ти. Терпе ҡыуанып:

– Эй, Минтимә, һин унда юғарынан күпте күрәһең, миңә юл күрһәт әле, – тигән.

Ә һайыҫҡан үпкәле тауыш менән:

– Бая, алманы алғас, рәхмәт тә әйтмәй киттең, шуға хәҙер аҙашып, ҡаңғырып йөрөйһөң, – ти икән.

---

*Урал Ҡолошов (1965) Силәбе өлкәһенең Сосновка районы Тәгеш ауылынан. Силәбелә һөнәрселек училищеһында рәссамлыҡҡа уҡый. Сосновка районының Долгодеревенское ҡасабаһында сәнғәт мәктәбендә уҡытыусы булып эшләй. Сосновка районының «У камина» исемле әҙәби берекмәһе етәксеһе. «Рәхмәт көсө», «Мыслью доброю о вечном» исемле китаптар авторы.*

Аҙашма, ысынлап та, рәхмәт әйтмәгәнен иҫләп, һайыҫҡандан ғәфү итеүен һорап, рәхмәттәр яуҙыра башлай. Минтимә:

– Рәхмәтеңде Алмағасҡа әйт, алмалар уныҡы бит, – тигән.

Алмағас:

– Рәхмәтеңде Ергә әйт, мин унан йәшәү һуты алам, – тигән.

Ер:

– Рәхмәтеңде Ҡояшҡа әйт, беҙ унан йылы һәм яҡтылыҡ алабыҙ, – ти.

Аҙашма бөтә Ғаләмгә рәхмәтен белдерә. Әллә, ысынлап та, Ғаләм, Аллаһы Тәғәлә уның рәхмәтен ишетә, әллә былай ғына мөғжизә була – ни булһа ла, ҡапыл ел тыма, Ҡояш балҡып китә. Аҙашма тағы ла алмалар йыйып алып, ҡыуана-ҡыуана өйөнә ҡайтып киткән, ти.

Боронғолар юҡҡа ғына: «Бер рәхмәт мең бәләнән ҡотҡара», – тип әйтмәгән икән.

**Альвина МӨХӘМӘТЙӘНОВА**

## *«Не тронь!»*

Мозафар бабай менән Таҡыя әбейҙең Илһам исемле берҙән-бер генә улдары бар. Ул бик тәртипле егет. Эшкә тотонһа – шартлатып эшләй, уҡыуҙа ла ҡалышмай. Илһам, мәктәпте тамамлағас, ҡалаға барып уҡырға инә лә уның шау-шыулы донъяһына сума.

Йылдар үтә. Илһам һайлаған һөнәре буйынса белгес булып ҡалала эшләй. Ул өйләнергә уйлай. Тик уның яратҡан ҡыҙы мәрйә булып сыға. Әбей менән бабай улдарының бәхетенә ҡаршы тормай, үҙ ризалыҡтарын биреп, гөрләтеп туй үткәрәләр.

Йәштәр ҡалала йәшәй. Уларҙың үҙ эштәре, донъялары, үҙ балалары...

Байтаҡ ваҡыт үткәс, бабай менән әбейҙе балалары ҡунаҡҡа алып ҡайта. Улы менән килене уларҙы шатланып ҡаршы ала, бик ҙур хөрмәт менән ҡунаҡ итә. Ләкин ҡунаҡтарҙың муйнаҡҡа әйләнер ваҡыты ла үҙен оҙаҡ көттөрмәй. Быларға килендәре бер нәмәгә лә тейергә рөхсәт итмәй башлай. Быны тотһалар ҙа – «Не тронь!», тегеһенә тейһәләр ҙә – «Не тронь!» тип кенә тора. Асыуланып, әбей менән бабай ауылға ҡайтып китәләр.

Ҡайтҡас, ауылдаштары уларҙан:

– Ҡайҙан киләһегеҙ һуң? – тип һорайҙар.

– «Не тронь» ҡалаһынан, – тип яуап бирәләр.

– Бәй, ҡайҙа һуң ундай ҡала? – тип аптыраша ауылдаштары.

Таҡыя әбей менән Мозафар бабай бойоҡ ҡына:

– Йыраҡ, йыраҡ, – тип шым ғына өйҙәренә йүнәләләр.

---

*Альвина Мөхәмәтйәнова (1994) Силәбе өлкәһенең Ҡоншаҡ районы Ҡобағош ауылынан. Тәхәлем урта мәктәбендә 9 синыфты тамамлағандан һуң, Өфөләге Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында уҡып сыға.*

*Уның тәүге уймаҡ хикәйәләре республика балалар матбуғатында даими баҫыла. 2009 йылда йәш авторҙың «Төймә лә бүләк» исемле хикәйәләр китабы Силәбелә донъя күрә.*

## РАМАҘАН ӨМӨТБАЕВ – ПУБЛИЦИСТ

Билдәле дәүләт эшмәкәре, ғалим, иҡтисад фәндәре кандидаты, яҙыусы Рамаҙан Ғимран улы Өмөтбаев үҙенең ижад юлын публицист булараҡ башланы. „Осрашыуҙар һәм юғалтыуҙар“ китабына „Башҡорт аты“ исемле очерк, Башҡортостан Республикаһының сәйәси, иҡтисади үҙаллылығын, мәҙәниәтен үҫтереү һәм нығытыу эшенә тос өлөш индергән арҙаҡлы шәхестәр, ил уҙамандары хаҡындағы материалдар ингән. Шулай уҡ авторҙың туған тел, ил, милләт яҙмышы тураһындағы уйланыуҙары ла бирелгән.

Беренсе бүлек „Ил яҙмышы – ер яҙмышы“ тип атала һәм „Башҡорт аты“, „Сиҙәмдең тәүге яҙы“, „Рух һүнмәһә, ил үлмәҫ, уянырға мөҙҙәт етте“, „Ауыҙлыҡлау“, „Туған телгә ни өсөн иғтибар кәмей?“, „Халыҡ байрамдары. Һабантуй“, „Ер – халыҡ хазинаһы“, „Ете ҡат үлсә“, „Берәү ота. Икенсеһе?“ исемле очерктарҙан тора.

„Башҡорт аты“ очергында яҙыусы башҡорт атының һыбай һәм йөк ташыу өсөн файҙаланылыуы, шулай уҡ ит етештереү һәм кеше һаулығы өсөн ҡиммәт эсемлек – ҡымыҙ эшләү өсөн сығанаҡ булыуы тураһында әйтеп китә. „Күсмә тормош менән йәшәгән халыҡтарҙа ат, һыбай йөрөү һәм йөк ташыу өсөн файҙаланыуҙан тыш, кешегә ашау-эсеү ихтыяжын ҡәнәғәтләндерә торған мал булып хисапланған“. Автор башҡорт атының оло һынауҙар аша үтеүе тураһында ла иҫкә ала: „Элек көтөү-көтөү йылҡы өйөрҙәре тибенләгән ерҙәр нигеҙле-нигеҙһеҙ һөрөлә башланы. Һәм йылҡыны артабан үрсетеү һәм үрсетмәү мәсьәләһе тағы көн тәртибенә килеп баҫты“. Йылҡы тиҙ генә һимереүгә һәләтле, шулай уҡ тау-таш, ҡуйы урман араһында ла үҙенә аҙыҡ таба ала. Рамаҙан Өмөтбаев шулай уҡ республикала үҙенең бөтә ғүмерен башҡорт атын үрсетеү, ҡымыҙ эшләп сығарыуға арнаған И. Сайгин, И. Мөрсәлимов, Ә. Шамаев һ.б. күренекле ғалимдарҙы билдәләп үтә.

Һис шикһеҙ, ат – кешенең тоғро дуҫы. Илен һәм үҙ халҡын данға күмгән, Ватанды дошмандарҙан һаҡлап алып ҡалыуҙа һәр ваҡыт ил батырҙары менән бергә ҡаһарманлыҡ күрһәткән, яуға сапҡан. Башҡорт атын һаҡлау, яратыу маҡсатында яҙылған иҡтисадсы яҙмалары үтә ҡыҙыҡлы һәм тәрән йөкмәткеле. Атта йөрөү кешенең кәйефен күтәрә, йәшәү дәрте өҫтәй, тәбиғәттең иң күркәм, аҡыллы вәкиле менән аралашыу кешенең үҙен изгерәк итә, нескәргән күңелендә эске ғорурлыҡ тойғоһо уята, сослоҡҡа, етеҙлеккә өйрәтә.

„Рух һүнмәһә, ил үлмәҫ, уянырға мөҙҙәт етте“ очергында милләт һәм ил яҙмышы хаҡында һүҙ алып барыла. Ҙур ҡыйынлыҡтар аша үҙ йөмһүриәтен

булдырған һәм уға үҙ исемен биргән милләтебеҙҙең бөгөнгө хәле ниндәй? Ни өсөн башҡорт милләте һан яғынан кәмей?

Башта сәйәси, ә унан һуң иҡтисади сәбәптәр башҡорт халҡының һан яғынан әкренләп кәмей башланыуына килтерһә, 1921 йылғы ҡот осҡос йот бигерәк тә Урал арьяғында көн күргән башҡорт халҡының бәкәленә һуға, шулай уҡ Сталин репрессияһы осоронда ла халыҡ ҙур юғалтыуҙар кисерә. „Коллективлаштырыу, ә унан һуң ил буйлап таралған „халыҡ дошмандары“н эҙәрләү һәм меңәрләп уларҙы юҡ итеүҙе башҡорт халҡының иң ҙур юғалтыуҙарының береһе тип хисапларға кәрәк. „Вәлидовсы“, „мортазинсы“, „милләтсе“ тип тағылған ҡара мөһөрҙәр һәм ҡурғаштай ауыр бинахаҡ ғәйепләүҙәр меңәрләгән башҡорт интеллигенцияһы вәкилдәренең ғүмерен ҡыйып үтә“, – тип әсенеп яҙа Рамаҙан Ғимран улы. Автор милләт мәсьәләһен алға һөрә, халыҡтың әҙәйеү, ассимиляцияға бирелеү сәбәптәрен күрһәтә һәм уларҙың барыһын да тарихи ерлектә иҫбатлай. Милләткә йоҡонан уянырға, үткәненә ҡарап уйланырға, киләсәккә ҡарап бергә тупланырға өндәй.

„Туған телгә ни өсөн иғтибар кәмей?“ тигән мәҡәләһендә Рамаҙан Ғимран улы көн үҙәгендә булған тел проблемаһын күтәрә, йәш быуындың үҙ телдәренә битараф булыуҙарына әсенә. Балаларҙың туған телебеҙҙә „Березка“ һүҙенең тәржемәһен белмәүе яҙыусыны ныҡ уйландыра. Яҙыусы үҙ телендә генә түгел, рус телен өйрәнеү, ул телдә һөйләшә белеү һәр кеше өсөн мотлаҡ, хәҙерге заман кешеһе өсөн изге бурыс тип һанай, ләкин, рус телен һәйбәт үҙләштереү менән бергә, туған телде лә ҡыйырһытырға, кәмһетергә ярамай, тигән фекер үткәрә. Ысынлап та, тел, башҡа теләһә ниндәй өҙлөкһөҙ камиллаша бара торған тере организм кеүек, даими иғтибарға, тәрбиәгә мохтаж.

Телһеҙ халыҡ – тамырһыҙ ағас. Үҙ телебеҙҙе һаҡлау, ҡурсалау нигеҙендә яҙылған мәҡәлә бер кемде лә битараф ҡалдырмай. Әгәр ҙә 1999 йылда Башҡортостан телдәре тураһында ҡарар ҡабул ителмәһә, бөгөнгө көндә туған телебеҙ ниндәй хәлдә булыр ине? Закон нигеҙендә башҡорт теле рус теле менән берлектә дәүләт теле тип иғлан ителә. Яҙыусыны борсоған тел мәсьәләһе хәл ителһә лә, туған телебеҙгә ҡарата әле лә битарафлыҡ күрһәтәбеҙ. Тимәк, был хаҡта уйланырға кәрәк.

Рамаҙан Өмөтбаевтың халҡыбыҙҙың тарихын, ғөрөф-ғәҙәттәрен яҡшы белеүе уның „Халыҡ байрамдары. Һабантуй“ очергында яҡтыртыла. „Һабантуй булып ул халыҡ теленә сағыштырмаса яңыраҡ инде. Шуға тиклем, әле илле-алтмыш йыл элегерәк, ул, ғәҙәттә, йыйын тип йөрөтөлдө. Тимәк, халҡыбыҙ ҡасандыр ырыу, ҡәбилә булып йәшәгән осорҙа хәҙерге һабантуйҙың тәүге төшөнсәһе „йыйын“ – уйын-көлкө, көс һынашыу, йырбейеү ярыштары үткәреүҙән тыш, шул заман йәшәйешенең ижтимағи-сәйәси мәсьәләләрен дә уртаға һалып кәңәшләшә, фекер алыша торған йыйылыш урыны булған“, – тип яҙып үтә автор. Ысынлап та, һабантуй – беҙгә атабабалар ҡалдырған халҡыбыҙ тарихының изге йолаһы. Яҙыусы бында һабантуй йолалары, унда уҙғарылған байрамдар: ат сабыштырыу, көрәш кеүек милли ярыштар хаҡында бәйән итә, шулай уҡ һабантуй – халыҡтыҡы,

ул халыҡса үтергә тейеш, уны ойоштороусылар ҙа, нигеҙҙә, халыҡ вәкилдәренән торһа ине, тигән фекер үткәрә.

„Ер – халыҡ хазинаһы“, „Ете ҡат үлсә“, „Берәү ота. Икенсеһе?“ исемле очерктарында яҙыусы ергә ҡарата мөнәсәбәтен белдерә. Ерҙе һаҡлау маҡсатында, уны „шәхси милеккә“ һатмау, ә ерҙе хосуси милеккә таратып биреү – мотлаҡ сара, тигән уйланыуҙарға ҡоролоуы мәҡәләнең актуаллеген аса. Сөнки күп милләтле халыҡ йәшәгән, уның төп халҡының яҙмышы ауыр хәлдә булған Башҡортостан өсөн был ер реформаһының ҡулай түгеллеге һәр кем өсөн көн кеүек асыҡ. Ысынлап та, Рамаҙан Өмөтбаев күтәргән ер мәсьәләһе тап бөгөнгө көнөбөҙҙә лә әһәмиәтле булып ҡала. Сөнки үҙ ерҙәребеҙҙе бөтөнләй сит халыҡтарға һатып ебәргән осраҡтар, ҡыҙғаныста ҡаршы, көндән-көн арта. Ни өсөн башҡорт һаман үҙ еренә хужа була алмай? Был һорауға яуапты яҙыусы тарих төпкөлөнән аңлатырға тырыша. „Яңы ерҙәргә күсеп килгән яңы хужалар, сиҙәм ерҙәрҙе күтәреп, ҡалдау ятҡан буш-лыҡтарҙы эшкәртеп, Рәсәйҙең орлоҡ балансына ҙур ғына өлөш индергән, быны инҡар итеп булмай, ләкин, ерҙе аяуһыҙ файҙаланыу арҡаһында, уның уңдырышлығы оҙаҡҡа бармаған, һуңынан ул әкренләп кәмей башлаған“. Тимәк, нисәмә йылдар элек инде талана башланған ерҙәребеҙ. Бер ҡатлы крәстиән халҡы үҙ еренә хеҙмәт итеүенә шөкөр ҡылып, түҙһә түҙеп йәшә-гәндер ҙә, күңеленән генә үҙен үҙ еренең хужаһы, тип билдәләй торғандыр ҙа. Закон тарафынан ерҙе һатыуға рөхсәт итеү, уны дәүләт милкенә әйләндереү, колхоздарҙы совхоздар итеү, әлбиттә, ыңғай социаль сәйәси һөҙөмтәләр бир-мәне. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, кемдең ҡулында власть – ергә шул хужа. Ә бит уға ошонда тыуып үҫкән, әсе тирен түгеүсе, таҙа намыҫ менән хеҙмәт итеүсе хужа булырға тейеш.

Икенсе бүлек „Атаҡлы шәхестәр. Осрашыуҙар-юғалтыуҙар“ тип атала, сөнки бында һүҙ Башҡортостан Республикаһының сәйәси, иҡтисади үҙаллылығын, мәҙәниәтен үҫтереү һәм нығытыу эшенә тос өлөш индергән шәхестәр хаҡында. Был бүлектә „Хәҙрәт эҙҙәренән“, „Мәңге хәтерҙә“, „Фәнебеҙ ҡаһарманы“, „Тәүгеләрҙең береһе“, „Жәлил ағай Кейекбаев хаҡында иҫтә ҡалғандарҙан“, „Шиғри йәнле кеше ине“, „Башҡорт шиғриәтенең көҙгөһө“, „Моңо ҡалды халыҡ күңелендә“, „Дуҫым хаҡында“, „Баймаҡ шахтеры“, „Комиссар“ кеүек очерктар урын алған.

„Хәҙрәт эҙҙәренән“ – ғүмерен кешеләрҙе һауыҡтырыуға бағышлаған күренекле дин әһеле, әүлиә, табип Мөжәүир хәҙрәттең улы Варис Сиражетдинов хаҡында. Уның балалары, ейән-ейәнсәрҙәре тураһында ла ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр бар. Тәбиғәт ҡосағында йылҡы, башҡа төрлө мал аҫрап донъя көтөүсе кеше яҙмышын һүрәтләй, быуындар күсәгилешлегенә иғтибар итә: „Ейәндәре Артур атҡа атланып, кис булһа кис, төн булһа төн йылҡыға ашыға, туғыҙ йәшлек Руслан, ун йәшлек Вадик ат өҫтөндә көндөҙ йылҡы ҡарай, ә Заһит иһә таңдан алып һауынсыларҙы йөрөтә“. Варис Сиражетдиновтың ата биргән фатихаһын онотмауы уның ҡәберенә зыярат ҡылырға килгән мосафирҙарға ярҙам күрһәтеүенән, таҙа, гүзәл тормош көтөүенән күренә лә инде. Бына шулай илаһи көскә эйә булған атаҡлы хәҙрәт эҙҙәренән барыусылар, уның

рухында тәрбиәләнеп, ереккән ерҙәренән көс-ғәйрәт алған балалары, ейән-ейәнсәрҙәре яҙмышы иҫтәлектәр нигеҙендә уңышлы бирелгән.

„Мәңге хәтерҙә“ мәҡәләһе геройы – Муса Мортазин. 1936 йылда ул Ҡолбаҡты ауылында (Әлмөхәмәт) булған икән. Автор уны үҙ күҙҙәре менән күргән. Малай сағында. Хатта күрешә алған: „Муса ағайҙың хушлашҡан саҡта ҡыҫҡан көрәктәй ҡулдарының тылсымлы йылыһын, изге күҙҙәренең мөләйем ҡарашын, күңелдәрҙә уйылып ҡалған осрашыу минуттарын ошо көнгә тиклем һүнмәҫ хәтирә итеп һаҡлайым“.

„Фәнебеҙ ҡаһарманы“ (Ҡадир Рәхим улы Тимерғазин), „Тәүгеләрҙең береһе“ (Журналистар союзы ағзаһы Ғәле Ишбулатов), „Шиғри йәнле кеше ине“ (шағир Нәжиб Иҙелбай), „Башҡорт әҙәбиәтенең көҙгөһө“ (ғалим Ким Әхмәтйәнов), „Комиссар“ (күренекле педагог Сәғит Әлибаев) кеүек очерктарында конкрет геройҙың характеры иҫтә ҡалырлыҡ деталдәр, ваҡиғалар ярҙамында асыла. Был йәһәттән билдәле ғалим Ә. Вахитовтың күҙәтеүҙәре фәһемле: „...был төр әҫәрҙәр... уҡыусыға бик тәьҫирле (улар күренекле кешеләрҙең биографияһын документаль тасуирлай). Сөнки һәр очеркта ла теге йәки был осорҙа үҙенең ижтимағи эшмәкәрлеге менән халыҡ күңеленә күптән инеп ултырған кешеләрҙең образы бер-береһенә һис тә оҡшамаған“.

Рамаҙан Өмөтбаев башҡорт халыҡ йырын ятраҡан ғына түгел, ә уны оҫта башҡарған, бигерәк тә „Сибай“, „Буранбай“, „Әрме“ һ.б. йырлаған. Ҡурайсы Ишмулла Дилмөхәмәтов, йырсы Рамаҙан Йәнбәков, Фәйзрахман Ырыҫҡужин, Марат Баһауетдиновтар менән осрашып, аралашып йәшәгән. Ҡурайсы Ишмулла Дилмөхәмәтов менән дуҫлыҡ бәйләнештәре „Моңо ҡалды халыҡ күңелендә“ исемле мәҡәләһендә һүрәтләнә. „Ишмулла Дилмөхәмәтов сағыштырғыһыҙ ҡурай моңо менән меңәрләгән тамашасыларға үҙенең ҡайнар оло йөрәген дә ҡушып таратты, залда ултырған һәр кеше уның ярһыған йөрәк йылыһын тоймай ҡалманы“. Был мәҡәләһендә автор ҡурай менән ҡурайсы яҙмышының ни тиклем бер-береһенән айырылғыһыҙ булыуҙарын да оҫта һүрәтләгән.

„Баймаҡ шахтеры“ мәҡәләһе ауыр һуғыш йылдарында алтын, баҡыр эҙләп „забой“ төшкән Баймаҡ ҡатын-ҡыҙҙарына арнала. Унда Байназарова Миңлеәсмә Нурмөхәмәт ҡыҙының тормошо һүрәтләнә. Уның ҡатын-ҡыҙ шахтерҙар араһында һуңғыларының береһе булыуы, ғүмере буйы тауҙай ҡайғы-хәсрәтте үҙ иңендә күтәреүе, шуны еңеп сығырлыҡ ихтыяр көсө йөрөтөүе уның оло йөрәкле шәхес булыуы тураһында һөйләй.

Һис шикһеҙ, Рамаҙан Өмөтбаев ижады реаль тормош материалы булыуы менән көслө. Ул халыҡтың ғөрөф-ғәҙәтен, холоҡ-фиғелен, төбәк тарихын яҡшы белгән. Әйләнә-тирәгә, кешеләргә иғтибарлы булыуы әҫәрҙәрендәге һәр ваҡиғаны бик тәфсирләп, ентекләп яҙыуында ла күренә.

**Сәриә РАМАЗАНОВА.**
**Әбйәлил районы.**

# ҺӘЙКӘЛГӘ ЛАЙЫҠ ШӘХЕС

Бынан ике йыл элек күренекле полководец, дәүләт эшмәкәре Муса Лут улы Мортазин хаҡында мәҡәләмде мин «Батырға һәйкәл ҡуяйыҡ» тигән тәҡдимдән башлағайным. Гәзит уҡыусылар ҙа уны күтәреп алғайны, әллә «юғары»ла өнә-мәнеләр, бер ниндәй ҙә һөҙөмтәһе булманы. Быйыл яҡташыбыҙҙың тыуыуына – 120 йыл. Бәлки, йәмәғәтселек был арҙаҡлы шәхескә үҙенең иғтибарын үә ихтирамын күрһәтер, тигән өмөт белдерге килә.

М. Мортазиндың 1937 йылда шәхес культы ҡорбанына әүерелеүенә 74 йыл ғүмер үтеп тә киткән. Бындай бөйөк шәхестәрҙең йәшәү һәм ғүмер араһы алыçлашҡан һайын, уларҙың яҡты рухы халыҡ күңеленә шул тиклем үк яҡыная бара. Алыç йылдар төпкөлөнән әле булһа бөгөнгөләй Муса батыр тауышы яңғырай: «Мин, Муса Лут улы Мортазин, 1891 йылдың 20 декабрендә Ырымбур губернаһы Верхнеурал өйәҙенең Көсөк ауылында тыуғанмын. РКП(б) ағзаһы, билет номерым – 670992. Байрамғол ауылында мәҙрәсә тамамланым. 15 йәшемдән һабанға ялландым, ә 19-ҙан мөғәллим булып эшләй башланым. 1912 йылда уҡытып йөрөгән еремдән армияға алындым, 1914 йыл башына ҡәҙәр ябай һалдат булып хеҙмәт иттем».

Был өҙөк ҡаһармандың хаттарынан алынды. Уның ябай һалдаттан полк командирына тиклем үткән хәрби хеҙмәт юлы – ҡаһарманлыҡ юлы ул. 9-сы артиллерия бригадаһының 1-се батареяһында бомбардир, фейерверкер дәрәжәһендә батырлыҡтар күрһәтә, 1917 йылғы Февраль революцияһында ла әүҙем ҡатнаша. 6-сы армия, 1917 йылдың 8 майында үткән Бөтә Рәсәй мосолмандарының I съездарында делегат була. Ошонан һуң Бөтә Рәсәй мосолмандарының Ҡазан ҡалаһында үткән II съезына делегат итеп күрһәтелә. Октябрь инҡилабын Муса Лут улы тыуған ауылы Көсөктә ҡаршылай. Күбәләк-Тиләү олоçоноң съезы хәрби етәксене I Бөтә Башҡортостан ҡоролтайына вәкил итеп ебәрә. 1918 йылда Верхнеурал өйәҙендәге башҡорт отрядтары командиры, июлдә Башҡорт өлкә шураһы Мортазинды – эскадрон, һуңыраҡ I-се башҡорт атлы полкы командиры вазифаһына тәғәйенләй. Бригада командиры Муса Мортазин, Башҡортостан Республикаһы һәм Ҡыҙыл Армия вәкилдәре Измайлов, Вәлидов, Имаҡов һәм Байда менән осрашып аңлашҡандан һуң, совет ғәскәрҙәре яғына сыға. Бригада 1-се Ҡыҙыл Армия составында Урал фронтында аҡ казактарға ҡаршы һуғышып, уларҙы тар-мар итә. 1920 йылда Баш командованиеның бойороғо менән Мортазин төркөмө Польша фронтында яҡшы ҡоралланған аҡ поляктарға ҡаршы тиңе булмаған ҡаты һуғыштар алып бара. Үҙенә һәм һалдаттарына хәрби талапсанлыҡ та, атайҙарса хәстәрлекле лә булған оçта ойоштороусы, иç китмәле маневрға һәләтле стратег, тактик күнекмәләрҙә хәрби оçталығын көн һайын иçбатлап торған башҡорт егетен Граждандар һуғышы ысын мәғәнәһендә полководец яһап, полкташтары, ғөмүмән, фронт етәкселәре алдында абруйын күтәрә.

Муса Лут улы – беҙҙең замандашыбыҙ түгел, ләкин был бөйөк тарихи шәхесебеҙ рухы, ынтылған идеалдары йәшәйешебеҙҙә изге орлоҡтарын сәсә, ватансылыҡ

тойғоһона кәр өҫтәй, ҡыйыу йөрәкле шәхес булып үҫергә саҡыра. Ошо яғы менән был тарихи образ, рухыбыҙ замандашы булып, йылдар, быуаттар буйына эстафета – батырлыҡ династиялары тәрбиәләүҙе дауам итә.

…Ҡанлы һуғыш юлы дауам итә. Киевты, Черторецкийҙы, Ковелде, Гардбешовты, Холмды аҡ гвардиясыларҙан азат итеүҙә күрһәткән батырлыҡтары, аҡ поляктарҙың яҡшы ҡоралланған удар отрядтарын тар-мар иткәне өсөн Муса Мортазин ике тапҡыр Хәрби Ҡыҙыл Байраҡ ордены, алтын сәғәт һәм «Эшсе крәҫтиән Ҡыҙыл Армияһының намыҫлы, ҡыйыу яугиры, Айырым башҡорт атлы бригадаһы, 12-се армияның Хәрби революцион советынан һәм махсус бүлегенән» тигән яҙыулы көмөш ҡылыс менән бүләкләнә. Ул ваҡытта илдең иң юғары наградаһына ике тапҡыр лайыҡ булыусыларҙы, моғайын, бармаҡ менән генә һанарлыҡ булғандыр. Тарихта яҡташыбыҙҙың Хәрби Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән өс тапҡыр наградланыуы билдәле. Өс тапҡыр ил ҡаһарманы! Был хаҡта яҙыусы Рәүеф Насиров «Ыласын йөрәклеләр» исемле очеркында, документтарға таянып: «…СССР Дәүләт именлеге комитетының үҙәк оператив архивынан алынған хат аныҡлыҡ индерҙе… М. Мортазин 8-се атлы дивизияла энергиялы һәм емешле эшләгәне өсөн өс тапҡыр Хәрби Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән наградланған…»,– тип яҙҙы.

Яугир-полководец тыуған яғына дан-шөһрәт яулап ҡайтып төшә. Көсөк һәм башҡа күрше ауылдар халҡы ҡаһарманды икмәк-тоҙ менән ҡаршы ала. Был мәлдә ауылдар тирәһендә, ғөмүмән, Тамъян-Ҡатай кантонында «Бөтһөн Совет власы!» лозунгыһы аҫтында эш иткән Выдрин бандалары хакимлыҡ ҡыла. Ни бары 17 атлы һуғышсыһы менән Муса Мортазин Көсөк ауылы янындағы алышта Выдриндың яҡшы ҡоралланған 400 баш ҡутәреүсеһенә ҡапыл һөжүм итеп ҡыйрата. Банданың иҫән ҡалған өлөшө урманға ҡаса. Ҡыҙыл командирҙың аҡ бандаларға ҡаршы көрәше артабан Туҡ-Соран, Ялан, Юрматы кантондары биләмәләрендә дауам итә. Мортазиндың исемен ишетеү менән аҡтар, ҡоттары осоп, дер ҡалтырап төшә, тырым-тырағай Урал тауҙары төпкөлөнә ҡаса. Шулай итеп, легендар командирҙың халыҡ араһында абруйы күтәрелгәндән-күтәрелә.

Данға күмелгән хәрби етәксе, дәүләт кимәлендәге хәрби эшмәкәр оло шәхес, ялҡынлы оратор һәм юғары мәҙәниәтле әҙип-публицист дәрәжәһенә күтәрелә. М. Мортазиндың 1927 йылда донъя күргән «Башҡортостан һәм башҡорт ғәскәрҙәре Граждандар һуғышында» исемле хеҙмәте был турала асыҡ һөйләй. Яҡташыбыҙҙың таланты һүҙ оҫтаһы булыуында, аналитик фекерләүендә, халыҡтың көнитмешен, хәрби тормошто, уның тарихын яҡшы белеүендә, төпкә төшөп анализлауында, ышандырырлыҡ һығымталар яһау оҫталығында сағылыш таба. Ҡара золом килтергән 30-сы йылдар шауҡымы Муса Мортазинды ла урап үтмәй, 41 йәшлек баһадир ир-уҙаман дәлилһеҙ ғәйепләү ҡорбанына әүерелә.

Ошо урында Советтар Союзы маршалы С. М. Буденныйҙың 1968 йылда «Советская Башкирия» гәзитендә донъя күргән һүҙҙәрен хәтергә төшөрөп үтеү урынлы булыр. «…Башҡорт ере ҡаһарманлыҡ өлгөләрен аҙ белмәй, – ти ул. – Граждандар һуғышы йылдарында Фрунзе, Блюхер, Азин, Чапаев, Мортазиндар армиялары, дивизиялары, полктары ысын батырҙарса һуғышты… Уларҙың бөйөк эштәрен, ҡаһарманлығын тормошоғоҙҙа өлгө итеп алығыҙ!»

Шуныһы ла мәғлүм булһын: Граждандар һуғышында Мортазиндар ғаиләһенән биш егет ҡатнаша. Ибраһим – 28-се полк, Дауыт – эскадрон, Х. Мортазин – взвод командирҙары, Әхмәҙи Мортазин 5-се полктың хужалыҡ бүлеге начальнигы була. Һәммәһенең дә күкрәген Хәрби Ҡыҙыл Байраҡ ордены биҙәй. Бындай легендар ғаилә династияһы тағы ҡайһы халыҡта бар икән!?

Батша армияһында ябай артиллерист хеҙмәтенән башлап данлыҡлы комбриг дәрәжәһенә тиклем күтәрелгән шәхестең биографияһына күҙ һалайыҡ:

| | |
|---|---|
| **– 1919 йылдың 18 феврале** | *20-се дивизияның 1-се Башҡорт атлы полкы командиры;* |
| **– 1919 йылдың 8 сентябре** | *Шул уҡ дивизияның 1-се бригадаһы командиры;* |
| **– 1922 йылдың 1 апреле** | *Юғары хәрби-педагогия мәктәбе тыңлаусыһы;* |
| **– 1924 йылдың 17 сентябре** | *М. В. Фрунзе исемендәге Хәрби академия тыңлаусыһы;* |
| **– 1928 йылдың 15 ғинуары** | *11-се Төньяҡ Кавказ атлы дивизияның 3-сө бригадаһы командиры;* |
| **– 1928 йылдың 15 марты** | *8-се атлы дивизияның бригада командиры;* |
| **– 1929 йылдың 1 декабре** | *Ҡыҙыл Армияның Баш идаралығының аттар һанын тулыландырыу идаралығы инструкторы;* |
| **– 1931 йылдың 1 феврале** | *Ҡыҙыл Армияның Атлылар составы буйынса идаралығының 2-се секторы начальнигы ярҙамсыһы;* |
| **– 1932 йылдың 15 авгусы** | *Ошо идаралыҡтың сектор начальнигы;* |
| **– 1933 йылдың 26 июне** | *2-се сектор начальнигы;* |
| **– 1935 йылдың 20 ғинуары** | *Оборона халыҡ комиссариатында атлылар составының аттар һанын тулыландырыу бүлеге начальнигы...* |

1935 йылдың 2 декабрендә Муса Мортазинға комбриг хәрби дәрәжәһе бирелә, был хәҙерге хәрби телдә генерал, бригада генералына тиң. Муса Лут улы Граждандар һуғышынан һуң Хәрби-Диңгеҙ эштәре халыҡ комиссары, Башҡортостан Үҙәк Башҡарма комитеты рәйесе вазифаларында эшләй, үҙен ысын патриот, оҫта ойоштороусы, дәүләт эшмәкәре итеп таныта. Әммә ҡаһарман шәхестең ғүмере иртә өҙөлә. Ил буйынса шәхес культы яңы ҡорбандар эҙләгән мәл була был. Ҡыҙыл Армияның йөҙөк ҡашына тиң маршалдар М. Тухачевский, К. Блюхер, Уборевич, Якир, Корк, Эйдеман һ.б. ҡулға алынып, үлемгә дусар ителә.

Ҡот осҡос фажиғә! Ә беҙ ишетеп-белмәгән тағы күпме кешенең ғүмере нахаҡҡа юҡ ителгән! Йөрәктәр тетрәп китә! Исемдәре легендаға әйләнгән шәхестең туған халҡына, изге еренә оло һөйөүе, бөйөк ватансылығы, милләт, дәүләт яҙмышын үҙ иңенә һалыуы, халҡыбыҙҙың милли мөхтәриәте өсөн көрәшкән дәүләт эшмәкәренең ғаиләһенә, туғандарына ҡайнар һөйөүе, аталарса хәстәрлеге бына нисә йылдар күңелдәребеҙҙә ғорурлыҡ, ихтирам уята.

Әйтергә кәрәк, 2001 йылда Учалы районы етәкселеге, йәмәғәтселеге Муса Лут улы Мортазиндың 110 йыллыҡ юбилейы айҡанлы тыуған ауылы Көсөктә уның йорт-музейын ойоштороп, матур байрам, хәтер һәм ҡәҙер кисәһе үткәрҙе. Учалы ҡалаһының бер урамына геройҙың исеме бирелде, премияһы ла булдырылып, изге эш атҡарылғайны. Былдай изге традицияны тағы ла юғары кимәлдә дауам итеп, шәхестең рухи орбитаһын республика һәм район кимәлендә мәңгелек һәйкәл баҫҡысына күтәргәндә генә беҙ уның алдында бурысыбыҙҙы үтәр һымаҡбыҙ.

Халҡы барҙың батыры ла бар. Легендар полководец, Граждандар һуғышы геройы, өс тапҡыр Хәрби Ҡыҙыл Байраҡ ордены кавалеры, күренекле дәүләт эшмәкәре, башҡорт халҡының ялҡынлы патриоты Муса Лут улы Мортазиндың ҡаһарманлығы, Ҡош юлы булып, халҡы күңеле аша мәңгелеккә, киләсәктең киләсәгенә күсеүен дауам итер. Быға иманым камил!

**Рәүеф ШАҺИЕВ,**
**филология фәндәре кандидаты.**

**Әхмәтзәки**
**ВӘЛИДИ ТУҒАН**

# ТӨРКӨСТАНДЫҢ КИЛӘСӘГЕ

Бөгөн Урта Азия төрөктәре үҙҙәренең меңдәрсә йылдар дауам иткән тарихи йәшәйешенең иң мөшкөл, иң хәүефле бер дәүеренә аяҡ баҫты. Рустарҙың Урта Азия тарафына ҙур масштаблы күсенеүҙәре ниәт кимәленән уҙып, ысынбарлыҡка әүерелде. Тик, халыҡ мәнфәғәттәренә һылтанып, рустар хыялына ярашлы индустриаллаштырыуға йүнәлтелгән беренсе «биш йыллыҡ планы» тормошҡа ашырыла башланы. Шул нигеҙҙә Көньяҡ Төркөстанда техник культуралар, мамыҡ етештереләсәк, Төньяҡ Төркөстанда иһә хөкүмәт ҡулында булған трактор, шулай уҡ дәүләт аппараты идара иткән коллективтар тарафынан рус мәнфәғәттәре тормошҡа ашырыласаҡ. Ауыл халҡының тармаҡ хужалығында файҙаланып килгән бөтә мал-тыуары бөтөрөлгәндән һуң, уның бөтә йәшәйеше рус тракторының һәм колхоз идараһының шәфҡәт-мәрхәмәтенә бәйле буласаҡ. Рус тракторын Төркөстан ауыл халҡынан тик рус теләгән әҙәмдәргә һәм рус теләгән көн-сәғәттәрҙә, уны ла милли рус тормошо, ғаилә көнкүрешен урынлаштырыу өсөн урындағы милли мәнфәғәт көнкүрешен боҙоу һәм рустарҙың теләгенә яраҡлы хәлгә килтереү шарты менән бирәсәктәр. Илдәге бөтөн төрөктәр үҙ аллы фекерләү хоҡуғынан мәхрүм. Рустар бөтә ерҙәрҙе, һыуҙы, улар менән идара итеү эштәрен бер ниндәй өлгөһө булмаған үҙәкләштерелгән дәүләт ойошмаһына бәйләне.

Ауыл хужалығы эштәрен баҫыуҙарға һыу биреү, һабанды трактор менән һөйрәтеү рустың урындағыларҙың үҙаллылыҡ, ғаилә һәм милли тормошон боҙоу һәм юҡҡа сығарыу сәйәсәттәренә бәйле рәүештә эшләнә. Шул уҡ ваҡытта төркөстандар үҙҙәрен ойошҡан рәүештә тота алһа, рустың мамыҡ, тимер юлы үткәреү, трактор, колхоз һәм индустриаллаштырыу сәйәсәтенән ҡурҡып тормаҫ, сөнки ҡасан да булһа боролош заманы киләсәк. Ул да йәки ҡотолоуға, йәки Көнсығыш төркилегенең тарихтан һөрөлөүенә алып киләсәк. Төркиҙәр бөгөн Рәсәйҙәге тормоштан ситләшеүгә йүнәлтелгән хәл алһа йәки саботажлыҡ юлына баҫһа, милләт зарар күрер. Әгәр Төрөк иле ҡотолһа, рустарҙың был илдә башҡарған эштәре һөҙөмтәһендә урынлашҡан һәр нәмә, һәр ойошма Көнсығыш төркиҙәренең үҙ байлығына әүереләсәк.

Урта Азияла рус баҫып алыуы большевик рустар хакимиәте дәүерендә Төркөстан төркилеге, мәҙәниәте һәм көнкүреше өсөн барлыҡҡа килтерелгән хәүефтәр

һис көтөлмәгән бер ҙур масштабта һәм бик тиҙ арала ысынбарлыҡҡа әүерелә. Ләкин был ҙур масштаб һәм тиҙлек был мәсьәләнең хәл ителеү көнөн дә яҡынайта. Рустар Көнсығыш Төркөстанды һәм Көньяҡ-Көнбайыш Ҡытайҙы баҫып алһа, беҙ быға теләктән генә ҡаршы тора алырбыҙ, сөнки был хәрәкәт аҙаҡ сиктә бер шартлау тыуҙырасаҡ. Урта Азияның дөйөм тормошонда бөйөк үҙгәрештәр күҙ алдыбыҙҙа барлыҡҡа килгән кеүек, тағы ла бөйөгөрәк һәм тағы ла күп яҡлыраҡ үҙгәрештәрҙең ҡаршыһында булыуыбыҙҙы дәлилләгән ваҡиғаларҙы ла күрәбеҙ. Әгәр был хеҙмәт бынан 15 йыл алда, йәғни Бөтә Донъя һуғышы башланған йылдарҙа яҙылһа, ни Рәсәйҙең яҙмышы, ни уға әсир булған төркиҙәрҙең эске инҡилаптары һәм эске үҫеше хаҡында фараз йөрөтөү мөмкинлеге, әлбиттә, ҡыйын ине.

Һүҙебеҙҙең аҙағында шуны әйтергә кәрәк: рус хакимлығы ябай бер баҫып алыуҙың логик һөҙөмтәһе кеүек аңлатыла алмаҫ: был буйһоноу бәләһенән һәм күҙгә бәрелеп торған хәүефтәрҙән ҡотолоуҙа Көнсығыш төркиҙәренә юл күрһәтеп торасаҡ йондоҙ – һуҡыр нәфрәт һәм күрә алмаусанлыҡ хистәре түгел, ә алдан күреп, ипле, башҡа бер нисә милләттең хәрәкәтенә ҡушылып, бергәләшеп эш итеү буласаҡ. Форсаттарҙан мәхрүм ҡалмау өсөн, Көнсығыш төркиҙәре милли берлеккә тоғро ҡалыу мәжбүриәтендә.

Төркөстандың киләсәге, әлбиттә, донъяның дөйөм мәҙәни үҫеше менән йәнәшә үҫә алыуынан ғибәрәт буласаҡ. Мәсьәлә был гармонияны һәм йәнәшәлекте нисек барлыҡҡа килтерә алыуға бәйле. Донъяла мәҙәниәт һәм техника баш әйләндерерлек тиҙлектә алға бара. Немец цепеллины Рәсәйгә, Японияға һәм Америкаға ла барып етте. Был ҡаҙаныш хатта бөтөн донъя милләттәре өсөн дөйөм бер байрамға әүерелде. Ошо юлдар яҙылған көндәрҙә беҙ Лос-Анжелеста цепеллиндың нисек ҡаршыланыуын, уны Америкала ҡабул иткән йөҙҙәрсә мең халыҡтың ҡыуанычлы ауаздарын, цепеллиндағы инглиз, немец, япон, башҡа мосафирҙарҙың һәр береһенең үҙ телендә һөйләгән нотоҡтарын Венала ултырған килеш радионан донъяның бөтөн милләттәре бер үк сәғәттә, һис шикһеҙ, бер үк ҡыҙыҡһыныу һәм хис менән ҡолаҡ һалған кеүек тыңланы. Донъя шул ҡәҙәр бәләкәйләнде, милләттәр һәм ҡитғалар араһындағы аралыҡтар шул тиклем үк ҡыҫҡарҙы. Океандарҙы бер нисә көндә осоп үткән ҙур самолеттарҙың юл селтәрҙәре, глобустағы оҙонлоҡ һәм киңлек һыҙыҡтары кеүек, донъя шарын сырмаған, Тымыҡ Океандағы Австралия, Америка араһында кеше йәшәмәгән утрауҙар көндәрҙең береһендә ошо самолеттарҙың һауа юлында бик яҡшы һәм төҙөк аэропорттарға әүереләсәк. Иҫке һәм Яңы донъяның төньяҡ өлөштәре араһындағы иң ҡыҫҡа юл да, бәлки, Төньяҡ полюс аша үтәсәк. Инсандар яңы һәм мөһим емергес ҡеүәттәр уйлап сығарған кеүек, ҡояштан, диңгеҙҙәрҙән һәм башҡа төрлө әллә ниндәй тәбиғи әйберҙәрҙән башҡа ла килмәгән яңы йәшәү энергияһы сығанаҡтары табырға тырыша. Немец ғалимдарынан Др. Форнтер менән Эмиль Людвиг Нил йылғаһы буйында һуғарыу майҙандары киңәйтелеп, бөйөк Сахараның нисек аяҡҡа баҫтырылып, хикәйәләрҙә уҡып беленгән был ҡот осҡос сүллектәрҙең ун миллионлаған кеше йәшәгән майҙанға әүереләсәге, Африканың бер бөтөн мәҙәни майҙанға әүереләсәге тураһында һүҙ алып бара. Европа менән Африканы тоташтырыу өсөн Гибралтар боғаҙы аҫтынан тимер юлы төҙөү проекты хаҡында ла һүҙ йөрөтөлә.

Донъяның ошо рәүешле баш әйләндерерлек тиҙлектә үҫеше дәүерендә, уның өлөштәре араһындағы бәйләнештәрҙең был тиклем ныҡынған бер ваҡытта Ер шарының иң боронғо мәҙәни үҙәктәренең береһе булып та, бөгөн шулай уҡ барлыҡ Азия илдәре мохтажлыҡ кисергән бер нисә сеймалға бай булып, был ҡитғаның дүрт тарафы араһында иң кәрәкле сауҙа бәйләнештәренең ҡушылыу

нөктәһе иҫәпләнгән Төркөстандың үҫеш юлдары баҫып алыусы бер милләттең эгоизмы арҡаһында ябылып ҡала алмаҫ. Колониалист ике дәүләт араһындағы аңлашмаусанлыҡ был илдең Һиндостандан һәр саҡ үле ҡалыу мәжбүриәтендә ҡалдырылған «нейтраль майҙан» менән айырылыуы, Иран һәм Ҡытай тимер юлдары менән берләшеүенә ҡаршылыҡ итеүе, – әлбиттә, тәбиғәткә ярашһыҙ бер күренеш. Төркөстанда кем хакимлыҡ итеүгә ҡарамаҫтан, ул яңынан үҫеш кисерәсәк. Тормош туҡтауһыҙ алға бара һәм илдең үҫешен һис бер ҡаршылыҡ туҡтата алмаҫ. Төркөстан төркө быға ҡулайлашып, сәйәси һәм мәҙәни идеалдарын да шуға яраҡлаштырасаҡ. Был иһә уны меҫкенлек рухы, ҡәбилә ғөрөф-ғәҙәттәренә бәйле ҡалыу бәләһенән дә ҡотҡарасаҡ.

Донъя үҫешенең киләсәкке формаһы ниндәй генә булһа ла, Төркөстан – континенталь мәмләкәт. Уның яҙмышы ер эшкәртеү иҡтисады мөнәсәбәтенә, тимер һәм һауа юлдарына, илдә һуғарыу системаһының үҫешенә бәйле. Америкала белем алған һәм бөгөн Төркөстанда эшмәкәрлек иткән немец инженеры В.В. Зинсерлингтың былтыр Мәскәүҙә нәшер иткән тикшеренеүҙәренең һөҙөмтәләренә ҡарағанда, Амударъя Өзбой тарафына ағыҙылған хәлдә 100 кубометр сажин (977 813 м$^3$) һыу бирелһә, Һарыҡамыш соҡоро туғыҙ йылда туласаҡ һәм донъяла иң ҙур һыу һаҡлағыс барлыҡҡа киләсәк. Ул хәлдә Арал дельтаһынан 350 мең дисәтинә (382 200 гектар) ер, һайыҡҡан Арал күле аҫтынан 300 мең дисәтинә (327 600 гектар) ер майҙанға сығасаҡ, Һырдаръянан еңел рәүештә 400 мең дисәтинә (432 860 гектар), Амударъянан 1,2 миллион дисәтинә (1310 400 гектар) ер һуғарыласаҡ. Өзбойҙың Хазар диңгеҙенә ағасаҡ майҙанында 530 мең дисәтинә (578 760 гектар) ер алынасаҡ. Өзбойҙы пароходтар йөрөрлөк хәлгә килтереү өсөн һәр километрға ни бары 20 мең һум сарыф итергә кәрәк, был тимер юлы төҙөүҙән дүрт-биш тапҡыр арзанырaҡ тигән һүҙ[1].

Ғөмүмән, Төркөстанда һуғарыу эштәре юлға һалынһа, ул тағы ла 30 – 40 миллион кешегә йәшәү мөмкинлеге бирәсәк. Әгәр Төркөстанда һуғарыулы майҙандар 20 миллион гектарға артһа, хәҙерге 12 миллион гектар ауыл хужалығы ере мамыҡ үҫтереү өсөн файҙаланылыр. Ҡаҙағстандың көнбайыш өлөшө дөгө, каучук етештереүҙә файҙаланылһа, иген етештереү хосусында Рәсәйгә йә иһә башҡа берәй ауыл хужалығы мәмләкәтенә ихтыяжы ҡалмаҫ ине. Төркөстанда аҡ күмер ҡеүәте 40 миллион ат көсөнә тиң, хәҙергә тиклем сығарылған нефть 45 миллион тоннаға етәсәк, тип фараз ителә. Баҡыр, тимер, сурьма, радий, Ҡарамезар һәм Ҡаратау тирәләрендә ҡара ҡурғаш, цинк, Фирғәнәлә һәм Тажикстанда тимер рудаһы ятҡылыҡтары табылған. Хазар диңгеҙенең төньяҡ-көнсығыш яҡтары, Төркмәнстан, Хорезм тирәләре бик бай нефть ятҡылыҡтарына өмөт бирә. Ҡытай, Иран, Һиндостандың тимер юлдары Себер һәм Рәсәй тимер юлдары менән Төркөстанда берләшеп, автомобиль юлдары, аэродромдар илде сырмап алһа, Төркөстанда һаҡланған байлыҡтар илдең киңлеге менән сағыштырырлыҡ ҡөҙрәттә һәм киң рәүештә ҡулланыла башлаһа, Азия һәм Европа тормошонда ла яңы дәүер башланасаҡ.

Советтарҙың сыҙап торғоһоҙ эшкә мәжбүр итеүҙәрен төркөстандарҙың Рәсәйҙә быға күрелмәгән ғәйрәт менән тормошҡа ашырыуы хаҡында совет матбуғаты маҡтап телгә ала. Төркөстан халҡының әле файҙаланылмаған потенциаль ҡеүәте ҙур. Әгәр тәртипле итеп мал-тыуар үрсетеү башланһа, был тирә бөтөн Азия һәм Европаның ит һәм йөн сығанағына әүереләсәк. Үҙ эштәрен донъяның һәр тарафындағы үҫеш менән берлектә алып барыу өсөн Төркөстан

[1] *W. W. Zinserlinq. Орошение на Аму-Дарье. Издание Управления водного хозяйства степной Азии. Москва, 1927, 553—557 стр.*

төркөнә бойондороҡһоҙлоғоноң тормошҡа ашыуын, үҙ ҡөҙрәте, инициативаһын үҙе теләгәнсә ҡулланып, уны үҙе ярашлы бер юлда үлсәп файҙаланыу мөмкинлеген ҡулға алыу зарур. Ҡаҙаҡтарҙың мәшһүр шағиры Ҡөпәйоглы Йософ: «Ихтыяр хосусында башҡаларҙың әсире булыуыбыҙ сәбәпле, ҡеүәт һәм энергиябыҙ һис тә сарыф ителмәй ҡала», – тип Көнсығыш төркиҙәренең дөйөм ҡайғыһын асыҡ һәм ҡыҫҡа итеп аңлата. Азияның дүрт тарафынан килгән юлдарҙың был ҡушылған нөктәһендә мәҙәниәттәр аралашыу, боронғо ҡөҙрәт менән йәшәтелеүе өсөн был илдең урындағы халҡының донъя милләттәре менән үҙе ихтыярынса эш итеү мөмкинлеге алыу мотлаҡ. (Бынан 70 йыл элек Чокан Вәлихан Төркөстандың хәҙерге заман культураһына эйә булһын өсөн был традицияларҙың бында көсләп индерелеүенең зарури булыуы тураһында фекерҙе ныҡышмалы рәүештә алға һөрә. Хәҙер иһә бындай фекерҙәр артыҡ реакцион тип баһаланасаҡ. Заманыбыҙҙа бөйөк илдәрҙә мәҙәниәтте тик ул илдең бөтә халҡының дөйөм тырышлығы, планлы идара итеү барлыҡҡа килтерә. Шуға күрә Төркөстанда бөгөнгө көн культураһының, матди булһынмы, мәғәнәүи булһынмы, өлкәләрҙә заман талап иткән күләмдә һәм ҡөҙрәт менән үҫтерелеүе өсөн ихтыяр көсөнөң урындағы халыҡта яңынан барлыҡҡа килтерелеүе беренсе шарт.)

**Вена, Хернарсер-Гюртель, 11, Ишек 10.**
**10 октябрь, 1929 йыл.**

*«Бөгөнгө Төркиле (Төркөстан) һәм уның яҡын тарихы». I том, «Көнбайыш һәм Төньяҡ Төркөстан», 2-се баҫма, Истамбул, 1981 й. 612–615-се биттәр.*

**Тәржемәсенән**

*Кешелектең киләсәге хаҡында 1929 йылда фараз итеү бик ауыр эш икәнлеге еңел аңлашыла. Быъаса күрелмәгән масштабтаъы һуъыштан, ҡатмарлы инҡилаптарҙан һуң, һәр кеше аңында һәр милләттең, дәүләттең, ҡитъаның киләсәге томан менән ҡапланъан кеүек, англосакстар менән Германия, Рәсәй менән Европа араһындаъы, алъа киткән индустриаль донъя менән был йәһәттән урта быуатта ҡалъан башҡа донъя араһындаъы ҡаршылыҡтар – бөтәһе бер бөтөн буталъан, сырмалъан еп йомъаъы кеүек.*

*Шуъа ҡарамаҫтан, ъалимдың кешелек донъяһының да, Урта Азияның киләсәген дә асылда тәрән һәм дөрөҫ күҙаллаъаны күренә. Был уның тәрән тарихи белеменән, ъәйрәтле фекер йөрөтөү ҡеүәһенән һәм халҡының яҙмышы хаҡында етди, самими уйланыуынан килә. Тарихсылар бик ҡыҙыҡлы бер тикшереү үткәрә алырҙар ине: 20-се йылдар аҙаъында кешелек киләсәген күҙалларъа тырышҡан тарихсыларҙың, социологтарҙың, философтарҙың, сәйәсмәндәрҙең һәм башҡа аҡыл һәм белем эйәләренең киләсәк хаҡында фекерҙәрен саъыштырыу... Улар араһында беҙҙең Зәкиебеҙ ҙә лайыҡлы урын алыр ине.*

**Төрөксәнән Әмир ЮЛДАШБАЕВ тәржемәләне.**

2011
МИЛЛӘТ-АРА ТАТЫУЛЫҠТЫ НЫҒЫТЫУ ЙЫЛЫ
ГОД УКРЕПЛЕНИЯ МЕЖНАЦИОНАЛЬНОГО СОГЛАСИЯ

# АУЫЛ МӘКТӘБЕНЕҢ ӘСЕ КҮҘ ЙӘШТӘРЕ

Һаңғырауға төштән һуң тигәндәй, Рәсәй халҡы, шул иҫәптән башҡорттар ҙа, илдә ниндәй хәл-ваҡиғалар булып ятҡанын һәр саҡ аҫтына һыу үтә башлағас ҡына аңлай. Мәғарифҡа бәйле мәсьәләләрҙә лә шул уҡ хатаны ҡабатлай халҡыбыҙ. Бының төп сәбәбе иң элек уларҙа граждандарлыҡ аңының түбәнлегенә, битарафлыҡҡа бәйле. Башҡортостаныбыҙ, 1990 йылда үҙаллылыҡ яулағандан һуң, ике тиҫтә йыл эсендә мәғарифты үҫтереү буйынса байтаҡ уңыштарға ирешә. Хөкүмәтебеҙ тейешле тәрбиә һәм белем алып, гармоник шәхес булараҡ үҫешкән яңы Башҡортостан Республикаһы граждандарын тәрбиәләү маҡсатын ҡуйғайны уҡытыусылар менән ата-әсәләр алдына. Хеҙмәт, әхлаҡ, физик, эстетик тәрбиә биреү менән бер рәттән, балаларыбыҙҙы ысын илһөйәр һәм интернационалист итеп үҫтереү өсөн барлыҡ мәктәптәрҙә төбәк компоненттары: Башҡортостан тарихы, мәҙәниәте һәм республикаға исем биргән халыҡтың теле, йәғни, дәүләт теле булараҡ, башҡорт теле дәрестәре индерелде. Төрлө милләткә ҡараған ата-әсәләрҙең күпселеге был башланғысты ыңғай ҡабул итте. Дөрөҫ, араларында ризаһыҙлыҡ белдереүселәр ҙә бар. Төп сәбәп – балаларға ауырлыҡ төшә, йәнәһе. Тейешле талаптарға яуап биргән дәреслектәр, методик ҡулланмалар сығармауҙы сәбәп итеп ҡуйыусылар ҙа табылды. Улар был яҡтан хаҡлы ине, әлбиттә.

Милли мәғарифты яңыртып ҡороу, тергеҙеү йәһәтенән дә шул ваҡыт эсендә күҙгә күренерлек, хатта башҡа милли республикалар, өлкәләр көнләшерлек эштәр башҡарылды. Ауылдарҙа заман талаптарына яуап биргән мәктәптәр төҙөлөп, сафҡа индерелде. Был изге эштә хатта Башҡортостан Республикаһының беренсе президенты үҙе алдан башлап йөрөнө. Ҡыҫҡаһы, барыһы ла һәйбәт һымаҡ ине. Тора-бара үҙәктән уҡытыу планына яңы стандарттар индереү, шуға бәйле төбәк компоненттарын алып ташлау; уҡытыусыларға эш хаҡын балалар иҫәбенән сығып түләү; финанстарҙы һаҡсыл тотоноу маҡсатында оптимизация индереү, «Мәктәп автобусы» программаһы, аҙ уҡыусылы мәктәптәрҙе ябыу кеүек кампаниялар мәғариф өлкәһенә тотош бер үләт кеүек ябырылды.

Ә бөтә был ығы-зығы, шау-шыуҙарҙың нигеҙендә, баҙар мөнәсәбәттәренә һылтанып, мәғарифты түләүлегә әйләндереү маҡсаты ята. Яңыраҡ ҡына шул «фиҙакәрлек»тең башында яҡташыбыҙ, РФ-ның иҡтисади үҫеш министры Эльвира Нәбиуллинаның тормош иптәше, Юғары иҡтисади мәктәп дәүләт университеты ректоры Ярослав Кузьминов тороуын белеп шаҡ ҡаттыҡ. Мәғарифты яңыртыуҙың төп идеологы тап бына ул икән. Быға Ярослав Кузьминов, уның фекерҙәштәре йылдар буйы яйлап ҡына әҙерләнгән.

Мәғариф өлкәһенә Берҙәм дәүләт имтихандарын, һәр төрлө инновацияларҙы, ауыл мәктәптәрен үҙгәртеп ҡороу, уҡытыусыларға эш хаҡын уҡыусыларҙың йән башына ҡарап түләү кеүек һәр төрлө яңылыҡтарға уларҙың изге маҡсаттарҙан бигерәк, башҡа теләк-ниәттәре һалыныуын бөгөн генә килеп төшөнә башланыҡ.

Кузьминов әфәнденең фекеренсә, дәүләт аҡсаһы, бармаҡ араһынан аҡҡан һыу кеүек, буштан-бушҡа сарыф ителә икән дә баһа. Йәнәһе, быға юл ҡуймау өсөн иң һәйбәте – аҙ комплектлы ауыл мәктәптәрен ябырға кәрәк. Юғарынан төшөрөлгән һәр ҡарарҙы үтәргә әҙер торған муниципаль власть әһелдәре, уңды-һулды ҡарамай, аңын-тоңон белмәй, оптимизациялайбыҙ, тип һуңғы ваҡытта әллә күпме ауыл мәктәптәрен ябып ташланы. Шуның менән улар бер нисә тиҫтә йыл эсендә иҡтисади яҡтан емертелгән, хужалыҡтары юҡҡа сығарылған ауылдарҙы, үҙҙәре лә аңғармаҫтан, социаль, мәҙәни-рухи йәһәттән юҡ итеү эшенә тотондо. Аптыраҡ: яңы капиталистик йәмғиәт ауылһыҙ, бары тик ҡалалашыу шарттарында ғына йәшәүсе дәүләт булырға тейешме икән ни? Улай тиһәң, барлыҡ капиталистик илдәрҙә лә ауыл хужалығына айырым һәм етди иғтибар бирелә. Уларҙа ил хужалығының был тармағы һәр саҡ дотацияла ултыра. Беҙҙә иһә ауыл хужалығын, иҡтисади ауырлыҡтарға һылтанып, үҙ көнөгөҙҙө үҙегеҙ күрегеҙ, тип тәүҙә яҙмыш ҡосағына ташлап ҡуйҙылар, аҙаҡ бармағы үҙенә табан кәкре, нәфсеһенә сик ҡуя белмәүсе райондар, хужалыҡтар етәкселәренә, белгестәренә колхоз-совхоздарҙың мөлкәтен һатып, аҡсаһын кеҫәләренә һалыу мөмкинлеге тыуҙырҙылар. Баҫыуҙар сәселмәй ятырға, фермалар, мал ҡуралары буш торорға тейеш түгел, тип инвесторҙарҙы «йәлеп иттеләр». Ә хәҙер килеп, «мәғарифты яңыртыу» тигән шаушыу менән, ауыл мәктәптәре ябыла. Мәҙәниәт усаҡтары булған клубтар ҙа күбеһенсә бикле тора.

Ауыл мәктәптәрен ябыу өсөн етәкселек төрлө һылтау-сәбәптәр уйлап сығара. Әгәр класта 1-4 бала уҡый икән, «мәғариф өлкәһендәге сығымдарҙы һөҙөмтәле файҙаланыу маҡсатында» уларҙы ябырға кәрәк, йәнәһе. Һуңғы бер нисә йылда ғына ла республика етәкселеге шундай юл менән 358 мәктәпте ябып ҡуйған. Был мәктәптәрҙә эшләгән 20 000 хеҙмәткәр, шул иҫәптән 7 000 уҡытыусы эшһеҙ тороп ҡалған. «Сығымдарҙы экономиялау» тигән һылтау менән ауылдар киләсәгенә туранан-тура балта сабыу бит был. Тау аҫтындағын күрһә лә, танау аҫтындағын күрмәй, тигән кеүек, миллион, миллиард һумдарҙа дәүләт ҡаҙнаһы аҡсаһын урлаусы чиновник, депутат, олигарх һәм башҡалар менән ысынлап көрәшәһе, коррупцияға сик ҡуяһы урынға, Рәсәй хөкүмәте бәләкәй ауылдарға ҡаршы көрәш асты. Бындай саҡта испан яҙыусыһы М. Сервантестың ел тирмәне менән һуғышыусы Дон Кихоты иҫкә төшә. Ә бына Чечен Республикаһында, ул Рәсәй Федерацияһы составында булһа ла, оптимизацияға һылтанып бер генә мәктәпте лә япмағандар, бер бала уҡыһа ла, улар ҡалдырылған. Уҡыусылар аҙ, тип эш хаҡын да киҫмәгәндәр, киреһенсә, уны 30 мең һумға еткергәндәр. Чечня тигәндәй, шуны ла онотмаҫҡа кәрәк: мәсьәләнең милли яғы ла бар бит. Ошо йәһәттән аҙ комплектлы ауылдар мәктәптәрен ябыуға бәйле әлеге бер яҡлы күренештең Рәсәй халыҡтары өсөн үтә лә хәүефле төҫ алғанлығы күҙгә асыҡтан-асыҡ ташланып тора. Күпселек республикаларға исем биреүсе автохтон халыҡтарҙың барлыҡ милли йөҙө тап бына ауылдарҙа һаҡланып, йәшәп килә. Мәҫәлән,

башҡорттар ҡала шарттарында үҙ асылын һаҡлап ҡала алыуҙан әлегә бик алыҫ. Шуға күрә – ҙурмы ул, бәләкәйме – милләтебеҙ өсөн һәр бер башҡорт ауылы үтә лә ҡәҙерле, ифрат та ғәзиз. Уларҙа халҡыбыҙҙың барлыҡ этномәҙәни йөҙө, йәнле һөйләү теле, үҙенсәлекле ғөрөф-ғәҙәттәре, йолалары һаҡлана. Ауыл ул беҙҙең өсөн йәшәү урыны ғына түгел, ә йәшәү рәүеше, башҡорттоң йәшәү асылы.

Совет власы осоронда милләттәштәребеҙҙең аңлы өлөшө төрлө сәбәптәр арҡаһында тыуған ауылдарын ташлап китергә мәжбүр булды. Һуңғы йылдарҙа уларҙың тыуған төйәгенә тартылыуы һиҙелә. «Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!», Шәжәрә байрамдары быны асыҡ иҫбатлай. Себерҙән тыуған төйәктәренә кире ҡайтыусылар күренә. Ләкин улар әлегә бармаҡ менән генә һанарлыҡ. Әгәр үҙәктең ауылдарыбыҙҙы ҡоротоусы аҫтыртын сәйәсәтенә ҡаршы торабыҙ тиһәк, башҡорттарға элекке аҫаба-ырыусылыҡ системаһын яңыртырға, аяҡҡа баҫтырырға тура киләсәк. Башҡа юл юҡ. Һәр ҡәбилә ойошмаһы советының үҙенең элекке аҫаба ерҙәрендәге бөтөрөлгән ауылдарын кире тергеҙеү, булғандарын һаҡлау, үҫтереү өсөн бөгөндән үк һыҙғанып эшкә тотоноуы мотлаҡ. Был милләт-ара татыулыҡты ҡаҡшатып, республикалағы тыныслыҡты боҙоуға килтерәсәк, тип әйтергә бер ниндәй нигеҙ ҙә юҡ. Киреһенсә, башҡорт халҡын, шулай уҡ республикалағы башҡа халыҡтарҙы юҡҡа сығыуҙан һаҡлап ҡалыуҙың берҙән-бер юлы ул. Дәүләтебеҙ туранан-тура ауылдарҙы бөтөрөү сәйәсәте алып барғанда, башҡаса нимә эшләй алаһың? Бәлки, кемдәргәлер был көлкө, утопия булып тойолор, ләкин мин, мәҫәлән, эште, ҡасан да булһа бер тергеҙелеренә ышанып, бөткән башҡорт ауылдары урындарында «Бында фәлән аҫаба башҡорт ырыуының фәлән ауылы булған» тигәнерәк йөкмәткеле мәрмәр обелискылар ҡуйыуҙан башларға тәҡдим итәм. Хәҙерге көндә милләтебеҙ алдында ошонан да бөйөгөрәк, ошонан да изгерәк башҡа маҡсатты күрмәйем, сөнки ауылдарыбыҙ бөтһә, милләтебеҙ ҙә юҡҡа сығасаҡ. Бөгөн үк инде ата-бабаларыбыҙҙан мираҫҡа ҡалған ерҙәребеҙгә килмешәктәрҙең ҡул һуҙа башлауының шаһитыбыҙ. Ә киләсәктә милләт-ара мөнәсәбәттәрҙә был яҡшыға алып килерме?

Ил башында ауыл тормошон белмәгән, аңламаған етәкселәр ултырыуы үтә лә ныҡ борсой халыҡты. Алдағы йылдарҙа ла ундай чиновниктарға бер ниндәй ышаныс юҡ. Дөрөҫөн әйткәндә, һыйыр тиҙәген ат тиҙәгенән, арышты һолонан айыра белмәгән мәскәүҙәрҙән нимә көтәһең инде?! Хатта ки уларҙың береһе шуға барып етте: аграр телевидение каналы асырға кәрәк, шулай итһәк, ауыл хужалығы үҫешәсәк, алға китәсәк, йәнәһе. Бынан һуң Хрущевтың «кукуруз эпопеяһы»н һағынып иҫкә алырға ғына ҡала. Урыҫтың: «Москва деньги любит», – тигән һүҙҙәре бар. Ысынлап та, Мәскәү байҙарының ҡулдарында бик күп «бысраҡ» аҡса тупланған. Улар хәҙер шуларҙы ерҙәребеҙҙе, производство объекттарын һатып алып, әйләнешкә индереү менән мәшғүл.

Аҙ комплектлы мәктәптәрҙе ябыу өсөн муниципаль власть етәкселәре ниндәй генә юлға барманы һәм бармай. «Мәктәп автобусы» программаһы – шуларҙың береһе. Байтаҡ ауылдар бөтөп барғандар иҫәбендә булмаһа ла, уларҙа IX класҡа тиклемге мәктәптәр уңышлы эшләп килһә лә, автобус була, бөтә уңайлыҡтар ҙа бар, тип балаларҙы икенсе ауылдар мәктәптәренә йөрөтә башланылар. Хөкүмәттең аҡса экономиялайым тип былай ҡыланыуы йәнә ата-әсәләр елкәһенә ауыр йөк булып төшә: бензин, запас частар өсөн аҡсаны үҙ кеҫәһенән сығарып һалырға мәжбүрҙәр. Мәсьәләнең матди яғы халыҡ

башына бер күсәк булһа, сабый балаларыңды көн дә автобуска ултыртып ебәреүе – үҙе бер баш ауырыуы. Был турала «Аҡ тирмә» башҡорт халыҡ клубы рәйесе Ләлә апай Бейешева «Башҡортостан» гәзитендә шулай әсенеп яҙҙы: «Бөгөн ауылдарҙа мәктәптәрҙең көсләп юҡҡа сығарылыуы ауылдағы халыҡты юҡҡа сығарыуға тиң. XVII– XVIII быуаттарҙа башҡорт ауылдарын тәфтиләүҙәр яндырып юҡҡа сығарһа, әле алға китештең (цивилизацияның) юғары нөктәһенә еткәндә, мәктәптәрҙе ябып, ауылдарҙы бөтөрәбеҙ. Былай ҙа эшһеҙлектән ауылын, ғаиләһен ташлап ситкә сығып киткән ир-егеттәр бихисап. Ауылдың йөҙө, йәме булып торған йәш ғаиләләр әкренләп тарҡала. Был насар күренештән бала-саға, ябай халыҡ ыҙа сигә. Андрей Фурсенко (РФ мәғариф министры – **Т. Ш.**) кеүек етәкселәр юғарынан ҡарап ҡына: «Беҙ мәктәптәрҙе япмайбыҙ, ә эреләтәбеҙ», – ти, йәнәһе, уҡыусылар техника менән йыһазландырылған ҙур мәктәптәрҙә төплө белем ала, имеш. Ә ул техниканы ҡулланып уҡыу өсөн шарттар тыуҙырылғанмы һуң? Иртәнге 6-нан ете йәшлек баланы һыуыҡ автобуска ултыртып, ҡышҡы буранда, көҙгө һыуыҡ ямғырҙа 10 – 15 километр ерҙә ятҡан мәктәпкә алып китеүҙән ни фәтеүә? Балаларҙа уҡыу ҡайғыһымы, әллә йоҡомо? Етмәһә, мәктәптәрҙә ашатыу ҙа тейешле кимәлдә түгел. Ә дәрестәр I – IV класс балалары өсөн алдараҡ бөтә, 2-3 сәғәт буйы юғары класс уҡыусыларының уҡыуҙан сығыуын көтөп, ас көйө ултыра, сөнки автобус тик шул ваҡытта ғына килә. Уларҙың башында тиҙерәк өйгә ҡайтып етеү, береһендә лә өҫтәмә дәрес ҡайғыһы ла, түңәрәктә шөғөлләнеү теләге лә ҡалмай. Бындай уҡыу бушты-бушҡа ауҙарыу менән бер. Тик ваҡыт уҙғарыу ғына. Ҡаш яһайбыҙ тип, күҙ сығарабыҙ түгелме?» (*«Башҡортостан», 2011 йыл, 9 июль, №138-139*).

Быйылғы уҡыу йылынан башлап республика, шул иҫәптән ауыл мәктәптәре, яңы белем стандарттарына күсте. Һәр бер яңылыҡ аңлашылмаусанлыҡтар, күп һорауҙар, проблемалар тыуҙыра. Бигерәк тә башҡорттар кеүек аҙ һанлы халыҡтар өсөн. «Комсомольская правда» гәзитенең Башҡортостан вәкиллегендә мәғариф министрлығы етәкселәре менән берлектә үткәрелгән матбуғат конференцияһында уларға: «Ауыл мәктәптәренең йыһазланышы яңы стандартҡа тура киләме?» – тигән һорау бирелгәйне. «Юҡ. Ләкин элекке стандартҡа яуап биреп, яңыһына тура килмәгән мәктәптәр ҙә үҙ эшен дауам итәсәк. Ауыл мәктәптәре бындай үҙгәртеп ҡороуҙарҙы күтәрә алмаҫҡа мөмкин. Класта ҡул йыуғыс юҡ, ишек киңлеге тура килмәй, тип кенә мәктәпте ябып ҡуйып булмай, әлбиттә. Ә яңы төҙөлөүсе учреждениеларҙа был стандарттар ҡағиҙә итеп алынырға тейеш», – тип яуап ҡайтарҙы улар.

Эйе, заманса стандарттар хәҙерге уҡыусыға заманса талаптар ҙа ҡуя: быға тиклем һәр класта урын алған аҡбур, юйма менән бер рәттән компьютер, флэшка, видеокамера, диктофон ғәҙәти күренешкә әйләнергә; кескәйҙәр, инша, диктанттарҙан тыш, электрон хаттар, sms-хәбәрҙәр ҙә яҙа белергә тейеш. Дүртенсе синыф уҡыусыһы компьютерҙа, рус, туған теленән тыш, сит телдә текстар йыйырға өйрәнергә тейеш була.

Яңы стандарттар уҡыусыларға көнө буйы мәктәптә булыу мөмкинлеге бирә. Дәрестән тыш эштәр – хәҙер уҡытыу процесының айырылғыһыҙ бер өлөшө. Был инде һәр төрлө экскурсиялар, түңәрәктәр, конференция, олимпиада, тикшеренеү эштәрен мәктәп үҙе ойоштороға бурыслы тигәнде аңлата. Яҡты, иркен класс бүлмәләре, спорт залы, уйын бүлмәһе, ашханаһы

булып, бәҙрәфенә тиклем уҡыу йорто бинаһының эсендә урынлашырға тейеш яңы талаптар буйынса. Талап – бер нәмә, ә тормош ысынбарлығы – икенсе. Был талаптарҙы күтәрергә әлегә ауыл мәктәптәренең, ата-әсәләрҙең күбеһененең ҡулынан килерлек түгел. Сөнки ата-әсәләр ҙә, уҡытыусылар ҙа матди-финанс яғынан йә хәйерсе, йә ярлы хәлендә. Һүҙебеҙҙе исбатлау өсөн «Советская Россия» гәзитенең 2011 йылдың 25 июнендә (*68-се һан*) донъя күргән бер мәҡәләһендәге Рәсәйҙә йәшәйештең нисегерәк икәнлеге хаҡындағы мәғлүмәттәрҙе килтерәбеҙ. Унда яҙылғандарҙан күренеүенсә, рәсәйҙәрҙең 13,4 проценты ҡот осҡос хәйерселектә көн итә икән. Айлыҡ килемдәре – 3 422 һум. 27,8 проценты «хәллерәк хәйерселәр» рәтенә инә, йәғни улар айына 3 422 – 7 400 һум килем ала. 38,8 проценты ярлылыҡта көн итә, айлыҡ килемдәре 7 400 – 17 000 һум. «Байыраҡ ярлылар» иҫәбенә халыҡтың 10,9 проценты инә. Улар айына 17 000-дән 25 000 һум аҡса ала. Уртаса хәлдә йәшәүселәр (7,3 процент) айына 25 000 – 50 000 һум алып эшләй. Етеш йәшәүселәр – 11 процент. Уларҙың айлыҡ килеме 50 000 – 75 000 һумдан күберәк. Ошоларҙың барыһын дөйөмләштереп әйткәндә, Рәсәй халҡының 80 проценты – хәйерселәр, «хәллерәк хәйерселәр» һәм ярлылар.

Ауыл уҡытыусыһы ла бөгөн меҫкен хәленә төшөрөлдө. Ауыл халҡы менән сағыштырғанда ғына ул бай күренә. Ә ысынбарлыҡта эш хаҡы буйынса шул уҡ хәйерселәр йә ярлылар төркөмөнә инә. Уныһы – бер хәл. Шул уҡ ваҡытта хөкүмәтебеҙ был һөнәр эйәләрен байтаҡ льготаларҙан да мәхрүм итте. Күп мәктәптәрҙә хәҙер аҡбурҙы уҡытыусылар үҙҙәре һатып ала, медицина тикшереүен үҙ аҡсаһына үтә, мәктәпкә кәнсәләр тауарҙары етмәһә, үҙ кеҫәһенән сығарып һала. Шулай итеп, мәғариф өлкәһендәге модернизация уҡытыусы елкәһенә йәнә ауыр йөк булып ята.

Чиновниктар уҡытыусының нервы бөтөрөп, һаулығын юғалтып, интеллектуаль һәм ижади көсөн түгеп эшләп алған аҙ-маҙ эш хаҡын бына шулай өҙгөләп-йолҡҡолап ҡалыу менән генә сикләнһә, бер хәл әле. Инде хәҙер хөкүмәт үҙе үк балаларҙы бөтөнләй уҡытыусы ҡарамағына тапшырып, ата-әсәләрҙе тәрбиә, уҡытыу процесында ҡатнашыуҙан ситләштерҙе, йәғни бала тәрбиәләү бәхетенән мәхрүм итте. Уҡытыусы, бахыр, хәҙер бар йәһәттән дә өлгөрөргә тейеш: дәрес бирергә лә, кластан тыш саралар үткәрергә лә, түрәҡараларға ярайым, һүҙ теймәһен тип, ҡырҡмаһа ҡырҡ төрлө ҡағыҙ тултырырға ла, мәктәпте ремонтлау, төҙөкләндереү эштәрендә лә, кәрәкһә, уҡыусыһы тәртип боҙмаһын, енәйәт ҡылмаһын тип, клубта артынан ҡарауыллап йөрөргә лә, һайлауҙар ваҡытында власҡа яраҡлы сәйәси партияға тауыш биреү өсөн өгөт-нәсихәт алып барырға, һайлауҙарҙы ойоштороу, үткәреү эштәрендә лә ҡатнашырға… Бына шулай яйлап ҡына дәүләтебеҙ уҡытыусының статусын төшөрҙө, уны бөтөнләй хоҡуҡһыҙ хәлдә ҡалдырҙы. Ҡыҫҡаһы, уҡытыусы һәр яҡлап та ҡыҫырыҡланды. Был интеллигенция вәкилдәре, үҙҙәре лә аңғармаҫтан, ҡоллоҡ бығауын кейҙе.

Ярослав Кузьминов кеүек әфәнделәрҙең, шулай итеп, аҫтыртын уйниәттәре яйлап тормошҡа аша, шикелле. Хәҙерге йәштәр быларҙың барыһын да күреп йөрөй һәм уҡытыусы һөнәрен һайлауҙан баш тарта. Уҡытыусылар кәмеү сәбәпле, эшләргә кеше юҡ, тип ҡайһы бер мәктәптәрҙе ябыу өсөн тағы бер һылтау табыласаҡ.

Киләсәк быуынды аҡыллыраҡ та, белемлерәк тә итеп үҫтереү өсөн Кузьминов

әфәнделәр тарафынан уйлап табылған, дөрөҫөрәге, бармаҡтан һурып сығарылған стандарттар аҙ комплектлы ауыл мәктәптәренә, нисек кенә теләһәк тә, йәбешеп бөтмәй. Үҙегеҙ үк аңлап, үҙегеҙ үк күреп тораһығыҙ: хөкүмәттең хыялы шәп, кеҫәһе буш. Шуға күрә мәғариф министрлығы етәкселәре менән белгестәре, аҙ уҡыусылы мәктәптәрҙе ябыу ҡурҡыныс түгел, сөнки күп бала уҡыған кластарҙа уҡытыу процесының сифатлыраҡ булыуы күҙәтелә, тип аҡланмаҡсы. Уға китһә, намыҫлы эшләгән уҡытыусы бер нисә бала менән дә индивидуаль эшләп уҡытыу процесын юғары кимәлгә күтәрә ала! Яңы уҡыу стандарттары ҙур ауылдарҙағы урта мәктәптәргә яраған сүрәттә лә, заманса уҡытып, тәрбиәләнгән был аңлы, белемле йәш быуын вәкилдәре ауылда ҡалыр, тип уйлайһығыҙмы? Юҡ, әлбиттә. Хужалыҡтары емертелеп, таланып, социаль-иҡтисади йөҙө юҡҡа сығарылған ауылдарҙа нимә эшләһен улар?! Әгәр хөкүмәт ауыл хужалығын үҫтереүгә йылдың-йылы ҙур күләмдә аҡса бүлеп, һәр саҡ уны дотациянан айырмаһа, бәлки, күмәк хужалыҡтар ҙа кире тергеҙелер; туҡ башаҡлы баҫыуҙарҙа заманса белем алып сыҡҡан йәш комбайнсылар, тракторсылар яңы техник йыһаздар, телевизор, компьютерҙар ҡуйылған комбайн, тракторҙар ҙа йырлап эшләр ине. Быларҙың барыһы ла хыял ғына. Ялған өҫҡорма. Шуға күрә заманса белем алған яңы быуын йәштәр, ауыл мәктәбен тамамлағас, ҡалаға китеп, эшһеҙҙәр, торлаҡһыҙҙар сафын тулыландырасаҡ.

Яңы уҡыу йылы башында телевидениелағы бер яңылыҡҡа ныҡлы иғтибар итмәй булдыра алманым. Эҙләгән юлын таба тигәндәй, Түбәнге Новгород өлкәһе Красный Октябрь районының Овечий овраг ауылында уҡытыусы йорто асылған. Беренсе класҡа уҡырға төшкән ике баланы башланғыс кластар уҡытыусыһы өйөндә уҡыта башлаған. Ул хәҙер директорҙан башлап ашнаҡсы вазифаһына тиклемге эштәрҙе үҙе башҡара. Барлыҡ шарттар өйҙәгесә булһа ла, уҡыусыларҙың класс бүлмәһе мәктәптәге кеүек йыһазландырылған, ашханаһы бар. Уҡытыусы ғаиләһе икенсе ҡатта йәшәй. Быға тиклем уҡыусылар район үҙәгенә автобус менән йөрөп уҡыған. Балаларға иртә таңдан торорға, арып-йонсоп алыҫ юлда тәгәрмәс өҫтөндә ваҡыт үткәрергә тура килгән. Шуға ла быйыл I класҡа уҡырға төшкән кескәйҙәрҙең ата-әсәләре бик тә теләп ризалашҡан был яңылыҡҡа. Бына был, исмаһам, инновация. Юғиһә, реформа, модернизация, инновация тип илебеҙҙе емертеүҙән бушамай ҡайһы берәүҙәр. Уйлап ҡараһаң, ундайҙарға ҡаршы торор ошондай мөмкинлектәр ҙә бар икән дә баһа! Түбәнге Новгородта әлеге уҡытыусылар йортон асырға 70 кеше теләк белдергән. Был яңы проект педагогтарҙы бик ҡыҙыҡһындыра, сөнки уларға айлыҡ 20 мең һум эш хаҡы һәм коммуналь хеҙмәттәр, Интернет хаҡы түләнә. Эйе, беҙ ҙә башҡорт ауылдарын бөтөүҙән һаҡлап ҡалыусы ошондай яңы проекттарҙы өйрәнеп, оҙаҡҡа һуҙмай, ҡулланышҡа индерергә тейешбеҙ.

Унан ҡала, республикабыҙ ауылдарында социаль-мәҙәни комплекстар төҙөү тәжрибәһе лә бар бит әле. Тейешле талаптарға яуап биргән мәктәбе, балалар баҡсаһы, клубы, китапханаһы, магазины булған ошондай комплекстарҙы, ҙурмы ул, бәләкәйме, һәр башҡорт ауылында төҙөү маҡсаты ҡуйырға тейешбеҙ, тип уйлайым мин. Хөкүмәттән көтөп ултырмайынса, был йәһәттән хәлле милләттәштәребеҙ юғарыла телгә алынған аҫабалыҡ-ырыу советы исеменән аҡсалата һәм матди ярҙам күрһәтә алыр ине. Әгәр улар үҙҙәрен

халҡының ысын патриоты тип иҫәпләй икән. Бер уйлаһаң, шундай рухлы егет-ҡыҙҙарыбыҙ байтаҡ ауылдарҙа мәсет һалдырҙы бит үҙ аҡсаһына. Ә хәҙер аҫтыртын реформаторҙарға, «һоро кардинал»дарға ҡаршы торор өсөн тиҙ арала бәләкәй башҡорт ауылдарында йә махсус уҡытыусы йорттары, йә социаль-мәҙәни комплекстар төҙөү эшенә улар үҙ өлөшөн индерә ала. Тағы шуныһы: беҙ, башҡорттар, тик ундай хәлле ул-ҡыҙҙарыбыҙға ғына ышанып ятмайынса, ҡулыбыҙҙан килгән хәтле һәр беребеҙ был эштә финанс һәм матди яҡтан ярҙам итергә бурыслыбыҙ. Өйә-өйә өй була, ти халыҡ мәҡәле. Заманында ата-бабаларыбыҙ нисек Каруанһарайҙы төҙөһә, әле лә шул юҫыҡтараҡ эш итергә кәрәк беҙгә. Ошолай күмәкләп тотонһаҡ, ауылдарыбыҙ ҙа, милләтебеҙ ҙә ҡоромаҫ. Башҡорттарҙың иң ауыртҡан бер яғы булған тарҡаулыҡтан ҡотолоп, берлеккә килербеҙ. Берлектә – тереклек икәнен һәр ҡайһыбыҙ яҡшы белә. Хөкүмәт алдағы йылдарҙа аҙ уҡыусылы мәктәптәрҙе япһа ябыр, ләкин бәләкәй ауылдарҙа тейешле талаптарға яуап биргән мәктәп биналары төҙөргә бик ынтылып бармаҫ. Яуап әҙер: аҡса юҡ.

Ни өсөн балаларҙы социаль-мәҙәни комплекстар составына ингән мәктәптәрҙә уҡытырға кәрәк, тиһегеҙме? Сөнки әлеге лә баяғы бәләкәй башҡорт ауылдарында һеҙ ҡайһы башланғыс кластар уҡытыусыһының уҡытыусы йорто асырлыҡ талаптарға яуап биргән ике ҡатлы йорто булғанын күргәнегеҙ бар? Хәҙерге стандарттарға тура килеп бөтмәй ябылған башланғыс кластар мәктәптәре биналарын иһә күҙ-каш урынына һакларға кәрәк. Колхоз-совхоздар тарҡалған ваҡытта ферма, келәт, гараждарҙы нисек итеп һәр кирбесенә тиклем һүтеп урлап бөтөрһәләр, был уҡыу йорттары менән дә шул уҡ хәл ҡабатлансаҡ. Иманым камил. Бер уҡытыусы был йәһәттән миңә бик шәп тәҡдим әйтте: ул уҡыу йорттары биналарына реконструкция үткәреп, манара ултыртып, мәсет итеп асырға. «Һай, мәрҙәс! – тием мин ул апайға. – Әйткәнегеҙ Аллаһы Тәғәләнең амин тигән сағына тура килеп, тормошҡа ашһын».

Тағы ла бер иң ауыртҡан яғыбыҙға айырым туҡталып китмәһәм, был мәҡәләне яҙыу өсөн ҡулыма ҡәләм алыуымдың мәғәнәһе булмаҫ ине. Ике тиҫтә йыл эсендә күмәк хужалыҡтарҙы емертеүебеҙҙең ниндәй эҙемтәләргә килтереүен күрҙек, аңланыҡ, ауыҙыбыҙ беште. Ә хәҙер, бер нәмәгә ҡарамай, күмәк хужалыҡтарҙы кире тергеҙеү процесын башларға кәрәк. Шунһыҙ башҡорт ауылдары яҙмышы гелән ҡыл өҫтөндә торасаҡ, ауыл тормошон белмәгән, аңларға ла теләмәгән Андрей Фурсенко, Ярослав Кузьминов кеүектәрҙең ҡулында гелән уйынсыҡ хәлендә буласаҡбыҙ. Башҡортостан хөкүмәте ауыл хужалығын, ауылдарҙы социаль-иҡтисади, мәҙәни һәм мәғариф йәһәтенән йәшәтергә, һакларға тырышһа ла, үҙәктән шундай ҡоротҡослоҡ сәйәсәте алып барыла икән, беҙ бары тик үҙебеҙгә генә, үҙ мөмкинлектәребеҙгә генә ышанырға, үҙ хоҡуҡтарыбыҙҙы белеп, үҙебеҙ йәшәгән дәүләттән уларҙың үтәлеүен талап итергә һәм мотлаҡ үтәлешенә өлгәшергә бурыслыбыҙ. Бындай осраҡта баяғы башҡорттарҙың аҫабалыҡ мәктәбе тәжрибәһен тағы бер ҡат иҫкә төшөрөү урынлы булыр.

1989 йылдың 27 июлендә Женевала «Аҫаба һәм ҡәбилә ҡоролошонда йәшәгән халыҡтар тураһында халыҡ-ара хеҙмәтте ойоштороу буйынса 169-сы конвенция» ҡаралып, 1991 йылдың 5 сентябрендә көсөнә инде. Төп халыҡ төшөнсәһе документта түбәндәгесә билдәләнә: «Бойондороҡһоҙ дәүләттәрҙә йәшәгән төп халыҡ, уның ата-бабалары географик өлкәне биләгән, әммә

яулап алыу һөҙөмтәһендә колонизацияланған ошо ил территорияһының бер өлөшө һанала. Шулай ҙа, хоҡуҡи статусының ниндәй булыуына ҡарамаҫтан, үҙенең социаль, иҡтисади, мәҙәни, сәйәси институттарын һаҡлай». Был белдәләмә беҙҙең башҡорт халҡына туранан-тура ҡағыла һәм халҡыбыҙҙың статусына тура килә. Ҡайһы бер башҡорт сәйәсмәндәре, республика етәкселәре, юҡ менән булашмағыҙ, ти. Улар, бигерәк тә һуңғылары, милләт-ара көсөргәнешлек тыуҙырмайыҡ, тип автохтон халыҡтың ихтыяждарына күҙ йоморға, шуның менән йылы урындарында оҙағыраҡ ултырырға тырыша. 1 миллион ярым тәшкил иткән халыҡ үҙенең төп халыҡ статусын талап итмәҫ, тигән ныҡлы фекерҙә тора уларҙың күбеһе. Ә ниңә һуң Америка Ҡушма Штаттарындағы 5 миллиондан ашыу индеец төп халыҡ статусын йөрөтә лә дәүләт ярҙамын алып йәшәй? Был йәһәттән беҙ ҙә, халыҡ-ара хоҡуҡ кимәленә сығып, Рәсәй дәүләтенән аҫабалыҡты талап итә алабыҙ. Әйтер һүҙем шул: был мәҡәләне уҡып, түрә-ҡаралар, улай аҡсағыҙ күп булғас, ҡулығыҙҙан килһә, әйҙә, төҙөп ҡарағыҙ бәләкәй башҡорт ауылдарында заман талаптарына, яңы стандарттарға тура килгән мәктәп биналары, тип мыҫҡыллы ауыҙ ҡыйшайтыуы ла ихтимал. Бында һәр йәһәттән дә ҡарарға кәрәк: хәлле һәм рухлы милләттәштәребеҙ ярҙам ҡулы ла һуҙһын, һәр башҡорт милләте вәкиле, тыуған ауылы, ауылының мәктәбе, нәҫеле һаҡланһын өсөн, үҙенең бәләкәй генә булһа ла өлөшөн дә индерһен, башҡорт милли-ижтимағи ойошмалары, башҡорт сәйәсмәндәре, депутаттары – ҡыҫҡаһы, халҡының яҙмышына битараф булмаған һәр башҡорт аҫабалыҡты тергеҙеп, Рәсәй дәүләте алдында үҙ аҫабалыҡ хоҡуҡтарының үтәлеүенә ирешһен. Әгәр беҙ милләтебеҙ алдында торған ошо проблемаларҙы аңлап, берҙәм рәүештә эшкә тотонмаһаҡ, мәғариф министры Андрей Фурсенко, «һоро кардинал» Ярослав Кузьминовтарҙың ысынлап та үҙ маҡсаттарына ирешеүе ихтимал. Күрше ауылдарҙың урта мәктәптәрендә тейешле белем алған, компьютерҙа, кеҫә телефонында sms-хәбәрҙәр яҙа белгән, тикшеренеү эштәренә һәм башҡа күп нәмәләргә оҫта, маһир йәш быуын вәкилдәребеҙ тыуған ауылдарын ташлап сит тарафтарға сығып китеү яғын ғына ҡарап торасаҡ, тора-бара мөртәткә әйләнәсәк. Әле бәләкәй ауылдар башына төшкән бәлә яйлап ҙур ауылдарға ла килеп етәсәк: уларҙа балалар кәмейәсәк. Ә быға чиновниктарҙың башы ауыртмаясаҡ, тыныс ҡына был мәктәптәрҙе лә ябып ҡуясаҡтар. Артабан Сәйетбабаң да, Темәсең дә, Аҫҡарың да, Аҡъярың да… ҡалмаҫ. Тағы бер нисә быуаттан ул ерҙәрҙә ниндәйҙер башҡа телдә һөйләшкән-аралашҡан ҡәүемдәр йәшәүе ихтимал. Ә ундайҙар беҙҙең һымаҡ түгел, үҙ хоҡуҡтарын яҡшы белә. Әле үк баш ҡалабыҙға ҡасандыр күсеп килеп һәм гражданлыҡ алып, хәҙер үҙ балалары өсөн республика хөкүмәтенән милли мәктәп асыуҙы талап иткән, даулашып йөрөгән милләттәр вәкилдәре бар.

**Тәлғәт ШАҺМАНОВ.**
**Күмертау ҡалаһы.**

# ВАЙЫМҺЫҘЛЫҠ ҺӘМ КҮНДӘМЛЕК БАҪА

2011 йылдың Милләт-ара татыулыҡты нығытыу йылы тип иғлан ителеүе, минеңсә, республика һәм урындағы властарҙан йәмәғәт ойошмаларының эшмәкәрлегенә, ижтимағи-сәйәси тормошҡа ҡарата тәҡдим-кәңәштәренә иғтибарлыраҡ булыуҙы талап итә. Һуңғы 20 йылдан ашыу осорҙағы яңы сәйәси-иҡтисади шарттарҙа республика етәкселеге йәмәғәт ойошмаларының эшмәкәрлеге, ихтыяждары менән ҡыҙыҡһынманы, тиһәк, хәҡиҡәттән ситләшкән булыр инек. Башҡортостандың сәйәси статусын күтәреүҙә, уны яҡлауҙа етди роль уйнаған ҡайһы бер ижтимағи ойошмалар, шул иҫәптән халыҡ үҙәктәре, ниндәйҙер кимәлдә иғтибарҙан ситтә ҡалманы кеүек. Мәҫәлән, теге йәки был йәмәғәт ойошмаһының «түңәрәк дата»һын билдәләгәндә хөкүмәт әһелдәренең ҡотлау һүҙҙәрен, бәғзе ойошмаларға айырым эш урыны юллап биреүҙәрен нисек инҡар итәһең? Шул уҡ ваҡытта XX быуаттың 90-сы йылдарынан Урта Азия һәм Кавказ төбәктәренән күсеп килгән халыҡтар вәкилдәренә лә хөкүмәтебеҙ ижтимағи берекмәләр ойошторорға ярҙам итте, уларҙың эшмәкәрлеге өсөн шарттар булдырҙы. Ул ғына ла түгел, БР президенты булып Мортаза Рәхимов эшләгән осорҙа сит-ят тарафтарҙан килгән милли төркөмдәр берекмәләренә айырым штат та бирелә ине.

Башҡорт йәмәғәт ойошмаларына ҡарата республика хакимиәте яғынан күрһәтелгән иғтибарҙы шулай ҙа «ҡәнәғәтләнерлек» тип баһаларға нигеҙ самалы.

Күп кенә башҡорт ижтимағи ойошмаларының үҙ мөйөшө әле лә юҡ, ижтимағи-сәйәси өлкәлә ошо ойошмаларҙан килгән тәҡдим-кәңәштәр республика властары тарафынан инҡар ителә, йыш ҡына йәмәғәт эшмәкәрҙәренә эшкә урынлашыуҙа властар тарафынан яһалма кәртәләр ҡуйыла. Ошондай шарттарҙа 2011 йылды «Милләт-ара татыулыҡты нығытыу йылы» итеп иғлан итеүҙе, минеңсә, йәмәғәтселек хупларға, форсаттан файҙаланырға бурыслы кеүек. Был — бер. Икенсенән, Башҡортостанда Йәмәғәт палатаһы тураһында закон ҡабул ителеп, палата икенсегә яңырғас, граждандар йәмғиәтенең тупланыуына шарттар барлыҡҡа килде кеүек. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, йәмәғәт ойошмалары республика властары менән ошо палата булышлығында уртаҡ тел табып, бер маҡсатта эш итә алмай. Ул ғына ла түгел, Йәмәғәт палатаһының үҙенең дә күҙгә элерлек эше юҡ. Былтыр, мәҫәлән, ул бөтөнләй йыйылманы, ә быйыл яҙ йәмәғәт берекмәләре менән туған тел мәсьәләләренә арналған йыйылыш үткәрҙе лә — шуның менән вәссәләм!

Йәмәғәт палатаһы йыйылыштарында ҡатнашыу, йәғни республика властары менән эшлекле бәйләнешкә инеү мәсьәләһендә, минеңсә, тәүҙә башҡорт

иҗтимағи берекмәләренең хәл-әхүәле менән ҡыҙыҡһыныу зарурҙыр. Был ойошмаларҙың күптәре уставтарына ярашлы эшләмәй, ҡайһылары титуллы милләтенең конституцион хоҡуҡтарын яҡлауҙан ситләшә. Улар араһында тарҡаулыҡ хөкөм һөрә, өҫтәүенә, бер кем дә, бер ниндәй дәүләт структураһы ла йәмәғәт ойошмаларының эшмәкәрлеге менән ҡыҙыҡһынмай, кәңәш бирмәй.

М. Рәхимов республика башлығы булып эшләгән саҡтарҙа, ниндәйҙер кимәлдә булһа ла, Бөтөн Донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты (БДБҠБК) ойошмаларҙың эшмәкәрлегенә йүнәлеш бирә торғайны. Ҡоролтайҙың рәйестәре алмашынып торғас, һәр ойошма үҙ белдегенсә эш итә, ҡайһы берҙәре хатта Ҡоролтайҙан ситләшергә тырыша. Урыны менән иҗтимағи ойошмаларға чиновниктарҙың эше менән дә шөғөлләнергә тура килә, ә хөкүмәт әһелдәре был хәлгә «шулай булырға тейеш» тигән кеүек мөнәсәбәт һаҡлай. Үҙҙәре шул уҡ ваҡытта теге йәки был мәсьәлә буйынса ярҙам итеүҙән ситләшә. Әгәр ҙә чиновниктар йәмәғәтселектең хәленә инә белһә, хәҙерге ауыр мәлдә аҡсалата ярҙам итер, һис юғында башҡа төрлө дәртләндереү сараһын күрер ине. Үкенескә ҡаршы, йәмғиәтебеҙ ундай кимәлгә үҫешеп етмәгән шул.

Миҫалға «Төньяҡ амурҙары» хәрби-патриотик клубын (рәйесе — Илдар Шәйәхмәтов) алайыҡ. Клубҡа дәүләт яғынан бер ниндәй ярҙам күрһәтелмәй, уның бөтә эшен И. Шәйәхмәтов йәмәғәт башланғысында алып бара. Клубтың етәксеһе булараҡ, йәштәрҙе үҙ мөхитенә ылыҡтырыу, тарихи ваҡиғаларға арналған кейемдәр тектереү кеүек бөтә эштәрҙе үҙе атҡара. Берәй тарихи ваҡиға менән бәйле ниндәйҙер ҡалаға барырға кәрәк булһа, И. Шәйәхмәтов, биш-алты егет алып, үҙ иҫәбенә йөрөргә мәжбүр. «Төньяҡ амурҙары»н быйыл августа Смоленск ҡалаһына һәм Бородино яланына саҡырғайнылар. Бында ла Шәйәхмәтовтың үҙенә төптән егелеп эшләргә тура килде. Киләһе йылда 1812 йылғы Ватан һуғышына 200 йыл тулыу менән бәйле саралар үткәреү ҡарала. Республика хөкүмәтенең уға әҙерлеге һиҙелмәй, бөтә мәшәҡәт тағы ла «Төньяҡ амурҙары» клубының елкәһенә төшөрмө?

Бәлки, ҡайһы берәүҙәр, был клубтың милли татыулыҡты нығытыуға йоғонтоһо бармы ни, тип ризаһыҙлыҡ белдерер. Элекке Советтар Союзы халыҡтарының республикабыҙға күпләп ағылған мәлендә беҙгә атабабаларыбыҙҙың патриотик ҡаһарманлығын пропагандалау бик мөһим. Юғиһә, бәғзе мигранттар, айырыуса Кавказ яғынан килеүселәр, башҡорттар алдында танау сөйөрөргә маташа.

Иҗтимағи берекмәләребеҙҙең тарҡаулығы айырыуса төп милләт булараҡ халҡыбыҙҙың конституцион хоҡуҡтарын яҡлауҙан ситләшеүҙә сағыла. Уларҙың күптәре, әйтәйек, республиканың федерация статусын яҡлауҙа тейешле әүҙемлек күрһәтмәй. Бының, әлбиттә, сәбәптәре лә бар. Беренсенән, Рәсәйҙең махсус хеҙмәттәре яғынан башҡорт ойошмаларына ҡарата 2008 йылда уҡ башланған баҫым көсәйә бара. Федераль именлек хеҙмәте, Ойошҡан енәйәтселеккә ҡаршы идаралыҡ кеүек дәүләт структуралары Бөтөн Донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты, «Урал» башҡорт халыҡ үҙәге, «Күк бүре» башҡорт иҗтимағи хәрәкәте кеүек ойошмалар етәкселәрен саҡырып алып, «экстремизм»да ғәйепләп, һорау алыу ойошторғайны. Тап

шул мәлдән йәмәғәт ойошмаларының эшмәкәрлеге өҫтөнән күҙәтеү башланды. Хәҙер ниндәйҙер йыйылыш үткәрәбеҙ тип кеҫә телефоны аша иғлан ебәрһәң, сара үткәреләсәк урынға шунда уҡ полицейскийҙар килеп етә.

Мәҫәлән, быйыл 26 июндә Торатау (Ишембай районы) янында республиканың көньяғында эшләгән башҡорт йәмәғәт ойошмаларының йыйылышы тәғәйенләнгәйне. Килеүселәр араһында полиция, ФСБ хеҙмәткәрҙәре лә байтаҡ булған икән. Бындай сәйәси баҫымды илгә М. С. Горбачев, Б. Н. Ельцин еткәселек иткән замандарҙа ижтимағи ойошмалар бөтөнләй кисермәне. Бөтә кимәлдәрҙә лә һүҙ граждандар йәмғиәте һәм хоҡуҡи дәүләт төҙөү тураһында барғанда, нисек инде бөтә граждандарҙы, йәмғиәт ойошмаларын күҙәтеү аҫтына алырға мөмкин? Был бит РФ Конституцияһында нығытылған һүҙ һәм йыйылыштар азатлығын тыйыу, Сталин заманындағы тоталитар режимға ҡайтыу булып тора.

Башҡорт ижтимағи ойошмаларының тарҡаулығы һәм яуапһыҙлығы уларҙың йәмәғәтселек алдындағы абруйын төшөрә. Өфөлә, мәҫәлән, бер башҡорт ойошмаһы ла бер кем алдында ла яуаплы түгел. Ғөмүмән, ижтимағи берекмәләрҙең уставы буйынса уларҙың идараһы һәм етәксеһенең йыйын алдында яуаплылығы ҡаралған. Ләкин һуңғы ваҡытта ҡайһы бер ижтимағи ойошмалар йыйындарҙы бөтөнләй үткәрмәй башланы. Мәҫәлән, Өфөлә беренселәрҙән булып барлыҡҡа килгән «Аҡ тирмә» башҡорт мәҙәни үҙәге (рәйесе — Ләлә Бейешева) милләттәштәребеҙҙе бер сәйәси көскә туплауҙа заманында ҙур роль уйнағайны. «Аҡ тирмә»нең шау-шыулы йыйылыштарынан һуң «Урал» башҡорт халыҡ үҙәге, Башҡорт йәштәре иттифағы (БЙИ) кеүек ойошмалар барлыҡҡа килде. Уҙған быуаттың 80-се йылдары аҙағында — 90-сы йылдар башында «Аҡ тирмә» йыйылыштарына хөкүмәт әһелдәре лә килә торғайны.

Ә хәҙер мәҙәни үҙәк ай һайын күңел асыу кисәләре генә үткәрә. Башҡортостандың сәйәси статусы яйлап ҡына төшөрөлә, ә «Аҡ тирмә», күңел асыу сараһы булараҡ, сәнғәт оҫталарының, яҙыусыларҙың, милли баҫмаларҙың «түңәрәк дата»ларын үткәреүҙән бушамай. Вазифаһын ун йылға яҡын атҡарыуға ҡарамаҫтан, рәйес бер тапҡыр ҙа йыйын үткәреп, отчет яһаманы. Мәҙәни үҙәк йыйынында идара ағзалары, рәйес һайланырға тейеш, ә һуңынан етәксе үҙенең урынбаҫарын тәғәйенләй. Үкенескә ҡаршы, «Аҡ тирмә» идараһыҙ, урынбаҫарһыҙ эшләүен дауам итә.

Халыҡ тормошо ҡатмарлашҡан ваҡытта мәҙәниәт, сәнғәт өлкәһендәге ғәҙелһеҙлектәр ҙә баштан ашҡан. «Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт эшмәкәре» тигән абруйлы исем алыу өсөн йәмәғәт ойошмаһының ябай ағзаһына күпме бюрократик баҫҡыстар аша үтергә кәрәк! «Аҡ тирмә» мәҙәни үҙәгенең төп бурысы — шул ғәҙелһеҙлектәргә ҡаршы сығып, чиновниктарҙан бөтә йәмәғәтселек исеменән ғәҙеллек талап итеү. Ойошма быйыл отчет-һайлау йыйылышын үткәрерме, юҡмы?

1990 йылда эш башлаған Башҡорт йәштәре иттифағы заманында иң популяр ойошма булып киткәйне. Уны ойоштороуҙа иттифаҡтың беренсе рәйесе Ринат Байымовтың роле ҙур булды. Ҡайһы бер йәмәғәт эшмәкәрҙәренең фекеренсә, шул уҡ йылдың октябрендә БЙИ ул ваҡыттағы Юғары Совет сессияһына көслө баҫым ойоштормаһа, бәлки, Башҡортостандың дәүләт суверенитеты тураһында декларация ҡабул ителмәҫ тә ине. Ләкин бөгөн иттифаҡ

эшмәкәрлегендә лә битарафлыҡ хөкөм һөрә. 2006 йылда ойошманың аҙаҡҡы ҡоролтайы үткәрелгәндән һуң бында ла, «Аҡ тирмә» үҙәгендәге кеүек, ҙур йыйылыш булғаны юҡ. 2010 йылда Бөтөн Донъя башҡорттары ҡоролтайы ҡатнашлығында БЙИ-ның идара ултырышында Ф. Маликов рәйес вазифаһынан бушатылып, етәксе вазифаһын башҡарыусы итеп Р. Багаев ҡуйылды. Иттифаҡтың законлы рәйесе әле лә һайланмаған. Ә уны тик ҡоролтай, йәғни йыйын хәл итә.

Һуңғы өс-дүрт йылда ойошма сәйәси эшмәкәрлектән ситләште. Башҡортостандың сәйәси статусын, федерализм принциптарын теүәл үтәүҙе талап итеп, «Күк бүре», «Туған тел», «Аҡтамыр», «Урал» башҡорт халыҡ үҙәге кеүек йәмәғәт ойошмалары күпме пикет-митингылар ойошторҙо, республика хөкүмәтенә мөрәжәғәттәр яҙҙы, ләкин БЙИ етәкселәре был акцияларҙың береһенә лә ҡушылманы. Былтыр республика етәкселеге ҡапыл алмашыныу сәбәпле, 16 — 19 июлдә бөтә башҡорт йәмәғәтселеге Нефтселәр мәҙәниәт һарайында йыйылыш үткәрҙе. Башҡортостандың һәм башҡорт халҡының яҙмышы хәл ителгән ваҡытта йыйылышҡа БЙИ етәкселәренән берәү ҙә килмәне. 18 сентябрҙә Торатауҙың тәбиғәтен һаҡлау буйынса «Урал» үҙәге ойошторған ҙур акцияла ла иттифаҡ етәкселәренән килеп күренеүсе булманы.

Әлеге Башҡорт йәштәре иттифағын XX быуаттың 90-сы йылдарҙағыһы менән нисек сағыштыраһың инде? Ул саҡтағы йәштәр берекмәһенең эшмәкәрлеген бөтөн Өфө белеп торҙо. Иттифаҡ ағзаһы булыу абруйлы һаналды, сөнки БЙИ-ның сафтарына ҡабул ителгәс, һәр милләттәш тантаналы рәүештә ант бирер ине. Ә хәҙерге БЙИ етәкселегендә милләт бәҫе хаҡында уйлаусылар бармы икән? БЙИ-ның эшмәкәрлеге һәр саҡ БДБҠБК һүҙенән ситкә сыҡманы. Бер ни ҙә эшләмәнеләр, тип булмай, әлбиттә. Мәҫәлән, Конгресс-холлда йәштәр өсөн башҡорт дискотекалары уҙғарылды. Һуңынан уларҙың башҡорт мәктәптәрендә уҡыған балаларҙың спорт ярыштарын ойоштороуы ишетелеп ҡалды, 2009 йылдың апрелендә БДБҠБК менән берлектә мәктәп программаларында милли төбәк компонентын яҡлау буйынса митингыла ҡатнаштылар.

«Күк бүре» башҡорт ижтимағи хәрәкәте — Өфөлә (рәйесе — Азат Сәлмәнов) йәштәрҙең яңы ойошмаһы, ул 2007 йылда ғына барлыҡҡа килде. Ул баш ҡалалағы бөтә башҡорт берекмәләре араһында әүҙем сәйәсәт менән шөғөлләнгән берҙән-бер хәрәкәт. 2010 йылдың йәйендә «Күк бүре» милләтебеҙҙең бәҫен яҡлаған йәмәғәт ойошмаһы икәнен күрһәтте. 16 — 19 июлдәрҙә БДБҠБК рәйесе Азамат Ғәлин ғәмһеҙлеккә бирелгәндә, «Күк бүре» егеттәре инициативаны үҙ ҡулдарына алып, тәүҙә 1 августа үткән Бөтөн Донъя башҡорттары ҡоролтайы йыйылышында, йәмәғәтселекте йыйып, С. Юлаев һәйкәле янында республикалағы хәлде аңлатты.

Йыл һайын 19 — 22 июндә «Күк бүре» йыйын үткәрә. Унда хәрәкәт ағзалары алдында торған мәсьәләләр ҡарала, хәл итеү юлдары билдәләнә. Шуныһы үкенесле: ойошма Башҡортостанда киң ҡоласлы хәрәкәткә әүерелеп китә алмай. Бер яҡтан, уның эшмәкәрлегенә Рәсәйҙең махсус хеҙмәттәре аяҡ салһа, икенсе яҡтан, власть даирәләренә М. Рәхимов заманында эйәләп алған үҙебеҙҙең «әпкәләйҙәр» ҡыҫыла. Әлбиттә, «Күк бүре»не,

өлгөлө эшләй, тип әйтеп булмай. Йыш ҡына егеттәр XX быуаттың 90-сы йылдарында юл ҡуйылған хаталарҙы ҡабатлай.

Башҡа йәмәғәт ойошмаларынан «Урал» башҡорт халыҡ һәм «Аҡтамыр» үҙәктәре йыйындарын үткәрҙе. 2009 йылдың декабрендә Төбәк-ара йәмәғәт ойошмаһы «Урал» башҡорт халыҡ үҙәгенең 20 йыллығына арналған ҙур йыйынында рәйес итеп йәнә биш йылға Риф Иҫәнов һайланды. Үҙәк «Йәш көстәр» исемле гәзитен сығара, «Башҡортостан» республика гәзите редакцияһы менән берлектә «Районымдың ете мөғжизәһе» тигән акция үткәрә. «Аҡтамыр» үҙәге 2008 һәм 2010 йылдарҙың декабрендә 15 йыллыҡ юбилейын билдәләне. 2007 йылдан ике гәзит сығарҙы.

Башҡорт ойошмаларының тарҡаулығына битарафлыҡ ҡына түгел, власть менән йәмәғәтселек вәкилдәре араһында уларҙың ни өсөн ойошторолоуын, ҡайһы йүнәлештә эш итеүен дөрөҫ аңламаусылар ҙа булышлыҡ итә. Урындағы һәм республика властары әһелдәре фекеренсә, йәнәһе, башҡорт ижтимағи ойошмалары мәғариф, мәҙәниәт, сәнғәт өлкәләрендә халыҡҡа милли телде пропагандалау менән шөғөлләнергә бурыслы. Ошо изге эш алып барылмаһа, улар йәмәғәт ойошмалары етәкселәрен ғәйепләргә тотона. Ә бит төрлө кимәлдәге власть даирәләрендә ошо эштәрҙе ойоштороу өсөн яуаплы милли бүлектәр, йәғни штаттағы чиновниктар бар. Ә ниңә уларға ла талаптар ҡуймаҫҡа? Мәҫәлән, Өфө ҡала хакимиәтенең мәғариф идаралығындағы милли бүлек штатында өс кеше тора. Улар ҙа йәмәғәтселек алдында яуаплылыҡ тоторға бурыслылыр бит?

Ҡайһы бер ижтимағи ойошмалар етәкселәре, чиновниктар йәмәғәтселектең төп бурысын власть даирәләрендәге башҡорт милләтенән булған әһелдәрҙе ҡурсалау, етешһеҙлектәрен йомоп ҡалыу кеүек эшмәкәрлектә күрә, сөнки, уларса, башҡорт кадрҙары власть структураларында аҙ һәм уларҙы яҡлау фарыз. Мәҫәлән, БЙИ-ҙең элекке рәйесе Ф. Маликов республика матбуғатына биргән интервьюһында, иттифаҡ үҙен түгел, ә республика власын яҡлауҙы мөһим күрә, тигән фекер үткәрә. Бындай осраҡта йәмәғәт ойошмаларына Рәсәй Федерацияһының «Йәмәғәт берекмәләре тураһында»ғы (1995 й.) законына һылтанырға кәрәк. Һәр йәмәғәт ойошмаһы ирекле, унда кемде лә булһа мәжбүри эшләтеү тыйыла.

Был ойошмаларға кешеләр ни өсөн мөрәжәғәт итә? Кемдәрҙелер милләт намыҫы йөрөтһә, икенселәр унда үҙ хоҡуҡтарын яҡлап мөрәжәғәт итә. Граждандар йәмғиәте тураһында һүҙ йөрөтәбеҙ икән, ижтимағи ойошма үҙ ағзаларының хоҡуҡтарын яҡларға ла бурыслы бит әле. Шул уҡ закон буйынса улар төрлө кимәлдәге власть даирәләренә тәҡдим-кәңәштәр, идеялары менән дә мөрәжәғәт итергә хоҡуҡлы.

Ә республика власының эшмәкәрлеген яҡлау-яҡламауҙы һәр йәмәғәт ойошмаһы үҙ аллы хәл итә, сөнки ижтимағи берекмәләр бойондороҡһоҙ, дәүләт тарафынан финансланмай. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, ҡайһы бер ойошмалар власть әһелдәрен төрлө оппозицион сығыштарҙан асыҡтан-асыҡ яҡлау юлына баҫа. Ундай хәлдәрҙе республикабыҙҙа ла, Рәсәйҙең башҡа төбәктәрендә лә күҙәтергә мөмкин. Ул ойошмалар властар менән ысынлап та уртаҡ тел табып, ҡулға-ҡул тотоношоп эшләй икән, әлбиттә, уларға урындағы власты яҡлау отошло. Тик власть эйәләре менән диалог булғанда ғына, илдә граждандар йәмғиәте төҙөү тураһында һүҙ алып барырға мөмкин.

Башҡорт милли ойошмалары менән республика власы араһында эшлекле диалог хәҙер юҡ дәрәжәһендә. Быйыл ғинуарҙа «Аҡтамыр» үҙәге республика хөкүмәте менән һөйләшеүҙәр үткәреп ҡарағайны, ләкин ул оҙаҡҡа барманы. Әлеге власть халыҡҡа түгел, ә юғарыла ултырған чиновниктарға яраҡлашыуҙы өҫтөн күрә, ахырыһы. Килешеп эшләмәгәс, башҡорт ижтимағи берекмәләренең күп кенә тәҡдим-кәңәштәре республика властары тарафынан инҡар ителеп, кадрҙар сәйәсәтендә айырыуса киң сағылыш таба.

Теманы дауам итеп, Бөтөн Донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты тураһында ла әйтеп китергә кәрәктер. Күп кенә башҡорт берекмәләренең ҡарашы — айырыуса кадрҙар, сәйәси курс һәм башҡа мәсьәләләр буйынса — был ойошма менән тап килмәй. Мәҫәлән, «Аҡтамыр» үҙәге кадрҙарҙы бөтә власть структураларына конкурс нигеҙендә тәғәйенләүҙе хуплаһа, БДБҠБК-ла ултырған ҡайһы бер ағайҙар ҡаршы сыға, сөнки улар властарға яраҡлашыуҙы өҫтөн күрә. Ошо ҡапма-ҡаршылыҡ быйыл 11 апрелдә БДБҠБК-ның кәңәшмәһендә лә асыҡланды. «Аҡтамыр» үҙәгенең милли мәғариф өлкәһендәге кадрҙар сәйәсәте буйынса эшмәкәрлеге тураһында сығышы тыңланды. Башҡорт мәктәптәренең, гимназияларының директорҙарын конкурс нигеҙендә ҡуйыу буйынса тәҡдимгә бәғзе башҡорт ғалимдары ҡаршы сыҡты.

Шулай итеп, Ҡоролтайҙың йәмәғәт кәңәшмәһе ҡарары «Аҡтамыр» үҙәгенең Мәғариф министрлығы менән кадрҙар мәсьәләләре буйынса өлгәшкән күп кенә ҡаҙаныштарын юҡҡа сығарҙы. БДБҠБК, бөтә башҡорт ойошмаларын бергә туплап, халыҡ мәнфәғәтен яҡлап эш итеү урынына, киреһенсә, йыш ҡына «дөрөҫ юл»дан барып, ижтимағи берекмәләрҙе үҙенән биҙҙерә. Бындай осраҡта ойошмаларға ҡайҙа һыйынырға? Әлеге ҡатмарлы заманда кем, йәғни ниндәй статуслыраҡ ижтимағи ойошма уларға кәңәш бирһен?

Һис ниндәй ҡыйынлыҡтарға ҡарамай, башҡорт йәмәғәтселеге әлеге хәлдән сығыу юлын барыбер табырға бурыслы. Донъялағы бөтә сәйәси ваҡиғаларҙа халыҡтың төрлө ҡатламдары тик йәмәғәт ойошмалары, фирҡәләр аша үҙ мәнфәғәттәрен сағылдырған һәм ҡурсалаған кеүек, беҙҙә лә ябай башҡорттар үҙ хоҡуҡтарын йәмәғәт ойошмалары эшмәкәрлеге аша ғына яҡлай ала. Шуға күрә лә, республикала йәмәғәтселек фекерен нисек кенә инҡар итергә тырышмаһындар, һүҙ илдә граждандар йәмғиәте төҙөү тураһында барғанда, республика властары — теләйме-юҡмы — йәмәғәтселектең талаптары менән иҫәпләшергә мәжбүр буласаҡ. Шуның өсөн дә башҡорт йәмәғәт ойошмаларына үҙ хоҡуҡтарын яҡлау өсөн берләшеү маҡсатында эш итеү мотлаҡ. Шунһыҙ бюрократик кәртәләрҙе еңеп булмаясаҡ.

**Ирек АГИШЕВ,**
**«Аҡтамыр» үҙәге рәйесе.**
**Өфө ҡалаһы.**

# *Жәлил Кейекбаевтың тыуыуына 100 йыл*

## ЕБӘРЕЛГӘН ҺӘМ АЛЫНҒАН ХАТТАР

**22 май, 1941 йыл, Карши**

*Жәлил, мин һинән бөгөн тағы ике хат алдым. Береһен мәктәпкә адреслап яҙғанһың, икенсеһе – заказное. Анан һуң ике телеграммаңды алтым. Хаттарыңты ла, телеграммаларыңды ла бергә алтым бөгөн генә.*

*Жәлил, Һин мине ғәфү ит инте. Мин үҙемдең исәрлегем белән, һинән 10 – 12 көн хат килмәй торғас, хатыңды алмайым тип тоттом та телеграмма бирҙем. Икенсе көнө үк һинән хат алтым. Хатыңды алғас, телеграмма бирергә кәрәк булған икән тә, хат килгәс, шатлығымдан нишләргә белмәй, барыһын да онотҡайным.*

*Хәҙер миңә һинең алдыңда бик оят. Ты можешь черт знает что подумать. Еще раз прошу, Жәлил, прости меня, ради бога за беспокойство, которое я Тебе причиняю. Впредь я буду терпеливее.*

*Здоровье мое относительно хорошее. Биҙгәк һирәклап кенә тота. Мынта чеснок совсем юҡ. Мин хинин принимать иттем. Мынта малярия белән ауырыу – обычное явление. Аның белән ауырыған кеше күп. Амбулаторияға барһаң, бөтөнөһө тиерлек шул малярийный кешеләр. Мин амбулаторияға күп барырға яратмайым, не люблю лечиться.*

*Хатларыңдың барыһында алтым, Жәлил, рәхмәт. Ләкин һин мәктәпкә яҙма хатты, анта юғалырға мөмкин. Я очень рада, что мои письма Ты получаешь своевременно.*

*Жәлил, шулайтып, беҙгә күрешергә фәҡәт бер генә ай ҡалды, бер айҙан һуң, Алла бирһә, беҙ бергә булырбыҙ.*

*Ҡаран-Йылғаға һис шикһеҙ барырбыҙ. Тик мин «килен», «еңкәй» тигән һүҙҙәрҙән оялам. Лучше было бы, конечно, если бы меня не величали этими именами. Гораздо лучше и проще, если твоя родня будет называть меня просто «Нәфисә». В общем, как хотят, как им нравится, пусть так и называют.*

*Жәлил, неужели беҙҙекеләр ҙә һине «кейәү», «еҙнә» тирләр икән? Опять таки үҙләре беләләр инте…*

*Жәлил, шулай ҙа һинең атайың, моғайын, беҙҙең мөнәсәбәттәрҙе беләлер. Белһә-белһен. Ҡаршылығым юҡ. Ләкин минекеләр белмәйҙәр. Әйтмәйем тә мин аларға...*

*Нәфисәгә һүҙ сыҡҡанда Мәнтемтә ял итеү хаҡында әйттем. Кейәүенең инәләре Нәфисәгә ҡайтырға ҡушып хат яҙғандар. Нәфисә миңә: «Бергә туп-тура беҙгә ҡайтайыҡ», – тип әйтә. Мин: «Ярар, һеҙгә лә барырбыҙ, ә тәүлә мин әҙерәк үтеп китмәксемен Мәнтем ауылын», – тинем. Ул, Мырҙаҡайға бармаҡсымын икән, тип уйланы, сөнки ул Мырҙаҡайҙа ҡорҙаш-ырыуҙаштарым барын белә. Между*

---

*Аҙағы. Башы 9 —11-се һандарҙа.*

*прочим, Мырҙаҡайҙағы родственники былтыр йәй аларға бармағанлыбыҙ өсөн беҙгә бик үпкәләйҙәр. Әтейем нишләптер алып бармаған булты, минем тә инәйемнең туғандарын күрәһем килә ине. Насип булһа, аларҙы лә барып күрербеҙ әле…*

*Билгеле, Жәлил, мин Нәфисәгә беҙҙең эшләр хаҡында һөйләһәм тә, аның өйрәткәнен тыңлап, үҙем уйлағанса эшләйәсәкмен. Дөрөҫ әйтәһең, что ул аҡыл өйрәтер тип. Ул кешегә аҡыл өйрәтергә бик ярата...*

*Мин бөгөн иртәнсәк бер хат яҙып һалғайным, быларҙың икеһен тә бергә алырһың, моғайын.*

*Хәҙер мәктәпкә консультацияға ашығам. Химиянан консультация булмаҡсы.*

*Хәҙер киске 8, ләкин ҡояш нык ҡыҙҙыра, әҙерәк һалҡын төшә биргәс, был хатты почтаға апарып һалам.*

*Жәлил, как хорошо, что мы скоро встретимся. Я Тебя прошу, Жәлил, минең барып төшөр көндө береһенә лә әйтмә. Үҙеңдән башҡа һис кем белмәһен. Вокзалға, әгәр ваҡытың булһа, үҙең генә төшөрһөң.*

**27 май, 1941 йыл, Карши**

*16 май яҙған хатыңды алтым. Рәхмәт.*

*Жәлил, Һин мине ғәфү ит, мәктәпкә китергә ҡабаланам. Был хат ҡыҫҡа ғына булыр. Кискәрәк тағы яҙырмын әле.*

*Беҙҙең зачеттар башланты. Беренсе дәрес яҙма әҙәбиәттән ине, икенсеһе – телдән, аны ла кисә сдавать иттек. Телдән бирелгән экзамендан ҡурҡыбыраҡ тора инем, но ничего. Икеһенән тә отлично алтым. 29 май алгебранан экзамен була. Минең иң ҡурҡҡаным шул алгебра инте. Хоть бы на «посредственно» сдать эту математику, а остальное – как-нибудь.*

*Последний предмет – история. Потом выпускной вечер и … я еду к Тебе.*

*Ҡайтыу тураһында әллә нәмәләр яҙа алмайым. Әгәр үҙгәрештәр булһа, яҙырмын.*

*Лотфый ағайға, әлбиттә, әйтмәй китәм. Ул, мин киткәнсе, бәлки, яҙмаҫ та әле, сөнки аларҙың уҡыуҙарын әҙерәк продлить иткәндәр…*

*Хәҙергә малярия белән ауырымайым. Бик эҫе, ләкин һыу инергә ярамай әле.*

*Осрашҡас, мине Салауат баҡсаһына алып бар. Дөрөҫ, мин анта барғаным юҡ. Вообще мин Өфөнөң күп ерен белмәйем әле. Мин ҡайтҡас, һиңә эш күп булаҫаҡ: на тебя ляжет обязанность познакомить меня с Уфой.*

*Ну ярар, Жәлил, ғәфү ит. Мин хатымты шуның белән туҡтатам.*

*Хәҙер мәктәпкә консультацияға барам, ә һуңыраҡ әтейем янына осрашыуға барырбыҙ. Бөгөн кискә йә иртәгә тағы яҙырмын.*

**28 май, 1941 йыл, Өфө**

*19/V һалған хатыңды алдым, икһеҙ-сикһеҙ рәхмәт үҙеңә, Нәфисә! һинең хаттарың минең йөрәгемдәге шатлыҡты тағы ла көсәйтә, тағы ла арттыра – мин һис бер ваҡытта ла һөйөнөп, шатланып бөтә алмайым. Нисек шатланмайһың ул хаттарға! Ул хаттарҙың артынан бына оҙаҡламай һин үҙең киләһең – минең иң яратҡаным, һин киләһең. Беҙҙең осрашыу ваҡыты яҡынлаған һайын минең шатлығым арта, көсәйә – ул шатлыҡ йөрәккә һыймай. Мин шатлығымды бына ошо хаттағы һүҙҙәр эсенә һыйҙырырға тырышҡан булам. Ул шатлыҡты яҙып ҡына аңлатырға мөмкинме һуң, Нәфисә!*

*Осрашыу ваҡыты яҡынайғандан-яҡынайя, бер ай ҡалды. Һин был хатты юлығып алғас, тағы ла әҙәйә ваҡыт.*

*Тиҙерәк, тиҙерәк осрашһаҡ ине инде, һөйөклөм. Үҙең әйтмешләй, бер-беребеҙгә туйғансы, күҙебеҙ талғансы ҡарар инек.*

*Мин шул тиклем шатланам, Нәфисә, белһәң ине.*

*Мин ышанам һиңә, Нәфисә. Һин экзамендарҙы уңышлы бирерһең. Һәр хәлдә «плохо» алмаҫһың, аның булыуы мөмкин түгел. Тик үҙеңә ышаныслы рәүештә, һалҡынлыҡ белән эш итергә кәрәк.*

*Был хатты алыу белән экзамендарыңдың барышы хаҡында миңә яҙырһың.*

*Оҙаҡламай атайым ҡайта, тигәнһең. Мәсьәләне, билгеле, һөйләшеү буйынса аңа әйтмәҫһең. Ташкентҡа йә Сәмәрҡәндкә генә барып, уҡыу эштәрен белешеп киләм, тиерһең дә, китерһең. Юлға ул тиклем күп нәмә алма, йөрөтөүе ҡыйын булыр үҙеңә, иң кәрәк әйберҙәреңде генә ал да, шул еткән.*

*Юлда иҫәнлек-һаулыҡ теләйем, сөнки был иң яуаплы ваҡыт. Әйткәндәй, һин юлда йөрөп өйрәнгәнһең, мин инде һиңә ышанам. Юлда ауырып-нитеп китмә, тип борсолам, юл йыраҡ бит: 5 - 6 көнлөк барҙыр әле ул.*

*Атайым һиңә предложение яһағанды белмәй. Хат алышҡанды ағайым ғына белә (әсәйемдең бер туған энеһе). Ул күптән түгел Өфөгә килеп ҡайтҡайны, миңә төштө. Көндөҙ мин эштә саҡта һинән хат килгән. Мин эштән ҡайтһам, ул: «Һиңә хат бар, Жәлил, бейе давай» ти. Билгеле, хаттың ҡайҙан икәнен уҡыған (обратный адресын). Конечно, мин аңа уҡытманым хатты. Ул һораш-ты. Мин: фәлән ауылы ҡыҙы ул, Ташкент яғында уҡытыусы булып эшләй, таныш ҡыҙ, тинем дә ҡуйҙым. Шул булды. Ләкин ул һөйләп йөрөй торған кеше түгел. Мин аңа әйттем. Шунан һуң ул: «Һиҙәм, малай, эшеңде, алай булғас» – тине лә ҡуйҙы. Шуның белән бөттө. Ул әле яңыраҡ ҡына булды. Иҙел боҙо төшмәҫ элек кенә килеп ҡайтҡайны, колхоз эштәре менән (ул колхозда счетовод). Ҡыҫҡаһы, аңа положиться мөмкин. Ул мине бик ярата һәм бер ваҡытта ла подводить итмәйәсәк.*

*Минең уйлауымса, бында әллә ни юҡ, барыбер беләләр бит аҙаҡ. Һин әле шуны әйт, бына күрерһең, һин ҡайтҡас, беҙгә йәй, Ҡаран-Йылғаға барырға тура килһә, ул йәшен тиҙлеге белән бөтә Кәлсер-Табынға тараласаҡ. Андай хәбәр бик-бик тиҙ таралыусан була, ғәҙәттә. Бында ла ничего особенного нет, минеңсә.*

*Да, мин һине иң беренсе башлап Ҡаран баҙарында күрҙем. Беҙ ағайым белән станцияға бара инек, баҙарҙа байтаҡ ҡына туҡталдыҡ. Мине анда һин түгел, күптән таныш булған кешеләр ҙә иҫләмәнеләр, юлса, ябай кейемдә инем. Имән-дәштәр, Татыштар белән ултырып ҡымыҙ эстек. Һеҙ икәү йөрөй инегеҙ, берене кем булғандыр. Мин Үтәш ауылыныҡыларынан Камилды һораным, әле генә ҡай-тып китте, тинеләр. Шунан Камилды Өфөлә осраттым, ул миңә килде. Ул һинең турала һөйләне. Күп тә үтмәне, Рәүеф белән мин һеҙгә барҙыҡ. Әле лә күҙ алдыма килтерәм ул осрашыуҙы. Ул беҙҙең беренсе тапҡыр осрашыуыбыҙ ине. Бер кем дә алай осрашмағандыр әле. Сөнки беҙҙең тәүге осрашыу 35 – 40 ҡына минут ине, беҙ хәҙер ғүмергә осрашырбыҙ, Нәфисә.*

*Һин беҙҙең тәүге осрашыуҙың ҡыҫҡа булыуына үкенәһең. Ул ҙур үкенес түгел, иң мөһиме: ул осрашыу бөтөнләй үкенестә ҡалмаһын. Билгеле, ҡалмаясаҡ.*

*Нәфисә, хат ултырып яҙыуы шул тиклем шатлыҡ минең өсөн, Нәфисә, ләкин хат яҙышыуҙың дәүере ҡыҫҡара бара бит әле һаман. Әгәр һин 25 июндәре ҡуҙғалһаң, 15 – 26 майҙарҙа мин һиңә һуңғы хатты яҙырмын микән? Нисектер ышанмайым... Ҡалған 15 көнөн мин нисек һиңә хат яҙмай торормон микән?*

*Бөгөн 28 май. 15 - 16 июнгә тиклем мин һиңә 4- 5 хат яҙырға өлгөрөрмөн әле.*

*Үҙемдең хәлдәр һәйбәт кенә. Әкренләп эшләп йөрөгән көн. Беҙҙең студенттар ҙа экзамен бирәләр. Июнь аҙағында эштәрҙе, уҡыу йылын тамамлайбыҙ.*

*Өфөлә көндәр һаман һыуыҡ әле. Көн һайын ямҡыр яуа, аяҙытып та ебәрә.*

*Парктар асылған, тип һөйләрҙәр, барған юҡ. Ошо аҙнала ағастар япраҡ ярҙы. Иҙел һаман ҡайтмай әле, сөнки ямғыр яуып тора.*

*Ауылдан хат алып торам. Ҡайт, тип саҡырып яҙалар һаман. Әйткәндәй, йәй ҡайтып килергә лә мөмкин, йыраҡ ер түгел. Һин ҡайтҡас һөйләшербеҙ әле.*

(Атайыбыҙ үҙенең әсәһе яҡлап энеһе - Хажиғәле ағаһын бик ятраҡан. Ошо ағайы донъя ҡуйғандан һуң атайым өсөн ир-ат туғандары араһынан Хажиғәленең улы Зәйнулла Фәтҡолов иң яҡын, ике туған ҡәрҙәше була.

Атайым үҙенең хаттарында әсәһе Ғәрифә хаҡында әҙ яҙа. Ғәрифә өләсәйебеҙ инсафлы, етди кеше ине, үҙенең тойғоларын тыйып тота ала торғайны. Ул күршеләге Мырҙаҡай (Сәйетбаба) ауылынан етеш тормошта йәшәгән уҙамандың ҡыҙы. Байҙың бер ҡыҙы һәм кинйә улы була. Ғиниәттең атаһы Зәһиҙулла уҙаман Ғиниәткә 9 йәш тулғанда донъя ҡуя. Ғиниәт әрмелә хеҙмәт иткән сағында, Ғиниәттең ағалары - Зәһиҙулланың тәүге бисәһенән тыуған уландары - атайҙары мираҫын, Ғиниәткә өлөш сығармай, бүлешеп ала. Хеҙмәттән йөрөп ҡайтҡан Ғиниәт былардан суд аша бер ат юллап ала һәм байға - Ғәрифәнең атаһына батрак булып яллана. Бай көслө, егәрле, аҡыллы Ғиниәтте үҙ улылай ярата һәм уға ҡыҙын ҡалымһыҙ бирә, сөнки Ғәрифәнең буйсан, төҫкә матур Ғиниәткә күҙ һалыуын күреп йөрөй, Ғиниәттең хужалыҡ эштәрен таһыллы башҡарыуына ҡарап-ҡарап ҡуйғанын һиҙә. Ғәрифәнең атаһы хатта кейәүгә Ғиниәткә Ҡаранйылғала йорт һалырға ярҙам итә. Ғәрифә өләсәйебеҙ ҙә бик тилбер ҡуллы ине, Ҡаранйылғала уларҙың өйөндә һәр саҡ таҙалыҡ һәм тәртип булғанын, хатта себендәр ҙә осмағанын хәтерләйем. Ишек алдын һәм аласыҡ эсен таҙа тотто. Өләсәй бер ҡасан да тик ултырманы, гелән ни ҙә булһа эшләр ине.

Граждандар һуғышы осоронда өләсәйебеҙ Ғиниәт олатайыбыҙҙы «бәләнән ҡотҡарып» ҡала. Ул йылдары ҡыҙыл ғәскәрҙәр, продразверстка һылтауы менән, йыш ҡына башҡорт ауылдарында баш-баштаҡлыҡ ҡыла: талайҙар, үлтерәләр, ҡатын-ҡыҙҙарҙы көсләйҙәр, ә башҡорттар, ҡоралланып, уларға ҡаршы тора. Бер мәл «ҡыҙылдарҙы дөмбәҫләргә» тигән оран Ҡаранйылға ауылына ла килеп етә. Күп ир-ат, ат эйәрләп, ҡорал күтәреп, оран буйынса яуға ташлана. Ғиниәт тә уларға ҡушылырға теләй. Ләкин ҡатыны Ғәрифә уның һыңар итеген мейес эсенә йәшереп ҡуя. Ғиниәт тетеп эҙләй, әрләй-әрләй ҡатынын да эҙләргә ҡуша, әммә итек табылмай ҙа ҡуя. Ғәрифәһе, моғайын, бәләкәй малайҙар ҡайҙалыр тыҡҡандыр, тигән була. Ғиниәт бисәһен һәм уландарын туҡмай, әммә уға өйҙә ҡалырға насип була. Һуңынан Совет властары кем ҡыҙылдарға ҡаршы сапҡан, шуларҙы ҡулға алып, ауылдан алып китәләр - аҙаҡ уларҙы бер кем дә белмәй ҙә, күрмәй ҙә.

Ғиниәттең атаһы Зәһиҙулланың ике ҡатыны булған. Атай яҡлап Ғиниәттең оло ағаһы Хәмит Беренсе империалистик һуғышта ҡатнаша, әсирлеккә эләгә. Пленадан ҡайтышлай уларҙың юлы Төркиә аша үтә. Рәсәйҙәге хәл-ваҡиғалар хаҡында ишеткәс, күп кенә әсирҙәр илгә ҡайтмаҫҡа ҡарар итә. Хәмит тә ҡайтмай. Уның яҙмышы хаҡында оҙаҡ йылдар бер ниндәй ҙә мәғлүмәт булмай. Мәгәр 60-сы йылдар башында Төркиәнән Ҡаранйылғаға - Хәмиттең балаларынан - хат килеп төшә. Улар, беҙ имен-аман, яҡшы йәшәйбеҙ, тип яҙалар һәм Зәһиҙулла олатайҙың бөтән уландарының яҙмышы, айырыуса Кейекбаев Ғиниәттең яҙмышы менән ҡыҙыҡһыналар. Хатты атайымдың иң бәләкәй һеңлеһе - Хәҙисә апай ғына уҡый. Ул осор совет кешеләрен сит илдәр менән бәйләнеш өсөн бигерәк ныҡ ҡурҡытҡандар, шунлыҡтан Хәҙисә апай хатты берәүгә лә күрһәтмәҫкә уйлай һәм мейестә яндыра. Бының өсөн атайым бик хәсрәтләнде. Ҡабат

Төркиәнән хат килмәгән. Моғайын, Төркиәлә йәшәгән туғандарыбыҙ, Ғиниәт Кейекбаев һәм уның ғаиләһе Граждандар һуғышында һәләк булған, тип уйлағандарҙыр.

Кейекбаев фамилияһына иғтибар итһәк, нәҫелебеҙҙең фамилияһын йөрөтөүселәр халыҡ араһында йыш осрай. Мәгәр уларҙың береһе лә беҙҙең зат-зәүергә ҡарамай. 1812 йылдағы Ватан һуғышында ҡатнашыусы Кейекбай Ишемйәровтан дүрт ул тыуған. Ғәбделхалиҡтың улдары юҡ. Кинйәбайҙың тоҡомо Кинйәбаев фамилияһын йөрөтә; Йәноҙаҡтың вариҫтары Йәноҙаҡов фамилияһында йөрөй. Кейекбайҙың балаһы Мөхәмәтдиндең Заһиҙулла исемле улы булған, ә Заһиҙулланан дүрт ул тыуа, шуларҙың береһе - олатайыбыҙ Ғиниәт булған да инде. Заһиҙуллин фамилияһын йөрөткән ағай-энеләренә рәнйеп, Ғиниәт олатайының атаһы Кейекбайҙың исемен үҙенә фамилия итеп яҙҙырта. Атайымдың ҡустыһы Ғәфүр Кейекбаевтан 2 ҡыҙ ғына ҡала. Кейекбаев фамилияһында беҙ - Жәлилдең улдары һәм ҡыҙы (мин), ағай-энеләремдең улдары йөрөйбөҙ. Йәнә Ғәйшә апайыбыҙҙың улы Ғайса Кейекбаев фамилияһын алған. Башҡа Кейекбаевтар беҙҙең нәҫелгә ҡарамай.)

**1 июнь, 1941 йыл, Карши**

*22 май яҙъан хатыңды алдым, Жәлил, рәхмәт. Хатты йыш яҙып тороуыңа мин бик шатмын.*

*Дөрөҫ, Жәлил, хат яҙышыуъа ла ваҡыт әҙәйеп килә инте. Скоро нам можно будет не заниматься бумажной волокитой, ә әйтәһе һүҙҙәрҙе, һөйләйһе хәбәрҙәрҙе тел белән әйтә алырбыҙ.*

*Жәлил, һин мине әҙерәк яңылыш төшөнгәнһең. Мин һиңә уҡыуҙар 15 июнь тип түгел, ә 15 июль бөтә, тип яҙҙым. Может быть, я вместо «июль» в письме написала «июнь». Теперь уже точно известно, что уҡыуҙар 25 июндә бөтәләр. Уҡыуҙар бөткәс, юлъа сыъармын, Алла бирһә.*

*Һин әйткәнсә телеграмма һуъырмын – ҡасан, ҡайҙа барып еткәнем тураһында. Не беспокойся, Жәлил, мин юлда ауырымаҫҡа тырышырмын. Хәҙергә ауырымай ъына торам әле (Аллаъа шөкөр).*

*Ике фәндән зачет бирҙек – литературанан (письменно и устно), алгебранан (письменно и устно). Алгебранан уртаса отметка алтым. Иртәгә – геометрияны письменно сдавать итәбеҙ.*

*Бөгөн вокзалъа барып рәсемгә төштөк бөтөн синыфыбыҙ һәм уҡытыусыларыбыҙ белән. Рәсемнәрҙе выпускной вечеръа тиклем өлгөртмәксе бултылар.*

*14 май төшкән рәсемдәр әле һаман әҙер түгелдәр. Обещают 3 июня. Пришлю.*

*Өфөлә көннәр йылытып етмәй, тигәнһең. Это хорошо. Я бы с удовольствием убежала бы отсюда от жары. Ты представить даже себе не можешь, до чего здесь жарко. Эҫелә дәрес уҡыу бик ҡыйын, поэтому учим как попало. Как хорошо, что я скоро расстанусь с этим проклятым климатом.*

*Жәлил, мин Рәйсәне ҡалдырып китмәксемен, но миңә лә сомнение килеп төшә. Нәфисәгә аны ни в коем случае ҡалдырып китеү килешмәй. Между прочим, я немного разочаровалась в Нафисе. Правда, оҙаҡламай Лотфый аъай ҡайта, бәлки, этейем тә сыъар. Әгәр ул сыҡһа, бик яҡшы булыр ине барыбыҙ өсөн тә. Мин аларъа барыбер әйтмәй китәм, хотя нам они не могут помешать, сөнки беҙ (һин әйтмешләй) законъа, әҙәпкә, шәриъәткә һыймаъан эш эшләмәйбеҙ бит. Не правда ли?*

*Мин программалар буйынса әҙерләнә алмайым – буш ваҡыт юҡ. Летом за 3-4 дня я все смогу повторить перед началом экзаменов в институт…*

*Насчет денег, предложенных Тобою. Говоря откровенно, я рассердилась на*

*Тебя, даже обиделась. Ну, подумай сам, к чему это? Ты говоришь, что ничего особенного в этом нет и это в порядке вещей. Ну все же …*

*Много об этом писать не буду – Ты обидишься. Осрашҡас һөйләшербеҙ был турала. В общем, рәхмәт һиңә, Жәлил. «Ҡунаҡ – хужаның ишәге» – и этим все сказано. Спорить и дискутировать, действительно, не приходится.*

*Опять Рәйсә хаҡынта. Мин тағы уйлап алтым, что аны бер үҙен әллә ҡайҙа, әллә кемгә ҡалдырып китеү ярамаç. Об этом я еще подумаю и результат напишу Тебе. Алып китһәм алып китер ҙә барырмын. Как-нибудь устроимся.*

**1 июнь, 1941 йыл, Өфө**

*Хаттарыңды алдым, ваҡыт бүлеп, миңә хат яҙыуың өсөн бик ҙур рәхмәт, Нәфисә. Хәҙер һинең өсөн ваҡыттың бигерәк кәрәкле сағы – экзамендар бирәһең, әҙерләнергә кәрәк.*

*Нәфисә, һин минең өсөн бик борсолма, тыныс бул. Анау телеграммаң өсөн бик борсолғанһың. Тыныслан, һөйөклөм, анда ғәфү үтенерлек бер нәмә лә юҡ. Ул бит хәҙер әллә ҡасанғы, үткән уйҙағы эш, онотолһон! Хәҙер алда торған эште генә – осрашыуҙы ғына уйларға кәрәк беҙгә.*

*Нәфисә, һин һәр ваҡыт төн ултыраһың, төнөн ял итмәйһең. Ваҡытында ял итергә кәрәк. Ул нервыға насар тәьçир итә, ғәҙәттә. Ҡайтҡас йоҡламай төндәр буйы һөйләшеп ултырырбыҙ, икәүләп.*

*Уйлап ҡара, Нәфисә, 3 кенә аҙна ҡалды хәҙер, был иң һуңғы ай. Ай бер башланһа, бөткәнен һиҙмәй ҙә ҡалаһың, ғәҙәттә.*

*Һин Нәфисәгә беҙҙең хәлдәрҙең барыһын да һөйләп ташламаһаң ярар ине. Ул һиңә аҡыл өйрәтә икән, өйрәтергә тейеш, апай бит.*

*Мин уйлайым, һин һәр хәлдә кеше аҡылы беләң эш ҡүрмәçһең. Конечно, кеше аҡылын тыңлап торорға кәрәк, ихтирам йөҙөнән. Ә үҙ аҡылың менән эш итергә кәрәк.*

*Лично мин үҙем, насар ғына булһа ла, үҙемдең аҡыл менән эш итергә яратам. Исмаһам, аҙаҡ үкенесе булмай.*

*Беҙҙең мәсьәләгә килгәндә, бигерәк тә үҙ фекерең кәрәк, сөнки көн дә, йыл да була торған эш түгел, ә ғүмерҙә бер була торған эш. Шулай булғас, арғяғын үҙең беләһең. Ҡарттарҙың бер һүҙе бар был турала: «Кеше һүҙе – кеше үлтерә» тигәндәр. Аның дөрөçлөгөн һынап ҡарағаным юҡ.*

*Нәфисә, мин һиңә бер нәмә ебәргәйнем, шуны һин алдың микән, юҡ микән, хатҡа яҙырһың. Ул турала ҡабат һүҙ ҡуҙғатмабыҙ. Ни өсөн икәнен мин тәүге яҙған хатымда яҙғайным. Ул шулай булырға тейеш – һәм шуның менән тамамлайыҡ уны.*

*Нәфисә, мөмкин тиклем тиҙерәк сығып китергә тырыш Каршиҙан. Бик-бик һағындым. Ҡаршы алырға төшкәндә, килешкәнсә, үҙем генә төшөрмөн. Һинең килгәнеңде бер кем белмәç, анһын булдырырбыҙ.*

*Ҡалған һүҙҙәрҙе ҡайтҡас һөйләшербеҙ. Һиңә кисәнән бирле әллә нимәләр яҙайым, тип йөрөй инем (хаттарыңды кисә алғайным). Хәтеремдән сыҡты барыһы ла.*

*Беҙҙең мәсьәләне атайым белмәй. Ҡайҙан белһен ул, мин аңа нисек әйтәйем, үҙең уйлап ҡара. Ағайым белә, ләкин ул беҙҙең мөнәсәбәттәрҙең килешеүгә, вәғәҙәгә тиклем барып еткәнен белмәй. Мин әйттем: «Ул йәй ҡайтҡайны, осраштыҡ. Ул тағы ҡайтырға итә, уҡырға кереү хаҡында һорап яҙа»,– тинем. Ағайым, конечно, ышанманы минең һүҙгә. Аҙаҡ үҙе: «Ничего, йәш саҡта уның һымаҡ хат яҙышыуҙар була инде ул»,– тине лә ҡуйҙы. Шуның менән бөттө.*

*Билгеле, аъайым күпте һөйләп йөрөй торъан кеше түгел. Беҙ аның белән бәләкәйҙән дуҫ. Ул йәш саъында беҙҙең тирәләге ауылдарҙа билдәле гармунсы ине. Мине лә гармун уйнаръа өйрәтте. Ул үҙе бик баҫалҡы, йыуаш кеше, һис әсәйемә оҡшамаъан. Хәҙер колхозда счетовод.*

*«Килен»дән һәм «еңгә»нән ҡырҡасаҡтар һине, Нәфисә, обязательно. Беҙҙең тирәлә шулай ул. Анының көт тә тор. Бына мин әйтте тиерһең. Мине лично нимә тип әйтһәләр ҙә әйтерҙәр, ҡаршы килмәйем.*

*Нәфисә, рәсемдәренде түҙемһеҙлек белән көтәм. Ул рәсемдәр белән мин бик күп мәшәҡәттәр яһаным инде һиңә, ъәфү итерһең, Нәфисә. Бер үк асыуланма. Һинең бит былай ҙа ваҡытың юҡ…*

*Үҙемдең хәлдәргә килгәндә, һәйбәт кенә. Институтта экзамендар башланды хәҙер, зыҡ ҡубабыҙ шунда, кемдең нимә эшләгәнен дә белгән юҡ.*

*Минең экзамендар бөттө лә инде (кисә генә). Хәҙер тынысландым. Инде аъымдаъы эштәр генә ҡалды. Шулай ҙа бик тыныҫһыҙ минең эш, мәшәҡәте бик күп, әле тегенеһе, әле бынныһы... Көнө-төнө йөрөйһөң шунда буталып. Ҡасан ҡотолам инде шул эштән, йәнем тынысланыр ине, исмаһам.*

*Экзамендар июнь аҙаъында бөтә. Һинең килеүеңә бушаъан булам. Хәҙер тик һине генә уйлайым һәм һине түҙемһеҙлек белән көтәм.*

*Хат яҙышыу ваҡыттары көндән-көн ҡыҫҡаралар бит әле. Ниндәй ҙур шатлыҡ, Нәфисә, һинең хаттарыңды асып уҡыу минең өсөн. Ә инде һиңә хат яҙъанда мин бөтөн нәмәне онотоп, тик һине генә күҙ алдыма килтерәм. Эш күп булыуъа ҡарамаҫтан, һин ҡуҙъалып киткәнсе мин һиңә һәр ваҡыт хат яҙып торормон.*

*Өфөлә һаман ямҡыр яуа ла, ямҡыр яуа. Яумаъан көн юҡ, көнөнә әллә нисә тапҡыр яуып китә. Көн һыуыҡ түгел былай. Тәжрибәле кешеләр, быйыл ямҡырлы йыл булыр, тиҙәр.*

*Аяҙ көндәрҙе күргән юҡ. Урта Азиянан һин генә эйәртеп килтермәһәң аяҙ, эҫе көндәрҙе, күреп тә булмаҫ.*

*Иҙел һаман ҡайтмай, сөнки ямҡыр яуа. Аъастар япраҡ яра, ләкин ярып бөтмәгәндәр әле тулыһынса.*

*Нәфисә, хатымды ошоноң белән тамамламаҡсы булам. Ваҡытыңдың булыуына ҡарап, хат яҙ.*

(Вуздағы эшен бик «мәшәҡәтле» тип уйлаһа ла, атайым «кабинет ғалимы» булып, Фәндәр академияһында эшләргә теләмәне, шуға ҡарамаҫтан, бүтән вазифаларҙы күҙ алдына килтерә алманы. Ғалим мотлаҡ уҡытырға, йәштәргә һабаҡ бирергә тейеш, тип иҫәпләне ул. Бигерәк тә тел ғилеме менән шөғөлләнгән, халыҡтың мәҙәниәтен өйрәнгән ғалим тап ана шундай булырға бурыслы, тип һананы. Атайым Башҡортостандың төрлө райондарынан килгән студенттарҙы бик яратты, улар уның өсөн «тере тел» һәм халыҡ мәҙәниәтен йөрөтөүселәр, милләт киләсәге булды).

**4 июнь, 1941 йыл, Өфө**

*Бөгөн һинең 28 майҙа һалъан хатыңды алдым. Рәхмәт, Нәфисә, бик шатландым. Һинең сәләмәт булыуың мине таъы ла шатландырҙы.*

*Һине беренсе уңыштар белән ҡотлайым. Әҙәбиәттән «отлично» булъас, алгебранан «плохо» ҡуймаҫтар инде, аның булыуы мөмкин түгел. Һинең тәүге уңышың мине бик шатландырҙы. Һиңә ысын күңелемдән артабан да уңыштар теләйем.*

*Беренсе июндә бер хат яҙып һалъайным, мыңарса алъанһыңдыр, тип уйлайым.*

*Өфөлә шул тиклем һыуыҡ хәҙер, ғәжәп бер хәл. Күптән түгел Мәскәүҙә ҡар яуған. Өфөлә лә ҡар яуыу көтөлә. Бөгөн көн кискә табаныраҡ ҡояшлы булғайны, шулай булыуға ҡарамаҫтан, бик һыуыҡ. Өфөнөң парктары, баҡсалары асылған, ләкин һыуыҡ булғас, кеше йөрөмәй. Мин үҙем дә барғаным юҡ. Әйткәндәй, барып та булмай, хәҙер бөтөн курстарҙа ла экзамендар башланды, шул тиклем көсөргәнешле ваҡыт. Ошо айҙы имен-аман ғына үткәреп ебәрһәк, ҡотолам инде. Етмәһә, көндәре һыуыҡ. Бына, һиңә хат яҙып ултырам, бүлмәлә һиҙелерлек һыуыҡ, әҙерәк өшөтә. Быйылғы йыл кеүек йылды күргәнем юҡ ине әле. Һин ҡайтҡансы көндәр әҙерәк йылынһа ярар ине.*

*Һыу инеү тураһында һөйләгән кеше лә юҡ ҡапылда. Иҙел әкеренләп ҡайта-ҡайтыуын. Уйлап күҙ алдыңа килтер – июнь айында ҡышҡы пальто кейеп йөрөйбөҙ.*

*Нәфисә, мин һинең ҡайтыуыңды түҙемһеҙлек менән көтәм. Өфө менән таныштырырмын, мин аны ихласлыҡ менән эшләйәсәкмен.*

*Нисек кенә булһа ла, тиҙерәк осрашһаҡ ине... Мин шул көндө сикһеҙ ҙур шатлыҡ менән һағынып-һағынып көтәм. Хәҙер инде күп тә ҡалманы, әйтеп тороуҙың да урыны юҡ. Хәҙер шул тиклем әҙ ҡалды бер уйлағанда – бер ай, ул «ялп» итеп үтеп китәсәк.*

*Минең был хатым оҙон булманы, Нәфисә. Асыуланма. Хатҡа яҙырға һүҙе юҡ икән, тип уйлай күрмә. Хатҡа яҙып һүҙ бөтмәҫ, ә хат нисә әйтһәң дә хат инде. Оҙаҡламай тағы ла яҙырмын.*

*Рәсемеңде һаман көтәм, вәғәҙәң буйынса оҙаҡламай килергә тейеш. Ғәфү ит мине, Нәфисә, әйләнгән һайын шул рәсем менән һинең тәҡәтеңде ҡоротоп бөттөм шикелле мин.*

*Был хат так себе ғына булды, ҡабалан яҙылды, ғәфү ит, асыуланма, хәтерең ҡалмаһын.*

*Нәфисәгә һәм Рәйсәгә сәләм әйт минән.*

**7 июнь, 1941 йыл, Карши**

*28 майҙа яҙған хатыңды алтым. Рәхмәт. Һинән 7 көн хат килмәй тороу мине аппаруҡ ҡына беспокоить итте. Зато хатыңды алғас, шул тиклем шат бултым, что… просто төшөнтөрә алмайым ул шатлыҡты.*

*Да, Жәлил, осрашыу ваҡыты көннән-көн яҡыная һәм осрашырға бик әҙ ваҡыт ҡалды инде. Бөгөн 7 июнь. Экзамендар 23 июнь тамам булалар, 28-ндә выпускной вечер, ә 28 - 29-ларынта мин юлға сыҡмаҡсымын. Шулайтып, до встречи остается дней 25, а когда Ты получишь это письмо, то останется еще меньше. Экзамендарҙың 7-һен бирҙек. «Плохо» юҡ, ләкин «посредственно»лар байтаҡ ҡына.*

*Дөрөҫ, яҡшыраҡ отметка алырға мөмкин ине, но … ладно уж. Я Тебе потом расскажу, какие причины помешали мне получить лучшие отметки.*

*Атайым ҡайта, тип яҙған инем, ләкин әле һаман ҡайтманы. Бәлки, ҡайтыр, һәр хәлдә ул ҡайтһа ла, ҡайтмаһа ла мин аңа һис нәмә әйтәсәк түгелмен.*

*Лотфый ағай 15 июль ҡайтам, тип яҙған була. Аның шулай һуңнатып ҡайтыуы беҙҙең эшкә мешать итеңкерәй. Ул иртәрәк ҡайтһа, аның белән һөйләшеп, Рәйсәне Нәфисә белән икеһенә ҡалдырып китер инем.*

*Һөйләшеп тигәс тә, аңа барыһын да һөйләмәҫ инем, әлбиттә. Уҡырға китәм, тигән булыр инем. Вообще то, ул миңә һис нәмә әйтә алмай.*

*Нәфисәгә дөрөҫөн әйтәсәкмен, нәмә булһа ла булыр. Дөрөҫөн әйтмәй булмай.*

*Һинең ағайыңдың белеүенә минең бер ҙә асыуым килмәй, что һин! Белһен әйҙә! Даже атайың белһә лә бер һүҙем тә юҡ. Әгәр алар ысынлап та белһәләр, һин уларға минән сәләм әйт.*

*Сама собой понятно, что Һинең белән Ҡаран-Йылғаға барһам, бөтөн кеше ишетәсәк, билгеле. Даже ауылға бармаһаҡ та бөтөнөһө белеп бөтәр. В этом, конечно, ничего особенного нет. Но все же… Мин нейәлер оялам, Жәлил. Было бы бесспорно лучше, если бы никто ничего не знал, но это невозможно. Нисек итәһең, оят булһа ла, кешегә күренмәй тороп булмай инте.*

*Жәлил, мин ошо хатым белән бергә рәсемнәремде ебәрәм. Алама сыҡҡанмын. Һин әйтмешләй, тыумыштан матур булып тыумағас, кеше рәсемгә матур булып төшәме инде... Насар булһа ла, ебәрәм. Вәғәҙә – иман! Мин әллә ҡасаннан бирле ебәрәм, тип вәғәҙә биреп ҡуйғайным. Фотограф ай буйы эшләне, ләкин эшкинтерә алмаған.*

*Был хат һиңә 15 - 16-ларында барып етә. Һин иң аҙаҡҡы хатыңды 15 - 16-ларында ебәрәм, тип яҙаһың. Юҡ, Жәлил. Һин иң һуңғы хатыңды 19 - 20-ләрендә яҙырға тейешһең әле.*

*Жәлил, мин күп йөрөһәм тә, бер үҙем Ташкенттан ары ергә барғаным юҡ ине. Ә хәҙер 5000 километрлыҡ юлға сыҡмаҡсы булып торам. Әйтеүе генә еңел. Ну, ничего. Алла бирһә, ничего со мной не случиться. Надеюсь, юлта ауырымам, сөнки хәҙергә сәләмәтлегем яҡшы.*

*Башҡортостанда йәй бик әкерен килә икән. Это хорошо. Мынтағы йәйҙе һөйләп тораһы ла юҡ – эҫе, саң и т.д. Был хатты яҙып бөткәнсә, аҡҡан тирҙән ике ҡулъяулыҡ һыу булты. Шул тиклем эҫе, Жәлил! Һин белмәйһең инте, үҙең испытать итмәгәс...*

*Да, поспели многие фрукты и овощи. В этом году очень много огурцов. Вообще большой урожай в этом году.*

*Ну, Жәлил, хуш булып тор инте. Мин әллә нәмәләр яҙа башланым бара торғас. Иртәгә тағы яҙырмын…*

*Жәлил!!!*

*Мин был хатты кисә кис яҙып ҡуйғайным. Бөгөн ебәрәм.*

*Бөгөн ял көнө. Әтейемне күрергә барҙыҡ.*

*Беләһеңме нәмә, Жәлил, ул мине һаман Мәскәүгә барырға ҡуша. «Рәйсәне алып бар үҙең белән» тигән була. Минең бик асыуым килде. «Нишләп ағайым бармай, ул барһын», – тинем. 10 көндә әйләнеп ҡайтырһың, тигән була.*

*Үҙең уйлап ҡара, разве 10 көн эсендә можно устроить все дела и вернуться обратно. Совсем бармайым, тип ҡуйыуы уңайһыҙ булты. Мин аңа шуны әйттем: «Обязательно барам, тип әйтә алмайым. Әгәр мөмкинлек булһа, бәлки, барырмын» тинем. Быны хатҡа яҙғым та килмәй, шул тиклем асыуым килте әтейемә.*

*20 көн ағайымдан хат килгәне юҡ. Ул ваҡыт юҡ, зачетҡа әҙерләнәм, тигән булып хат яҙмай йөрөй. Аңа асыуланып хат яҙҙым.*

*Я уже предчувствую, что әтейем мине әрләйәсәк. Әрләһә-әрләр, ул әрләй, тип беҙ бер-беребеҙҙе күрмәй торайыҡмы, Жәлил? Я не могу, пусть сердиться и ругает, а я сделаю по-своему.*

*Итак, Жәлил, эти причины не помешают нам встретиться, если другие причины, более серьезные не встанут на нашем пути. Но таких причин не должно быть. Следовательно, мы встретимся и встретимся скоро…*

**10 июнь, 1941 йыл, Өфө**

*1 июндә яҙған хатыңды алдым. Рәхмәт, Нәфисә, ысын күңелдән рәхмәт. Шул тиклем оҙаҡ һымаҡ булды был хатыңды көтөп алыуы.*

*27 май яҙған хатыңда «бөгөн кис, йә иртәгә тағы яҙырмын», тигән инең. Мин инде ул хатты көткәйнем, һинең, күрәһең, ваҡытың булмағандыр инде. Шулай итеп, 6 көн хат алмай торҙом. Үҙем 4 июнь бер хат яҙып һалғайным, алғанһыңдыр, тип ышанам.*

*Был хатыңды көтөп алыу шуның өсөн ҡыйын булды, тағы «теге» нәмә өсөн асыуланырһың, тип уйланым. Миңә аның өсөн «эләгә инде» тип мин алдан уҡ көтә инем, көтөүен. Ярар, Нәфисә, һин аның өсөн асыуланма миңә һәм кәйефһеҙләнмә. Үҙең әйтмешләй, килгәс һөйләшербеҙ ул турала, шуның өсөн ҡапылда ул хаҡта һүҙ көрәштереүҙе ҡалдырайыҡ, Нәфисә.*

*Нәфисә, мин әллә ҡасандан бирле һиңә Рәйсәне үҙең белән алып ҡайт, алып ҡайт, тип яҙып киләм. Мин һаман да шул фекеремдә ҡалам.*

*Нәфисә, һин үҙең уйлап ҡара – нисек аны йәлләмәй ҡалдырып китәһең? Аны Нәфисәгә генә ышанып ҡалдырып китеү – на произвол судьбы ташлап китеү, тигән һүҙ. Үҙең уйлап ҡара: Рәйсәне Каршиҙа ҡалдырып китеү – аны Үтәштә ҡалдырып Мырҙаҡайға китеү түгел. Аны ҡалдырып һин нисек тыныс күңел белән йөрөйәсәкһең? Ул бит һинең берҙән-бер туғаның. Һин тағы шуны уйла: һин аның өсөн әсәй урынында хәҙер. Ул анда бер үҙе нисек йәшәр? Аны ҡалдырып, ташлап китеү һис мөмкин булмаған эш, Нәфисә. Аны ҡалдырып китеү тураһында уйлама ла. Ул бит сабый, бер нәмә лә белмәй. Етмәһә, һин аны Урта Азияла ҡалдырып китергә итәһең (башҡа ерҙә булһа, тағы бер хәл). Ул илар, һине һағынып. Апайым ҡайҙа тиер. Ә һин нисек инде аны алдап-һуғып оҙаҡламай киләм тип китәһең.*

*Һин аны Нәфисәгә ышанып ҡалдырып китмәксе булаһың, ул бит сит кеше, аның үҙенең ҡайғыһы, үҙенең хыялы, үҙенең хәстәре бар. Нәфисәнән разочароваться иттем тип яҙаһың, етмәһә. Нәфисә тураһында фекер йөрөтә алмайым бер нисек тә. Яҙыуыңа ҡарағанда, ул ябай ауыл ҡыҙы булырға тейеш.*

*Шулайтып, һин Рәйсәне обязательно алып ҡайт. Ул һис бер ваҡытта ла беҙҙең мөхәббәткә ҡымасауламаясаҡ, был турала һүҙ ҙә булыу мөмкин түгел.*

*Нәфисә, киләһе хатыңда үҙеңдең ҡарарыңды яҙ, что һин Рәйсәне обязательно алып ҡайтырһың и все. Был турала күп уйлап тораһы юҡ. Шулай эшлә.*

*Үҙемдең хәлдәр арыу ғына. Һаман эшләп йөрөгән көн. Хәҙер экзамендар бик ҡыҙыу бара. Госэкзамендар башланды.*

*Өфөгә ҡарындашым килеп ҡайтты. Ул 7-се класҡа күскән. Уҡыуҙары бөткән дә, ауылдаштарға эйәреп киткән дә барған Өфөгә, 3 көн торҙо, бөгөн генә оҙаттым. Әсәйемдәр, барыһы ла иҫәндәр икән. Оҙаҡламай колхоз эштәре белән ағайым киләм тигән.*

*Өфөлә һаман ямҡыр яуа ла ямҡыр яуа. Ике көн аяҙ булып торғайны, бөгөн иртәнсәк тағы ла ҡойоп яуып ебәрҙе. Көндәр йылы былай. Иҙел ҡайтҡан хәҙер. Ағастар яңы япраҡ ярып бөттө. Муйыл, алма сәскә ата хәҙер. Ҡыҫҡаһы, иң йәмле ваҡыт. Кәкүк саҡырып аҙаплана, һандуғастар кемуҙарҙан һайраша.*

*Айҙың 8-ендә быйыл йәй, тәү тапҡыр Луначарский баҡсаһына барҙым, халыҡ байтаҡ ине. Күңелһеҙ. Оҙаҡ йөрөмәнем, бер-ике ураным да ҡайттым.*

*Һиңә 5 - 6 көн хат яҙмай торҙом. Асыуланма, үҙеңдән хат көтөнкөрәп торғайным. Ваҡыт юҡ тип әйтеп булмай, әлбиттә, хат яҙырлыҡ ҡына ваҡыт табып була, һиңә хат яҙыу өсөн мин ваҡыт йәлләмәйем. Һинең өсөн хат яҙыу минең өсөн үҙе бер шатлыҡ, ә инде хатыңды алһам, үҙеңде күреп һөйләшкән һымаҡ*

*булам. Һинең һәр бер хатың миңә әйтеп бөтөргөһөҙ шатлыҡ килтерә. Мин шул тиклем шатланам, Нәфисә. Ул шатлығымды һис яҙып бөтә алмайым. Ләкин хат яҙышыуҙың да ғүмере ҡыҫҡара бара инде.*

*Уйлап ҡара: 20 көн ҡалды бит! Был хатты 18 – 19 июндә алырһың – 10 көн ҡала. Һин шул 28 – 29-ҙарында юлға сығырһың. Тағы ла ҡабатлайым: Рәйсәне аслан ҡалдырма, бер үҙен бер арый ташлап китмә, аҙаҡ үкенерһең, һағынырһың. Ул да һине һағыныр, илар.*

*Мин 20-һе һиңә хат яҙыуҙы туҡтатам, Нәфисә, һәм һинең юлға сығыуың хаҡында телеграмма көтә башлайым. Аңа тиклем мин бер-ике хат яҙырмын.*

**13 июнь, 1941 йыл, Карши**

*Һөйөклөм, Жәлил!*

*1 июндә яҙған хатыңды алдым. Ул хатты айҙың 10-ында алған булһам да, бөгөнгө көнгә тиклем яуап яҙалманым, ғәфү ит мине.*

*Экзамендарҙы биреп бөтөрөп киләбеҙ, 5 кенә фән ҡалды, ә 25 июндә выпускной вечер.*

*Да, осрашырға бик әҙ генә ваҡыт ҡалды хәҙер. Мне даже не верится, что в Карши я буду оставаться только еще только 15 дней. 15 кенә көн! Минең өсөн шатлыҡ был, ә беҙҙекеләр хәҙерҙән илап ултыралар. Мин аларға Ташкентҡа ағайым янына китәм, тип әйтеп ҡуйғайным. Билгеле, китәр ваҡыты еткәс, Нәфисәгә дөрөҫөн әйтергә туры килер.*

*Жәлил, мине Рәйсә мәсьәләһе бик борсолдора. Аны Нәфисә белән ҡалтырып китеү тоже әллә нисек. Әтейемтә әрләр инде. «Семьяны ташлап, Рәйсәне ташлап, йортто ташлап ҡасҡанһың», тиәсәк. И он, действительно, прав…*

*Нәфисә һинең белән хат алышҡанды белмәй. Ҡулына ла төшөрә алмай ул хаттарҙы. Әгәр белһә, ул, әлбиттә, интересоваться итер, ләкин белмәй. Һин яҙаһың, что любопытство – не порок, а по-моему – большой порок.*

*Әйтәһе һүҙҙәр бик күп, ләкин аларҙы хатҡа ғына яҙып бөтөрөп булмай.*

*Әҙ яҙғанға ғәфү ит. Бик эҫе. Хатҡа күберәк яҙырға возможность юҡ. 50 градус эҫе ине кисә, бөгөн нисектер… Урамда кешеләр юҡ, бөтөнөһө эҫенән ҡасып өйҙән сыҡмай.*

*Һинән хат килгәс, тағы яҙырмын.*

*Хатарым өсөн ғәфү ит.*

**15 июнь, 1941 йыл, Өфө**

*Һөйөклөм, Нәфисә!*

*Был хат һеҙҙең укыуҙар тамамланыуға барыр, уҡыуҙарың бөтөү айҡанлы һине ысын йөрәгем белән ҡотлайым, Нәфисә. 10 июндә һалған хатты алғанһыңдыр. Һинән йә бөгөн, йә иртәгә хат килергә тейеш. Хат килеүен көтмәй яҙырға булдым. Килһә, тағы яҙырмын.*

*Бөгөн ял көнө, бушмын, бер түгел, ун хат яҙырға мөмкин хатта. Ял көнө булыуға ҡарамаҫтан, бөгөн бик иртә торҙом, сәғәт 6 ғына ине әле. Бер роман уҡый инем, шуны кисә кис бөтөрә алмай йоҡлап киткәйнем, иртә белән уҡып бөтөрөп ҡуйҙым. «Строговы» тигән роман Себер крәҫтиәндәре тормошонан, ҡыҙыҡ ҡына. Уҡып бөттөм дә баҙарға киттем. Мин шулай иртә белән баҙарға йөрөргә яратам. Баҙарға, ғәҙәттә, төрлө яҡтан, күбеһе ауылдарҙан крәҫтиәндәр килә, улар баҙарға төрлө нәмә алып киләләр.*

*Иртәнсәк баҙарҙың ҡыҙып килгән сағы була. Баҙарҙан ҡаҡы, ҡуҙғалаҡ, йыуа алып ашаным. Йыуа һәм ҡуҙғалаҡ һеҙҙең яҡтың төрлө халҡы килтергән, Иҙел*


15 ijyn, 41 jal.

*буйының йыуаһы. Йыуа беҙҙең ауылда ла күп була, ләкин анда тау йыуаһы, ул әсерәк.*

*Сәскә, букет белән тулған баҙар бөгөн. Мин бер ҡосаҡ букет алып ҡайтып ултыртып ҡуйған булдым. Хужа шаяра: «Берәйһенә бүләкме әллә?» Мин дә шаярып: «Тора-торғас культурно тораһы килеп китте», – тим. Ул да, мин дә көлөшәбеҙ.*

*Башҡортостанда хәҙер бөтөн үсемлектең сәскә атҡан ваҡыты. Хәҙер бөтөн ҡала сәскә эсендә. Алма һәм муйыл ағастары ҡар һымаҡ ағарып ултыралар.*

*Көндәр ҙә бик матур аяҙытып ебәрҙе хәҙер. Көн йылы. Тулы мәғәнәһе белән йәй булды. Үткән аҙнанан башлап бөтә халыҡ йәйге кейемдә йөрөй. Парктарҙа, баҡсаларҙа гулянье – шәмбе, йәкшәмбе көндәрҙә. Силәбенең театры (музкомедия театры) килгән. Йәйге театр йортонда бара, 18-енән башлап уйнай башлайҙар, буғай. Ҡыҙыҡлы ғына әйберҙәр ҡуясаҡтар. Һин ҡайтҡас, йөрөрбөҙ әле.*

*Бик-бик һағынам, Нәфисә, һине.*

*Хәҙер 15 кенә көн ҡалды, ә инде һин был хатты алғас бер аҙна ваҡыт ҡала, шулай былыуға ҡарамаҫтан, 15 көн бик оҙаҡ һымаҡ тойола. Тиҙерәк күрешһәк ине... Минең бөтә хыялым, бөтә уйым шул хәҙер. Мин хәҙер шул осрашыу шатлығы белән генә йәшәйем. Ул ашҡыныу, ул дәртте тик бер һин генә, фәҡәт һин генә аңлайһың, Нәфисә!*

*Яҙҙы көткән һандуғастар һымаҡ, түҙемһеҙлек белән осрашыу көнөн көтәм. Ышанам, һин мине оҙаҡ көттөрмәҫһең. Июль баштарында осрашырбыҙ, тип ышанам.*

*Рәйсәне аслан ҡалдырма, ташлап китмә! Үҙең белән алып ҡайт. Юлда ла һәм бында ла күңелле булыр. Үҙең әйтмешләй – устроимся.*

*Нәфисә, ул турала һин һис шикләнмәй алып ҡайт Рәйсәне. Мин был хаҡта үткән хатымда ла яҙғайным. Ее, маленькую, бросать на произвол судьбы – это будет не простительно, не хорошо. Ул бит бер нәмә лә белмәй, бәләкәй. Ул үҫер, ҙурайыр, ташлап китһәң, аҙаҡ ул һиңә лә, миңә лә рәхмәт әйтмәҫ. Ул бит һинең берҙән-бер туғаның. Һин шуны уйлап ҡара: һин аны ниндәй ерҙә ҡалдырып китәһең! Әллә ҡайҙа, 5000 саҡрым ерҙә ташлап китәһең. Ул мөмкин түгел! Мин аны уйлап-уйлап башыма ла һыйҙыра алмайым.*

*Шулай, Нәфисә, мин һеҙҙең икегеҙ ҙе лә көтәм. Атайың ҡайтҡан сүрәттә лә ҡалдырып китмә һин аны. Атайың аның артынан йөрөй аламы ни, үҙең уйлап ҡара.*

*Үҙемдең хәлдәр бик һәйбәт хәҙергә. Һаман әкиренләп йөрөп ятҡан көн. Һаман экзамендар үткәрәбеҙ. Ошо айҙың аҙағында бөтә. Анан бушайым.*

*Нәфисә, мин хатымды ошоноң белән тамамлайым, иртәгә-иртәнән һуң тағы бер хат яҙып һалырмын, аныһы инде аҙаҡҡы хатым булыр.*

*Һин 28 – 29-ларында юлға сыҡһаң, барып етерлек итеп (шул ваҡытҡа ҡарата) 19 – 28-ләрендә хат яҙыуҙы туҡтатам һәм һинән телеграмма көтә башлайым.*

*Ошо хатты алыу менән ҡасан юлға сығыуың хаҡында телеграмма һуғырһың һәм хат яҙырһың.*

*Мин бигерәк тә юл өсөн борсолам.*

*Нәфисә, юлды һин мин әйткәнсә ойошторһаң, шәп булыр ине...*

*Счастливого пути, һөйөклөм.*

(Атайым баҙарға барырға яратты, гәрсә унда уға бер нәмә лә кәрәкмәҫ ине - бөтә ризыҡтарҙы әсәйем һатып ала торғайны. Баҙарҙа атайыма ябай халыҡ менән аралашыу, үҙен танып белмәгән кешеләр менән ҡәҙимге тормош темаларына гәпләшеү оҡшай ине. Бер ваҡыт картуф һатҡан кешене эйәртеп ҡайтты. Мари крәҫтиәне ине, атайым әйтеүенсә, мари диалектында йәтеш һәм ҡыҙыҡлы һөйләшкән уҙаман. Әсәйем уны ашатты, сәй менән һыйланы, аҙаҡ атайым уның менән мари лөғәтендә оҙаҡ һөйләште; улар мәрәкәләште, көлөштө һәм бер-береһенән бик ҡәнәғәт ҡалдылар.

Ғөмүмән, кемдең кем икәнен, нимә менән шөғөлләнгәнен төпсөнөп тормайынса, атайым үҙенә яңы таныштар табыуҙы хуп күрҙе. Баймаҡ ял йортонда сағында ул Башҡортостан комбинаттарының береһендә баш инженер булып эшләгән Әкрәм ағай Йософбаев менән танышып ала. Һуңынан был ағай беҙгә атайыбыҙҙың комбинатта хеҙмәттең нисек ойошторолоуын, вазифаһының нескәлектәрен һорашыуы хаҡында һөйләне, өҫтәүенә, Жәлил Ғиниәт улы уға хеҙмәтте камиллаштырыу буйынса кәңәштәр биргән һәм комбинаттың эшмәкәрлеге буйынса материалдар нигеҙендә әлеге инженерҙы диссертация яҙырға өгөтләгән. Әкрәм ағай диссертацияһын инде атайым гүргә ингәс яҡлаһа ла, беҙгә рәхмәтле күңел һәм күстәнәстәр менән килде.)

**17 июнь, 1941 йыл, Өфө**

*Һөйөклөм, Нәфисә!*

*Кисә, бөгөн һинән хат көткәйнем, килмәне, был хатымды, шулай булыуға ҡарамаҫтан, яҙырға булдым. Был инде минең аҙаҡҡы хатым булыр. Юлға сыҡһаң, быны саҡ алып өлгөрәһең. 15 июнь бер хат яҙып һалғайным, алғанһыңдыр. Был хатты бик ашығып ҡына яҙам, сөнки бөгөн Ишембай, Стәрле ҡалаларына буласаҡ студенттар йыйыны менән бәйле бер аҙналыҡ командировкаға китәм.*

*Бик ҡыҙғаныс: бынан кире мин һиңә хат яҙыу шатлығынан мәхрүммен, йөрәктә әллә ни рәүешле бер хис, әллә нисек... Ултырып һиңә хат яҙыуҙар минең өсөн ҙур бер шатлыҡ була торғайны. Мин һиңә яҙған хаттарымды йөрәгемдәге бөтә ихласлығым белән яҙа торғайным, был иң аҙаҡҡы хатым булғанға, күңелдә әллә нимдәй яҙып та, һөйләп тә аңлата алмаҫлыҡ бер тойғо. Йөрәктә бушлыҡ хөкөм һөргән һымаҡ тойола. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, мин сикһеҙ шатмын, шатлығым йөрәгемә һыймаған һымаҡ, әллә нисек – зарығып көткән осрашыу шатлығы! Шуға күрә йөрәк атлығып сығып килә. Минең ғүмеремдә һис онотолмаҫлыҡ бер шатлыҡ буласаҡ. Ул шатлыҡты хатҡа яҙып та, һөйләп тә бөтөрөп булмай. Был шатлығымды мин тик бер һиңә генә яҙам.*

*Мин һине йөрәгемдәге ысын, көслө мөхәббәт белән яраттым. Шул мөхәббәт белән мин, фәҡәт бер һине генә яраттым, Нәфисә. Ул мөхәббәт һис бер ваҡытта ла һүнмәйәсәк. Был хаҡта яҙылған бер нәмә лә һөйләмәгән һүҙҙәр генә. Осрашҡас, мин аны, булдыра алһам, тел белән һөйләп ҡарармын. Беҙ осрашырбыҙ һәм мин бәхетле буласаҡмын. Мин шул осрашыу минуттарын, шул*

*вaҡытта буласаҡ шатлыҡты күҙ алдыма килтерәм. Шул ваҡыттағы шатлыҡтан нишләрмен икән? Боронғоларса әйткәндә, Алла үҙе генә белһен…*

*Тик юлда иҫән-һау ғына килегеҙ инде. Мин һеҙгә (Рәйсә белән икегеҙгә) ысын күңелемдән шуны ғына теләйем.*

*Үҙем һаман шул, эшләп йөрөгән көн, экзамендар бара, оҙаҡламай бөтә инде.*

*Мин хатымды ошоноң белән тамамлайым, Нәфисә. Хатҡа яҙып ҡына һүҙ бөтәме ни? Ул һүҙҙәрҙе һөйләп тә бөтөрөп булмаясаҡ хатта. Һөйләйһе һүҙҙәрем, Шахерезада һымаҡ, мең дә бер төн буйы һөйләһәм дә, бөтмәҫ һымаҡ.*

*Яҡын көндәрҙә һинән хат көтөп ҡалам…*

**18 июнь, 1941 йыл, Өфө**

*Нәфисә, һөйөклөм!*

*Кисә Стәрлегә китә алманым, билет булманы, хатымды ла ебәрә алманым. Һинән бөгөн мотлаҡ хат килер, тип көттөм һәм яңылышмағанмын – хатыңды һәм рәсемеңде алдым.*

*Нисек кенә рәхмәт әйтәйем инде һиңә был хатың өсөн, Нәфисә? Рәхмәт, ысын күңелемдән рәхмәт. Мин шул тиклем шатмын, ул шатлыҡты яҙып бөтөрлөк түгел.*

*Был хатты вокзалдан яҙам. Иртәгә, иртәнән һуң Стәрленән тағы бер хат яҙып һалырмын, ул инде иң аҙаҡҡы хатым булыр.*

*Рәйсәне үҙең белән алып ҡайт, аңа сәләм әйт.*

*Бик ҡабаланам, оҙаҡламай поезд китә. Ҡайтыу хаҡында: билетты алдан уҡ алып ҡуй, юғиһә ҡыйын булыр, йәй көнө кеше күп йөрөй, билет булмай торор.*

*Әллә нимәләр яҙайым тигәйнем, оноттом, ярар, хуш, һөйөклөм!*

**19 июнь, 1941 йыл, Стәрлетамаҡ**

*Минең һөйөклө Нәфисәм!*

*Кисә Өфөнән бер хат һалғайным, алғанһыңдыр. Кисә төнгө сәғәт 1-ҙә Стәрлегә килеп төштөм. Бөгөн йомоштарҙы юллап йөрөнөм, иртәгә Ишембайға китәм, анда бер көн булам да ҡайтам. Эшем артыҡ ауыр түгел.*

*Бер таныштарға төштөм, үҙебеҙҙең яҡтағы, Яҡты күл ауылы, бында Стәрлелә эшләй, күптәнге таныш егет. Торған урындары Ашҡаҙар яры башында ғына. Иртән тороу белән яр башына сығып Ашҡаҙарҙы ҡарап торҙом.*

*Данлыҡлы Ашҡаҙар йылғаһы!.. Ул йылға тураһында көй ҙә бар бит, йырҙар күп, ишеткәнең дә барҙыр әле. Ашҡаҙар Иҙелдән 2 - 3 тапҡырға тарыраҡ, бик ҙур күренә. Ләкин Иҙел һымаҡ тәрән түгел, һай, сөнки ул яландарҙы ғына һуғарып аға. Бик матур һыу. Бала-саға кисеп йөрөй.*

*Стәрлелә мин бәләкәй саҡтан бирле булғаным юҡ ине. Ҡала сағыштырмаса үҙгәргән – яңы йорттар һалғандар. Ҡала үҙе урман эсендә, ағастар бик күп. Халҡы ла бик күбәйгән.*

*Стәрлелә минең өләсәйем, дөрөҫөрәге, прабабушка йәшәй торғайны. Бынан 20 йыл элек мин анда һуңғы тапҡыр ҡунаҡта булдым. Аҙаҡ ул үҙе беҙҙә ҡунаҡта булғайны. Шунан аҙаҡ күрмәнем. Ул атайымдың өләсәһе ине. Шул урамдан үтеп киттем, йорто ары ултыра.*

*Һуңғы тапҡыр мин Стәрлелә 29-сы йылда булып киткәйнем. ШКМ-ды (школа колхозной молодежи) тамамлағас, беҙ, малайҙар, (уҡыусы иптәштәр белән) «приключениялар» эҙләп, уҡылған китаптарҙың тәьҫире аҫтында илгиҙәр булып йөрөнөк ҡалала. Шуларҙы уйлайым да көлкө килә, кешелә ниндәй замандар булмай. Беҙ өс аҙна самаһы йөрөнөк (3 кеше инек). Шунан пароход*

*менән ҡайтып киттек түбәнгә табан. Приключениялар таба алманыҡ, билгеле. Шул йыл мин Өфөгә уҡырға киттем.*

*Мин әллә ҡайҙа киттем. Был һиңә ҡыҙыҡ түгелдер. Икенсенән: был хатты һин киткәнсе әллә барып етә, әллә юҡ. Был хат, шул 29 – 3 июнь саҡ барып етәр әле.*

*Был инде һиңә иң аҙаҡҡы хатым булыр, Нәфисә. Хәҙер күрешергә, осрашырға ғына ҡалды. Ҡалған һүҙҙәрҙе шунда һөйләшербеҙ инде.*

*Хатың һәм рәсемең өсөн нисек кенә рәхмәт әйтеп бөтөрәйем инде һиңә, Нәфисә! Мин шул тиклем шатмын, шатлығымды ҡайҙа ҡуйырға ла белмәйем. Рәхмәт һиңә, һөйөклөм, Нәфисә. Ысын йөрәгемдән рәхмәт! Рәсемдәреңә ҡарап туя алмайым. Үҙеңде күргән һымаҡ булдым. Рәсемеңә ҡарау менән күҙ алдыма һинең белән осрашыу (теге осрашыу) минуттары килеп баҫты. Оҙаҡламай беҙ осрашырбыҙ, тағы ла осрашырбыҙ! Мин шул тиклем шатмын, Нәфисә!*

*Ярай, хуш, Нәфисә. Ул шатлыҡты нисек кенә яҙһаң да булдыра алмам инде, Нәфисә. Хуш!*

*Хатымды ошоноң белән тамамлайым. Был һиңә иң һуңғы хатым, хуш, һөйөклөм.*

*Минән Нәфисәгә сәләм әйт, ул мине беләләр инде хәҙер, һин әйткәнһеңдер. Рәйсәгә лә сәләм. Рәйсәне ҡалдырма.*

*Хатымды тамамлайым. Хуш, һөйөклө Нәфисәм.*

*Һиңә сәләм белән уңышлы юл теләп ҡалам!*

*Һағынып Жәлил. Крепко целую һине, Нәфисә!*

*До скорого свидания!*

(Атайымдың өләсәһенең әсәһе мулла ҡыҙы була. Уның хәтерләүҙәре буйынса, оло өләсәһе бик яғымлы һәм мәрхәмәтле булған. Ғәрип бүләһен ихлас йәлләгән берҙән-бер кеше була оло өләсәһе. Ул хатта Жәлилде үҙ янына Стәрлетамаҡҡа алып китергә лә теләй, ләкин Ғиниәт олатай өләсәһенә өлкән улын биреп ебәрмәй. Оло өләсәй Ҡаранйылғаға ҡунаҡҡа барғылай, гелән күстәнәс менән килә, һәр саҡ һөйөклө бүләһен иркәләй. Әлбиттә, Ғиниәт олатайҙың ирҙәрсә ҡатҡыл тәрбиәһе улы Жәлилде шәхес булараҡ формалаштыра. Ләкин кешеләрҙе йәлләү, уларҙың хәленә инеү, һәр саҡ уларға ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер булыу һәләте, уйлауымса, беҙҙең атайға уның оло өләсәһенән бирелгән.)

**24 июнь, 1941 йыл, Карши**

*Жәлил!*

*Һиңә иң һағынышлы сәләмдәремде ебәреп, иҫәнлек-һаулыҡ һәм эшеңдә уңыштар теләп ҡалам.*

*Жәлил, һинең һуңғы хаттарыңа яуап яҙмай торҙом, ғәфү ит мине. Яуап яҙмай тороуымдың сәбәбе бар, осрашҡас һөйләрмен.*

*Жәлил! Мин был хатты бик оҙонға һуҙмаҫҡа булдым. Напишу о главном, о второстепенном поговорим при встрече.*

*Экзамендарҙы кисә генә бөтөрҙөк. «Плохо» юҡ, ләкин отметкалар шәптән түгел, кешегә күрһәтеүе оят. 3 - 4 «Посредственно» бар. Мин һис тә былай уҡымай торғайным, быйыл ғына шулай булты.*

*Жәлил, мин 28-29-ларында юлға сыҡмаҡсымын. Билет алғас та телеграмма бирермен.*

*Рәйсәне Нәфисә белән ҡалтырып торорға бултым. Нәфисә лә минән ҡалып 15 – 20 көн генә тора.«Бергә ҡайтайыҡ, көтөп тор», – тигәйне лә, мин риза*

*булманым. Аның Ферганала ағаһы бар, шул килмәксе. Нәфисә аны көтөп, шунан ҡайтмаҡсы. Рәйсә алар менән ҡайта.*

*Мин Нәфисәгә беҙҙең эштәр тураһында в общих чертах ғына әйттем. Ул мине әрләп ташланы, ҡара эсле кеше икәнһең, мыңарса әйтмәй йөрөгәнһең, тине. «Әрлә. Ғәйеп минтә», – тинем. Ул үҙебеҙҙең илгә ҡайтыуыма бик шат. Һиңә сәләм әйтергә ҡушты.*

*Лотфый ағай уҡыуын бөтөрмәгән әле, ахыры, хаты ла килмәй.*

*Әтейемне ҡайһылыр лагерьға оҙаттылар. Барып еткәс хат яҙырмын тине. Беҙ шулайтып бер-беребеҙҙең ҡайҙа икәнен дә белә алмай йөрөмәһәк инде.*

*Лотфый ағайҙы фронтҡа ебәрәләр инте, ул командир запаса, булһа кәрәк. Международное положение былай булып китеүе бик ҡыйын хәл, әлбиттә.*

*Бөгөн мәктәптә выпускной вечер. Әҙерләнеп йөрөгән булабыҙ. Бик эҫе, 50 - 60 градус йылылыҡ, сыҙап булмай.*

*Ярар, Жәлил. Һау-сәләмәт бул. Һиңә сәләм менән, Нәфисәң. Тиҙҙән күрешербеҙ, Алла бирһә. Ғәфү ит, Жәлил, хат бик ҡыҫҡа һәм алама яҙылты.*

*Хуш! Тағы ла сәләм барыбыҙҙан та. Целую тебя, мой любимый.*

*Спешу в школу на вечер.*

(Һуғыш башланған мәлдә Советтар Союзының сик һыҙығынан алыҫта йәшәүсе граждандары яу барған урындарҙа ниндәй мәхшәр ҡупҡанын белеп тә бөтөрмәйҙәр. Бөтәһе лә «броня крепка и танки наши быстры»,«будем бить врага на его территории» тигән ышаныс менән йәшәй. Әсәйем һөйләй торғайны: сығарылыш кисәһендә уның менән бер синыфта уҡыған егет-елән „һуғыш тиҙ генә бөтөр ҙә ҡуйыр һәм беҙ яу ҡайтарышырға ла өлгөрмәбеҙ“ тип ҡайғырышалар. Һуңынан бөтә был үҫмерҙәр һуғышта баштарын һала. Урта Азияла йәшәргә тороп ҡалған әхирәт синыфташы әсәйемә хәбәр иткәнсә, 1940-1941 уҡыу йылы сығарылышы малайҙарынан бер кем дә иҫән ҡалмай. Хәлил олатайымдың ҡустыһы Лотфый «великий учитель» була алмай - Бөйөк Ватан һуғышы осоронда, Курск дуғаһында, баш һала. Лотфый Халиҡовтың атайыма ғәрәп шрифты менән иҫке төркисә 1941 йылдың август аҙағында яҙған һуңғы хаты һаҡлана.)

**28 июнь, 1941 йыл, Карши**

*Жәлил!*

*Һиңә иң һағынышлы сәләмдәремде ебәреп, иҫән-һау йәшәүеңде теләп ҡалам. Жәлил, мин һиңә уҡыуҙар бөткәс, бер хат, ике телеграмма ебәргәйнем, алғанһыңдыр. Ул хатта һәм телеграммаларҙа мин тиҙҙән китәбеҙ, тип яҙғайным, ләкин ул һүҙҙәр дөрөҫ булып сыҡманы. Сәбәбе – хәҙерге международное положение. Беҙҙең ҡала военный иҫәпләнә. Ҡаланан хәҙер бер кешене лә сығармайҙар ҙа керетмәйҙәр ҙә. Поездарға билеттар һатылмай. Беҙҙең заказ бар ине 1 числоға. Бөгөн барып һораһаҡ, аны недействительный тинеләр.*

*Беҙ бөтөнләй китмәксе инек – Нәфисә, Рәйсә, мин. Багажларҙы ла әҙерләп бөткәйнек, һата торған әйберҙәрҙе һатҡайныҡ. Ә хәҙер нишләргә белмәй илап йөрөйбөҙ. Шәхәрҙән станцияға тиклем бер машина йөрөмәй, бөтәһен дә мобилизовать итеп бөткәндәр.*

*Нишләргә, Жәлил? Ҡалтыҡ бит!*

*Жәлил, мин хәҙер мына НКВД-ға барып ҡарайым. Уҡырға китәм, билет бирмәйҙәр, тип. Нәмә тиләр.*

*Жәлил, beләһеңме нимә: Һин үҙеңдең институтығыҙ исеменән Нәфисә менән миңә уҡырға саҡырылаһығыҙ, тигән телеграмма бирә алмаҫһыңмы?*

*Быть может, шундай вызов булһа, беҙҙе тотмаҫтар. Әгәр шулайтып та бынан сығып ҡотола алмаһаҡ… белмәйем.*

*Сильно расстраиваюсь. Нәмә эшләргә лә белмәй ҡалтым.*

*Жәлил, һин мине ғәфү ит, ҡәләм белән яҙғаным өсөн. Мин был хатты почтала ғына яҙам.*

*Хуш-һау бул, Жәлил. Мине онотма, беҙ барыбыр көрәшәсәкбеҙ, Алла бирһә.*

*Сәләм белән Нәфисәң. Целую.*

(1941 йылдың авгусында әсәйебеҙ һеңлеһе Рәйсә менән Өфөгә килә ала шулай ҙа. Әсәйебеҙҙең үтенесе буйынса атайым уға саҡырыу ебәргән була. Белмәйем, әсәйем атайымдың дуҫтарына оҡшағандырмы, юҡтырмы, ләкин һәммәһенең дә «Кейекбаев балалы ҡатынға өйләнгән» тип һүҙ йөрөтөүҙәрен беләм. Сөнки атам-әсәм, ҡайҙа барһалар ҙа, Рәйсәне етәкләп йөрөткәндәр.

Институттың ҡабул итеү имтихандарына әсәйем килеп өлгөрмәй. Ә Өфө сит ил телдәре пединститутын (Коммунистик һәм Аксаков урамдары мөйөшөндәге бина) шул мәлдә япҡан булалар. Һуғыш осоронда был йортта эвакуацияланған хәрби завод урынлаша.

1944 йылға тиклем атам-әсәм Сәйетбаба ауылында йәшәй, унда атайыбыҙ мәктәп директоры булып эшләй. 1942 йылдың майында ошо ауылда уларҙың баш балаһы - Искәндәр ағайыбыҙ тыуған. Ошо уҡ осор атайыбыҙ «Туғандар һәм таныштар» романын ижад итә, «Урман әкиәттәре» йыйынтығын яҙа, был ҡулъяҙманың титул битенә атайыбыҙ «минең бәләкәс улым өсөн әкиәттәр» тигән яҙма өҫтәй. Был әкиәттәр атайым иҫән сағында бер нисә тапҡыр нәшер ителде, ләкин ул романының донъя күргәненә тиклем йәшәй алманы.

Зәғиф булыуына һәм ҡулында хәрби хеҙмәттән азат ителеүе хаҡында ҡағыҙы булыуға ҡарамаҫтан, һуғыш башланғандан бирле атайыбыҙ үҙен, исмаһам тәржемәсе итеп булһа ла фронтҡа ебәреүҙәрен үтенеп, военкоматҡа ғаризаларҙы даими ебәреп торған, сөнки немец телен бик камил үҙләштергән кеше ине. Военкоматта ризалашмайҙар, ләкин үҙен фронтҡа ебәреүҙән ярҙам һорап мөрәжәғәт иткән депутат Эрнест Кренкель уға Юғары дипломатия мәктәбенә барырға юллама яҙып биргән. 1944 йылда атайыбыҙ Мәскәүҙәге ошо уҡыу йортона экзамендар биреп ҡабул ителә һәм уға, ғаиләхәлдәрен яйлау өсөн, занятиелар башланмаҫ борон уҡ, отпуск бирәләр. Ләкин Өфөнән атайҙы Мәскәүгә ебәрмәйҙәр, ә Рыбинск ҡалаһынан эвакуацияланған авиация институтына немец теле уҡытыусыһы итеп тәғәйенләйҙәр. ...1944 йылда Кейекбаевтар яңынан Өфөлә йәшәй башлай. Өфөгә килгәс, улар сабый Искәндәрҙе күтәреп, фатир эҙләп ҡаланы бик оҙаҡ ҡыҙыралар. Ҡала эвакуацияланған кешеләр менән тулған, буш квартиралар юҡ, бары тик Цюрупа урамының осондағы овраг ситендәге ағас өйҙә морон төртөрлөк мөйөш табыла. Атайымдың танышы - Башҡорт драма театры артисы Рим Сыртланов 1944 йылда унын ҡолағына киртә: Туҡай урамының ул йәшәгән 50-се йортонан үҙҙәренең иленә эвакуацияланған кешеләр ҡайтып китәсәк һәм ике бүлмәле торлаҡ бушаясаҡ. Торлаҡҡа хужа булырға теләүселәр ифрат күп була, әммә Рим Сыртланов атайыбыҙға ордер алырға һәм әлеге квартираны биләргә ярҙамлаша.

...1945 йылда атам-әсәмдең йәнә бер улы — Ильяс тыуа. Кейекбаевтар быға бик шатлана һәм үҙҙәренең — өс ул үҫтереү хыялы тормошҡа аша, тип өмөтләнәләр. 1947 йылдың ғинуарында, буран ҡотorған көндө, атайым әсәйемде бала табыу йортона өсөнсө тапҡыр илтә һәм өсөнсө улына Буранбай тигән исем дә әҙерләп ҡуя. Ләкин мин

- ғаиләләге берҙән-бер ҡыҙ бала тыуғанмын, шуныһы ҡыҙыҡ, таныш-тоноштарҙың хәтирәләре буйынса, атайым да, әсәйем дә, ир бала тыумағанға аҙмы-күпме бошоноп та алғылай.

Ғаиләлә өсөнсө ир бала - Морат 1959 йылда тыуҙы.

1944 йылда Хәлил олатайыбыҙ лагерҙан ҡайтҡас ҡабат өйләнә, мәгәр үгәй әсәһе Рәйсәне һөйһөнмәй, шуға ла апайыбыҙ — өлкән ҡыҙ һәм оло туғаныбыҙ һымаҡ ғүмеренең күп өлөшөн беҙҙең ғаиләлә үткәрҙе.

...Мин бәләкәй саҡта ғаиләбеҙҙә атайымдың Фин һуғышында үлгән энеһенең өлкән ҡыҙы Рәйфә йыш булды. Ғәфүрҙең ҡыҙы икәү. Кесеһе -Мөхтәрәмәне Ғәрифә өләсәй менән Ғиниәт олатай үҙҙәренә алып ҡала, ә Рәйфә әсәһе менән күрше Сәйетбаба ауылында йәшәй. 1946 йылда әсәһе вафат булғандан һуң өләсәйем Рәйфәне үҙҙәренә алмай. Ҡыҙыҡайҙың әсәһе яҡлап туғандары ла уны өйҙәренә саҡырмайҙар. Был хаҡта атайыма ауылдаштары хат яҙып ебәрә. Атайым шунда уҡ ауылға барып, Рәйфәне үҙе менән Өфөгә алып килде. Рәйфә башҡорт балалар йортонда тәрбиәләнде, сөнки русса ләм-мим белмәй ине. Һуңынан ул педтехникум бөтөрҙө.)

## Һүҙ аҙағында

Атайым менән әсәйемдең бер-береһенә ошо хаттарҙы яҙыуына етмеш йыл уҙҙы. Тотош кеше ғүмере, бер уйлаһаң... Хатлашыуҙа телгә алынған кешеләрҙең береһе лә иҫән түгел бөгөн.

Ғиниәт олатай өләсәйҙән дә, ике улынан да оҙағыраҡ йәшәне. Уның йөрәге 1969 йылда тибеүҙән туҡтаны: ҡомған тотоп, тәһәрәт алғас, намаҙ уҡырға әҙерләнгән генә сағында. Атайымдың һеңлеләре лә гүр эйәһе булдылар.

Хәлил олатайыбыҙ 1979 йылда 82 йәшендә донъя ҡуйҙы – ҡартайып, нәҡ Соловки һөргөнөндә Ленинград академигы юрағанса. Уҙған быуаттың 90-сы йылдары аҙағында ҡыҙы Рәйсә дәүләттән атаһы Хәлил Халиҡовты кулак яһап һөргөнгә ебәргәндәре өсөн ун мең компенсация юллап алды.

...Мәктәпте тамамлағандан һуң Рәйсә апайыбыҙ, атайыбыҙҙың кәңәшен тотоп, Мәскәү дәүләт университетының көнсығыш телдәре факультетына уҡырға инде. Һуңынан атайым уны Башҡорт дәүләт университетының башҡорт теле кафедраһынан маҡсатлы аспирантураға урынлаштырҙы. Әсәйем бөтә уҡыған осоронда Рәйсәгә ай һайын аҡса һалып торҙо, атайым уға кандидатлыҡ диссертацияһын яҡларға булышлыҡ итте. Рәйсәнең әсәйемә ебәргән аҡсалары өсөн рәхмәт күндергән хаттары, шулай уҡ уның атайыбыҙҙан «Башҡорт тарихи документтарының теле» темаһына диссертацияһының асылын нигеҙләүҙе төшөндөрөүен үтенгән хаттары һаҡлана. Йылдар үткәс Рәйсә Хәлил ҡыҙы Халиҡова профессор булып китте. Тик, атайыбыҙҙың вафатынан һуң, апайыбыҙҙың беҙҙең ғаиләгә ҡарата мөнәсәбәте ҡырҡа үҙгәрҙе. Һуңынан беҙҙең менән бөтөнләй аралашманы һәм бер нисек тә ярҙамлашманы тиерлек, ә бит ул осраған берәүгә, тормошомда бөтәһенә лә үҙем ныҡышып өлгәштем, тип һөйләп йөрөй, әммә үҙенә файҙаһы тейерҙәй тойолһа, «мин профессор Кейекбаевтың туғаны» тип әйтеүҙән дә тартынмай. Апайыбыҙ инсульттан һуң, йылдан ашыу хәрәкәтһеҙ ятып, 2005 йылда гүр эйәһе булды. Уның улы – эшҡыуар – әсәһенең бөтә документтарын һәм ҡульяҙмаларын үртәп, ғаиләһе менән сит илгә олаҡты.

Ике туған энеһе Әхмәтте лә әсәйебеҙ 1941 йылда Карши ҡалаһынан Өфөгә эйәртеп килтерә. Әхмәт 1944 йылда фронтҡа алына, Германия ерҙәрендә

һуғыша, һуңынан япон милитаристары менән Алыҫ Көнсығышта алыша. Һуғыш дәһшәттәре тынғас, ул Германияла оккупацион ғәскәрҙәре сафында хеҙмәт итә. Әхмәттең ағайы иһә һуғыш башланғас та һәләк була. Коллективизация осоронда милиционерҙар тарафынан үлтерелгән атаһы Хәсәнгә оҡшап, Әхмәт ағайыбыҙ ҙа бик ҡыйыу, игелекле, күңелсәк һәм йор телле булған. Атайым Әхмәтте бик яратҡан, ғөмүмән, улар бер-береһен бик яҡын күргән. Әхмәт Германиянан атайымдың заказы буйынса немец телендә баҫылған, бик һирәк һаналған бер нисә китап алып ҡайта. Һуңынан Әхмәт ағай уйынлы-ысынлы һөйләп тә ҡуйғылай, йәнәһе, немецтарҙан аҙыҡ-түлек биреп алмаштырған әлеге китаптар урынына ул әллә нисә яҡшы костюм да алып ҡайта алыр инем, тигән. Әхмәт ағай, әлбиттә, Жәлил еҙнәһе өсөн ул эҙләгән китаптарҙың бик кәрәк икәнлеген белгән.

Ғөмүмән, нәҫел-нәсәптәге һәр туғаныбыҙ хаҡында, атайыбыҙға һәм әсәйебеҙгә бәйле, бик күп мауыҡтырғыс хәл-ваҡиғаларҙы бәйән итергә мөмкин.

* * *

Әсәйемдең Әхмәт менән уның әсәһенә бәйле ваҡиғаны һөйләгәне бар. 1945 йылдың май баштарында Фатима әбей ауылдан Өфөгә килде, йәнәһе, фронтта йөрөгән Әхмәт улына ебәрәсәк посылкаһы тиҙерәк барып етәсәк. Әбейебеҙ ауылда күршеләренән үтескә он алып, өс түңәрәк икмәк килтерәйне. Ул Кейекбаевтар ғаиләһе йәшәгән Туҡай урамындағы фатирға төшә һәм бер икмәген йыуаса итеп әсәйемә тоттора. Ул был саҡта бала (Ильясты) табырға йыйынған була. Икенсе икмәген Фатима әбей тәмәкегә алыштырып, шуны ҡалған өсөнсө икмәге менән улы Әхмәткә ебәрергә ниәтләнә. Иртәнсәк, бер икмәген ҡуйынына ҡыҫтырып, әбей баҙарға юллана, ләкин унан икмәкһеҙ һәм тәмәкеһеҙ әйләнеп ҡайта. Ул тиҙ генә үҙенең тоҡсайынан тағы бер икмәк сығара ла, шуны эләктереп, ҡабат килгән яғына ашыға. Әсәйебеҙ уны туҡтата ла һорай: ни ғилләү тәүге икмәкте ҡайҙа ҡуйҙың, ә быныһын ҡайҙа алып бараһың? Быға яуап итеп әбей түбәндәгеләрҙе бәйән итә:

– Баҙар юлындағы бер урамда немец пленныйҙарын күрҙем, улар мылтыҡлы һаҡсылар күҙәтеүендә ниндәйҙер соҡор ҡаҙалар. Ана шул яшыҡ, ас, йонсоу «дошмандарҙы» күреп китәйем әле тип туҡталғайным, бер немец ҡулымда икмәкле төйөнсөктө шәйләп ҡалды ла йәлләткес тауыш менән инәлде: «Мамка, дай хлеб!»...

Фатима шунда уҡ икмәкте әсиргә һона, немец уны бөтәһе менән дә бүлешә, ләкин һәр береһенә бик әҙ генә өлөш тейә. Шуға күрә лә әбейебеҙ немец тотҡондарына Әхмәт улына ебәрергә йыйынған икмәген дә бирергә уйлаған. Әсәйем асыулана: «Улар дошмандар бит, улар һинең оло улыңды үлтерҙеләр, төпсөгөң Әхмәт Германияла һуғыша, ә һин улыңа ебәрә торған икмәгеңде шуларға бирмәксеһең!» Шул саҡта Фатима әбей әсәйем ғүмерлеккә хәтеренә һеңдергән һүҙҙәрҙе әйтә:

– Оло улымды был немецтар үлтермәгән, уның башына һуғыш етте. Һуғыш тиҙҙән бөтәсәк һәм мин Әхмәт улымдың һуғыштан тере ҡайтыуын теләйем... Йәнә мин немец әсәләренең дә һуғыштан үҙ улдарын иҫән-һау көтөп алыуҙарын теләйем. Нәфисә, һинең дә улың бар, оҙаҡламай икенсеһен табырһың, һәм мин һинең бер ҡасан да улдарыңды һуғышҡа ебәрергә һәм уларҙың ҡайтыуын көтөргә насип итмәүен теләйем.

Һуғыштан һуң әсәйем Өфө юридик институтына инеп, унда өс йыл уҡый, аҙаҡ уҡыуын ҡалдыра. Сөнки балаларын тәрбиәһеҙ ҡалдырырға теләмәй, өҫтәүенә, иренә фән менән шөғөлләнер өсөн уңайлы шарттар тыуҙырырға тырыша.

Етмәһә, өйөбөҙҙә килгән-киткән кеше лә күп була. Улары, әлбиттә, әсәйем һәм атайым яғынан яҡын йә сыбыҡ осо туғандар. Улар Өфөгә үҙҙәренең мәшәҡәттәре менән килеп төшәләр ҙә беҙҙә оҙаҡ ҡына, йомоштары атам-әсәм булышлығында үтәлгәнсе, йәшәп яталар.

Төрлө кешеләрҙән ишеткәнем булыр: «Әсәйегеҙ рәхәт йәшәне, уның ире танылған кеше ине, әсәйегеҙ эшләмәне, өйҙә генә ултырҙы...» Ә бит мин уның тик ултырғанын һәм бушҡа ҡайҙалыр йөрөгәнен бөтөнләй хәтерләмәйем. Ул бөтәһенән дә иртәсел уяныр ине, беҙгә бәләкәй саҡта ла, студент йылдарында ла күҙ-ҡолаҡ булды. Туҡай урамындағы фатирыбыҙҙа мейескә утын яғып, гелән иртәнге йылы аш бешерер ине. Атайыбыҙҙың да, беҙҙең дә кейемебеҙ һәр саҡ бөхтә, үтекле булды, таҙа ҡулъяулыҡтар йөрөттөк. Өйҙән сығып китерҙән алда, уны-быны онотманығыҙмы, тип һәр саҡ тикшерә торғайны әсәм. Беҙ – мәктәптә, ә атайым эштә саҡта әсәйем баҙарға, магазиндарға, ризыҡ артынан сапты, кер йыуҙы, фатирҙы йыуып-йыйыштырып тотто. Мәктәптән ҡайтыуыбыҙға өҫтәлдә – тәмле төшкө аш. Әсәйем ашты мул итеп бешерер ине, өлкән ике ағайым йыш ҡына мәктәптән иптәштәрен эйәртеп ҡайтҡыланы, бәғзеләре етешһеҙ ғаиләләрҙә үҫкән етем-еһер инеләр.

Атайыбыҙға ла дуҫтары һәм таныштары йыш килде. Ул сағында ҙур өҫтәл артына ултырып, күмәкләп туҡлана торғайныҡ. Бер ҡасан да мәктәпкә дәрес әҙерләмәгән көйө барманыҡ, сөнки әсәйем һәр беребеҙҙе ентекләп тикшерер ине. Эйе, нәҡ уның арҡаһында беҙ яҡшы уҡыныҡ. Мәктәптә уҙғарылған ата-әсәләр йыйылышына әсәйебеҙ генә йөрөнө, беҙҙең иңгә төшкән проблемаларҙы ла бары тик ул ғына хәл итте, сөнки атайыбыҙҙы көнкүреш мәшәҡәттәренән азат итергә тырышты. Атайым ултырып яҙышырға керешһә, әсәйебеҙ ғауғаларға ирек бирмәне. Шул уҡ ваҡытта үҙе лә күп уҡырға өлгөрҙө – рус, сит ил, башҡорт һәм татар китаптарын уҡыны. Өйөбөҙҙә һәр саҡ китаптар күп булды, тиҫтәләгән гәзит-журналдар алдырҙыҡ. Дөрөҫ, кем нимә оҡшата, шуны уҡып ҡына ҡалманы, гелән әсәйебеҙ менән ҡыҙыҡлы китаптар һәм матбуғаттағы мәҡәләләр буйынса фекер алыштыҡ. БДУ-ның филология факультеты студенты булғанымда теге йәки был әҫәрҙе уҡырға форсатым етмәһә, әсәйем йыш ҡына уларҙың йөкмәткеһен һөйләп бирә, әҙәби әҫәрҙәргә ҡарата яҙылған тәнҡит мәҡәләләренең фекере асыҡлана торғайны. Аспирантурала уҡып, башҡорт халыҡ педагогикаһы буйынса диссертация яҙған осорҙа атайым гүргә ингәйне инде. Мәгәр мин әсәйемдән бик күп башҡорт мәҡәлдәре һәм әйтемдәрен ишеттем, шуныһы, бәғзеләре фольклор йыйынтыҡтарына инмәгән булып сыҡты. Ул ифрат күп башҡорт халыҡ йырҙарын, әкиәттәрен, йомаҡтарын, башҡорт эпостарын белде.

Тәбиғи, ата-әсәбеҙ беҙҙе, балаларын, ҡаты тәртип теҙгенендә тотто. Иң мөһиме – мәктәптә белем алыу, китаптар уҡыу, өйҙә тәртип тотоу һәм булышыу. Туҡай урамындағы фатирыбыҙҙа, үрҙә әйткәнемсә, мейес утын менән яғылды; өлкән ағайымдар, үҫә төшкәс, утынды үҙҙәре бысты, ярҙы, һыу ташынылар; Искәндәр ағайым кәрәсин артынан сабыуланы. Беҙҙе бер кем дә махсус өйрәтмәне, бөтәһен дә үҙебеҙ өйрәнеп, белеп үҫтек. Ғаиләбеҙҙә шундай ҡағиҙә бар ине: бәләкәйҙәр өлкәндәрҙе тыңларға тейеш, атайым, әсәйем, ағайыбыҙ беҙгә, бәләкәстәргә, бер йомош-фәләнде лә ике тапҡыр әйтмәне. Үҙҙәренең өлгөһөндә әсәйем беҙҙе кешеләрҙе яратырға өйрәтте, һәр саҡ үҙҙәренә ярҙамсыл булырға күнектерҙе һәм кеше хаҡында ниҙер уйлайһың икән, шуны күҙенә ҡарап әйтергә, ә уның арҡаһына ышыҡланып ләпелдәмәҫкә ғәҙәтләндек.

Атайым беҙҙе тормошта үҙ-үҙеңә ышаныс менән йәшәргә, сит-ят кешеләр хаҡында уларҙың һөйләгән хәбәре буйынса түгел, ә ҡылған эштәре, холоҡ-фиғеле буйынса фекер йөрөтөргә өндәне.



*Кейекбаев Ильяс. БДУ-ның сығарылыш студенты. 1968 йыл.*

Искәндәр БДУ-ның физика-математика факультетын, Эске эштәр министрлығы академияһын тамамланы, бер нисә йыл Өфө ҡалаһының эске эштәр идаралығына етәкселек итте. Ул милиция отличнигы ине, бик күп ауыр енәйәттәрҙе, сетерекле эштәрҙе фашланы, күп наградалар алды. Коллегаларының оло хөрмәтен ҡаҙанды. Спорт менән шөғөлләнде, волейбол буйынса йыйылма командала Башҡортостан намыҫын яҡланы. Ағайым отставкаға полковник званиеһында сыҡты.

Ильяс та БДУ-ның физматын тамамланы. Мәскәү аспирантураһын бөтөргәс «Башнефтегеофизика» тресында эшләне, хәҙер пенсияла.

Кесе туғаныбыҙ Морат беренсе синыфта уҡығанда атайыбыҙҙы ерләнек. Морат бөгөн – фән докторы, академик, РФ-ның Дәүләт Думаһы депутаты.

Авиация институтынан һуң атайым педагогия институтында сит телдәр факультеты деканы булып эшләне. 1948 йылда башҡорт теленән диссертация яҡлағас, ул Башҡорт дәүләт педагогия институтының (1957 йылдан БДУ) башҡорт теле һәм әҙәбиәте кафедраһына саҡырыла. 1960 йылда докторлыҡ диссертацияһын яҡланы һәм вафатына ҡәҙәр – 1968 йылдың мартына тиклем – башҡорт теле кафедраһы мөдире булды. Профессор Ж.Ғ. Кейекбаев эшләгән осорҙа БДУ-ның башҡорт теле кафедраһы СССР-ҙың тюркология кафедралары араһында тел ғилемен тикшереү йәһәтенән беренсе урынды биләй.

Вафатына бер нисә йыл ҡалғансы атайым фундаменталь хеҙмәт – «Основы исторической грамматики урало-алтайских языков (морфология)» монографияһын яҙҙы. Был – уның күп телдәрҙе сағыштырып, оҙаҡ йылдар өйрәнеү һөҙөмтәһе; өйрәнгән телдәрҙе үҙе яҡшы белде, бихисап Ватан һәм сит ил ғилми әҙәбиәтен төп нөсхәһендә танышты. Тикшеренеү һөҙөмтәләрен ул БДУ, Ҡазан, Эстонияның Тарту университеттары, Алма-Ата, Ташкент, Якутск һәм башҡа өлкә-ҡалаларҙың вуздары студенттарына лекция итеп һөйләй. Шулай уҡ иҫәпһеҙ конференцияларҙа сығыш яһай. Будапешттың Венгрия академияһында атайыбыҙ фәнни асыштары менән ғалимдар алдында немец телендә доклад һөйләгән.

Атайымдың архивында совет һәм сит ил ғалимдарының профессор Кейекбаевтың монографияһы донъя күреүен көтөүҙәре һәм баҫылғандан һуң мотлаҡ китапты үҙҙәренә ебәреүҙе һорап үтенгән хаттар байтаҡ.

1963 йылда монографияның ҡулъяҙмаһы «Башкнигоиздат» тарафынан нәшергә ҡабул ителә, был хаҡта 1964 йылдың рекламаһында ла мәғлүмәт бирелә.

1965 йылдың 3 мартында сыҡҡан «Вестник Академии наук СССР» тигән баҫманың 83-сө битендә СССР Фәндәр академияһының баш ғилми секретары Н.М. Сисякандың академияның йыллыҡ эше хаҡындағы отчеты донъя күрә. «...Важнейшие достижения в области естественных и общественных наук» тигән докладтың «Тел ғилеме» исемле бүлегендә: «Среди работ по сравнительно-историческому и сравнительно-типологическому изучению языков, подготовленных к изданию 1964 году следует отметить: «...Сравнительную грамматику урал-алтайских языков» (Башкирский университет)...

...1965 йылда Төркиәлә йөрөп ҡайтҡандан һуң атайыбыҙға Мостай Кәрим

шылтыратты. Шуға шаһит булдым: телефон менән һөйләшкәндә атайым күберәк өндәшмәне, ә Мостай Кәрим һөйләгәндәрҙе тыңланы. Һуңынан ул: «Мостай Кәрим миңә Зәки Вәлидиҙең сәләмен тапшырҙы» – тип ҡуйҙы. Баҡтиһәң, Зәки Вәлидигә Европа тюркологтары Жәлил Кейекбаев тураһында һөйләгән икән. Кейекбаевтың башҡорт тел ғилеме буйынса ҡыҙыҡлы эштәре бар, тиҙҙән Кейекбаевтың яңы хеҙмәте баҫылып сығасаҡ, тигәндәр. Һәм Зәки Вәлиди Мостай Кәримгә, таныш ғалимдар аша заказ бирҙем инде, тип белдергән.


*Ж.Кейекбаев кинйә улы Морат менән. 1963 йыл.*

Ләкин «Башкнигоиздат» 1964 йылда, ҡағыҙ етмәүгә һылтанып, ҡулъяҙманы атайыма кире тоттора, шулай итеп, юҡ-бар сәбәптәр табып, үҙе иҫән сағында әлеге мөһим хеҙмәт нәшер ителмәне. Атайымдың КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитетының беренсе секретары З.Н. Нуриевҡа, йәнә мәғариф министры Ф. Х. Мостафинаға мөрәжәғәт итеүе лә һөҙөмтә бирмәне.

Нуриевҡа мөрәжәғәтендә атайым түбәндәгеләрҙе яҙған: «Был китабымды яҙыр өсөн мин кандидатлыҡ диссертацияһы яҡлаған моменттан бирле эшләнем. («Башҡорт теле фонетикаһы» тигән диссертацияһында Жәлил Кейекбаев шулай уҡ төрлө телдәрҙе сағыштыра. – **З. Кейекбаева иҫкәрмәһе**) Бына шул ваҡыт арағыуында миңә төрки, монгол, тунгус-манчжур һәм уғыр-фин системаларына ҡараған илленән ашыу телде теоретик төшөнөргә һәм үҙләштерергә тура килде, ә ана шул телдәрҙең ҡайһы берҙәрен практик өйрәндем. Нәшриәт тирәһендәге көрәш һәм кәмһенеү минең һаулығымды һәм нервыларымды ҡаҡшатты. Университет етәкселегенең дә беҙҙең кафедраға һәм шәхсән миңә мөнәсәбәте шулай уҡ шәптән түгел: мин кафедра өсөн штат берәмеге һорағайным, үтенесемә кире яуап алдым. Көндөҙгө, киске һәм ситтән тороп уҡыу бүлектәрендә үҙемә күп курстарҙы уҡытырға тура килә. Былай иһә эшләргә мөмкинлек юҡ...»

Республиканың «беренсе» башлығы Кейекбаевтың ғаризаһына яуап биреп тә ыҙаланмай һәм ярҙам да итмәй. Мәғариф министры Ф.Х. Мостафинанан атайым «Основы исторической грамматики урало-алтайских языков» тигән хеҙмәтен вуз студенттары өсөн уҡыу әсбабы рәүешендә баҫтырыуға булышлыҡ итеүен үтенә. Мостафина уға, башҡорт теленән дәреслектәр кәрәк, тип яуап биргән. Атайым, үҙенең хеҙмәте – башҡорт һәм татар телдәренең тарихи һәм сағыштырма грамматикаһы курстары буйынса ҡулланма ул, ошо фәндәр буйынса студенттарға һабаҡ биреүен, был телдәрҙең урал-алтай телдәренең өлөшө икәнлеген, шулай уҡ һәр телдең тарихи грамматикаһы ҡәрҙәш телдәр менән сағыштырма өйрәнергә кәрәклеген аңлатып маташа. Тик министр бер нәмә лә аңламай, аңларға теләмәй.

Жәлил Кейекбаевтың фәнни хеҙмәттәрен баҫтырып сығарыуға, моғайын, был хеҙмәттәр менән сит ил ғалимдарының ҡыҙыҡһыныуы ла сәбәпсе булғандыр. Бәлки, компетентлы органдарға Жәлил Кейекбаев менән шул осор буржуаз милләтсе һәм идеологик дошман һаналған Әхмәтзәки Вәлидиҙең ҡыҙыҡһыныуы хаҡында мәғлүмәт тә еткерелгәндер.

Әлбиттә, атайым тикшеренеүҙәрен дауам итте, хеҙмәттәрен камиллаштырыуҙы туҡтатманы һәм вафатына күп тә ваҡыт ҡалмағанда «Введение в урало-

алтайское языкознание» тигән бүлек яҙҙы, сөнки монографияһын бүлгеләп сығарырға теләне. Инеш өлөштөң ҡулъяҙмаһы машинкаға бирелгәйне, тик атайым 1968 йылдың 19 мартында ҡапыл ғына инфарктан китеп барҙы.

Атайымдың вафатынан һуң әсәйем, бәлки Кейекбаевтың шәкерттәренән берәйһе – инде ғалим һаналған арҡаҙаштары нисек тә уның хеҙмәттәрен ташҡа баҫтырыу мәсьәләһен күтәрер, тип көтәүләне. Мәгәр бер кем дә бер ни ҙә тәҡдим итмәне. Һәм 1968 йылдың көҙөндә әсәйем З.Н. Нуриев иптәшкә мөрәжәғәт итергә йөрьәт итте. Беренсе секретарҙың күрһәтмәһе буйынса Ж.F. Кейекбаевтың фәнни һәм әҙәби ижад емештәрен нәшер итеү буйынса комиссия төҙөлдө. Хатта был хаҡта «Совет Башҡортостаны» гәзитенең 1968 йылғы 6 октябрь номерында белдереү ҙә сыҡты.


*Кейекбаева Зөһрә —студент.*

Комиссияның өс ағзаһы аҙаҡ беҙгә килде һәм атайымдың бөтә китаптарын, ҡулъяҙмаларын, ҡағыҙҙарын аҡтарып, һәр береһе икешәр төйөнсөк тотоп сығып киттеләр. Төйөнсөктәрҙә атайымдың ҡулъяҙмалары, китаптары, уның мәҡәләләре баҫылған журналдар һәм гәзиттәр – йәнәһе, бөтәһен дә нәшергә әҙерләйәсәктәр. Мин комиссия ағзалары алып китергә ымһынған мираҫтың исемлеген төҙөргә маташып ҡарағайным да, тегеләр ҡабалан ҡыланғас, эш кешеләренең ваҡытын алмайыҡ әле, тип әсәйем һөйләнеп кенә ҡалды. Алып кителгән барса мираҫтан бары тик «Туғандар һәм таныштар» романы ғына донъя күрҙе. Матбуғатҡа уны комиссия ағзаһы, шулай уҡ иртә донъя ҡуйған әҙәбиәт белгесе һәм яҙыусы Әнүр Вахитов әҙерләне. Атайҙың бүтән әйберҙәре ташҡа баҫылманы, беҙгә кире ҡайтарылманы ла.

«Введение в урало-алтайское языкозниние» китабын сығарыу буйынса КПСС өлкә комитеты бюроһының махсус ҡарары сыға. Һәм китаптың ҡулъяҙмаһы машинкала баҫылғайны ла инде. Ләкин уны нәшер итеү йәнә һуҙылды: атайым тарафынан буласаҡ монографияның библиографияһы төҙөлөп өлгөрмәгәйне. Минән башҡа был эш менән бер кем шөғөлләнергә теләмәне, үкенескә, мин ул саҡта йәш һәм тәжрибәһеҙ инем.

Әлеге китап 1972 йылда Башҡортостан китап нәшриәтендә донъя күргәс, нәшриәт етәкселеге атайымдың башҡа хеҙмәттәрен сығарыуҙан баш тартты. Имеш тә, Кейекбаевтың һәр китабына юғарынан фатиха кәрәк.

Әсәйем ҡабат обкомға, был юлы идеология буйынса секретарь Т.И. Ахунйәновҡа, мөрәжәғәт итте. «Туғандар һәм таныштар» романының әҙер вариантын тотоп барҙы. Таһир Исмәғил улы әҫәрҙе бик тиҙ уҡып, ифрат оҡшатҡан, «роман Салауат Юлаев исемендәге премияға лайыҡ» тип тә әйткән. Артабан секретарь китап нәшриәтенә романды баҫып сығарырға ҡуша һәм 1975 йылда «Туғандар һәм таныштар», ниһайәт, донъя күрҙе. Өҫтәүенә, Ахунйәнов иптәш Жәлил Кейекбаев хеҙмәттәре нәшер итеү буйынса яңы комиссия төҙөнө. Тик атай мәрхүмгә үрҙә телгә алған премия тәтемәне. Секретарҙың аңлатыуынса, комиссия үлгән яҙыусыларға премия бирелергә тейеш түгел, тип тапҡан...

Беҙ атайыбыҙҙың «Основы исторической грамматики урало-алтайских языков» исемле монографияһының нәшер ителеүен көткәйнек, әммә уның

урынына башҡа авторҙарҙың «Башҡорт теленең тарихи грамматикаһы» тигән китабы донъя күрҙе. Шуныһы: был китаптың йөкмәткеһе атайымдың ҡульяҙмаһына тап килеп тора. Ике авторҙаштың береһе Ж. Ғ. Кейекбаев мираҫы буйынса комиссия ағзаһы ине, нәҡ шул әҙәм өйөбөҙҙән атайымдың ҡульяҙмаларын алып китеп, беҙгә кире ҡайтармағайны.

Ахунйәнов күрһәтмәһе буйынса яңы комиссия төҙөлөп тә, уның да ағзалары, «Кейекбаевтың хеҙмәттәрен баҫтырыуға КПСС өлкә комитетының беренсе секретары М. З. Шакиров аяҡ сала» тигән һылтау табып, ҡыл да ҡыбырҙатманы. 1981 йылда әсәйем менән икәүләп М. З. Шакировта приемда булдыҡ. Ул беҙҙе һәйбәт ҡабул итте һәм үҙенең Ж. Ғ. Кейекбаев хеҙмәттәре хаҡында бер нәмә лә белмәүен, был хаҡта уға бер кемдең дә әйтмәүен белдерҙе. Беҙҙең күҙ алдында Шакиров «Башкнигоиздат»ҡа шылтыратты һәм Кейекбаевтың тыуыуына 70 тулыу айҡанлы уның ошоғаса баҫылмаған һәм баҫылған әйберҙәрен яңынан, фәнни һәм әҙәби эштәрен дә ҡушып, нәшер итергә ҡушты. Һөҙөмтәлә Кейекбаевтың бары тик Зөбәй Үтәғолов хаҡындағы повесы – кескәй генә брошюра һәм «Туғандар һәм таныштар» тигән романы 1981 йылда, рус теленә тәржемә ителеп, баҫылды.

Бер нисә йылдан һуң беҙҙең ғаилә партия обкомына, обком етәкселеге Кейекбаевтың бөтә хеҙмәттәрен баҫтырырға булышлыҡ итергә вәғәҙәләп, күрһәтмәләр биргәйне бит, тип мөрәжәғәт иттек. Әммә пропаганда һәм агитация бүлегенең етәксеһе У. Н. Бакиров иптәш беҙгә, Ж. Ғ. Кейекбаевтың хеҙмәттәрен нәшер итеү буйынса бер ниндәй комиссия төҙөлмәгән, был – Кейекбаевтар ғаиләһенең уйҙырмаһы, тип белдерҙе.1968 йылдағы гәзиттә «Кейекбаевтың мираҫы буйынса комиссия төҙөлдө» тигән хәбәрнамә лә, йәнәһе, ғаиләнең һорауы буйынса баҫылып сыҡҡан. Мөдирҙең әйтеүенә ҡарағанда, Башҡорт дәүләт университетынан уға, Ж. Ғ. Кейекбаевтың китап итеп сығарырлыҡ бер әйбере лә юҡ, үҙҙәренә гонорар кәрәк булған өсөн генә ғалимдың вариҫтары партия обкомын борсоп йөрөй, тип шылтыратҡандар имеш.

1996 йылда Ж. Ғ. Кейекбаевтың – «Основы исторической грамматики урало-алтайских языков» ҡульяҙмаһын ул саҡтағы фән кандидаты, хәҙер фән докторы профессор Илдус Ғөбәйҙулла улы Илишев үҙ инициативаһы буйынса нәшергә әҙерләне. Мәрхүм профессор Ж. Ғ. Кейекбаевтың баҫылмаған ошо монографияһы барлығын И. Ғ. Илишев республика матбуғатында ғалим Ж. Ғ. Кейекбаевтың фәнни хеҙмәттәре яҙмышы хаҡында публицист Шафиҡов яҙған мәҡәләләр серияһынан анығыраҡ белгән. Ғәзим Шафиҡов мин үҙенә күрһәткән һәм һөйләгән документтар, фактттар менән ҡыҙыҡһынған берҙән-бер кеше булды. Ғ. Шафиҡов аҙаҡтан Кейекбаев хаҡындағы материалдарын «Сокол, брошенный в болото» тигән баш аҫтында киң билдәле «Крючья под ребро» (Өфө, 1993 йыл) – башҡорт халҡының аҫыл улдары яҙмышы хаҡындағы китабына индерҙе.

Әлбиттә, Ж. Ғ. Кейекбаев үҙе иҫән саҡта республика властары уның фәнни-педагогик һәм ижтимағи эшмәкәрлеген, башҡорттар араһында Кейекбаев ҡаҙанған хөрмәт, совет һәм сит ил ғалимдары араһында ул яулаған билдәлелекте инҡар итә алманы. Атайыбыҙ «Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре» исемен алды, «Почет Билдәһе» һәм Ленин ордендары менән наградланды, БАССР Юғары Советына депутат итеп һайланды.

Күп ваҡытын алыуға ҡарамаҫтан, атайыбыҙ депутатлыҡ эшмәкәрлегенә бик яуаплы ҡараны. Вафатынан һуң да беҙ үҙҙәренә ярҙам ҡулын һуҙғаны өсөн Кейекбаевҡа рәхмәтле кешеләрҙе күп осраттыҡ. Һайлаусыларының һуңғы үтенесен үтәр өсөн, вафатынан аҙ ғына алдараҡ, 1968 йылдың мартында, Ғафури районына – коллективтарында айышын аңламаҫтан үҙ-ара конфликтҡа ингән

төпкөлдәге ауыл уҡытыусылары яҙған ялыу буйынса сәфәре булды. Көслө буран, рашҡы яуа, ауылға ҙур ҡыйынлыҡ менән барып етә. Ул ултырған машина көрткә сумып туҡтай, атайым ныҡ арый, үтәнән-үтә еүешләнә, аяҡтарын туңдыра, ҡыҫҡаһы, былай ҙа ҡаҡшаған һаулығын ҡаҡшата.

Наградаларға атайым тыныс ҡараны. Әммә Ленин орденына бик шатланды. Был орден илдең иң юғары ордены булған өсөн генә түгел. Эш шунда: 1967 йылда республика хөкүмәте БДУ етәкселегенә Ленин ордены менән наградлауҙы юллау өсөн ғалим кандидатураһын тәҡдим итергә фарман бирә. Филология факультетының башҡорт бүлексәһенән профессор кандидатураһы тәҡдим ителгән була, ләкин профессор Ж. Ғ. Кейекбаев түгел. Бүтән бер профессорға БДУ ректоры Ш. Х. Чанборисов әйтеп өлгөргән була, йәнәһе, уны Ленин ордены менән наградлаясаҡтар. Шат профессор филфакка килә һәм үҙенең тиҙҙән орден аласағы хаҡында бөтәһенә лә маҡтана. Был хаҡта студенттар ҙа ишетә, шунан филфактың башҡорт бүлегендә уҡыған өлкән курс студенттары, ризаһыҙлыҡ йөҙөнән, тотош делегация менән ректорға инеп, иң лайыҡлы булараҡ профессор Ж. Ғ. Кейекбаев кандидатураһын Ленин орденына тәҡдимләүҙе талап итәләр. Һәм Ленин орденын Кейекбаев ала. (Ә теге профессор атайым үлгәндән һуң барыбер ҡоһорон ҡайтарҙы: нәҡ ул, Ленин орденын алмаған әҙәм, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһын тапшырыу комиссияһы ағзаһы булған сағында мәрхүм Кейекбаевҡа «Туғандар һәм таныштар» романы өсөн премияны бирмәҫкә тәҡдим индерә.)

Атайым иһә күкрәгенә Ленин орденын таҡҡас, награданың тапшырылғаны өсөн түгел, бәлки, уның үҙенә, Кейекбаевҡа, студенттар ниндәй мөнәсәбәттә булғаны өсөн ҡыуанды. Шуға ла ул Ленин орденын властар тарафынан түгел, ә халыҡ ҡулынан алдым тип иҫәпләне.

1917 йылда большевиктар тарафынан сит илгә һөрөлгән мәшһүр рус философы И. А. Ильин бөтә халыҡтарҙы ла Алла яратҡан тип яҙған. Шулай, халыҡтың һәр вәкиленә Хоҙай үҙенең рухын һеңдергән. Ләкин халыҡ рухының тормошта бары тик гений ижадында ғына тулы сағылыш таба. Мәгәр шул уҡ Ильиндың фекеренсә, «Гений үҙенән сығып һөйләй, ләкин үҙе өсөн генә түгел, ә һәммә халҡы өсөн дә һөйләй»; һәр юҫыҡта гений «Үҙ халҡын Хоҙай ҡаршыһына ҡуя... һәм үҙ халҡының Хоҙай алдындағы тормошон раҫлай, шулай уҡ тарихтағы башҡа барса халыҡтар алдында ла раҫлай» (Ильин И.А. Почему мы верим в Россию. – М., 2007. С. 282 – 284.)

Жәлил Кейекбаев тураһында замандаштарының тос фекерҙәре тупланған йыйынтыҡ бар, төҙөүселәре – Әнүр Вахитов менән Әмир Әминев. (Жәлил Кейекбаев тураһында иҫтәлектәр, Өфө, Башҡортостан китап нәшриәте, 1989).

Жәлил Кейекбаевтың коллегаһы профессор Ғәли Сәйетбатталов остазының булмышына ошондай баһа биргән: «Кешелек йәмғиәтендә шундай бер объектив законлыҡ бар: ниндәй булһа ла халыҡ йәки милләт араһынан йөҙ йылға бер тапҡыр айырыуса талантлы, хатта бөйөк шәхестәр: әҙиптәр, ғалимдар, батырҙар сығып тора. Бындай кешеләрҙе, ғәҙәттә, халыҡ улы йәки халыҡ ҡыҙы тип йөрөтәләр. Был бөйөк исемде Жәлил Ғиниәтович Кейекбаевҡа ҡарата ла ҡулланырға мөмкин» (39 - 40).

Ошо уҡ китаптан Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаевтың шәхесенә башҡа милләт ғалимдарының ниндәй мөнәсәбәттә булыуы ла асыҡ күренә. Мәҫәлән, Яҡут дәүләт университеты профессоры Н. Антонов үҙенең мәҡәләһендә түбәндәгеләрҙе теркәй: «Профессор Кейекбаевтың лекциялары ифрат ҡыҙыҡлы, мауыҡтырғыс, иҫтә ҡалырлыҡ була торғайны. Беҙ уның белеме тәрәнлегенә, эрудицияһына, тел ғилеменең барлыҡ мәсьәләләренә лә хәбәрҙар булыуына хайран ҡалдыҡ.

Ғалим байтаҡ төрки, көнбайыш телдәрендә бик иркен һөйләшә ине. Лекцияларына Урал-Алтай телдәре ғаиләһе, шул иҫәптән яҡут, сыуаш, тунгус-маньчжур, уғры-фин һәм башҡа телдәр буйынса бик бай материал ылыҡтыра торғайны. Беҙҙең алда илебеҙҙең иң күренекле лингвистарының береһе сығыш яһағанын тоя инек инде. Уның лекциялары эшебеҙгә ныҡ йоғонто яһаны. Шул уҡ ваҡытта беҙ уның ябайлығына, киң күңеллегенә лә һоҡланыр инек. Мауыҡтырғыс әңгәмәсе, олоһо менән дә, кесеһе менән дә берҙәй үк иғтибарлы була белгән ихлас кеше ине ул. Беҙ уның менән һоҡлана һәм ярата инек» (58 - 59).



*Ж. Кейекбаев (беренсе рәттән уңда) Яҡут ғалимдары араһында. 1965 йыл.*

Быныһы күренекле татар ғалимы, Ҡазан дәүләт университеты профессоры Вахит Хаков баһаһы: «Шундай кешеләр була: улар менән осрашһаң, үҙеңдә күңел күтәренкелеге һиҙәһең, рухи яҡтан байыйһың, һүҙҙәренән мәғәнә табаһың, эшенән үрнәк алаһың һәм тормоштоң ығы-зығыһын тамам онотаһың. Жәлил Ғиниәтович кешегә ана шундай тәьҫир итеүсе, ылыҡтырыусы, үҙе артынан эйәртеүсе яҡты бер йондоҙ ине. Жәлил ағай Кейекбаевтың Ҡазанға килеүе бөтә кафедра ағзалары өсөн дә ҙур байрам ине. Ул беҙҙең ҡәҙерле ҡунағыбыҙ, яҡын кәңәшсебеҙ һәм ысын дуҫыбыҙ булып китте. Жәлил ағай тәрән фекерле, принципиаль ғалим, шул уҡ ваҡытта мөләйем һәм эскерһеҙ, тыйнаҡ, кеше күңелле кеше, йыр-моң яратыусы һәм уны башҡарыусы булып күңелдә ҡалған. Нурлы йылмайыуы уның эске матурлығы менән ҡушылғайны. Ул аҡыл эйәһе, халыҡ араһынан сыҡҡан, халыҡ тыуҙырған ҙур ғалим ине. Бәрәкәтле башҡорт тупрағы һәм киң күңелле халҡы уға көс-ҡеүәт бирҙе, үҫтерҙе һәм күренекле белгес итеп етештерҙе».

Ҡыҫҡаһы, Жәлил Кейекбаев үҙенең яҙмышы һәм булмышы, титаник эшмәкәрлеге, әҙәби таланты, педагогик һәләте менән Хоҙай алдында ла, туған халҡы, башҡа милләттәр алдында ла үҙенең ысын кеше, ысын башҡорт икәнлеген шанлы раҫланы.

Беҙҙең заманда вуз преподавателдәре студенттарҙың белем кимәле һайлығына, уҡытыуҙың сифаты кәмеүенә зарлана. Улар йәштәрҙең фән менән әүҙем шөғөлләнмәүен дә һуҡранып телгә ала. Ләкин йәштәргә улар өлгө алырлыҡ үрнәк тә кәрәк бит.

Быйыл ғалим һәм яҙыусы Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаевтың тыуыуына 100 йыл тулды. Кейекбаев хаҡында ғилми хеҙмәттәр, тәнҡит мәҡәләләре, иҫтәлектәр яҙылған, ғилми ғәмәли конференцияла ғалимдар профессор Кейекбаевҡа арналған докладтар менән сығыш яһаны. Үкенесә күрә, Жәлил Кейекбаевтың 100 йыллығына уның үҙ ғилми хеҙмәттәре ташҡа баҫылманы. Яҡташтары ла, шәкерттәре лә профессорҙың ғилми эштәрен, әҙәби ижад емештәрен сығарыу зарурлығын күтәреп сыҡманы. Атайым үҙе хаҡында ҡабартып һөйләүҙе, исемен фәстереүҙе хушһынманы, сөнки ул фән менән үҙен маҡтаһындар өсөн шөғөлләнмәне, ә мотлаҡ фәндең үҙе һәм халыҡ өсөн хеҙмәт итте. Республика етәкселегенә яҙған мөрәжәғәттәренең береһендә ул былай тигән: «Ғалим өсөн



*Кейекбаев Искәндәр. 1968 йыл.*

төп ҡыуаныс – уның хеҙмәттәренең нәшер ителеүе, мәгәр мин ошо ҡыуаныстан мәхрүм».

Ғилми йәмәғәтселектең Ж. Ғ. Кейекбаев хеҙмәттәрен баҫыуға битараф булыуын күреп, быйыл йәй мин Ильяс ағайым менән Президентыбыҙ Р. З. Хәмитовҡа, Жәлил Кейекбаевтың ғилми һәм әҙәби хеҙмәттәре йыйынтығын (тәүге мәртәбә!) нәшерләүҙә булышлыҡ итеүен үтенеп, хат менән мөрәжәғәт иттек. Беҙҙе Премьер-Министр урынбаҫары З. Й. Рәхмәтуллина ихлас ҡабул итте һәм мәсьәләне киләһе йылдарҙа уҡ бойомға ашырыу мөмкинлеге барлығын белдерҙе.

Жәлил Кейекбаевтың мираҫын ғына, бигерәк тә йәштәр Кейекбаевтың идеялары, фекерҙәре, ҡараштары, кисерештәре менән киң таныша ала. Шул саҡта ғына йәштәрҙән кемдер Жәлил Кейекбаевҡа – уның үҙенә һоҡланғыс башҡорт шағиры Рәми Ғарипов шиғри йыйынтығын бүләк иткәндә яҙған автографын ҡабатлап: «Беҙ – Һеҙ сәскән орлоҡтарҙың шытымы», – тип әйтәсәк.

Йәшлектәрендә атайым менән әсәйем үлгәнсе бер-береһенән айырылмаҫҡа вәғәҙәләр биргән. Атайым 1968 йылда дауаханала әсәйемдең ҡулында йән бирҙе. Әсәйебеҙ үҙе егерме йылдан һуң – 1988 йылдың мартында күҙҙәрен йомдо. Хәҙер улар – мәңге бергә, баш ҡалабыҙҙың Мосолман зыяратында йәнәш ерләнгәндәр. Улар янында һөйөклө оло улдары Искәндәр ҙә ята, вафаты – 2009 йыл.

***

Миңә ҡай саҡ атайымдың йәне уның тыуған тупрағында – Ғафури районындалыр һымаҡ тойола. Байтаҡ йылдар элек, балаларым сабый ғына саҡта әле, мин уларҙы Жәлил олатайҙарының йәнтөйәгенә тәүге тапҡыр алып барҙым. Балаларҙы оҙайлы сәфәр йонсотто, Сәйетбабаға барыусы автобус тынсыу ине, аҙаҡ балалар мыжый башланы һәм саңлы урамдан Ҡаранйылғаға табан көскә атланылар. Ирекһеҙҙән мин уларға: «Тынысланығыҙ, беҙ олатайығыҙ мең тапҡыр тапаған юлдан китеп барабыҙ, – тинем. – Ағас аяғында ҡултыҡ таяҡтарына таянып, ул нәҡ ошо юлдан тәүҙә Сәйетбаба ауыл башланғыс мәктәбенә, һуңынан Красноусол, Маҡар мәктәптәренә, һуңынан – Өфө педтехникумына, шунан инде Мәскәү институтына юллана. Нәҡ ошо юлдан Жәлил олатайығыҙ Ҡаранйылғаға, тыуған өйөнә ҡайтып йөрөй. Бында уның күңеле гелән тартылып торҙо. Хатта ғүмеренең аҙаҡҡы йылдарын ошонда уҙғарырға теләне». Мине тыңлап, өҫтәүенә, үҙҙәренең Жәлил Кейекбаев урамынан атлауҙарын аңғарып, балаларым шыңшыуҙан туҡтаны.

Ике ауыл араһындағы ҡабаҡ башына менгәс, юл һарҡыуға тартыла, ана, Ҡаранйылға эргәлә генә. Бейек тирәктәр араһында өйҙәрҙең ҡыйыҡ баштары шәйләнә. Ауылды урман ҡаплаған тау армыттары, гүйә, ҡулсаға ҡыҫҡан. Атайым «Туғандар һәм таныштар» романында ошо юлды бер нисә тапҡыр һүрәтләй. Иң мөһиме, бында һауалар шундай саф. Мәндем һәм Ҡаранйылғаның һуйырташлы шаршылары гәлсәр, теш ҡамаштырғыс һалҡын һыуҙарын олораҡ йылғаларға ашыҡтыра.

Балалар шат ауаздар сәсеп, дымһыу ҡырсынға йүгереште. Хәтергә төштө:

ауылға ҡайтҡан һайын атайым иң тәүҙә тау йылғаһы һыуы менән битен сайған, шунан ус тултырып, яйлап ҡына уртлаған. Шунан инде юлаусы бөтөнләй икенсе ҡиәфәткә керә: оҙон-оҙаҡ юлдан һуң арыуҙары кәмей, йөҙө яҡтыра, йәшәреп һәм ихласланып киткәндәй тойола. Ул инде түрә-ҡара, партия функционерҙары, көнсөлдәр, үҙен аңламаусылар, донъя мәшәҡәттәренән азат саҡта ҡайта. Ошонда ғына атайым үҙен рухи яҡтан иркле тоя, ошонда ғына ул күкрәк тултырып һулыш ала.

Балаларым ҡырсында уйынға кереште, мин дә ҡояшта йылынған яҫы таштарҙың береһенә сүгәләнем. Тирә-яғыма әйләнеп ҡараным да, өлкән ағайҙарым менән үҙемдең дә, үткәнде ошо ярлауҙа уйын ҡорғаныбыҙҙы хәтерләнем. Эргәбеҙҙә – үҙҙәре матур, йәш һәм күңелсәк атайым менән әсәйем...

Атайыбыҙ 1954 йылдың йәйендә, Мәндемдең текә шыума ярында баҫып торған сағында  яҙатайым һыуға ҡолай. Шунан бирле ауылдаштары әлеге ҡыразға «Жәлил яры» тигән атама йәбештерә.

Балалар һыу сәсрәтеп, таш бәргесләп уйнай, мин иһә тирә-яҡ тәбиғәткә һоҡланыуҙан туҡтамайым. Ана, болотһоҙ зәңгәр күктә, бик юғарыла, тау яғынан бер-береһенә ике бәләкәй генә нөктә яҡыная. Тиҙҙән был ике нөктә ике ҡошҡа, күрәһең, шоңҡарға әүерелде, береһе икенсеһенән күпкә ҙурыраҡ ине. Дәүерәге кесеһенең аҫтынан осоп барышлай ҡанаттарын киң яҙып, бәләкәс ҡошҡа, ҡанат остарына тулҡын бөркөп, осорға ярҙам итә ине. Күренеп тора, шоңҡар ҡошсоғон талпынырға өйрәтә. Быңа улар йылы елдәр иҫкән үҙән буйына осоп килделәр. Оло ҡош әле тегеләй, әле былай ҡайырылып, алыҫҡа тайшанмай ғына бәләкәсенең үҙ ҡанаттарын ныҡлығын нисек һынап ҡарағанын күҙәткән һымаҡ. Ҡошсоҡ йәнтәслим ҡанаттарын елпеһә лә тиҙ арыныуы, ул быңа-быңа таш һымаҡ ергә ҡолап төшөр кеүек тә тойолдо. Ләкин оло шоңҡар, ҡанаттарын тағы ла киңерәк һелтәп, яңынан балаһы аҫтынан осто, ҡабат балаһының мөсһөҙ ҡанаттарына һауа тулҡыны һирпте. Һәм, ғәжәп, ҡошсоҡ ҡоламаны, йәнә үҙ хәсиәтендә, үҙ мөхитендә талпынды. Ниңәлер шул саҡ ошо ғәйрәтле ҡошто атайыбыҙҙың йәненә оҡшаттым. Шул саҡ атайымдың йәне махсус осоп килмәнеме икән, тип тә уйланым... Һауаларҙан үҙенең ҡыҙына һәм ейәндәренә ҡарар өсөн, үҙенең һәр ваҡыт беҙҙең менән бергә икәнлеген раҫлар өсөн, үҙ һөйөүе һәм ҡанаттары гелән беҙгә таяныс икәнлеген күрһәтер өсөн. Хәҙер ҙә инанам: Жәлил Кейекбаевтың йәне уның төйәгендә, сал тауҙар, йәмле урмандар һәм шарлап аҡҡан йылғалар араһында...

Атайымдың документтары һаҡланған архивҡа аяҡтарым бушҡа ғына тартылмағандыр, тим, миңә бөтә документтар ҙа таныш ине, ләкин атайым менән әсәйемдең хаттары мине уларҙың йәшлеге  менән көтмәгәндә осраштырҙы. Һәм мин был хаттарҙы матбуғатҡа бирергә тәүәккәлләнем. Әйҙә, тинем, атайымдың егет сағындағы рух көсө, күңел киңлеге, әле генә мин хәтергә алған шоңҡар һымаҡ, йәш быуындың ҡанаттарына көс-илһам өҫтәһен, тыуған ергә, туған халҡына, теленә, йырҙарына, ғөмүмән, тормошҡа ыҫын кешеләрсә яратыу һауаһын бөркһөн.

**Аңлатмалар һәм комментарийҙар**
**авторы – Зөһрә Жәлил ҡыҙы КЕЙЕКБАЕВА.**

**Руссанан башҡортсаға С. ШӘРИПОВ тәржемә итте.**

## БЫУАТТАР МЕНӘН КҮҘЛӘШЕРГӘ КИЛЕГЕҘ!

XIX быуаттың беренсе яртыһында Рәсәйҙең үҙәк районларында һәм окраиналарҙа ла мәғариф, фән, мәҙәниәт һиҙелерлек алға китеп, ошондай уҡ хәл Өфө ҡалаһында ла күҙәтелә. Уның губерна үҙәгенә әүерелеүе, халыҡтың артыуы, сәнәғәт һәм сауҙаның үҫеше, урындағы хакимиәт менән сиркәүҙең әҙерлекле кадрҙарға мохтажлығы тәүге уҡыу йорттары, китапханалар, типография һәм ваҡытлы матбуғаттың барлыҡҡа килеүенә булышлыҡ итә. Мәҫәлән, 1789 йылдың сентябрендә баш (главный) халыҡ училищеһы асыла, 1799 йылда кесе (малое) училище Ырымбурҙан Өфөгә күсә һәм 1818 йылдан «Өфө өйәҙ училищеһы» тип атала башлай, 1828 йылда – губерна гимназияһы, 1860 йылда ҡаҙна ҡатын-ҡыҙҙар училищеһы уҡыусылар ҡабул итә. 1836 йылда – беренсе асыҡ (публичная) китапхана, 1801 йылда губерна матбағаһы эшкә тотона, 1838 йылда „Уфимские губернские ведомости“ гәзитенең тәүге сығарылышы донъя күрә һ.б.

1834 йылда Өфөлә губерна статистика комитеты эш башлап, музей тарихының беренсе битен аса. XIX быуаттың 60-сы йылдарында статистика комитеттары, губерна канцелярияһы комитеттарынан айырмалы, юғарыраҡ статусҡа эйә булып, губерна тормошо һәм эшмәкәрлегенә ҡағылышлы статистик мәғлүмәттәр йыйыу менән бергә анализлау менән дә шөғөлләнә. Мәҫәлән, халыҡтың тормош-көнкүреше, урындағы тәбиғи байлыҡтар, сәнәғәт эшмәкәрлеге һ.б. мәғлүмәт крайҙа тәү башлап йыйыла.

Рәсәйҙә был осорҙа статистика комитеттары ҡарамағында музейҙар ойоштороу тәжрибәһе бер ни ҡәҙәр булған. Өфөлә лә шундай музей ойоштороу башланғысын статистика комитетының бер нисә ағзаһы күтәреп сыға һәм губернатор Г. С. Аксаковтың яҡлауын таба. Өфө губерна музейының 1891 йылда музей комитеты ағзаһы А. А. Пеккер тарафынан төҙөлгән тарихи очеркында шундай юлдар бар: „Был эште башлап барыусы (йәғни музейҙы ойоштороусы) ул саҡта элекке губернатор Г. С. Аксаков, статистика комитеты ағзалары К. А. Бух, Н. А. Гурвич, А. А. Пеккер, В. И. Власовтар булды“. Өфө губерна музейының 1888 йылдың 21 ғинуарында дәүләт милке министры тарафынан раҫланып, 1893 йылдың 14 июлендә өҫтәмәләр индерелгән уставында (8-се параграф), музейҙы ойоштороусы Г. С. Аксаков, К. А. Бух, А. Б. Иваницкий, Н. А. Гурвич комитет составында индерелеп, абруйлы ағзалар тип танылa, тигән юлдар бар.

1864 йылдың 23 апрелендә статистика комитеты ағзаларының дөйөм йыйылышы уҙа. Унда музей ойоштороу зарурлығы тураһында доклад менән Н. А. Гурвич сығыш яһай. Музей тәбиғәт байлыҡтары, завод һәм сәнәғәт, ауыл хужалығы эшмәкәрлеге ҡаҙаныштарын, губернала йәшәгән халыҡтың тормош-көнкүреше һүрәтләгән хәҙерге һәм боронғо кейем-һалым өлгөләрен туплаған даими эшләүсе күргәҙмә булып күҙ алдына килә, тигән докладсы. Шул уҡ ваҡытта Н. А. Гурвич фекеренсә, төрлө өлгөләр тупланмаһы булараҡ музей ғилми эш алып барырға ла мөмкинлек тыуҙырырға тейеш, сөнки губернаның төрлө ҡаҙылма

байлыҡтары менән башҡаларҙан ныҡлы айырылыуы уның Рәсәйҙә иң ҡыҙыҡлы музейға әүреләсәгенә ышандыра.

Ошо ваҡиғанан һуң музей өсөн экспонаттар йыйыу башлана һәм ул бик тиҙ ойошторолоп, 1864 йылда ирҙәр гимназияһының бер бүлмәһендә ауыл һәм урман хужалығы, урман тау-завод сәнәғәте өлгөләре нигеҙендә бүлек эшкә лә тотона. Артабан музейҙың коллекциялары тағы ла күбәйә. 1865 йылдың көҙөндә ул Мәскәүҙә үткәрелгән Рус этнографияһы күргәҙмәһендә ҡатнашып, дипломға лайыҡ була. Гимназия бинаһына халыҡ иркен инеп йөрөй алмағанлыҡтан, музей артабан да унда ҡала алмай. Шул йылдың 15 октябрендә уның үҙ бинаһы проектын эшләргә кәрәклеге хаҡында фекер тыуа. 1867 йылда Өфөгә яңы губернатор С. П. Ушаков килә һәм, А. А. Пеккерҙың хәбәр итеүенсә, был маҡсатта сауҙа майҙанындағы бер ҡатлы таш бинаны файҙаланырға мөмкин булыуын әйтә. Шулай итеп, музейҙың үҙ бинаһы табылып, икенсе ҡаты ла төҙөлә башлай, ләкин, төҙөлөш өсөн бурыстар күбәйеү арҡаһында, бинаны 1886 йылға тиклем ҡуртымға биреп торорға мәжбүр булалар.

Музейҙың археология бүлеге ҡәберлектәр һәм ҡурғандарҙан табылған бронза дәүеренә ҡараған предметтарҙан торған. Уларҙы эҙләп табыу менән статистика комитеты ағзаһы, Мейәс приискылары мөдире полковник Романов шөғөлләнгән. Статистика комитеты ағзаһы Р. Игнатьев та ҡурғандарҙы асыҡлау, ҡаҙыныу эштәре менән шөғөлләнеүгә күп ваҡыт сарыф иткән. 1874 йылда Минзәлә полиция идаралығы Дербедень ауылы эргәһендәге урманды сәсеүлеккә әйләндереү өсөн төпләгән мәлдә табылған бронза дәүерендә хеҙмәт ҡоралдары ролен үтәгән әйберҙәр тапшырған. 1890 йылда Түләбай ауылы башҡорто тапшырған тимер кейем дә музейҙы байыта.

Төрлө мөйөштәрҙән ҡыҙыҡлы табылдыҡтар килеүе йылдан-йыл арта. 1878 йылда алпауыт Новиков Өфөнән ике саҡрымдағы дачаһында ҡаҙыныу эштәре алып барғанда табылған 50 алтын һәм көмөш әйберҙәрҙе музейға килтереп бирә. Өфөнөң үҙендә Семинария тауы эргәһендәге бер ҡәберҙә мәрйендәре алма һәм грек сәтләүеге дәүмәлендәге янтарь муйынсаҡ килеп сыға. Алма ҙурлығындағы бер мәрйенде кемдер һатып ала ла элекке губернатор С. П. Ушаков исеменән музейға бүләк итеп тапшыра. Өфөнән ун саҡрымдай ситтә урынлашҡан Базилевка дачаһында Минзәлә яғынан килтерелгән бронза ураҡтарға оҡшағаны табыла. Бөрө ҡалаһының Ағиҙел ярындағы ҡурғандарҙан да бронзанан яһалған һөңгө осо, ике ҙур төймә килеп сыға. Кама йылғаһының Һаҡлау ауылы дачаһында табылған таш быуатҡа ҡараған тимер балта ла музейға килеп юлыға.

Музейҙың биҙәлешен яңыртыуға билдәле башҡорт мәғрифәтсеһе, шағир һәм ғалим Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев та ҙур өлөш индергән. 1887 йылда Себер-Урал күргәҙмәһендә ҡатнашып, музей коллективы этнография буйынса көмөш миҙал яулай. 1893 йылда музей экспонаттары Чикаго (АҠШ) ҡалаһында үткән ауыл хужалығы күргәҙмәһендә лә ҡатнаша, хатта бронза миҙалға лайыҡ була. Күргәҙмә экспонаттарын нишләптер урындағы музейға бүләк итеп тапшыралар. 1910 йылда Ҡазанда нумизматика күргәҙмәһендә ҡатнашып, музей император ғаиләһенең маҡтау грамотаһын ала.

1917 йылғы Октябрь инҡилабы һәм Граждандар һуғыш йылдарында музейҙың әүҙем ағзаһы А. А. Черданцев һәм З. Шакиров ярҙамында Өфө зыялылары музей экспонаттарын һаҡлау өсөн күп көс һала. 1919 – 1921 йылдарҙа, Өфө губерна музейы фондын файҙаланып, „Метрополь“ ҡунаҡханаһы (хәҙер Ленин урамы, 4-се йорт) бинаһында көнсығыш халыҡтарының тарихи-социаль музейын ойошторорға маташып ҡарайҙар. Ләкин, аҡса етмәү һәм Мәскәүҙәге музей эштәре буйынса үҙәк комиссияның кире мөнәсәбәте арҡаһында, музей асылмай. 1920 йылда губерна музейы фондының китаптары (улар мең дананан

ашыу) нигеҙендә художество музейы эш башлай. 1922 йылда Башҡортостанды өйрәнеү буйынса Фәнни йәмғиәт-академик үҙәк ойошторолоп, артабан Башҡортостанды өйрәнеү йәмғиәте исеме аҫтында эш итә. Уның базаһы булып Башҡортостан үҙәк крайҙы өйрәнеү музейы тора. 1923 йылда музей коллективы Мәскәү ҡалаһында үткән Бөтә Рәсәй күргәҙмәһендә ҡатнаша.

1926 йылдың октябрендә Үҙәк музей Октябрь революцияһы урамындағы иркенерәк һәм ҡулайлыраҡ 10-сы йортта урынлаша, 1989 йылдың декабренә тиклем шунда эшләп, 63 йыл буйы халыҡ араһында мәғрифәтселек эше менән шөғөлләнә. 1927 йылда Башҡортостанды өйрәнеү йәмғиәте мәғариф халыҡ комиссариаты һәм Башҡортостан үҙәк крайҙы өйрәнеү музейы менән берлектә республиканың тыуған яҡты өйрәнеүселәренең беренсе йыйынын уҙғара. 1928 йылда музейҙың ғилми хеҙмәткәрҙәре академик Н. Дмитриев етәкселегендә СССР Фәндәр академияһы Тамъян-Ҡатай һәм Йылайыр райондарында ойошторолған лингвистик-фольклор экспедицияла ҡатнаша.

1933 йылда, РСФСР Мәғариф халыҡ комиссариатының „Музей экспонаттарын ҡуйыу тәртибе“ тураһындағы күрһәтмәһенә ярашлы, крайҙы өйрәнеү музейы үҙгәртеп ҡорола. Экспонаттар хәҙер өс: тәбиғәт, тарих һәм социалистик төҙөлөш бүлектәренән тора. 30-сы йылдарҙа милли райондарҙа музейҙар ойоштороуға айырыуса иғтибар бүләләр. 1933 йылдың 20 авгусында Бөтә Рәсәй Үҙәк башҡарма комитеты (ВЦИК) „Автономиялы республикалар һәм автономиялы округтарҙа музейҙар ҡоролошо һәм бурыстар тураһында“ ҡарар сығара. Унда Башҡортостан музейҙарының ҡарар талаптарына яуап бирмәүе иҫкә алына.

1941 – 1945 йылғы Бөйөк Ватан һуғышы республиканың үҙәк музейына төҙәтә алмаҫлыҡ зыян килтерә. Көнбайыш төбәктәрҙән күсерелгән ойошмаларҙы урынлаштырыу өсөн биналар етмәгәнлектән, музей экспонаттары иҫке һарайға күсерелә һәм һуғыш тамамланғанға тиклем шунда ята. Экспонаттарҙы бер өлөшө сереп юҡҡа сыға, күпмелер өлөшө юғала. Һуғыш йылдарында экспонаттарҙың яртыһы әрәм була. Һуғыштан һуңғы йылдарҙа музей коллективы халыҡ араһында ағартыу эшен дауам итә. Ғилми хеҙмәткәрҙәр археологик, этнографик экспедицияларға йөрөй, Башҡортостанда музейҙар селтәре киңәйә. 1960 йылдың 28 ноябрендә Крайҙы өйрәнеү музейында РСФСР-ҙың автономиялы республикалар һәм автономиялы округтарҙан музей хеҙмәткәрҙәренең семинары уҙғарыла.

1970 – 1980 йылдарҙа республиканың ҡала һәм райондарында музейҙар асылыуы дауам итеп, улар Крайҙы өйрәнеү музейының филиалдарына әүерелә. Филиалдарға етәкселекте камиллаштырыу маҡсатында, 1984 йылдың 11 ноябрендә Республика крайҙы өйрәнеү музейы үҙенә 14 филиалды берләштереп, «Башҡортостан дәүләт берләштерелгән музейы» тип атала башлай. 1993 йылда БР Министрҙар Советының ҡарары менән музейға «Башҡортостан Республикаһы Милли музейы» тигән исем бирелә. Уның составына 34 филиал менән бергә Тарихи мәҙәни комплекс һәм Интернациональ дуҫлыҡ музейы ла инә. 1989 йылда музейға элекке ВЛКСМ өлкә комитеты һәм БАССР Юғары Советы Президиумының Совет урамындағы 14-се йортта урынлашҡан бинаһы бирелһә лә, төрлө сәбәптәр араһында уны ҡулайлаштырыу эштәре һуҙылып, ул 2004 йылдың 17 июнендә генә эшләй башлай. Бөгөн унда 34 экспозиция һәм күргәҙмә залы бар. Башҡортостандың тәбиғәте, тарихы, археологияһы, этнографияһы, ғөмүмән, бай үткәне һәм бөгөнгөһө менән ентекле танышырға мөмкин.

**Мәхмүт ХУЖИН әҙерләне.**

# ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!



*«Ағиҙел» һеҙҙе рухиәтебеҙ һағында торған, ошо йүнәлештә арымай-талмай хеҙмәт иткән кешеләр менән таныштыра килә. Был юлы әңгәмәсебеҙ – Төркиәлә Халыҡ-ара төрки халыҡтары мәҙәниәте ойошмаһында (ТӨРКСОЙ) Башҡортостан вәкиле булып эшләгән тарих фәндәре кандидаты Әхәт Сәлихов.*

**– Әхәт Ғөбәй улы, үҙегеҙ менән таныштырып үтмәҫһегеҙме: ҡайҙа тыуҙығыҙ, ҡайҙа үҫтегеҙ? Һеҙ тыуған, йәшәгән мөхит хаҡында ла белергә теләр инек...**

– Күгәрсен районының Оло Эйек буйында урынлашҡан Бикеш ауылында тыуғанмын. Әсәйем Гөлбикә оҙаҡ йылдар һатыусы, унан һуң көнкүреш хеҙмәте селтәрендә эшләне. Атайым Ғөбәй механизатор, слесарь, тимерсе булды. Икеһе лә эштәрендә маҡталып, хеҙмәттәре баһалы, кешеләр араһында йөҙҙәре яҡты ине. Ғаиләбеҙҙә беҙ дүрт бала үҫтек: ике ағайым, бер һеңлем бар. Атайымдың атаһын, Ғүмәр ҡартайымды, тик ололарҙың һөйләүҙәре һәм фотоһы буйынса беләм. Ул бик оҫта кеше булған, Беренсе Донъя һуғышында аяғынан яраланыуы арҡаһында, аҡһап йөрөгән. Әсәйем – Бостобай ауылына нигеҙ һалыусы исәпләнгән Бостобайҙың ейәндәренән Саҙретдиндың ҡыҙы. Олатайымды бик нык ярата торғайныҡ. Ул Граждандар һуғышы йылдарында, аҡтар менән бергә сигенеп, Ҡытайға барып сыҡҡан. Күпмелер ваҡыт шунда йәшәп, тыуған яғына кире әйләнеп ҡайтҡан. Ауылда ата-әсәһе лә көтөп тормай – икеһе лә вафат, йәшәр өйҙәре лә ҡалмаған була. Ике туған ағаһына килеп һыйынып, бер аҙ ваҡыттан үҙенә ситәндән өй үреп, башҡа сыға, Тирмән ауылында элек бик хәлле генә йәшәгән бер ғаиләнең Байрамбикә исемле ҡыҙына өйләнә. Өләсәйемдең алтын ҡуллы, оҫта тегенсе тигән даны таралған. Саҙретдин олатайымдың ҡәйнәһе: “Бына хәҙер бабай минең нисек эшләгәнде күрһә ине”, – тип гел әйтә торған булған. Атайымдың әсәһе, йәғни минең ҡәрсәйем дә, Бостобай ауылыныҡы. Уның Өфөлә бер ағаһы нарком булып эшләгән, һуңынан репрессияға эләккән. Ул тыуған яҡтарына ҡайтҡанда Бикешкә кейәүгә сыҡҡан һеңлеһенә лә килгеләгән. Атайым өсөн шул ваҡытта уның автомобилендә ултырып йөрөүе ҙур ваҡиға булған.

"Ағиҙел" ҡунағы

Әсәйем тәүҙә тыуған ауылында уҡый, һуңынан – Нуҡайҙа, урта мәктәпте иһә Мораҡта тамамлай. Уҡыу өсөн йәйен йәйәү, ҡышын саңғы менән ун биш саҡрымдан артыҡ араны үткән. Ата-әсәйем – һуғыштың ауырлыҡтарын да күргән быуын балалары.

Башланғыс белемде тыуған ауылымда алдым, һуңынан уҡыуымды күрше Сәйетҡол ауылында дауам иттем, урта мәктәпте лә шунда тамамланым. Сәйетҡол урта мәктәбе – Башҡортостандың иң боронғо мәктәптәренең береһе. 1853 йылда кантон үҙәге бинаһы итеп төҙөлә. Рус-башҡорт училищеһы, балалар йорто, мәктәп була. Көньяҡ Башҡортостандың бик күп кешеләре бында белем алған. Мәҫәлән, танылған телсе, Башҡортостан Фәндәр академияһы мөхбир ағзаһы Ғәли Сәйетбатталов Сәйетҡолда тыуған һәм ошо мәктәптә уҡыған. Граждандар һуғышы йылдарында был бинала штаб урынлашҡан, Зәки Вәлиди һәм көрәштәштәре лә ошонда йыйылышҡан. Зәйнәб Биишева ла бында уҡыған. Беҙҙең класыбыҙ Советтар Союзының ике тапҡыр Геройы Муса Гәрәев һәм профессор Ғәли Сәйетбатталов менән хатлашты. Әйткәндәй, класташтарымдың күбеһе юғары белемле.

Минең ҡайным менән ҡәйнәм дә ошо мәктәптә ғүмер буйы уҡытыусы булып эшләгән.

**– Фән менән ҡасан шөғөлләнә башланығыҙ? Ниндәй хеҙмәттәрегеҙ бар?**

– Мәктәптә уҡыған ваҡытта уҡ тарих менән ҡыҙыҡһындым. Боронғо әйберҙәр йыя торғайным, тарих түңәрәгенә йөрөнөм. Китап уҡырға яраттым. Аҙнаһына бер нисә китап уҡып бөтөрә торғайным. Боронғо ваҡиғалар, ауылыбыҙ тарихы тураһында ололарҙың һөйләгәндәрен тыңларға яраттым, ҡайһы берҙәрен яҙып алдым. Кистәрен ауылда ултырмаға йөрөү йолаһы була ине. Шул ваҡыттарҙа күп ҡыҙыҡлы әйберҙәр ишеттем. Мәктәптә уҡығанда уҡ халыҡ ижады үрнәктәрен дә йыя башланым. Әсәйем, атайым, Тәнзилә инәйем, Миңнетдин олатайым – ғөмүмән, ололар һөйләгәндәрҙе яҙып алдым. Башҡорт дәүләт университетына инергә теләнем. Тик конкурстан үтә алманым. Бер йыл ауылда, “Исем” совхозында, эшләгәндән һуң, Совет Армияһында, Сахалин утрауында, хеҙмәт иттем. Ваҡытында был утрауҙа атайым да “һалдат һурпаһын эскән”. Часыбыҙҙың командованиеһы ата-әсәйемә бер нисә тапҡыр рәхмәт хаты ебәрҙе. Ҡайтыр ваҡытта мине частың Почет китабына индерҙеләр.

Ҡайтҡас бер йыл тирәһе йәнә совхозда эшсе булып эшләнем. Шунан Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институтына уҡырға индем. Саҡырыу килгәндә беҙ атайым менән бесән ташый инек. Эш араһында ял иткәндә яңы гәзит алып уҡырға теләнем. Институттан хат килгән икән. Барыбыҙ ҙа бик шатландыҡ. Бер нисә көндән Стәрлегә юлландым.

Юғары уҡыу йортонда белем алғанда мин башҡа факультетта уҡытҡан филология фәндәре кандидаты Миҙхәт Мәмбәтов менән таныштым. Институт китапханаһында ваҡыты менән яңы килгән китаптар күргәҙмәһе асыла торғайны. Шул күргәҙмәлә таныштым мин уның менән. Ул минең ғәрәп графикаһындағы ҡулъяҙмаларҙы үҙ аллы өйрәнеп, яҡшы уҡыуымды, боронғо ҡулъяҙмалар, фән менән ҡыҙыҡһыныуымды күргәс, һине бер барғанда Өфөгә, Фәндәр академияһына, алып барам, тине. Шулай итеп, уның аша академия ғалимдары менән таныштым.

Үҙем йыйған боронғо китаптарым бар ине. Һеңлем кейәүгә сыҡҡас, ҡоҙамдың коллекцияһы менән таныштым. Унан Әхмәтзәки Вәлидиҙең бик күп әҫәрҙәрен алып уҡыным, бер өлөшөн хәҙерге телебеҙгә әйләндерҙем. Тик бик күп йылдар үткәс кенә мин уларҙы баҫтыра алдым. Тарих бүлеген тамамлағанда яҙған диплом эшем Вәлидиҙең Рәсәйҙәге ғилми тикшеренеүҙәренә бағышланды.

Был тема өҫтөндә эшләүемде Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтына эшкә урынлашҡас та дауам иттем. Төркиәлә Мимар-Синан университетында Социаль белемдәр институты магистратураһын тамамлау диссертацияһы һәм тарих фәндәре кандидаты дәрәжәһенә өлгәшеү өсөн яҙылған диссертация менән дә ошо теманы тәрәнәйттем. Вәлиди әҫәрҙәре йыйынтығын, үҙемдең тикшеренеүҙәремде русса, башҡортса, төрөксә, Риза Фәхретдиновтың нәсихәттәрен ғәрәп графикаһынан хәҙерге башҡорт теленә әйләндереп, Төркиәлә Аҡмулла, Мәжит Ғафури шиғырҙары йыйынтыҡтарын, “Башҡорт шәжәрәләре” китабын, Төркиәлә һәм Башҡортостанда ҡайһы бер ғилми нәшерҙәрҙең донъя күреүендә ҡатнаштым. Үҙемдең төрлө күләмдәге мәҡәләләремде, йыйған халыҡ ижады үрнәктәрен ҡушып баҫтырҙым. Байтаҡ ҡына ғилми тикшеренеүҙәрем һәм төрөк, рус, башҡорт һәм башҡа төрки телдәренә яһалған тәржемәләрем бар.

Әйткәндәй, беҙҙең курсыбыҙың өстән бер өлөш студенттары әлеге көндә фән кандидаты дәрәжәһенә өлгәште.

**– Төрөк телен ҡасан өйрәндегеҙ?**

– ТТӘИ-лә тәүге йыл тел бүлегенең көнсығыш ҡулъяҙмалары бүлексәһендә стажер булып эшләй башлаған йылда Башҡорт дәүләт педагогия институтына Германияның Азатлыҡ университетынан төрөк телен уҡытыу өсөн Маргарет Эрсен-Раш һәм Хәйретдин Сәйхан исемле уҡытыусылар килде. Мин уларҙан тәү башлап төрөксә өйрәнә башланым.

Төркиә, Зәки Вәлиди хаҡында иһә мәктәптә уҡыған саҡта уҡ белә инем. Атайым, әсәйем, төрлө рәсми гәзиттәрҙе уҡырға яратҡан Мәрйәм инәйҙең һөйләшеүҙәрен әле лә хәтерләйем. Милли хәрәкәт, Вәлидиҙең Төркиәлә үлеүе хаҡындағы хәбәрҙе уларҙан ишеттем.

**– Халыҡ-ара төрки халыҡтары мәҙәниәте ойошмаһына (ТӨРКСОЙ) эшкә килеү, ундағы хеҙмәткәрҙәр менән танышыу ваҡытын, эшкә өйрәнеү, тәжрибә туплау дәүерҙәрен ентекләп һөйләһәгеҙ ине…**

– Бер ваҡыт Иҫәнбикә Туғандан, ТӨРКСОЙ-ға Башҡортостан вәкиле эҙләйҙәр, тип ишеттем. Тикшеренеү темаларым, ҡыҙыҡһыныуым Төркиәгә, Вәлиди, башҡорт эмигранттарына бәйле булғас, барып бер аҙ эшләп, материал, сығанаҡтар туплап ҡайтҡым килде. Ул ваҡытта мин Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының ғилми секретары булып эшләй башлағайным. Конкурсты үттем һәм әсәйемдең, ғаиләмдең, эш урынымдың фатихалары менән ТӨРКСОЙ-ҙа Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығының вәкиле булып эшләй башланым. Яңы урынымда ла, Аллаға шөкөр, уңышлы ғына эшләп киләм. Коллегаларым, етәкселәрем эшемдән ҡәнәғәт. Шулай булғас, мин дә рәхәтләнеп эшләйем.

**– Ғөмүмән, ТӨРКСОЙ нимәләр менән шөғөлләнә?**

Халыҡ-ара төрки халыҡтары мәҙәниәте ойошмаһы (ТӨРКСОЙ) 1993 йылда барлыҡҡа килгән. Ул ойошторолған ваҡыттан башлап Башҡортостан Республикаһы Мәҙәниәт министрлығы уның күҙәтеүсе ағзаһы сифатында бөтә эштәрендә әүҙем ҡатнаша. ТӨРКСОЙ-ҙың төп маҡсаты – төрки халыҡтарының мәҙәниәтен, рухи мираҫын донъяға танытыу, йәш быуындарға һөйләү, таныштырыу. Бының өсөн ойошма төрлө мәҙәни саралар үткәрә.

**– ТӨРКСОЙ-ҙың ниндәй йүнәлештәре бар?**

– Ойошма эшмәкәрлегенең төп йүнәлеше – мәҙәниәт, сәнғәт өлкәһендәге халыҡ-ара фестивалдәр, конференциялар үткәреү, китаптар баҫтырыу, шағирҙар, скульпторҙар, рәссамдар, фотографтар лабораториялары ойоштороу.

Донъяға танылған шәхестәрҙе һәм уларҙың эшмәкәрлеген иҫкә алыу, мәңгеләштереү саралары уҙғарыу. Әйтәйек, ТӨРКСОЙ тарафынан 2010 йыл тәү тапҡыр мәшһүр ғалим Әхмәтзәки Вәлиди йылы тип иғлан ителде, ә 2011 йыл атаҡлы шағир Ғабдулла Туҡайға бағышланды. Киләһе йыл тәүге хакас профессоры Николай Катановҡа арналасаҡ һәм мәшһүр әзербайжан яҙыусыһы Мирза Фатали Ахундов йылы буласаҡ. Исемле йыл буйына был шәхестәргә бағышланған саралар үткәрелә. Тик Зәки Вәлиди йылында ғына халҡыбыҙҙың мәшһүр улына арнап егермеләп конференция, күргәҙмә һәм парк, урам асыу тантаналары ойоштороҡ. Бынан тыш та ул йылда байтаҡ эштәр башҡарҙыҡ. Парижда ЮНЕСКО, Нью-Йоркта Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы штаб-квартираларында яһалған Науруз байрамдарында беҙҙең сәнғәт оҫталары ҡатнашыуына бик шатмын. БМО-лағы оло концерт башҡорт ҡурайы моңо менән асылыуы мәҙәниәтебеҙ өсөн үтә мөһим.

Төркиәлә төрки донъяһының әҙәби журналдары конгресы быйыл дүртенсе тапҡыр үткәрелде. Әҙәбиәт, әҙәби баҫмалар хаҡында етди һөйләшеү, аралашыу, хеҙмәттәшлек итеүҙе нығытыуға йүнәлтелгән был сара ла ойошмабыҙ ҡатнашлығында үткәрелә. «Ағиҙел» журналының инициативабыҙҙы күтәреп алып, ошо йәһәттән маҡсатлы эшләүе һөйөндөрә.

**– Ситтә йәшәгәндә, сәйәхәт иткәндә үҙ илеңде, республикаңды шул илгә тиңләп, “Их, беҙҙә лә шулай булһын ине” тип хыялланған саҡтар була. Ә Һеҙҙең күҙлектән нисек?**

– Әлбиттә, йөрөгәндә, күргәндә, беҙҙең республикаға, халҡыбыҙға был әйбер булһа, ошондай шарттар булһа, яҡшыраҡ булыр ине, тип күҙ ҡыҙған саҡтарым булғылай. Ҡайһы ваҡытта ошо хаҡта интервьюларҙа телгә алам йә таныштарым, дуҫтарым менән осрашҡанда һөйләшәбеҙ. Әлбиттә, халҡыбыҙ әйтмешләй, йөрөгән таш шымара. Үҙем өсөн дә өйрәнерлек нәмә күрһәм, өйрәнергә, фәһем алырға тырышам. Уҡырға, белергә, өйрәнергә бер ҡасан да һуң түгел. “Век живи – век учись” ти бит урыҫ мәҡәле лә.

**– Төркиәлә башҡорттар бер-берегеҙ менән аралашып йәшәйһегеҙме?**

– Тәү башлап Төркиәгә барғанымдан алып башҡорт эмигранттары менән танышырға, уларҙын тарихын өйрәнергә тырыштым. Башҡа төрки халыҡтарының вәкилдәре менән дә тығыҙ бәйләнешем бар. Башҡортостан һәм Татарстандан киткән эмигранттар менән дә бик яҡын мөнәсәбәттәмен. Төркиәнең юғары уҡыу йорттары, ғалимдары менән дә хеҙмәттәшлек итәм. Илдең һәр ҡалаһында тип әйтерлек беҙҙең яҡташтарыбыҙ осрай. Иң күбеһе, әлбиттә, Анкара менән Истамбулда. Беҙ барыбыҙ ҙа бер-беребеҙ менән тығыҙ аралашып йәшәйбеҙ. Байрамдарҙы, тыуған көндәребеҙҙе, юлдарыбыҙҙы бергә үткәрергә, хәләхүәл һорашып, кәрәккәндә бер-беребеҙгә ярҙам итеп торорға тырышабыҙ.

**– Ғүмер буйы Башҡортостанды һағынып йәшәгән ҡәрҙәштәребеҙ ни менән мәшғүлдәр Төркиәлә?**

– Беҙҙең революция алдынан, унан һуң Төркиәгә ерләшкән яҡташтарыбыҙҙың балалары, ейәндәре төрлө өлкәләрҙә эшләй. Ауылдарҙан күсеп килеүселәр бында ла ауыл хужалығы менән шөғөлләнеүен дауам иттергән. Сауҙагәрҙәр ҙә бар араларында. 1917 йылдан һуң барлыҡҡа килгән эмигранттар араһында бик күп уҡыған кешеләр булған. Улар университеттарҙа, уҡыу йорттарында, мәктәптәрҙә уҡытҡан. Был төркөм араһынан иң танылғандары – Әхмәтзәки Вәлиди һәм Абдулҡадир Инан. Билдәле булыуынса, Төркиә Республикаһын ҡороусы Мостафа Кемаль Ата төрк кистәрен һөйләшеү һәм кәңәшләшеү кисәләре ойошторған. Был кисәләрҙә беҙҙең байтаҡ яҡташтарыбыҙ ҡатнашҡан. Мәҫәлән,

Абдулҡадир Инан ошондай кисәләргә бик йыш ҡына саҡырылыр булған. Хәҙерге көндә беҙҙең яҡташтарҙың балалары дәүләт эштәрендә, телевидениела, белем биреү, сәнғәт өлкәләрендә эшләй. Ҡайһы берҙәренең балалары Көнбайыш илдәренә күскән, беҙҙең илдән кәләш алғандары ла бар, Башҡортостанға китеүселәре лә осрай. Төркиәлә йәшәүсе яңы быуын башҡорттары араһында эш талабы буйынса оҙайлы командировкала булыусылар, уҡырға тигән маҡсат менән килеп ошонда эшкә ҡалыусылар, өйләнеү сәбәпле Төркиәгә күсеп килеүселәр бар. “Яңы башҡорттар” араһында үҙенең мәҙәниәтен йәшәтеү өсөн тырышыусылар ҙа бар. Шиғыр яҙған Зилә Хажина, Сәриә Вәлиева, йырсы Әлфиә Беслер шундайҙар рәтендә. Сәнғәт, медия өлкәһендә лә үҙҙәрен һынап ҡарарға теләүселәр осрай.

**– Төркиәлә халыҡ әҙәбиәт уҡыймы?**

– Тәү тапҡыр Төркиәгә килгәс, мин шуға ғәжәпләндем: унда донъя классик яҙыусыларының әҫәрҙәренең барыһы ла төрөк теленә тәржемә ителгән. Бынан тыш коммунизм классиктарының әҫәрҙәре һатылыуына аптыраным. Шулай уҡ Төркиәлә сит телдәрҙә байтаҡ ҡына китаптар һатыла. Ә инде нәшриәттәргә килгәндә, уларҙың иҫәбе-хисабы юҡ. Йыш ҡына китап һатыу йәрминкәләре үткәрелә. Бында иһә кәмендә ике йөҙләп нәшриәт ҡатнаша. Мәғариф тарафынан мәктәп йәшендәге балаларға уҡытыу өсөн сериялар донъя күрә. Йәмәғәт транспортында ла китап уҡыусыларҙы күрергә мөмкин. Шулай ҙа, белгестәр билдәләүенсә, йәмғиәттә китап уҡыуға иғтибарҙы көсәйтергә кәрәк. Һуңғы йылдарҙа шуның өсөн дә әҙәбиәт уҡыуҙы пропагандалау өсөн төрлө саралар үткәрелә. Айырыуса Төркиәнең төрлө ҡалаларында ойошторолған халыҡ-ара шиғыр кисәләрен билдәләп үтергә кәрәк. Тарсус, Самсун, Элязыг, Чанаккалела юғары кимәлдә үткән был шиғыр байрамдарында башҡорт шағирҙары ла ҡатнашты.

**– Хисмәт Юлдашев, Йомабикә Ильясова, Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина һәм башҡалар шиғри байрамдарға ҡатнашҡанын хәтерләйбеҙ. Әхәт Ғөбәй улы, ә тәржемә эше нисек тора? Кемдәр тотонған был эшкә? Ниндәй әҫәрҙәр төрөк теленә ауҙарылған?**

– Республикабыҙ Мәҙәниәт министрлығының вәкиле булараҡ, минең төп бурыстарымдың береһе – башҡорт мәҙәниәтен донъя кимәлендә танытыу. Мин тәржемә эше менән студент саҡтарымда уҡ шөғөлләнә башланым. Бик күп китап, мәҡәләне руссаға, башҡортсаға, төрөксәгә ауҙарҙым. Уларҙың ҡайһы берҙәре шул ваҡытта уҡ донъя күрҙе. Халыҡ-ара ТӨРКСОЙ ойошмаһы тарафынан башҡорт халыҡ ижады, Салауат Юлаев, Мифтахетдин Аҡмулла, Мәжит Ғафури йыйынтыҡтары, башҡорт шәжәрәләре баҫылды. 2003 йылда Әхмәтзәки Вәлидиҙең “Башҡорттарҙың тарихы” китабы баҫылыуында ла минең ярҙамым тейҙе. Был китапта дүрт мәҡәлә минең тәржемәлә баҫылды, үҙемдең магистрлыҡ эшем нәшер ителде.

Конья ҡалаһында мәшһүр суфый шағир Йәләлетдин Руми тормошо хаҡында башҡортса китап нәшер иттек. Минең ҡатнашлығым менән Төркиәлә унға яҡын китап донъя күрҙе. Төрлө университеттар, ғилми учреждениелар менән хеҙмәттәшлек итәбеҙ. Улар менән бергә конференциялар, китаптар, йыйынтыҡтар әҙерләйбеҙ. Башҡорт телен, әҙәбиәтен өйрәнеүсе студент, докторант, ғалимдарға ла сығанаҡтар табыу, теманы билдәләү, тәржемеләрен төҙәтергә ярҙам итәм. ТӨРКСОЙ журналында халҡыбыҙҙың тарихын, мәҙәниәтен танытам. Бер нисә йыл Гази университетында башҡорт теле, әҙәбиәте, башҡортсанан тәржемә кеүек дәрестәр уҡыттым. Башҡортостан һәм Төркиә университеттары араһында бәйләнеш булдырыу өсөн дә тырыштым.

Үткән йыл Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығы менән ТӨРКСОЙ беренсе мәртәбә Рәсәйҙә халыҡ-ара фотосәнғәт оҫталары лабораторияһы үткәрҙе. Был матур сараның емештәре “Башҡортостан – Евразияның ынйыһы” исемле күләмле альбом рәүешендә сыҡты. Шауҡымы төрлө илдәргә яңғыраны. Әле лә дауам итә.

**– ... Эшләгән эштәрегеҙ байтаҡ икән. Уларҙы атҡарып сығыу өсөн үҙ республикаңдың, халҡыңдың илһөйәре булыу ғына етмәй, ныҡышмал хеҙмәт, үҙ-үҙеңә талапсанлыҡ та кәрәктер...**

– Ата-әсәйем, үҙемдең ғаиләм миңә ныҡлы терәк булып тора. Эштәремде башҡарғанда йыш ҡына улар менән кәңәшләшәм, әммә күп осраҡта үҙемсә хәл итәм. Хатта әсәйем менән ҡатыным: “Үҙеңсә эшләгәс, нимәгә беҙҙән һорайһың?” – тиҙәр. Ҡатыным Сәриәнең ике юғары белеме бар. Әлеге көндә өй йылыһын һаҡлау, балаларыбыҙҙы тәрбиәләү менән мәшғүл. Ике балабыҙ бар. Ҡыҙым Асияға ун бер йәш. Өс йәше лә тулмаған ваҡыттан башлап “Тамыр” телевизион студияһының “Сәңгелдәк” тапшырыуында ҡатнаша башланы. Әлеге көндә “Тау-тау хәбәрҙәр”ҙе тура эфирҙа алып барыусы. Яҡшы уҡый, төрлө предметтарҙан олимпиадаларҙа ҡатнаша, инглиз телендә белемен тәрәнәйтергә тырыша. Улым Азаматҡа биш йәш. Ул һүрәт төшөрөргә, шахмат уйнарға ярата, спорт менән шөғөлләнә, төрлө түңәрәктәргә йөрөй.

**– Донъяла Һеҙҙе иң ғәжәпләндергәне...**

– Ҡайһы берәүҙәрҙең, мәсьәләне сисеү урынына, сүптән сүмәлә өйөп, башҡаның башын әйләндереүенә ғәжәпләнәм.

**– ...Иң ҡайғыртҡаны?**

– Үҙ-үҙенә хужа була алмаған, араҡыға ҡол булғандар мине бик ныҡ ҡайғырта.

**– Иң шатландырғаны...**

– Ғаиләмдең, балаларымдың, әсәйемдең, туғандарымдың, дуҫтарымдың уңыштарына, иҫән-һау булыуына ҡыуанам. Башлаған эшемдең осона сыҡһам да шатланам.

**– Милләттәштәребеҙгә, журнал уҡыусыларыбыҙға теләктәрегеҙ?**

– Халҡыбыҙҙың донъяла иң боронғо, бай мәҙәниәтле һәм тарихлы халыҡ икәнлеген онотмайыҡ, тырышҡанда ташҡа ҡаҙаҡ ҡағып булғанын бер ваҡытта ла иҫенән сығармаһын милләттәштәрем.

Минең әйтергә теләгән һүҙҙәрем, уртаҡлашырға ынтылған фекерҙәрем байтаҡ. Мәктәптә уҡыған саҡта уҡ мәҡәләләр, әҙәби әҫәрҙәр, хикәйәләр яҙырға, тикшеренеү менән шөғөлләнергә теләгем бар ине. Ауылда ата-әсәйем миңә белем алыу өсөн мөмкин булған тиклем шарттар тыуҙырҙы. Уларға бик рәхмәтлемен. Барыһын да бер осрашҡанда ғына әйтеп бөтөрөп булмай. Әңгәмәләшергә саҡырғанығыҙ өсөн ҙур рәхмәт.

* * *

*Әйткәндәй, быйыл 18 ноябрҙә Истамбул ҡалаһында Ғабдулла Туҡай иҫтәлегенә үткән ғилми конференцияла Татарстан мәҙәниәт министры Айрат Сибәғәтуллин Әхәт Сәлиховҡа Ғабдулла Туҡай йылын үткәреүҙә һәм Татарстан менән Башҡортостан халыҡтары араһындағы хеҙмәттәшлекте нығытыуға индергән өлөшө өсөн рәхмәт белдереп, ҡиммәтле бүләк тапшырҙы.*

**Гөлназ ҠОТОЕВА әңгәмәләште.**

# КӨНКҮРЕШ ӨЛГӨҺӨ

*(БР-ҙың торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры Ирек Ялалов менән әңгәмә)*



*Кешелек цивилизацияһының үҫеше ауылдарҙың аҡрынлап юҡҡа сығыуы, ҡалаларҙа йәшәүселәрҙең, киреһенсә, артыуында ла сағылыш таба. Башҡортостанда йәшәгән һәр ун кешенең етеһе ҡалала көн итә. Был, үҙ сиратында, торлаҡ йорттарҙың, урам-ихаталарҙың, көнкүреш ҡалдыҡтарының күбәйеүенә, коммуналь селтәрҙең киңәйеп, унда эшләүселәрҙең бермә-бер артыуына килтерә. Бөгөн республика торлаҡ-коммуналь хужалыҡ тармағында 400-ләп предприятие, йәғни 40 мең кеше эшләй. Төрҙәш предприятиеларҙы ла ҡушҡанда, 100 меңдән ашыу кеше килеп сыға. Башҡортостандың төп етештереү фондтарының өстән бер өлөшө ТКХ-ға тура килеүе тармаҡтың киң селтәрле булыуы хаҡында һөйләй.*

*Һуңғы осорҙа ТКХ-ға иғтибар көсәйҙе. РФ Президенты Д. Медведевтың ҡушыуы буйынса тармаҡтың эшмәкәрлеген Генераль прокуратура, Дәүләт торлаҡ инспекцияһы һәм урындағы үҙидара органдары даими күҙәтеү аҫтында тота. Был, берҙән, коммуналь өлкәгә байтаҡ сығымдар бүленеп тә һөҙөмтәнең ҡәнәғәтләнерлек булмауы; икенсенән, ҡайһы бер идара компанияларының финанс ҡағыҙҙәрен боҙоп, аҡса үҙләштереүе менән аңлатыла. Әлбиттә, аҡ эттең бәләһе – ҡара эткә, тигәндәй, ТКХ-ла үҙ бурыстарын намыҫлы башҡарғандар күберәк. Шулай булмаһа, ҡала өйҙәрендә торбалар йылы булып, крандан таҙа һыу ағып, канализация өҙлөкһөҙ эшләп тормаҫ ине.*

*Былар – тышҡы яҡтан күҙгә салынғаны. Ә ТКХ-ның эске тормошо ни рәүешле, улар үҙ хеҙмәтен нисек баһалай, бөгөн нимә менән мәшғүл? Ошо һәм башҡа һорауҙарға редакция ҡунағы – БР торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры И. И. Ялалов яуап бирә. Ул тармаҡ министры булып тәғәйенләнгәнгә тиклем Өфө ҡалаһы хакимиәтендә эшләгән. Үҙенең теле менән әйткәндә, 10 йыл буйы баш ҡала халҡының «тулы ҡанлы тормош»он тәьмин итеүҙә ҡатнашҡан. Уға тиклем ун йыл буйы күп ҡатлы торлаҡ йорттар төҙөүҙә тәжрибә туплаған. Үҙен төрлө тармаҡтарҙа һынап йыйған тәжрибә министрға бөгөнгө эшмәкәрлегендә ҙур таяныс-ярҙам булып тора.*

**– Ирек Ишмөхәмәтович, торлаҡ-коммуналь хужалыҡҡа реформа башланғанға ла бер тиҫтәнән ашыу йыл үтте. Уға бөгөн, Һеҙҙең күҙлектән сығып, ниндәй баһа бирергә мөмкин? Хәл ителмәгән проблемалар тураһында ниҙәр әйтерһегеҙ?**

– Реформа хәҙер яңы баҫҡысҡа аяҡ баҫа, тип әйтер инем. Үткән йәй «РФ Торлаҡ кодексы»на һәм «Коммуналь хеҙмәттәр күрһәтеү ҡағиҙәләре»нә етди төҙәтмәләр индерелде. Әгәр ҙә беҙ, тармаҡтағы етди һынылыш 2005 йылда ғәмәлгә ингән Торлаҡ кодексынан башланды, тип иҫәпләйбеҙ икән, кодексҡа унан һуң индерелгән өҫтәмә-төҙәтмәләрҙе реформаның икенсе этабы тип ҡарарға кәрәк. Тәүге осорҙа беҙ ТКХ-ла сәләмәт конкуренция үҫешһен өсөн тейешле шарттар булдырыуға өлгәштек, сөнки шунһыҙ түләүле хеҙмәт күрһәтеү сифатын яҡшыртып булмай ине. Икенсе баҫкыста беҙ реформа барышында килеп тыуған проблемаларҙы, мәҫәлән, идара компанияларының күп ризаһыҙлыҡ тыуҙырған эшмәкәрлегенә урындағы үҙидара һәм дәүләт контролен көсәйтә алдыҡ. Ә бит Торлаҡ кодексының тәүге редакцияһы буйынса дәүләт органдары идара компанияларының эшенә ҡыҫыла, йәғни хаталарҙы төҙәтеүҙе талап итә алмай ине. Шул арҡала граждандарҙың идара компаниялары өҫтөнән ялыуы йыл һайын 50 процентҡа арта торҙо. Хәҙер урындағы үҙидара органдарының һәм Дәүләт торлаҡ инспекцияһының тармаҡ ойошмалары эшмәкәрлеген күҙәтеү буйынса хоҡуҡтары ярайһы артты. Мәҫәлән, муниципаль органдар торлаҡ хужаларының ялыуына ярашлы идара компанияһының эшмәкәрлеген ентекле тикшереп сығырға хоҡуҡлы. Ялыуҙа күрһәтелгән законһыҙлыҡ күренештәре дөрөҫләнә икән, торлаҡ хужалары йыйылыш үткәрә һәм идара компанияһының артабан эшләй алыу-алмауы тураһында ҡарар сығара. Дәүләт торлаҡ инспекцияларына 2012 йылдан башлап идара компаниялары һәм торлаҡ хужалары ширҡәттәренең эшмәкәрлеген тикшереү менән шөғөлләнеү бурысы йөкмәтелгән. Беҙ Башҡортостанда бындай эшмәкәрлеккә ил буйынса алғандан бер йылға элегерәк тотонабыҙ.

Бынан тыш, Торлаҡ кодексына индерелгән өҫтәмәгә ярашлы, торлаҡ хужаларының үҙҙәре араһынан Йорт советына ағзалар һайлап ҡуйыуы ҡаралған. Был алым идара компаниялары эшмәкәрлегендә законлылыҡты күҙәтеү буйынса етди хоҡуҡтар бирә. Мин яңылыҡтарҙың үтә мөһимдәрен генә атап үттем. Әлбиттә, эш иткән закондарға өҫтәмә-төҙәтмәләр улар менән генә сикләнмәй. Торлаҡҡа идара итеүгә ҡағылышлы закондар буйынса үҙгәрештәрҙе www.mgkhrb.ru сайтының «Информация для населения» тигән бүлегендә танышырға мөмкин.

**– Закондарҙы йоғонтолораҡ итеү буйынса дәүләт тарафынан күрелгән сараларҙың ысынлап та сараһыҙҙың көнөнән икәне аңлашыла. Киләсәктә торлаҡ хужаларын тағы ниндәй үҙгәрештәр көтә?**

– Федераль закондар тарафынан индерелгән өҫтәмә-төҙәтмәләрҙең ыңғай һөҙөмтәһе күҙгә салына ла инде. Мәҫәлән, идара компаниялары, торлаҡ хужалары ширҡәттәре тарафынан хеҙмәтләндерелгән йорттар күбәйә. Торлаҡ йорттарҙы ошондай ойошмалар ҡарамағына тапшырыу тармаҡта сәләмәт конкуренцияны көсәйтеү өсөн мотлаҡ. Баҙар иҡтисадының төп ҡоралынан һаналған был бурыс башта уҡ ҡуйылғайны, һәм, беҙ уны атҡарып сыҡтыҡ, тип иҫәпләргә мөмкин. Хәҙер республикала торлаҡ йорттарҙың 22 проценты – торлаҡ хужалары ширҡәттәре, 63-ө идара компаниялары тарафынан хеҙмәтләндерелә. Был – бер. Икенсенән, торлаҡ-коммуналь хужалыҡты яңыртыу-камиллаштырыу буйынса ла байтаҡ эш башҡарырға кәрәк. Министрлыҡ алдына был бурыс республика етәкселеге тарафынан ҡуйылһа ла, тармаҡты модернизациялау буйынса эш дөйөм ил менән берлектә ғәмәлгә ашырыла. Атап әйткәндә, торлаҡты төҙөкләндереү буйынса эшмәкәрлек иҫке йорттарға капиталь ремонт үткәреүҙән тыш,

ихаталарҙы тәртипкә килтереү, ҡаты юлдарҙы яңыртыу, лифттарҙы, урамдарҙы төнгө яҡтылыҡ менән тәьмин итеү кеүек эштәр менән бергә алып барыла.

**– ТКХ эшмәкәрлеген яҡшыртыу буйынса бер нисә программа эшләй. Уларҙың йөкмәтке-тәғәйенләнеше хаҡында ни әйтергә мөмкин?**

– Башҡортостанда ғәмәлдә булған программаларҙың иҫәбе бер тиҫтәгә тула. Икеһе, мәҫәлән, күп ҡатлы йорттарға капиталь ремонт үткәреүгә ҡағыла. Граждандарҙы емерелеү хәүефе булған өйҙәрҙән уңайлы йорттарға күсереү буйынса 2011 йылға иҫәпләнгән программа өҫтөндә лә эш бара. 2010 – 2014 йылдарға иҫәпләнгән «Саф һыу» программаһын ғәмәлгә ашырыу ҙа беҙҙең тармаҡ министрлығына йөкмәтелгән. Урам һәм юлдарҙы төнгө яҡтылыҡ менән тәьмин итеү буйынса махсус программаны 2015 йылда тамамлау күҙ уңында тотола. Бынан тыш, республиканың адреслы инвестиция программаһы, ихаталарҙы һәм уларҙағы юлдарҙы капиталь йүнәтеү буйынса ғына ла ике программа эш итә. Файҙаланыу ваҡыты үткән лифттарҙы йүнәтеү, яңыларын ҡуйыуға ҡағылышлы программа ла 2015 йылда тулыһынса ғәмәлгә ашырылыр, тип өмөтләнәбеҙ. Ә инде коммуналь объекттарҙы 2011 – 2012 йыл ҡышына әҙерләү программаһын беҙ уңышлы ғына дауам итәбеҙ, тип әйтергә мөмкин.

Ҡала һәм ҡасабаларҙа йәшәгәндәр өсөн тағы ла бер үтә мөһим документ – 2020 йылға «Башҡортостан Республикаһының торлаҡ-коммуналь хужалығын модернизациялау» программаһы әҙерләнә. Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ реформаһына ярҙам итеү фондының эшмәкәрлеге тамамланып килеүе менән бәйле, БР Президенты Рөстәм Хәмитовтың ҡушыуы буйынса, торлаҡ биналарын йүнәтеү тиҙлеген төшөрмәү өсөн Башҡортостандың үҙенең капиталь ремонт системаһы булдырыла.

**– Атап үтелгән программаларҙы тормошҡа ашырыу буйынса нимәләр өҫтәп әйтергә мөмкин?**

– Торлаҡ йорттарҙы уңайлыраҡ хәлгә килтереү буйынса эшмәкәрлекте алғанда, беҙ 2008 – 2010 йылдарҙа капиталь ремонтҡа 6,8 миллиард һум йүнәлтә алдыҡ. Һөҙөмтәлә 4 миллион квадрат метр майҙанлы 981 күп ҡатлы торлаҡ йорт капиталь ремонтланды. Быйыл ТКХ реформаһына ярҙам итеү фонды тарафынан 75 торлаҡ йортто капиталь ремонтлау өсөн 398,9 миллион һум бүленде. Бынан тыш, республика программаһы буйынса 157 күп ҡатлы йортҡа 150,5 миллион һум тупланды. Файҙаланыу ваҡыты сыҡҡан 1458 лифтты яңыларына алмаштырыу һәм йүнәтеү буйынса 2014 йылға тиклем дауам иткән программа республика тарихында тәү тапҡыр ғәмәлгә ашырыла. Ихаталарҙы төҙөкләндереү, төнгө урамдарҙы яҡтыртыу буйынса бүленгән 874 миллион һум 1400 ихатаны йәшәү өсөн уңайлы хәлгә килтереү мөмкинлеге бирәсәк, тип ышанабыҙ.

«Саф һыу» программаһын тормошҡа ашырыу ҙа – иң мөһим эш йүнәлештәренең береһе. Ул халыҡты таҙа, һаулыҡҡа зыян килтермәй торған һыу менән тәьмин итеүҙе күҙ уңында тота. Был проект БР Президенты ҡушыуы буйынса эшләнде һәм 2014 йылда атҡарып сығыуға иҫәпләнгән. Программаның хаҡы – 3,4 миллиард һум. Был сығымдар һурҙырыу станциялары, таҙартыу ҡоролмалары, һыу үткәргестәр, канализация селтәре төҙөү һ.б. өсөн тотоноласаҡ. Объекттарҙың дөйөм иҫәбе 110-ға етә.

«Саф һыу» программаһынан тыш, ТКХ объекттарын яңыртыу өсөн сығымдар Республика адреслы инвестиция программаһында ла ҡаралған. Быйыл халыҡты һыу менән тәьмин итеү, йылылыҡ һәм канализация селтәрен йүнәтеү һәм яңыртыу өсөн 1 миллиард һум ҡаралғайны. Был, коммуналь тәғәйенләнештәге 47 объект яңынан төҙөлә йәки яңыртыла, тигән һүҙ. Улар иҫәбендә 26 һыу үткәргес һәм канализация селтәре бар.

**– Ҡараңғы урамдар, ғөмүмән, ҡалаларҙың төндәрен насар яҡтыртылыуы өсөн йыш ҡына хөкүмәтте тәнҡитләйҙәр. Ошоға зарланып, бер ҡатын хатта Рәсәй Президентына саҡлы барып етте. Был тәңгәлдә республикала ниндәй эштәр башҡарыласаҡ?**

– Быйыл октябрь урталарына урамдарҙы яҡтырта торған 5,1 мең лампочка ҡуйылды, янғандары алмаштырылды. 37 мең метр изоляциялы ток үткәргес яңыртылды, яңынан монтажланды. Быйыл ошо маҡсатта бөтәһе 190,4 миллион һум бүленгәйне. 2012 йылға сығымдар иһә 380 миллион һум билдәләнгән. Артабан да проблеманы хәл итеүгә сығымдар етерлек бүленер, тигән өмөттәбеҙ. Әйткәндәй, урамдарҙы яҡтыртыуға сығымдарҙың яртыһы урындағы ҡаҙнанан сыҡһа, ҡалғанын республика бюджеты хәстәрләй. Быйыл сығымдарҙың сағыштырмаса аҙ бүленеүе тәжрибәне һынап ҡарау, ниндәй һөҙөмтәләргә килтереүен асыҡлауға бәйле. Киләһе йылдан программаны ғәмәлгә ашырыу буйынса сығымдарҙың һиҙелерлек артыуы төнөн дә яҡты урамдарҙан йөрөргә булышлыҡ итер, тип ышанам.

**– Билдәле булыуынса, торлаҡ-коммуналь хужалыҡтың инженер селтәрҙәре башлыса Советтар дәүерендә үк ҡоролоп, улар хәҙер эштән сығып иҫкергән. Уларҙың бөгөн ниндәй хәлдәлеген һандар менән һүрәтләп буламы? Күпмеләрен алмаштырырға тура киләсәк һәм күпме сығым кәрәк буласаҡ?**

– Ысынлап та, инженер селтәрҙәре генә түгел, торлаҡ йорттарҙың да күпселеге Совет власы йылдарында төҙөлгән. 90-сы йылдарҙан һуң улар ғәмәлдә «ремонт» тигән нәмәне күрмәне. Һөҙөмтәлә күптән түгел генә күп фатирлы йорттарҙың 42 проценты, йәғни 8,5 меңе капиталь ремонтҡа мохтаж ине. Канализация селтәренең һәр дүртенсе метрын, йылылыҡ биреү торбаларының 11 процентын алмаштырыу талап ителә. Был объекттарҙы яңыртыу буйынса саралар үрҙә атап үтелгән программаларҙа сағылыш таба.

**– Һуңғы йылдарҙа ТКХ-ға сит ил инвестицияларын йәлеп итеү тураһында һөйләү модаға инеп китте. Сит ил капиталы, моғайын, арзанға төшмәҫ, сөнки капиталист һәр саҡ табыш алыуҙы тәүге урынға ҡуя. Донъя баҙарында нефть һәм газ менән һатыу итеүҙән алынған долларҙарҙы йәлеп итеп булмаймы ни?**

– Беренсенән, һүҙ сит ил инвесторҙары тураһында ғына бармай. Беҙ был тармаҡта хеҙмәттәшлек итеүгә хәлле һәм конкуренцияға һәләтле предприятиеларҙы йәлеп итеү буйынса эш алып барабыҙ. Уларҙың ҡайһы ил гражданины булыуы, дөрөҫөн әйткәндә, беҙҙе әллә ни ҡыҙыҡһындырмай ҙа. Минеңсә, Рәсәй компаниялары был баҙарҙа эшләү менән ныҡыраҡ ҡыҙыҡһынырға бурыслы, сөнки компания хужалары үҙҙәре генә түгел, туған-тыумасалары ла ошонда көн итә бит. Иң мөһиме, инвесторҙарға беҙ шундай талаптар ҡуябыҙ: файҙаланылған ҡеүәттәрҙе яңыртыуға сығымдарҙы йәлләмәҫкә, граждандарға теге йәки был хеҙмәт күрһәтеүҙә заманса ҡараш-мөнәсәбәт булдырырға, табыш артынан ҡыуыуҙан бигерәк советтар осоронан эшләп килгән һәм бик ныҡ таушалған тармаҡты яңыртыуға әҙер булырға. Әлбиттә, тотош ТКХ-ны заман талаптарына ярашлы яңыртыуға 60 миллиард һум кәрәк булыу менән бәйле эрерәк инвесторҙар килеүе беҙҙе ныҡыраҡ ҡыҙыҡһындыра. Улар үҙ ҡарамағына алған инженер ҡоролмаларын ниндәйҙер дәрәжәлә яңыртыуға түгелгән сығымдарын аҙаҡ экономия иҫәбенә ҡайтара алыр ине. Был граждандар өсөн дә, дәүләт һәм коммерция структуралары өсөн дә уңайлы. Ысынлап та, инвесторҙар өсөн, беҙ тотонолған сығымдарҙы ҡасан ҡайтарып ала аласаҡбыҙ, тигән законлы һорау

тыуа. Был хәл бик күп факторҙарға, шул иҫәптән Башҡортостандағы социаль-иҡтисади фаразға ла бәйле. Шуға күрә муниципаль берәмектәрҙең үҙҙәрендәге коммуналь тармаҡты үҫтереү буйынса комплекслы программа эшләүе маҡсатҡа ярашлы. Ошондай талап БР Президенты һәм хөкүмәте тарафынан бирелгән күрһәтмәләрҙә лә сағылыш таба. Инвестор өсөн теге йәки был биләмәлә социаль-иҡтисади хәлдең ни рәүешле булыуы, объектты яңыртыуға күпме аҡса тотонасағын, яҡын арала тарифтарҙың нисек артасағын белеү бик мөһим. Үкенескә ҡаршы, ошондай документтар әҙерләүгә муниципалитеттар бер үк дәрәжәлә яуаплы ҡарай, тип әйтергә нигеҙ юҡ. Быны менән, әлбиттә, улар үҙ эшенә үҙҙәре үк зыян килтерә.

Шундай уҡ талаптар сит ил капиталистарына ҡарата ла эш итә. Әгәр ҙә компания намыҫлы эшләргә, Рәсәй ТКХ-һын үҫтереүгә һиҙелерлек сығымдар бүлергә һәм уларҙы илгә, граждандарға зыян килтермәй генә ҡайтарып алырға әҙер икән, беҙ бындай предприятиелар өсөн уңайлы шарттар булдырырға ҡуш ҡуллап риза. Компанияларҙың табыш алырға теләгенә килгәндә инде, был теләһә ҡайһы эшмәкәрлектең төп шарты һәм коммерция әһелдәренең йәшәү мәғәнәһе. Шулай уҡ беҙ табыштың ниндәй юлдар менән алыныуына ла әһәмиәт бирәбеҙ. Хәҙерге мәлдә һүҙ файҙалы эшмәкәрлек хаҡында бара.

**– Торлаҡ-коммуналь реформаға тотонор алдынан уҡ тармаҡ сығымдарын тулыһынса граждандарға йөкмәтеү маҡсаты ҡуйылғанын властар йәшермәне. Бер яҡтан, был тәбиғи ҙә кеүек. Әммә ул төрлө сәбәптәр арҡаһында кисектерелә килде. Шул уҡ ваҡытта был тәртип граждандарҙың килем йәһәтенән бик ныҡ айырылыуын иҫәпкә алмай.**

– Был фекер менән килешә алмайым, сөнки ундай торлаҡ хужаларына дәүләт яғынан финанс ярҙамы ҡаралған. Мәҫәлән, былтыр торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәргә түләү менән бәйле миллиондан ашыу ғаиләгә субсидиялар бирелде. Быйыл улар тағы ла күберәк булмаҡсы, сөнки ғаилә ҡаҙнаһының 20 проценты торлаҡ-коммуналь хеҙмәткә түләүҙәргә китә икән, ундай финанс ярҙамы юллау өсөн нигеҙ бар. Дөрөҫ, федераль кимәлдә планка юғарыраҡ – 22 процент. Беҙҙәге стандарттар БР Президенты ҡушыуы буйынса индерелде.

**– Һәр команданың эшмәкәрлеге унда йыйылған кешеләрҙең булдыҡлылығы менән баһалана. ТКХ эшмәкәрлегенә бәйле Совет власы йылдарында «мәңге иҫерек дядя Вася» хаҡында көләмәстәр йөрөй торғайны. Хәҙер хәл үҙгәрҙеме?**

– Дөрөҫөн әйткәндә, минең үҙемә «дядя Вася» тураһында ишетергә тура килмәне. Әммә торлаҡ-коммуналь хужалыҡ хеҙмәткәренә ҡарата бөгөн ниндәй талаптар ҡуйылыуы тураһында әйтә алам. Барыһынан элек ул оҫта ҡуллы, кешеләр менән уртаҡ тел таба, хәҙерге ҡатмарлы техниканы файҙалана белгән кеше булып күҙ алдына баҫа. Ул шулай уҡ элекке йылдарҙа һалынған туҙып эштән сығып килгән йорттар менән бергә хәҙерге талаптар, мәҫәлән, энергия һаҡлау нигеҙендә төҙөлгәндәре менән дә эш итә белергә бурыслы. Әле тармаҡта эшләп йөрөгәндәргә килгәндә иһә, барыһы ла тиерлек үҙ алдына өйрәнгән кешеләр. Профилле белем ни эшләптер беҙҙең тармаҡ өсөн ҡаралмаған.

Ләкин министрлыҡ тармаҡ өсөн кадрҙар әҙерләү мәсьәләһе менән етди шөғөлләнә, торлаҡ-коммуналь өлкә өсөн белгестәрҙе һигеҙ уҡыу йортонда әҙерләйҙәр. Тағы ла бер мөһим йүнәлеш – эш хаҡын арттырыу, сөнки 2010 йыл йомғаҡтары буйынса ТКХ-ла уртаса хеҙмәт хаҡы ни бары 12,9 мең һум тәшкил итте. Быйыл беҙ уны 5,6 процентҡа арттыра алдыҡ һәм был эш һөҙөмтәләренә ыңғай йоғонто яһаны.

**– Йыш ҡына, иң ауыры – кешеләр менән эшләү, тигән фекер ишетергә тура килә. Һеҙҙең ҡарамаҡҡа, был хәл нимәгә бәйле? Ундай психологияны үҙгәртеп буламы? Бәлки, ниндәйҙер ыңғай миҫалдар барҙыр?**

– Ябай ғына миҫал: торлаҡ-коммуналь хужалыҡ эшмәкәрлегенә ҡағылышлы һәр граждандың мөрәжәғәте үҙенсәлекле, тимәк, һәр береһенә иғтибар итергә, һәр ҡайһыһы менән шәхси эш алып барырға кәрәк. Һәр мөрәжәғәткә ышандырырлыҡ яуап биреү өсөн ул кеше йәшәгән йорттоң торошон иҫәпкә алырға, техник характеристикаһын, энергия һаҡлау ҡорамалдары менән тәьмин ителешен, ни рәүешле идара ителеүен, фатирҙа нисә кеше йәшәүен асыҡларға һ.б. кәрәк. Ошо талаптар һәр кем менән ентекле эш итеүҙе, һәр ялыу-мөрәжәғәтте еренә еткереп тикшереүҙе, һәр граждан менән ихтирамлы мөғәмәлә итеүҙе аңлата. Бәлки, кешеләр менән эшләүе ауыр, тигәндәр ошоларҙы күҙ уңында тоталыр.

Ләкин мин бындай һығымта менән килешә алмайым, сөнки бик еңел һәм күңелле аралашҡан кешеләр ҙә бар. Беҙ тап шундайҙарға таянабыҙ ҙа инде. Мәҫәлән, һуңғы ваҡытта йорт советтары рәйестәре менән йыш аралашырға тура килә. Тармаҡтағы хәлдәрҙе ыңғай яҡҡа үҙгәртеү өсөн күп көс һалған, торлаҡ хужаларына йортҡа идара итеүҙә әүҙем ҡатнашыуҙы һәм шуның менән үҙҙәренең законлы мәнфәғәттәрен яҡлауҙы аңлатҡан вәкилдәр – тап шулар. Күп фатирлы йорттарҙа йәшәгән граждандар ошондай советтарға намыҫлы, тәртипле, абруйлы, әүҙем һәм йәмғиәт өсөн файҙалы эш итергә һәләтле кешеләрҙе һайлар, тигән өмөт белдерәм.

**– Коммуналь хужалыҡ селтәрен йүнәтеү ғәҙәттә ҡышҡылыҡҡа инеү мәленә тура килә. Халыҡ, был мәшәҡәт менән йәйҙең йылы көндәрендә маташыу отошлораҡ түгелме икән ни, тип аптырай. Сығымдар ҙа кәмерәк булыр ине.**

– Ғәмәлдә алдағы йылытыу осорона әҙерлек майҙа, йәғни сираттағы йылытыу осоро тамамланыу менән башлана һәм сентябргә тамамлана. Ваҡыттың шундай тар булыуына бәйле тығыҙ эш графигы раҫлана. Торлаҡ фондына ремонт үткәрелә, туҙған торбалар алмаштырыла. Тап шул мәлдә һыу биреү туҡтатылып, юлдарҙы, ихаталарҙы ҡаҙып ташлайҙар. Коммуналь объекттар тейешле ҡорамалдар, резерв электр сығанаҡтары менән тәьмин ителә. Төрлө объектив һәм башҡа сәбәптәр арҡаһында алдағы ҡышҡа әҙерлек июндән дә иртә башланмай.

**Һорауҙарҙы Мәхмүт ХУЖИН бирҙе.**

**Редакциянан.** *Беҙ тармаҡ министрына үҙебеҙҙе ҡыҙыҡһындырған бар һорауҙарҙы ла биреп бөтөрә алманыҡ, сөнки, журнал ҡалын булыуға ҡарамаҫтан, биттәре һанаулы. Ә бына министрҙың яуаптарындағы һығымталар, атап әйткәндә, ТКХ реформаһының ыңғай һөҙөмтәләре барлыҡ граждандарға ла бәйле икәнлеге шик тыуҙырмай. Уйландырырлыҡ факттар байтаҡ. Мәҫәлән, быйыл 9 айҙа коммуналь хеҙмәттәр өсөн 2,6 миллиард һум түләнмәгән. Бурыслылар араһында предприятиелар ҙа, торлаҡ хужалары ла бар. Ә бит бындай ғәмһеҙлек ҡыш уртаһында өҙөклөктәргә килтереүе бик ихтимал.*

*Икенсе мәсьәлә – бысраҡ подъездар, емерелгән ҡорамалдар. Былары – ошо йорттарҙа йәшәгән граждандарҙың «эше». Теләһә ҡайҙа ташланған тәмәке төпсөктәре, ҡағыҙ, башҡа сүп-сар. Ә бит сит илдәрҙә йөрөгән кешеләр белә: унда бындай тәртипһеҙлеккә шунда уҡ сик ҡуялар. Ниңә беҙ шулар кеүек була алмайбыҙ?*

# ҮҘ ХАЛҠЫНЫҢ РУХ ИЛСЕҺЕ

*(Башҡортостандың халыҡ артисткаһы Минзәлә Хәйруллинаға 50 йәш)*



**– Тамашасы артистарға ниндәй мөнәсәбәттә? Актер сәхнәлә сағылдырған берәй образды актерҙың үҙе тип ҡабул итеүе мөмкинме?**

– Тамашасыларҙың күпселеге артистарҙы тик матур яҡтан ғына күргеһе килә. Беҙҙе идеаллаштырыусылар ҙа юҡ түгел. „Уй, һеҙ бит матур йәшәйһегеҙ“, – тигәнде йыш ҡына ишетергә тура килә. Сәхнә ышандырыу көсөнә эйә, актерҙы һәйбәт образда күрәләр икән, тормошо ла шулай икән тип ҡабул итәләр. Дөрөҫ, араларында театр уйын ғына, ә кешенең төп эше икенсе булырға тейеш тип ҡараусылар ҙа бар. Бер атай бейеүсе улынан: „Һаман да уйнап йөрөйһөңмө? Эшкә кермәнеңме әле?“ – тип һораған бит. Хас та шул көләмәстәге кеүек.

**– Артистың һөнәре шулай: уның эшмәкәрлеген гастролдән тыш күҙ алдына килтереп булмай. Хәҙер театр йөрөгән юл төрләнә, географияһы киңәйә бара. Сит илдәргә лә йышыраҡ сығаһығыҙ. Тормош кимәле юғары, мәҙәниәткә етди иғтибар бүленгән илдәргә сығыу ниндәй уйҙар уята?**

– Гастролдәрҙә булған илдәрҙә эшләгән кешенең ныҡ һәйбәт йәшәгәнен күреп ҡайтабыҙ. Айырыуса төрөктәргә, ҡытайҙарға һоҡланам. Улар юҡ ҡына нәмәнән аҡса эшләй беләләр. Ҡытайҙа булғанда бер нәмәгә иҫем китте: мәҫәлән, ҡабырсаҡтарҙы йыялар, лаклайҙар һәм шунан бына тигән сумкалар яһайҙар, етмәһә, „ҡул эше“ тип, ҡыйбат хаҡҡа һатып ултыралар. Һәм ҡунаҡтар хаҡына ҡарап тормай „сувенир“ итеп алалар бит әле шуларҙы. Ерҙә аунап-тәгәрәп ятҡан нәмәне аҡсаға әйләндерә белә ҡытайҙар, ә беҙ уны „ҡый-һай“ тип тибеп кенә үтеп китер инек. Улай ғына ла түгел, ҡыйбатлы таштарыбыҙҙы ла баһалай белмәйбеҙ. Беҙҙәге гранит, йәшмә – ҡытайҙар ҡулында булһа, нимә эшләтергә белерҙәр ине. Хатта үҙебеҙҙә эшкәртеүсе сәнәғәт тә юҡ бит, ситтә эшкәртәләр. Мәҫәлән, Силәбе беҙҙең йәшмә, мәрмәрҙән төрлө әйберҙәр яһай ҙа „үҙебеҙҙеке“ тип уны беҙгә ҡыйбат хаҡҡа һата. Эшҡыуарлыҡты үҫтереү мәсьәләһе беҙҙә етди тора.

**– Әле, Һеҙ әйтмешләй, эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнергә тотонһалар, башлана һәр төрлө тикшереүҙәр, һалым инспекцияһы, башҡаһы...**

– Лицензия алырға кәрәк, эшҡыуармы һин, түгелме икәнлеген раҫларға, тегендә документ, бында ҡағыҙ, ҡултамғалар... Һәр береһенә аҡса түләргә... Һәр



З. Вәлиди. Спектаклдән бер күренеш.
Фәһимә – М. Хәйруллина.

бер урын өсөн аҡса. Ҡытайҙа нисек? Бына үҙенең ишек алды, ул әллә ҡайҙа йөрөмәй, шунда һатып ултыра. Ирек бирелгән. Улар кимәленә барып етергә әле... Эйе, ҡайһы саҡ, сит ерҙә йөрөп ҡайтһаң, ҡыйын да булып китә, үҙебеҙҙең халыҡ өсөн һыҙланыу ҙа кисерәһең. Беренсе тапҡыр сит илгә гастролебеҙ Чехословакияға тура килде. Тәүләп сит илде күргәнгәме, бигерәк инде иҫем китеп йөрөп ҡайтылды. Ҡыҙыҡһынып ҡарап йөрөйбөҙ. Ҡарамаҡҡа беҙҙең кеүек үк ябай халыҡ. Асыҡтар, йылмайып торалар. Беҙҙең башҡорттар һымаҡ, шаярта белгән, йор һүҙле халыҡ, тик телдәре генә икенсе инде. Туғанлыҡ тойғоһо менән йөрөнөк беҙ ул илдә.

Артабан сәфәребеҙ Германияға төштө. Чехословакияға күрше генә булыуға ҡарамаҫтан, унда бөтөнләй икенсе халыҡ. Һәр эштә теүәллек, аныҡлыҡ, ә хистәрен сағылдырып бармайҙар. Төҫтәре етди, ҡараштары ҡаты, һалҡын, йөҙҙәре тимер һымаҡ, тиһәм дә, арттырыу булмаҫ. Әйткәндәй, өйҙәре лә – бер иш һоро йорттар. Беҙҙе немец дуҫтарыбыҙ бер тамашаға саҡырҙы. Бейейҙәр, йылмаялар, ләкин барыбер ҡиәфәттәрендә – һалҡынлыҡ... Әйткәндәй, Германияла беҙҙе Дахау концлагерына ла алып барҙылар. Тетрәндергес документаль фильм күрһәттеләр. Уны бер ҡайҙа ла прокатҡа сығармайҙар, үҙҙәрендә генә күрһәтәләр һәм шунда ғына һаҡлана икән. Фильмды ҡараған саҡта илап, күҙем шешенеп бөттө. Концлагерь тотҡондары һөлдә булып яталар, уларҙы өйөп яғырға һалғандар, һөлдә булһалар ҙа, йәндәре сыҡмаған, ҡыбырлайҙар... Фашистар тотҡондарҙы нисек язалағандарын төшөргәндәр, тегеләр бәрәс кеүек ситлектәрҙә яталар, улар өҫтөнән төрлө тәжрибәләр үткәргәндәр. Ҡарап ултырыусылар бөтәһе лә иланы. Азатлыҡты, тыныслыҡты, үҙ-ара аңлашып йәшәүҙе ныҡыраҡ баһалайһың бындай фильмдарҙан һуң. Халыҡтарҙың тыныс тормошта йәшәүенән дә яҡшы нәмә юҡ.

Хәйер, Германияла булыуыбыҙға ла хәҙер егерме йыллап була инде. Байтаҡ ваҡыт үткән, шул саҡта уҡ немецтарҙың мал-тыуарын өй эргәһендә тотмауын, ә ситтәрәк аҫрауҙарын күреп ғәжәпкә ҡалғайныҡ. Өй эргәһен алмағастар һәм гөл-сәскә генә биҙәй. Тирә-яҡ – тап-таҙа. Хатта бер тауыҡ та күрмәҫһең. Малдары торған дөйөм ферма ҡырҙараҡ урынлашҡан, шунда барып эшләйҙәр, продукцияһын һаталар. Тәбиғи, аҡсаһы үҙенә ҡала. Беҙгә бындай цивилизация ҡасан килеп етер икән, тигәйнек. Әле лә килеп еткәне юҡ. Шуныһы: хәҙер халыҡ саҡ үҙе өсөн эшләргә өйрәнә башланы.

**– Ауыл тормошо беҙҙә лә ҡырҡа үҙгәреш кисерә, ләкин ыңғай яҡҡа ҡарағанда, ҡайһы бер мәсьәләлә артҡараҡ шылдыҡ һымаҡ. Ниндәй замандарҙа ла мәктәптәр һаҡлап ҡалынды, бөгөн был традиция юғала бара**.

– Дөрөҫөн әйткәндә, ауылдарҙың киләсәге өсөн бик өмөтөм юҡ. Эшһеҙлек көслө. Хәҙер ауырлыҡ ауыл зыялыларына, рух-белем биреүселәр өлөшөнә

төштө. Уҡытыусыларҙы ҡыҫҡартыу – ҙур бер проблема. Бер уҡытыусы физиканы ла, химияны ла, математиканы ла уҡыта. Йәки тарихты. Нисек була инде, һин бит тарихты белмәйһең? Мәжбүр итәләр, бүтән юлы юҡ, ти. Был сетерекле хәлде аңлауы бик ҡыйын – мәктәпкә, фәнгә нисек аҡсаны ҡыҫҡартырға була һуң ул? Артабан нимә булыр?

Мәктәптәрҙе ябыу ауыл тормошона нык үҙгәреш индерәсәк, яйлап ҡына ауылдарҙы бөтөрөү бара. Уҡытыусылар, әлбиттә, хәлдең яҡшырырына өмөтләнә. Рәсәй Президенты сайтына инәләр, үҙҙәренә кәрәкле мәғлүмәт эҙләйҙәр. Кеше нимәгә булһа ла йә кемгә булһа ла ышанырға тейеш. Шундай кеше эҙләйҙәр. Төп эшегеҙҙе онотмағыҙ, өмөтләнеп кенә ултырмағыҙ, тинем. Нимәгәлер өмөтләнеү кәрәк, ләкин кеше тормошон яҡшыртыр өсөн яңы эш эҙләргә, һөнәр үҙләштерергә тейеш.

**– Һеҙҙең аҙаҡҡы сәфәрегеҙ Төркиәгә булды.**

– Төрөктәр Ата Төрөктө һаман да үҙҙәренең тере геройы тип хис итә. Уның тураһында ғорурлыҡ менән һөйләйҙәр, ул һәр бер төрөк өсөн тырышҡан шәхес, тиҙәр. Беҙ Төркиәгә Нәжиб Асанбаевтың „Зәки Вәлиди“ спектаклен алып барғайныҡ бит. Истамбулда онотолмаҫ тамаша булды. Әйтәйек, сәхнәгә Вәлиди сығыуы булды, шундуҡ тамашасылар бөтәһе лә аяғүрә баҫты. Бына Ата Төрөк ролендә Хөрмәтулла Үтәшев сыҡты. „Кемаль паша!“ тип иғлан итеү менән тынлыҡ урынлашты. Беҙ аптырап киттек. Ата Төрөк ролендәге Хөрмәтулла барып ултырғас ҡына төрөктәр ҙә урындарына ултырҙы. Был иҫ киткес тәьҫир итте беҙгә. Спектакль ҡарарға губернаторҙары килде.

Коньяла ла Хөрмәтулла сәхнәгә сығыу менән көслө ҡул сабыу башланды. Ошо шәхестәренә табыналар, урамдарҙа Ата Төрөк һүрәттәре, һәйкәле...

Төрөктәрҙә әллә нисә партия бар. Был юлы барғанда беҙ һайлауҙар мәленә тура килдек. Аҙым һайын митинг. Бер квартал бараһың, бер партия вәкилдәре йыйылған, икенсе кварталға үтәһең – икенсе партия, өсөнсөһөндә – тағы ла бүтән партия. Беҙ ҙә партияға кереп ҡайта яҙҙыҡ! (көлә).

Демократия үҫешкән илдә төрлө партия булырға тейеш, ул йәшәү ысынбарлығын сағылдыра. Шуға ла быйыл барғанда Төркиәне нык хөрмәт итеп ҡайттым. Нимә өсөн, тиһегеҙме? Сөнки үҙҙәренең хоҡуҡтары өсөн көрәшә беләләр.

**– Иң мөһиме, уларҙың сығыштарының, талаптарының һөҙөмтәһе буламы икән?**

– Һөҙөмтәһе бар, тиҙәр шул. „Фәлән-фәлән ҡарар сығарылды“ тип телевизорҙан да һөйләп торалар. „Аҙна һайын нимәлер талап итәләр, һөҙөмтәһе бармы?“ – тип беҙ ҙә һораныҡ. Күтәрелгән мәсьәләләр буйынса тулы асыҡлыҡ. Күмәкләп талап иткәс, шулай булырға тейештер. Беҙҙә шундай рухи берҙәмлек юҡ. Зарлана беләбеҙ, ләкин аныҡ эш талап иткәндә, барыбер ситтәрәк ҡалыуҙы хуп күрәбеҙ. Хәйер, беҙҙә закондар ҙа икенсерәк шул... Ә Төркиәлә берәй хәл-ваҡиға менән риза булмаһалар, лозунгылар күтәреп, бөтөнөһө берҙәм демонстрацияға сыға. Мәҫәлән, эш хаҡын күтәртеү буйынса уҡытыусылар сыҡты. Дәррәү ҡуҙғалалар, һәм уларҙың эш хаҡтарын күтәрҙеләр! Шул тиклем бергәләр. Дәүләт тарафынан бирелгәндер инде үҙ фекерен белдереү хоҡуғы.

Төркиә студенттары менән аралаштыҡ. Студенттар түләп уҡыйҙар, көнөнә өс тапҡыр ашау ҙа шул хаҡҡа инә. Уҡыһындар өсөн бөтөн шарттар булдырылған. Тораҡланыу хаҡы нык арзан, ризыҡтары сифатлы. Бынан тыш, ашханала шәкәр, икмәк, тоҙ, сәй – бушлай. Шуларҙы ашап сыҡһаң да туйырға була. Унда бөтәһе лә кеше өсөн эшләнә. Эйе, тап Төркиәлә „кеше өсөн“ тигәнде аңланыҡ. Көнләшерлек һәм өйрәнерлек.

**– Төркиәлә нисә тапҡыр булдығыҙ?**

– Дүрт тапҡыр. Был юлы сәфәребеҙ ун ике көнгә һуҙылды. Истамбул – беренсе маршрут, 750 километр юл үтеп, Коньяға барып төштөк. Ярты Төркиәне әйләнеп сыҡтыҡ. Коньяла өс көн булдыҡ. Артабан ТӨРКСОЙ Анкараға саҡырып алды. Зәки Вәлиди үткән юлдың яртыһын беҙ шул ун ике көн эсендә үттек. Мин унда Зәки Вәлидигә нисек ҡыйын булғанлығы тураһында уйлап йөрөнөм. Беҙҙең халыҡ бит бөтөнләй икенсе. Ҡымыҙ эскеһе килгәнлектән, аттар ҙа тотоп ҡараған, тик ҡымыҙ беҙҙеке кеүек килеп сыҡмаған. Унда төрлө халыҡтарҙы күрҙек, боронғоса көн иткәндәре бар, тик дин менән генә йәшәгән кешеләр бар. Зәки Вәлиди Коньяла ла уҡыта, уның башҡортса һөйләшә алмауы тураһында уйланғас, бигерәк моңһоу булып китте. Төрөк телен генә түгел, башҡа телдәрҙе лә ныҡ өйрәнгән. Әйтәйек, Германияға барһа – немецса. Иранға барһа, фарсы телендә аралашҡан, ә башҡортса һөйләшә алмай зар-интизар булып йәшәгән. Әле ун ике көн эсендә генә лә беҙ туған телебеҙҙе шул тиклем һағындыҡ, башҡортса радио тыңлағы, телевизор ҡарағы килә.

Туғандарҙа ни тиклем яҡшы булмаһын, барыбер тыуған яҡҡа тартылаһың. Зәки Вәлиди ҙә, ана ҡайтам, бына ҡайтам, тип йөрөгән бит инде. Арҙаҡлы шәхесебеҙ баҫҡан эҙҙәр буйлап үткәндә, шуны ныҡ тойҙом һәм рухланып ҡайттым. Телебеҙҙе яҡлау-һаҡлауҙа уяулыҡ күрһәтәйек. Телде, рухты бөтөрөргә тырышыу элек тә булған, әле лә ул хәүеф һаҡлана. Үҙебеҙҙе тик үҙебеҙ генә күтәрә алабыҙ. Бер-беребеҙҙе күтәрәйек, ваҡлыҡтарҙан өҫтөн булайыҡ. Сит яҡтарға элек ер-һыу күрәм тип кенә бара инем, был юлы, ер-һыуҙы, халыҡты һаҡларға кәрәк, тип ныҡ уйландым. Лидерҙарҙы үҫтереү мәсьәләһе беҙҙә көнүҙәк булып ҡала. Бер генә ысын лидер булһа ла, ул халыҡ өсөн күп нәмә эшләй ала. Мин хәтерләйем, заманында Артур Иҙелбаев: „Мал менән дә аҡса эшләп була, тик ятмағыҙ“,– тип районыбыҙҙа бушлай мал таратып йөрөгәйне. Минең ҡустым да мал алып ҡалды ана шул ваҡытта. Малтабарға еңел түгел. Ләкин маҡсат ҡуйырға һәм ынтылырға кәрәк. Йәш быуын тураһында уйланғанда, әлбиттә, әхлаҡ мәсьәләһе алға сыға. Ата-әсәләре менән ҡуша эскәндәр ҙә бар икән. Ауыл халҡын эсеү бөтөрә. Уға ҡаршы көрәште аяуһыҙ алып барырға кәрәк.

Беҙ элек ауылда башҡортса уҡый инек. Әйтәйек, физика, химия һымаҡ фәндәрҙе туған телебеҙҙә үҙләштерҙек. Хәҙер руссаға күскәндәр. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте генә тороп ҡалып бара. Үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ, халыҡ туған телендә фекерләмәһә, тел нисек һаҡланһын ти инде ул? Тимәк, тел яйлап ҡына бөтөүгә табан бара. Үҙебеҙҙең театрҙа быйыл әкиәтте русса уйнарға тура килде. Был – заман талабы. Беҙҙән генә тормай. Тамашаны бүтән милләттәр ҙә – марийы ла, удмурты ла ҡарай. Синхронлы тәржемә кемгәлер ҡамасаулай, ҡолаҡсалар менән этләнәбеҙ, сөнки улар барыһына ла етмәй. Ә рус теллеләр синхронды яратмай. Шундай хәлдәрҙән һуң русса вариантҡа тороп ҡалдыҡ. Башҡорт театрында ни өсөн русса уйнайҙар, тип ризаһыҙлыҡ белдереүсе милләттәштәребеҙ бар, ләкин беҙ бит тотошлайы менән руссаға күсмәгәнбеҙ. Кескәйҙәр өсөн һораһалар, беҙ башҡортса ла уйнайбыҙ.

**– Заманында Ҡытай театрының Башҡортостанға килеүе ҙур бер ваҡиға булғайны. Башҡорт дәүләт академия драма театрының Ҡытай Республикаһында тамаша күрһәтеүен дә тарихи ваҡиға тип атаһаҡ, яҙыҡ булмаҫ.**

– Аҙаҡҡы йылдарға тиклем ҡытайҙар сәнғәте беҙҙең өсөн бикле булды. Театрҙарын күреп, үҙебеҙ өсөн асыш яһаныҡ. Ике спектакль менән алмаштыҡ. Шанхайға туғыҙ сәғәт осоҡ, оҙаҡ бит, шул тиклем ялҡытты. Йоҡо йоҡо түгел,



*„Күгәрсенкәйҙәрем“. Ф. Буләков. М. Хәйруллина – Әҡлимә ролендә.*

аптырап бөттөк. Килеп төшөү менән егеттәр, һауа һулайбыҙ, тип тышҡа сығып киттеләр ҙә күҙҙәре дүрт булып, кире йүгереп килеп инделәр. „Егеттәр, ҡыҙҙар, тышта мунса кеүек, сығып булмай!“ тиҙәр. Беҙ, шаярталарҙыр, тип уйлағайныҡ, ысынлап та, Шанхайҙа тын алырлыҡ түгел икән, бөтөнләй икенсе һауа. Мунсалағы кеүек тән лыс һыу булды ла ҡуйҙы, ысын! Тиҙерәк кондиционерлы автобусҡа инеп ултырҙыҡ, бөтөнләй тышҡа сыҡҡы килмәй. Театр бинаһы янында беҙҙе ҡаршы алдылар. Беҙ, үҙебеҙҙең йолаға ярашлы, бер нисә номер концерт күрһәтергә уйлағайныҡ. Ҡайҙан инде, ҡытайҙарҙың үҙ программаһы. Тиҙ-тиҙ генә әйберҙәрҙе индереп тә ҡуйҙылар, беҙ күрмәй ҙә ҡалдыҡ. Бөтә ваҡыттары иҫәпле, секундына тиклем планлаштырылған. Шундуҡ ашарға алып киттеләр, артабан – экскурсияға. Кискеһен театрға юлландыҡ. Ял итмәгән, йоҡламаған килеш көнө буйы йөрөнөк. Ҡунаҡханала эҫе. Тәҙрәне асһаҡ, тағы ла тынсыуыраҡ, тыштан ялҡын бөркөлгәндәй, балконға сыҡһаҡ, унда ла һауа юҡ. Өйрәнеп булмай былдай күренешкә, һауа етмәүҙән йонсоноҡ. Ҡытайҙа спектакль барғанда ла ҡыҙыҡ булды. Тышта тынсыу икәнен онотоп, һауа һуларға тип сығабыҙ ҙа йәһәтләп кире эскә атылып килеп инәбеҙ.

Егерме ҡатлыҡ театрҙа уйнаныҡ беҙ. Гримеркалары өҫтә. Актерҙарҙың бүлмәләре иркен. Артист өсөн бөтә нәмә эшләнгән. Иң иҫтә тороп ҡалғаны тренажер залы булғандыр. Беҙҙең театрҙарҙа ундай нәмәләр юҡ бит. Хатта „Динамо“ стадионында ла ундай ҡоролмалар юҡ. Ниməһе шаҡ ҡатырҙы – эш кабинеттары быяла менән генә бүленгән. Директоры, уның урынбаҫары, секретары – шунда бергә, быяла аша кемдең нимә эшләгәне һәммәһенә лә күренеп тора. Директоры ла бик ябай кеше, беҙҙең менән үҙе аралашып, күрһәтеп йөрөнө.

Тәржемә синхронда барҙы. Электрон яҙма, йәғни йүгереүсе юлдар ҙа файҙаланылды. Шулай ҙа күберәк тәржемәгә реакция. Мин үҙемдең сәхнәгә сығыр мәлемде көтөп ултырам. Бына Рәзифә Арыҫлан Йәнбәков менән „Ҡоҙаса“ арияһын йырлай. Мин әллә ниндәй уйҙарға баттым, әйтеп аңлатҡыһыҙ кисерештәр тыуа күңелдә. Беҙҙең тел ҡалай ҡытай теленә оҡшаған, тип уйлайым. Хәҙер мулла йыры башланды, нишләптер, ул да ҡытайса йырлаған кеүек. Ҡытайҙа үҙебеҙҙең телде яңынан асып ултырам, йәнәһе. Ҡайҙан былдай яҡынлыҡ, тием. Ҡай саҡ хатта телебеҙ бөтөнләй бер иш һымаҡ та... Онотолдом бер заман. Уйҙарым менән әллә ҡайҙа киткәнмен, үҙемдең сығыу мәлемә һуңлаған да ҡуйғанмын. Арыҫлан Йәнбәков: „Мәхмүзә!“– тип ҡысҡыра. Ишетмәйем икән. Алмас: „Минзәлә!“– тип исемем менән өндәшкәс кенә, ысынбарлыҡҡа әйләнеп ҡайттым. Шулай онотолоп китеп, һуңлабыраҡ килеп сыҡтым сәхнәгә. Егеттәр һуңынан минән күҙ ҙә астырмай көлдө.

Ҡытай актерҙары теге йәки был спектаклде илдәрендә ҡуялар ҙа шуның менән бөтөн сит илдәрҙе йөрөп сығалар икән. Әйтәйек, бер спектаклде улар АҠШ-та ла,

Англияла ла, Германияла ла ҡуйғандар һәм уның менән бөтөн фестивалдәрҙә булғандар. Турне рәүешендә. Ә бында икенсе спектакль бара, тамашасы ҡарап бөткәндән һуң уның менән сит илдәргә сығып китәләр. Мотлаҡ йөрөү – был төп талап. Сәхнәлә эффекттар бирә торған компьютер системаһын уңышлы ҡулланалар. Был әлегә беҙҙә юҡ. Ә билеттарҙы электрон почта, Интернет аша һаталар, кассаға килеп алыу юҡ. Беҙ ул заманда был системаны бик аңлап та бөтмәй инек. Ошоларҙан ғына сығып та әйтергә була: ҡытайҙарҙа театр үҫешкән, уның сит илдәр менән бәйләнеше ныҡ алға киткән. Беҙ бындай юлдың әле саҡ башында торабыҙ. Халыҡты рухи яҡтан байытыр өсөн эшләйһе эштәр күп.

**– Ҡытай тигәс, баҙар, сауҙа тигән һүҙҙе урап үтеүе ҡыйын. Социаль-иҡтисади тормош менән танышырға мөмкинлек булдымы?**

– Ҡытайҙар нык ойошҡан халыҡ, бик егәрлеләр. Беҙҙә, ғәҙәттә, сифатһыҙ әйберҙе ҡытайҙыҡы, тиҙәр. Юҡ, уларҙың үҙҙәрендә әйберҙәре юғары сифатлы.

Беҙҙе унда бер баҙарға алып барҙылар. Йөрөй торғас, арыным. Хәл алыр өсөн бер урынға барып ултырҙым да үткән-һүткән кешеләргә ҡараш ташлайым. Баҙар халҡы бөтәһе лә бер иш булып күренә башланы. Туҡта, ысынлап та шулаймы икән ни, тип тағы ла күҙәтә башланым. Ҡарайым, бер заман ҡаршымда Баймаҡ кешеһе китеп бара. Икенсе кеше – хәс тә Әлшәйҙеке. Һәр яҡтың бер кешеһен „таптым“ мин унда. Үҙ милләттәшеңә оҡшатҡас, яҡын күренә башлайҙар, хатта ҡаршыһына сығып һөйләшке килә. Мин йылмайып ҡарағас, улар ҙа йылмайып үтеп китәләр. Баҡһаң, ҡытайҙар ҙа бер төрлө түгел икән, улар ҙа төрлө-төрлө. Арығанды күреп торалар, иғтибарлылар, дәртләндереп, йыуатып ҡарап үтәләр.

**– Образды сәхнәгә сығарыу, һулыш өрөү, йәшәтеү процесы ҡыҙыҡ. Уның эшләнеү-тыуыу юлы нисегерәк?**

– Еңел генә тыумай. Ролде эстән генә гел эшләп йөрөргә кәрәк. Йәштәргә лә: „Зарланып йөрөргә ярамай, хатта үҙегеҙ уйнамаған, ләкин уйнарға теләгән ролдәрегеҙҙе лә үҙегеҙ өсөн эстән генә эшләп йөрөгөҙ“, – тип әйтәм. Даими күнекмә кәрәк. Ролде эшләмәйһең икән, йылдан-йыл күңел ҡата бара... Уны һуңынан уятыуы ҡыйын.

**– Ижад өҙлөкһөҙ дауам ителергә тейеш, тигәнде йыш ишетергә тура килә. Роль оҡшаймы-оҡшамаймы, актерға уны шәп итеп уйнау талабы ҡуйыла. Хеҙмәт түккәс, көс һалғас, улар барыһы ла берҙәй яҡын һәм ҡәҙерле ролгә әйләнәлер**.

– Эйе, ижад гел алға барырға, туҡталып ҡалмаҫҡа тейеш. Роль бирелә икән, шундуҡ эшкә тотонаһың. Башта уҡыйһың, текст менән танышаһың, режиссерҙың фекерен тыңлайһың, уныҡына үҙеңдең фекереңде дә ҡушыла. Режиссер спектакль тураһында баш ватһа, һин үҙеңдең ролең тураһында уйлайһың. Урал Ғәлиевтың спектаклен уҡыныҡ, ойотҡо һалынды, тиергә була. Мин унда немец теле уҡытыусыһын эшләп ҡарарға булдым. Ул „тыуҙырыу“ өҫтөндә, ҡайҙа ғына йөрөһәм дә, урамдамы, магазиндамы, мәктәптәме, был ҡатын ниндәйерәк булырға тейеш, тип ошо роль тураһында уйлайым, эстә туҡтауһыҙ эҙләнеү бара.

**– Образды эшләү ҡыҙығыраҡмы, әллә эшләнелгәнде тамашасы алдына сығарыу нығыраҡ ҡыҙыҡмы?**

– Мин репетицияларҙы нык яратам. Этюд эшләп ҡарау күңелгә ләззәт бирә. Сөнки беренсе тапҡыр образ тыуа, һин уға йән бирәһең, һулыш өрәһең. Образды терелтеү бүтән берәүгә лә түгел, ә һиңә бирелгән. Күңелеңде һалып эшләмәһәң, уның зәғиф килеп сығыуы ихтимал. Бер үк ролде һәр артист үҙенсә күрә, үҙенсә аса. Һәм ни өсөн шулай күрергә теләгәнеңде режиссерға иҫбат

итергә кәрәк, спектакль тамашасыға тәҡдим ителгәнгә тиклем төрлө яҡлап көрәш бара. Режиссерға ла ышанырға кәрәк, юҡһа төрлө яҡҡа тартыу килеп сыға. Барыбер уртаҡ бер фекергә киләһең инде аҙаҡ. Ә һөҙөмтәһе инде – матур булып спектакль тыуа. Шулай ҙа образ тыуҙырыу, уны сәхнәгә сығарыу – мәңгелек көрәш булып күҙаллана.

**– Был осор эсендә төрлө режиссерҙар менән эшләргә тура килгәндер.**

– Эйе, миңә бик ҡыҙыҡлы режиссерҙар менән эшләргә насип булды. Рәлиф Кинйәбаевтың „Айғырыңды үтескә бир“ комедияһын М. Рабинович ҡуйҙы. Ул саҡта беҙҙең Академия драма театрында режиссер юҡ ине. Мәҙәниәт министрлығында, милли спектакль кәрәк тип, Рус дәүләт драма театры режиссерына ҡуйырға тәҡдим иткәндәр. Михаил Исаакович ауыл тормошон бөтөнләй белмәгән кеше булып сыҡты, беҙгә килеү менән әйтте: „Һеҙҙең ярҙамға өмөт итәм, сөнки ауыл мөхите миңә ят. Эшләгеҙ, ҡарайым, мин дә өйрәнергә тейешмен“. Беҙгә лә ҡыҙыҡ булып китте. Әллә беҙҙе егелеп эшләтер өсөн бер алымы ғына булдымы икән? Һәр хәлдә, дәртләнеп, тырышып, ауыл мөхитенән этюдтар күрһәтәбеҙ. Михаил Исааковичты „Миҙхәт Исхакович“ тип йөрөттөк, әле лә шулай өндәшәбеҙ. Спектаклдә булмағандарын да эшләп күрһәттек. Ахыр, ҙур бер нәмә килеп сыҡты. Бына хәҙер йыя алмайбыҙ бит! Русса тәржемәһе булһа ла, режиссер барыбер бөтөн нескәлектәрен белеп бөтмәй. Һуғылған спектакль бер бөтөн булып йыйылмай ҙа ҡуя. Рабинович үҙе аптырауға ҡалды. Шунан рус театрынан үҙенең командаһын – ярҙамсыларын, музыканттарын һ.б. саҡырып алғас, бергәләшеп яйлап ҡыҫҡартып, таҙартып алдылар. Премьера уйнаған көндә лә яңы текст бирҙе. Уны көндөҙ ятлайбыҙ, ә кис уйнарға кәрәк. Тексты ятлап өлгөрөү – бер, уны үҙеңдеке итергә лә кәрәк бит әле. Ә кисен премьерабыҙ бик йәнле барҙы. Үҙенән-үҙе шулай килеп сыҡты. Ни өсөн йәнле? Сөнки ул бер ҡалыпҡа һалынмағайны. Сәхнәлә уйнаған саҡта ла уйлау-фекерләү барҙы.

**– Яңы текст менән тәбиғи һөйләшеүгә яҡын килгәнһегеҙ, үҙенә күрә тере һөйләшеү-аралашыу һымаҡ килеп сыҡҡандыр?**

– Был беҙҙең өсөн яңылыҡ та булды. Режиссер үҙе лә бик ҡәнәғәт ҡалды. Комедияны ҡуйған саҡта бүтән төрлө яңылыҡтар ҙа индерелде, мәҫәлән, рус музыкаһына урын бирелде. Ауыл ҡыҙы ҡалаға китергә хыяллана. Шуның хыялы күрһәтелде. Был сюжет авторҙа юҡ ине. Ҡала егете менән дуҫлашыуын бейеү аша бирҙеләр. Текст менән тәүләп танышҡанда рәхәтләнеп тыңлағайныҡ, автор үҙе килеп уҡыны, ул шундай етди итеп уҡый, ә беҙ, артистар, йығылып ятып көләбеҙ, ысын комедия килде, тинек.

**– Ҡалмыҡ режиссеры Манджиев та һеҙҙең театрҙа бер нисә пьесаны сәхнәләштергәйне. Уның менән эшләү бәхете тейҙеме?**

– Эйе, режиссер булараҡ уның эш алымы инде бөтөнләй икенсе. Борис Манджиев сәхнәнән төшөп, тамашасы залына барып ултыра ла: „Эшләгеҙ!“ – тип ҡысҡыра. Беҙ бит, ғәҙәттә, башта этюд эшләйбеҙ, яйлап ҡына тексты ятлайбыҙ, уны үҙебеҙҙеке итәбеҙ, шунан ғына дөйөм эш башлана. Манджиев иһә килде лә тиҙ генә һөҙөмтә талап итә башланы. Беҙ аптырап ҡалдыҡ. Сәхнәгә сығабыҙ ҙа, тексты тотоп, һөйләнеп йөрөгән булабыҙ. Эшләйбеҙ-эшләйбеҙ, бер нәмә лә килеп сыҡмай. Режиссерыбыҙ: „Не верю!“ – тип ҡысҡыра. Мин „Ҡоштар ояһына ҡайта» спектаклендә бомж ҡатын – Мадамды эшләнем. Мадам бер стакан араҡы эсергә тейеш. Эскән булып уйнап күрһәтәм, ләкин режиссер: „Не верю!“ – ти ҙә ҡуя. Ахыр, ярты стакан шарапты тәмләп ҡарарға тура килде. Бер стаканды бер нисек тә эсеп булмай. Ауыҙға алған нәмәм түгел ине шул, ярты стакандан үлә

яҙҙым, иҫерҙем. Аңланым нисегерәк була икәнен. Шунан текст үҙенән-үҙе китте. Сөнки тәьҫорат тороп ҡалды бит инде. Сәхнәлә роль уңышлы килеп сыҡһын өсөн бына шундай ҡорбан килтереү ҙә була! Дөйөм алғанда ла, спектакль ныҡ матур барҙы. Әйткәндәй, мин Мадам ролен ныҡ яраттым. Башҡортостандың халыҡ артисы, драматург Шамил Рәхмәтуллин ҡасандыр „«Марксизм-ленинизм“дан уҡытҡан, аҙаҡ бомжға әйләнгән, әммә принциптарына хыянат итмәгән кешенең яҙмышын булған хәлдән яҙған. Минең роль – әсәһе ҡалдырып киткән ҡыҙ. Ауыр эшләнем был драматик образды, бомждарҙы күҙәтергә, хатта улар менән аралашырға тура килде. Аллам һаҡлаһын, йәмғиәткә кәрәкмәгән кешеләр бит улар. Артыҡ йәндәр, ә тормоштарын күҙәтһәң, ҡәҙемге йәмғиәттәге кеүек ойошма: араларында башлыҡтары ла, ҡолдары ла бар. Социумдағы мөнәсәбәт һаҡлана. Кемгәлер баш эйәләр, ҡолдары уға аҡса эшләй, мал таба, хеҙмәтләндерә. Был спектаклдә шундай шәп артистар уйнаны: Заһир Вәлитов, Рәмзиә Хисамова, Ғаяз Алтыншин, Азат Йыһаншин. Улар образдарын шул тиклем яратып башҡарҙылар.

А. Березовский тигән режиссер менән дә эшләнем әле. Шамил Рәхмәтуллиндың „Алмағастар сәскә атҡанда“ спектаклен сәхнәләштергәйнек. Березовский постановка рәүешендә эшләй, үҙе ҡуя спектаклде, һинең уй-фекерең уға кәрәкмәй. „Ошонда тораһың, фәлән ваҡытта ошонда ҡарайһың, фәлән ваҡытта бында ҡарайһың...“ Беҙгә, этюдтарҙа үҫкән Исрафилов уҡыусыларына, быны ҡабул итеүе ҡыйын булды. Яйлап эшләнек, һәм аҙаҡтан бына тигән спектакль килеп сыҡты. Унда мин Алмағас (ҡушаматы) ролендә, ә Илдар минең йәшлек мөхәббәтемде уйнаны. Балалар йортонда тәрбиәләнеүселәр һуғышҡа китә, әйләнеп ҡайталар, ҡартайғас осрашыуҙары һүрәтләнә, шунда мин беренсе мәртәбә парик кейҙем. Тәүге актта – ҡыҙ образы, аҙағында оло ҡатын булып сығыш яһайым. Үҙемә лә бик ҡыҙыҡ булды. Тәрән кисерешле, хисле спектакль килеп сыҡты. „Постановочный“ тип әйтәбеҙ, хис һинеке, ләкин режиссер үҙе талап иткән хисте бирергә ҡуша, ошолай булырға тейеш, бөттө-китте, вәссәләм! Шундай ине Березовскийҙың режиссерлыҡ алымы.

Рифҡәт Исрафилов спектаклгә үҙенең алымын таҡмай. Ул бурыстарҙы ҡуйып, ваҡиғаларҙы эшләп бөткәс кенә этәрә, режиссер фекерен актер үҙе уйлап тапҡан кеүек килтереп сығара. Йәғни үҙе теләгән маҡсатҡа барыбер яйлап ҡына килтерә, ләкин һин, быға мин үҙем килдем, тип уйлайһың. Илдар Юзеевтың „Аҡ ҡалпағым төшөрҙөм ҡулдан“ пьесаһын ҡулға алғас, режиссер спектаклдең ниндәй булырға тейешлеген генә әйтте, ә уҡытыусы образы үҙенән-үҙе килде лә сыҡты. Ул саҡта телевизион күперҙәр ойошторола башлағайны. Америка менән телекүпер аша һөйләшеүҙе беҙҙең театр беренсе булып күрһәтте. Был этюдты бер нисә тапҡыр эшләргә тура килде, сөнки хис кәрәк ине – йәшлек мөхәббәтен күреү, тойғоларҙың яңынан тоҡаныуы. Ә хис ул беҙгә хас нәмә. Сөнки Һиндостан киноһында тәрбиәләнеп үҫкәнбеҙ. Тамашаһы ла был спектаклде яратты. Режиссерҙың хеҙмәте тамашаның уңышында сағыла ла инде. Рифҡәт Исрафиловты беҙ һаман да яратабыҙ. Һағынабыҙ, берәй спектакль килеп ҡуймаҫмы, тип көтәбеҙ. Үҙебеҙҙә лә бына тигән режиссерҙар үҫеп сыҡты. Хәҙер театрҙы Айрат Абушахманов етәкләй, төрлө жанрҙағы спектаклдәр ҡуя. Туфан Миңнуллиндың „Мулла“ спектаклен тамашаһы яратып ҡарай. Ул ысын профессионал, тип әйтер инем, үҙ эшенең оҫтаһы. „Шәүрәкәй“, „Ҡоҙаса“, „Зәки Вәлиди“, „Кәкүк ояһы“ – әле әйткәнемсә, төрлө жанр. Тик театрыбыҙҙа бер генә режиссер булғанлыҡтан, ул барлыҡ артистарҙы ла ала алмай, тағы ла бер режиссер кәрәк.

**– Режиссерҙар етешмәйме ни?**

– Әлбиттә, тәжрибәле, төплө режиссерҙар етешмәй. Беҙҙең коллектив ҙур, һәр бер артистың төплө режиссерҙа эшләгеһе килә. Рөстәм Хәкимов беҙҙә эшләй ине, уны Милли йәштәр театрына баш режиссер итеп алдылар. Дөрөҫ, эш араһында ғына инде ҡуйып китә ул спектаклдәр. Ләкин эш урыны бит йәштәр театрында.

**– Райондарға сығаһығыҙ. Ауыл халҡы нимә тураһында ҡарарға ярата? Уның талабы ниндәйерәк?**

– „Күгәрсенкәйҙәрем“ спектакле менән мин быйыл тыуған яғыма, Әлшәйгә, килдем. Премьеранан да шәберәк барҙы. Өфө тамашасыһы беҙгә өйрәнеп бөткән. Икенсенән, беҙгә театр донъяһын яратҡан кешеләр генә йөрөй. Ауылдарҙа концертар күп ҡуйыла, ләкин спектаклдәрҙе һирәгерәк алып киләләр. Шуға ла театр артистарын һағынып торалар. Беҙҙең Академия драма театры бер нисә йыл райондарға сыҡманы. Быйыл йөрөй башланыҡ. Мин үҙемдең тыуған яҡты яратам, унда ҡайтһам, ныҡ тулҡынланам. Йылдар буйы эшләгән эштең һөҙөмтәһен күрһәтке килә, шуға күңелдә борсолоу ҙа бар. Ауылдаштарым: „Күҙҙән йәш сыға, илап ултырҙыҡ“,– тиҙәр. „Көлә торған урыны күп бит“,– тием уларға. „Беҙ, – тиҙәр, – һинең ата-әсәңде күҙ алдына килтерҙек“. Ысынлап та, мин быйыл спектаклде ата-әсәмә арнап уйнайым, уларҙың йәшлеген кәүҙәләндерәм.

Ниндәй булған һуң уларҙың йәшлеге? Ал-ял белмәйенсә эшләнеләр ҙә эшләнеләр, беҙ ҙә колхозда улар менән бер рәттән эшләнек. Инәйем үҙ ғүмерендә бер тапҡыр ҙа үксәле туфли кеймәне. Спектаклдә бабай ҡарттар йортона әбейҙәргә туфли алып килә. Дүрт әбейҙе лә үҙенә алып ҡайтып китә. Бында яңғыҙлыҡ темаһы үҙәк урында тора. Ҡатын-ҡыҙ яңғыҙлығы. Ата-инәй барыбер күңелдәре менән яңғыҙ бит. Беҙ, мәҫәлән, биш бала үҫтек, унан төрлө яҡҡа таралыштыҡ. Атай-инәй иһә, бөгөн булмаһа, иртәгә ҡайтып төшөрҙәр, тип көтөп ултыра, һәр ваҡыт ашы ла, бәлеше лә әҙер. „Түҙемлегебеҙ бөткәйне, әлдә ҡайттың!“– тип ҡыуанып ҡаршы алалар. Мин хисле кеше, бер көн ялға булһа ла ҡайта торғайным. Әсәйемдең кисерештәрен аңлай торғайным, ләкин барыбер төбөнә тиклем аңлап бөтмәгәнмен икән. Инәйемә: „Йылдар буйы эшләнең, баҫыуҙан ҡайтманың, бәрәс ҡараның, орден алһаң да, бер тапҡыр ҙа ял итергә барманың“,– ти торғайным. Хужалыҡ, мал-тыуар, бала-саға тип йәшәне.

Ошо спектаклдә инәй-атайымдың хистәрен бирергә тырыштым. Эске яңғыҙлыҡ ҡына түгел, физик яҡтан да яңғыҙлыҡты.

Яңғыҙлыҡ сит илдәрҙә бигерәк тә ҙур проблема булып тора, тиҙәр. Һөйләшеп ултырырға кеше тапмайҙар. Япониялa, мәҫәлән, ҡурсаҡ һатып алып, ҡаршыһына ултыртып, шуның менән һөйләшәләр, ҡурсаҡты ашаталар, йоҡларға һалалар икән. Аҡсалы ҡарттар психолог тота. Бына шулай, һөйләшергә лә кеше кәрәк. Инәйемә: „Яңғыҙмын тимә, күршеләр бар, сығып, барыбер шулар менән һөйләшеп ултыраһың бит инде“, – тинем. Ул: „Юҡ, үҙ ҡаның, үҙең тыуҙырған кеше генә һине яҡшы аңлай. Үҙ хәлдәремде һиңә һөйләһәм, миңә рәхәт“, – тине. Эйе, инәйем проблемаларын бер ваҡытта ла кешегә сығарманы. Үҙендә ҡалдырҙы, күршеләргә ауырлыҡ һалманы, серен әйтмәне, гел һәйбәт яҡтарын ғына һөйләй торғайны. „Күгәрсенкәйҙәрем“дә инәйемдең сабырлығын кертергә тырыштым, шуға ныҡ яҡын миңә был спектакль.

Инәйем бер осор депутат булды, ҡарты-йәше – бөтәһе лә килә торғайны уның янына. Элек бит кеше өсөн эшләйҙәр ине, үҙенә лә төрлө кешеләр янына барырға тура килде. Ныҡ эскән йәки һуғышырға яратҡан кешеләр ҙә булманы түгел. Тәүәккәллегенә әле лә хайран ҡалам, шуларҙың араларына инә, тынысландыраяраштыра торғайны. Абруйы ҙур ине, уға ҡаршы һүҙ әйтмәнеләр.

Бер ҡатын эсеүгә әүрәне, туҡтай алманы, ахыр әсәлек хоҡуғынан мәхрүм итергә булып киттеләр. Өлкән балалары, кесе туғандарҙы үҙебеҙ ҡарайбыҙ, тиҙәр. Хоҡуҡтан мәхрүм итеүгә әсәйем ҡырҡа ҡаршы сыҡты. Өлкәндәренә: „Ул бит һеҙҙең әсәйегеҙ, аҡсаһын табып, һеҙҙе ашатты-кейендерҙе, уҡытты. Кем аҡсаһына йәшәнегеҙ, хәҙер һеҙгә кәрәкмәйме ни?“– тип судҡа барып, яҡлап, ярҙам итеп ҡайтты. Ҡатын, эй, рәхмәттәр әйтеп йөрөнө, ғаиләләге мөнәсәбәттәр ҙә аҙаҡ һәйбәтәйеп китте, бына тигән итеп донъя көттөләр. Инәйем кемдәргәлер аҡса бирҙе, уҡытырға ебәрҙе, кейендерҙе. Уның яҡшылыҡтары беҙгә төшә. Әле лә килеп рәхмәт әйтеп китәләр. Йәш сағында мәмәй генә булһа, аҙаҡ көслө ҡатынға әйләнде, ауылдаштарына терәк булып торҙо. Шулай ҙа күңеленән барыбер яңғыҙ булған, тип уйлайым. Беҙ, балалары, үҙ аллы булғас, эш, үҙ донъябыҙ, тип саптыҡ, ул заманда өй телефоны ла, кеҫә телефоны ла юҡ ине. Хат яҙып йә переговорға биреп кенә була ине. Әле лә берәй мәсьәлә килеп тыуһа, инәйем ниндәй кәңәш бирер ине икән, тип уйлайым, ул әле лә миңә ярҙам итә.

„Ҡоҙаса“лағы Мәхмүзә ролен ҡарағас, ауылдаштар: „Әсәйеңде хәтерләтте“,– тип әйттеләр. „Шул тиклем Шәмсинур инәйҙе асыҡ күҙ алдына килтерҙек!“ тинеләр. Яппар ҡарт унда ат тота. Атайым да ат тотто. Ғүмер буйы минең күҙ алдымда ат тора. Атайым йылҡы ҡарарға тип сығып китә лә юл ыңғайы үҙенең ҡорҙаштарына һуғыла, бүтән эштәренең осона сығып, яйлап ҡына ҡайтып инә. „Ҡоҙаса“ спектакле лә ауыл тормошона бәйле төрлө элементтар менән байытылды, сөнки эшләнеп бөткәндән һуң, унда барыбер нимәлер етмәй ине. Спектаклде шуларҙы уйлап, күҙ алдына килтереп эшләнем. Режиссер Абушахманов, ысын шулай булғанмы, тышау, ҡыңғырау мотлаҡ кәрәкме, ҡарт арҡан тотоп йөрөргә тейешме, тип һорай. Күрһәтергә, иҫбат итергә тура килде. Деталдәр яйлап йыйылды һәм бына тигән спектакль килеп сыҡты.

Бер саҡ хөкүмәт һалымды ныҡ күтәрҙе, атты бөтөрөргә мәжбүр булдылар, ләкин атайым атһыҙ йәшәй алмай ине. 75 йәшендә уның өс аты бар ине.

Инәйем ниндәй рухлы булды, башҡорт халҡы өсөн йәнен бирергә әҙер ине ул. Балалары уҡып сыҡһын, кеше булһын тип, мохтаж кешеләргә аҡсаһын да биреп торҙо. Һуңынан да гел ауылдаштарына изгелек теләп ултырҙы. Ауылда эшләгән кешегә эш бар. Тырышырға ғына кәрәк. Беҙ бушлай эшләнек, йәш булһаҡ, хәҙер ҙә кинәнеп эшләр инек, тип дәртләндереп ултыра торғайны. Шундай рухлы кешеләр күберәк булһа, беҙҙең донъя күпкә алға китер ине. Инәйем: „Коммунизм теләнек, хәҙер бит коммунизмда йәшәйбеҙ, эшләргә лә, малын тоторға, донъяны үҙең теләгәнсә рәтләргә лә була, ә элек гел тыйыу булды“,– тип әйтә ине.

**– Ә һин холҡоң менән кемгә нығыраҡ оҡшағанһың?**

– Мине хәҙер инәйемә оҡшата башланылар, олораҡ апайҙарҙы уйнайым бит, бәлки шуғалыр ҙа. Үҙем дә инәйемдең яҡшы сифаттарын алырға тырышам. Сәхнәлә лә актер, ғәҙәттә, ябай кешеләрҙән өҫтөнөрәк торған, көслөрәк кешеләрҙе эшләй. Ябай, һәйбәт, әммә характеры булмаған ролдәр тамашасыға ҡыҙыҡ түгел. Халҡын ниндәйҙер оло эштәргә рухландырған, көслө холоҡло, үҙенсәлекле, эске яҡтан бай, тормош ваҡлыҡтарынан өҫтөнөрәк торған образ кәрәк уға. Тамашасы үҙ геройынан нимәлер алырға тейеш.

**– Элекке артистар тарихи теманы яҡтыртҡан пьесаларҙы йыш ҡуйғандар, хәҙер тарихи әйбер бик ҡуйылмай.**

– Театр классика менән тамашасының зауығын тәрбиәләгән. Шекспир, Вальтер, Гюго, Камю, Достоевский һ.б. барыһы ла ҡуйылған. Ундағы проблемалар иҫкермәй – атай-әсәй һәм балалар, бай-ярлы мөнәсәбәте, хакимлыҡ өсөн

күрәш... Классик әҫәрҙәр ҡуйыу маҡсат итеп ҡуйылған һәм классика менән артистар ҙа үҫкән. Шуныһы үкенесле: хәҙер халыҡ быңдай әҫәрҙәрҙе ҡарарға бик ынтылмай, уларға, ғәҙәттә, зыялылар ғына килә. Дөйөм алғанда, беҙҙә классика юҡ. Ул беҙҙең мөхит түгел, тиҙәр. Ә артистар өсөн классик ролдәр бик кәрәк, уны уйнағандан күңел байый ғына бара. Бөгөнгө менән үткәнде сағыштырыр, һабаҡ алыр өсөн, шул уҡ хаталарҙы ҡабатламаҫ өсөн. Элек батшалар театр тотҡандар, уны үҙҙәренең проблемаларын хәл итеүҙә ярҙамсы итеп күргәндәр, үҙ мәнфәғәтендә лә файҙалана белгәндәр. Мәҫәлән, батша закондарын театр аша әйттергән, тәрбиәгә йоғонто яһаған. Беҙҙә милли театр дәүләт тарафынан ҡаралырға тейеш, сөнки ул халыҡтың рухи донъяһын, телен, ғөрөф-ғәҙәтен, эске кисерештәрен, хәтерен һаҡлай. Фәһемле әйберҙән тамашасы үҙенең күңелендә ҡайнаған һорауҙарға яуап алып ҡайтып китә.

Үҙебеҙҙең барлыҡ башҡорт ағайҙары ла театрға йөрөһөн ине, тип теләйем. Улар бит халыҡ менән эш итәләр, үҙҙәренә күп нәмә алып ҡайтырҙар ине. Халыҡ араһына сыҡҡанда яуаптар ҙа таба. Тарихты төрлө яҡлап белергә кәрәк. Иманым камил, „Зәки Вәлиди“ спектаклен дә уларҙың күбеһе ҡарамаған. Был спектаклдә бөгөнгөгә ауаздаш күп проблемалар яҡтыртыла һәм хәл ителә. Хаталар эшләнмәҫ ине.

**– Төркиәлә шағирҙарға, шиғриәткә мөнәсәбәт яҡшы, тип ишеткәнем бар. Ҡала мәрҙары айырым шиғыр кисәләре үткәрә икән. Халыҡ алдында сығыш яһағанда ла шиғри юлдар ҡушып ебәрәләр, ти. Ғөмүмән, мәҙәниәткә булған мөнәсәбәттең сағылышылыр был...**

– Анкара театрында сығыш яһағанда, мәҫәлән, бөтөн хужалар беренсе рәттә сәхнә ҡаршыһында ултыралар ине: губернатор, урынбаҫарҙары, ТӨРКСОЙ етәкселәре... Улар үҙҙәре артынан бит халыҡты йәлеп итәләр. Анкарала булғанда ныҡ һоҡландым, шул тиклем ябайҙар. Ихлас һөйләшәләр, проблемаларын да йәшермәйҙәр, беҙҙең менән фотоға төшәләр... Беҙҙә лә өйрәнһендәр ине ошондай аралашыу мәҙәниәтенә. Мәҙәниәткә, сәнғәткә иғтибар ҙур, аҡса йәлләмәйҙәр. Конья ҡалаһында йыл да „Мең һулыш – бер тауыш“ фестивален үткәрәләр. Нисәмә колектив килә, һәр береһендә – егерменән артыҡ кеше. Биш йондоҙло иң яҡшы ҡунаҡханаларға урынлаштыралар. Фәһем алырлыҡ нәмәләр күп, төрлө ергә экскурсиялар, көнөнә өс тапҡыр ашау. Шул тиклем аҡса түгеп кем быны эшләй? Мәҙәниәт министрлығы ярҙам итә, аҡсалы кешеләр таба һәм үткәрә. Беҙгә быйыл айырыуса ҡыҙыҡ булды. Былтыр өс көнгә М. Буранғоловтың „Шәүрәкәй“ спектакле менән барһаҡ, быйыл ун ике көн буйы төп театрҙарын ҡарау бәхетенә лә ирештек. Улар үҙҙәренең ҡиссаларынан фәлсәфәүи әйберҙәр әҙерләгән. Төркиәнән бик рухланып ҡайттыҡ. Үҙебеҙҙә лә бына тигән материал бар, беҙ бит ҡиссаларға, легендаларға бай халыҡ. Сығарырға кәрәк уларҙы, йәғни бүтәндәргә үҙебеҙҙең халыҡ яҙмышын күрһәтергә. Яҡшы әҫәрҙәребеҙ менән һоҡландырырға тейешбеҙ. Зәки Вәлиди кеүек оло шәхесебеҙҙе ҙурлап, беҙ ҙә Төркиәнән үҙ халҡыбыҙға дан йырлап ҡайттыҡ. Эйе, эшләйһе эштәр күп әле.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА әңгәмәләште.**

## *БӘХЕТЛЕ ЯЛҠАУ*

Эй, ялҡау ҙа инде бынау Ғилметдин! Колхозға эшләп йөрөргә башыма тай типмәгән, тип оҙон көн буйына өйҙә тик ята. Ярай, колхозы колхоз исмаһам, үҙ донъяһында ҡыл ҡыбыртлатһасы! Соланының ишеге иләкләнеп, бер бөртөк сөйҙә эленеп ҡалған. Хәҙер ел сыҡһа, осороп алып китергә тора. Ҡапҡаһын күр: эҙләп-эҙләп тә күрә алмаҫһың. Күптән инде мунсаға утынға китеп бөткән. Ҡатыны исем өсөн тишек-тошоҡ ойоҡтары менән бәйләп тоташтырған рәшәткәләр генә бер аҙ йорт ихатаһын урам буйынан айыра.

– Ирһеҙ бисәләр минән шәп йәшәй... – донъяһын башҡалар менән сағыштыра ла уфтанып ҡуя ҡатыны Сания.

Уфтаныуҙан башҡа сараһы ла юҡ шул. Бөгөнгө ирҙәр етмәгән заманда ниндәйенә лә риза булып йәшәйһең. Хәҙер ирең тупһа аша атлап сыҡһа, бүтәндәр индереп алмаҫ тимә. Бер кем дә ялҡау тип тормаҫ. Шуға Сания түҙә. Бөтә донъяһы үҙе елкәһенә ауып килгәнен белһә лә, сығып китмәй.

Бер көн иртән ууаныуҙарына ҡышҡы буран тыш яҡтан солан ишеген ҡаплағас, Ғилметдин урам яғына ҡараған тәҙрәнең бер быялаһын ярып, шунан шыуышып тышҡа сығырға башы етте. Ҡарҙы күрәп, солан ишеген асҡан тиһеңме?

– Яҙ ирей торған ҡарҙы көрәп, башыма тай типкәнме? Ана, тәҙрә аша йөрөүе ирмәк тә, еңел дә, – тип кире шул тишектән инде лә ярыҡҡа мендәр тығып ҡуйҙы.

Санияһы тәҙрәгә һыймай шул. Баяғы ҡарҙы үҙенә көрәп сығырға тура килде. Яҙҙы көтөп, өйҙә йәшенеп ятыр әмәле юҡ. Кәртәлә ас һыйыры мөңрәй. Тиҙерәк уны ашатып, һауып, һөтөн баҙарға алып барып һатып, икмәк-тоҙлоҡ аҡса эшләргә кәрәк. Үҙе бәпес алып ҡайтырға йыйына, көн аша тигәндәй медпунктҡа барып тыңланып, үлсәнеп йөрөй. Бөгөн дә хәлдән тайып, ике ҡулына ике сумка йөкмәп, ҡаланан ҡайтты ла йүгерә-атлай медпунктҡа китте. Фельдшер, тыңлап ҡарағас, баш сайҡаны ла:

– Көнөң еткән. Бөгөн-иртәгә тыуасаҡ. Төндә башланһа, ышаныр кешең юҡ, районға шылтыратам, машина ебәрһендәр, – тип күңеленә шом һалып ҡуйҙы.

– Үҙемдең ҡара иҫәп буйынса, иртәрәк. Ҡабаланмайыҡ, – Сания, ауыр ҡуҙғалып, ҡайтып китте. Өйөнә етеүе булды, ауырый ҙа башланы. Ялҡау Ғилметдин

---

*Рәзилә Ырыҫҡужина Баймаҡ районының Хәсән ауылында тыуған. Сибай педагогия колледжын, БДУ-ның башҡорт филологияһы һәм журналистикаһы факультетын тамамлай. «Һәнәк» журналында бүлек мөхәррире булып эшләй. Быйыл «Йәштәр тауышы» серияһында «Эй әттәгенәһе» тип аталған китабы сыҡты.*

бындай хәлде тәүгә күреүе. Ҡатынының ыңғырашҡанын ишетмәç өсөн телевизорҙың тауышын асып, диванға йәбешкәндәй тик ятты, ҡыбырлап та бирмәне. Ҡыҙының хәлен белергә ингән ҡәйнә, был хәлде күреп, саҡ ултыра төшмәне:

– Был тиклем үк түгелһеңдер, тип уйламағайным, әйтәгүр! Бар, тиҙ генә машина табып килтер! – тип кейәүен ҡыуып сығарып ебәрҙе.

Ләкин Ғилметдин ҡапҡа төбөндәге емерек эскәмйәнән ары китмәне.

– Ауыл буйлап машина эҙләп йөрөргә башыма тай типкәнме? Ана, элек машина булмаған саҡта бөтәһе лә балаларын өйҙә тапҡан, берәү ҙә үлмәгән, – тип һөйләнергә генә эшкинде ул.

Ни хәл итһен, Сания бәпәйҙе тапты. Туп шикелле малай донъяға килде. Бала илауын ишеткән ир тәҙрә ярығына башын тығып:

– Эй, машина бер ҡайҙа ла юҡ. Хәҙер кәрәк тә түгелдер инде? – тип һораған булды.

– Юҡҡа беҙ ҙә туҡ. Һинең юҡтарыңа ҡараһаҡ, бала ла булмаç ине, ялҡау! – Сания әллә шаяртып, әллә ысынды әйткәнен үҙе лә һиҙмәй ҡалды.

Ләкин Ғилметдин бошоноп та бирмәне:

– Бисәкәй, телевизорға күҙ һал әле. Беҙҙекеләр гол индергәнме, юҡмы? Иçәп нисә икән? – Ирекәй ярыҡҡа тағы башын тыҡты. Тығыуын-тыҡты, тик, кире ала алмай, шунда эләкте лә ҡуйҙы. Ярай, фельдшер Санияны бала табыу йортона ебәрергә районнан машина саҡыртҡан булған. Улары килеп, ялҡау Ғилметдиндең башын тәҙрәнән тартып сығарып, үҙен дауаханаға алып киттеләр. Ә Санияһын, балаһын ҡаранылар ҙа, бөтәһе лә яҡшы, ирең ҡайтыуға тәҙрә тишегенә яңы быяла ҡуй, йорт-тирәңде ҡарҙан таҙарт, тип өйҙә ҡалдырҙылар.

## *Ижадсы*

Юғары белеме булмағас, Ғәлинур төнгө ҡарауылда ғына йөрөй. Икенсе яҡтан ҡараһаң, был эш уның ижади үçеше өсөн яҡшы. Бала саҡтан яҙышырға ярата ул. Шиғырҙар, таҡмаҡтар башта тыуа ла ҡағыҙ биттәренә төшә. Район гәзитенә лә унда-бында мәҡәләләр яҙыштырғылай. Бына әле лә, йәшелсә баҡсаһының үҙенә тәғәйен өлөшөн бер әйләнеп сыҡты ла, ҡарауыл өйөнә инеп, өçтәл лампаһын ғына яндырып, ижад итергә ултырҙы. Ап-аҡ ҡағыҙ битенең иң өçтөнә матур хәрефтәр менән «Хөрмәтле редакция!» тип яҙып ҡуйҙы...

– Хөрмәтле иптәштәр! Бөгөнгө йыйылыш ябай түгел. Беҙ асыҡ тауыш биреү менән ауыл хакимиәтенә рәйес һайлап ҡуясаҡбыҙ, – тип башланы һүҙен район хакимиәтенән килгән вәкил. – Бер ай эсендә генә район гәзитенә һеҙҙең ауылдағы етешһеҙлектәр тураһында дүрт хат килде. Фактарҙы тикшерҙек, дөрөçлөгөн асыҡланыҡ һәм ғәмәлдәге рәйескә уларҙы бөтөрөргә, һис юғында улар өçтөндә эшләргә ҡушылды. Ләкин, үкенескә күрә, алға табан бер аҙым да ҡыбырлау булманы, үҙегеҙ күреп тораһығыҙ.

– Кем яҙған һуң ул хаттарҙы? – тип кемдер залдан һорап ҡуйҙы.

– Уны беҙ үҙебеҙ ҙә белергә маташып ҡараныҡ, күҙаллауҙар бар, ләкин кешенең ҡулынан тотмағас, аныҡ ҡына әйтеүе ҡыйын. Әммә был мөһим түгел. Асыҡ фактар бар, эш хәҙергәсә түбән кимәлдә, шуға, иптәштәр, әйҙәгеҙ, үҙегеҙҙең аранан эшләрҙәй, кешеләрҙе тыңлата алырлыҡты һайлап ҡуйайыҡ. Тәҡдимдәр бармы?

Халыҡ алдына яйлап ҡына, башын аҫҡа эйеп пенсиялағы уҡытыусы Ирмәк ағай сыҡты.

– Ауылдаштар исеменән үҙем сығыш яһайым. Моғайын, бер кем дә ҡаршы килмәҫ, – залға бер ҡараш ташланы ла һүҙен дауам итте: – Ул етешһеҙлектәрҙе беҙ барыбыҙ ҙа беләбеҙ, шуға һәр кемебеҙ ҙә уның тураһында район гәзитенә яҙа алыр инек. Ләкин, иманым камил, ул яҙыусы беҙҙең ауыл кешеһе түгел. Элекке, йәғни ғәмәлдәге рәйесте ҡалдырайыҡ. Етешһеҙлектәрҙе ауылдаштар менән күмәкләп бөтөрөрбөҙ.

– Юҡ инде, әйтәм бит, мине бында яңыһын һайлап ҡайтырға ебәрҙеләр. Етмәһә, Динислам Фәтхиевич, хәҙерге рәйес, пенсия йәшенә лә еткән, уны барыбер алыштырырға тура киләсәк. Улай булғас, әйҙәгеҙ, уны пенсияға оҙатабыҙ икән, тип уйлайыҡ. Шулай бит, Динислам Фәтхиевич?

Рәйес урынынан тормайынса ғына:

– Шулай-шулай. Эшем һөҙөмтәләре менән район хакимиәте алдында сығыш яһармын, мин риза. Йәшерен-батырыны юҡ, оҙаҡ хеҙмәт иттем, арыным, миңә китергә ваҡыт.

– Ну, улай булғас, – тип бер аҙ ҡыҙарынып һүҙен дауам итте Ирмәк ағай, – әйҙәгеҙ, өмөтлө йәштәрҙе ҡуяйыҡ. Минең кандидат берәү. Ул, әлбиттә, юғары белемле түгел, техникумда уҡып, кире ауылға ҡайтҡан минең уҡыусым Ғәлинур Маҡтанов.

Тағы малсы Фәһимде, пенсия йәшенә етеп килгән Зөлфәт ҡартты ла тәҡдим итеүселәр булды. Шулай ҙа ауылдаштар бер тауыштан Ғәлинурҙы ауыл хакимиәтенә рәйес итеп ҡуйҙы.

Эшләй башлауына ярты йыл үтеү менән, яңы түрә ауыл хужалығы институтына ситтән тороп уҡырға инде. Кеше араһында күп йөрөп, халыҡтың ихтирамын яуланы, теләктәренә ҡолаҡ һалды. Районда ла үҙенең алдынғы ҡарашлы булыуы менән дан алды. Өйләнде, ғүмере буйы хыялланған йорт һалып керҙе. Бер һүҙ менән әйткәндә, тормошо алға китте.

Шулай өс йыл да эшләп өлгөрмәне, Ғәлинур Маҡтановты район хакимиәтенә эшкә саҡырҙылар. Бында башлыҡтың уң яҡтағы урынбаҫары кабинетына ултырттылар. Улай тиҙ үрләгәс, уҡыуын да тиҙләнешле программа менән тамамланы егет. Күптән ынтылған юғары белемле белгескә әүерелде.

...Шулай, бер көн кис, өйҙәгеләре йоҡлап бөткәс, Ғәлинур хистәргә бирелеп, йәш саҡтарын иҫенә төшөрҙө. Элеккесә ҡулына ябай ҡәләм алып, ап-аҡ ҡағыҙ битенең иң өҫтөнә эре, матур хәрефтәр менән «Хөрмәтле редакция!» тип яҙып ҡуйҙы...

– Көтмәгәндә юғарынан килеп төштөләр: биш минуттан – сираттан тыш йыйылышҡа,–тип ашығыс хәбәр еткерҙе Ғәлинур Саматовичҡа секретары. Ни булырын алдан белһә лә, аңламағаныраҡ ҡиәфәт сығарып, урынбаҫары йүгерә-атлай ултырыштар залына ашыҡты.

– Бер ай эсендә генә республика гәзитенә район хакимиәтенең боҙоҡлоҡтары тураһында дүрт хат килде. Иптәштәр, был ни эш? Ниҙәр ҡыланаһығыҙ? Нишләп үҙегеҙҙең араға ошаҡсылар, ялағайҙар индерәһегеҙ? Был хикимиәттә ултырыусыларҙың ғына түгел, бөтә районды битенән көлөү. Һеҙҙең башлыҡты халыҡ үҙе һайлап ҡуйҙы, уның был яманлыҡтарҙа ҡыҫылышы юҡлығы көн кеүек асыҡ. Шуның өсөн, әйҙәгеҙ, үҙ-ара ғына теге «ижадсы»ны табып, башына һуғып, тәғәйен урынына ултыртайыҡ!

Баш ҡаланан килгән вәкил, яй ғына аҙымдар менән трибунанан төшөп, рәттәр буйлап һәр кемдең күҙҙәренә ҡарап үтә башланы. Бер ни булмағандай йылмайып ултырған Ғәлинур Саматовичтың тапҡырына еткәс, әшәке тауыш менән яңғыратып ҡысҡырып көлдө лә, муйынына йәбешеп, быуа башланы. Ул ыңғайға залда ултырыусылар ябырылды, ысҡынып сығырмын тимә! Абруйлы урынбаҫар ҡарлыҡҡан тауыш менән: «Ҡотҡарығыҙ, минең бер ғәйебем дә юҡ, ау-ау!» – тип ҡысҡырырға ла итә, ләкин тауышы сыҡмай...

Тап ошо урында ғына тирләп уянып китте Ғәлинур. Баҡсаға бурҙар төшөргә ниәтләй икән, сыңйырынан ысҡына яҙып, Алабай өрә. Тиҙ генә фонаригын, кеше ҡурҡыта торған шартлатҡысын алып, тышҡа сығып берҙе һауаға атып өлгөрҙө, бурҙар ҡасып киттеләр.

–Ярай, һин бар, Алабай, ҡаты төш күреп, бер ни ишетмәй йоҡлап тик ятҡанмын. Ошондай йылы, тыныс эшемдән дә ҡыуылһам, әсәйемдең пенсияһын көтөп, ауыҙ асырға тура килер ине, – Ғәлинур этте яратып, бер телем икмәк ташланы ла ҡарауылсы йортона кире инде. Өҫтәлдә, яныҡ лампа төбөндә яҙыла башлаған хатты ала һалып: «Бәләһенән баш-аяҡ, тәүбә, төштә генә ҡалһын», – тип йыртып ташланы.

**Рәзилә ЫРЫҪҠУЖИНА.**

---

## *Исем ҡушыу мәрәкәһе*

Беҙҙең ауылда бер-береһенә оҡшаған Ғариф менән Фәрит тигән ике бабай бар ине. Күптән мәрхүмдәр инде... Беҙ, ул ваҡытта таяҡ аттарҙа сабып йөрөгән бала-саға, ул бабайҙарҙы яҡшы хәтерләйбеҙ...

Икеһе лә бер йылда тыуып, элекке ауыл мәктәбенең дүрт класын саҡ-саҡ бөтөрөп, һуңынан колхозда бер нисә йыл эшләп, бер көндә армияға киткәндәр. Бергә хеҙмәт итеп, бер көндө армиянан ҡайтҡандар. Бер үк ваҡытта туй үткәреп, кәләш алғандар... Бер туғандар кеүек, бергәләп донъя көткәндәр...

Бер йыл да үтмәгән, Ғариф менән Фәриттең һәр береһенең батырҙай улдары тыуған... Бер аҙна үткәс, бөтә ауыл менән малайҙарының тәпәйен «йыуып», Ғариф менән Фәрит ауыл Советына барып, уның рәйесе Шамил менән улдарын тағы ла бергәләп «йыуып», уларға исем ҡуштырып, метрика яҙҙырып алғандар... Шулай итеп, ауыл халҡының һаны Мусағәли менән Ғәлимуса тигән ике ир балаға артҡан.

...Ауыл халҡы, ҡушҡан исемдәрҙе аңламайынса, Ғариф менән Фәриттән:

---

*Әмир Сәйфуллин (1955) Ишембай районының Ишәй ауылында тыуған. Үҙ ауылында урта мәктәпте тамамлағас, Башҡортостан Министрҙар Советы йүнәлеше буйынса Ленинград киноинженерҙар институтында уҡый. Уны тамамлағандан һуң, Башҡортостан Кинофикация буйынса дәүләт комитетында инженер вазифаһын башҡара, 2005 йылда ООО НПО «СОМоСтрой» ойошмаһына генераль директор итеп тәғәйенләнә.*

*Айырым хикәйәләре «Аманат» журналында, «Киске Өфө» гәзитендә донъя күрҙе, хикәйәләр һәм юморескаларҙан торған «Ҡон» исемле китабы сыҡты.*

«Ниндәй ике ҡатлы исем ҡуштығыҙ ул?» – тип һораштырып, уларҙан бер ниндәй аңлатырлыҡ яуап ала алмағас, тыуған балаларҙы ҡушҡан исемдәре менән ҡабул иткәндәр... Бер туған кеүек йәшәгәс, балаларының исемдәрен дә оҡшатып ҡушҡандарҙыр инде, тип бер-нисә көн ауыл ҡатындары үҙ-ара ләстит һатып, тора-бара ауыл халҡы был хәлде оноҡкан... Ә Ғәлимуса менән Мусағәли атайҙары кеүек дуҫлашып, бергә үҫеп, бергә йәшәй башлағандар...

Был хәлдәрҙән һуң байтаҡ ҡына ваҡыт үткәс, теге серле исемдәрҙең нисек донъяға килеүе асыҡланды... Уны «сельсовет» вазифаһынан төшөрөлгәс, ҡасандыр сер тоторға тип биргән һүҙен боҙоп, төшөрөп алған сағында, элекке рәйес Шамил ағай һөйләп биргән...

Ул хәл былай булған икән...

Ғариф менән Фәрит, бер нисә шешә «аҡ баш», икмәк-тоҙ алып, көтөү ҡайтып, кис була башлаған ваҡытта ауыл Советы рәйесе Шамилға килгәндәр.

– Әйҙә, Шамил, конторыңа, беҙҙең малайҙарға метрика яҙып бир.

– Малайҙарығыҙҙың исемдәре нисек була?

– Һин, Шамил, ҡабаланма, тәүҙә тәпәйҙәрен «йыуып» алайыҡ, – тип яуап биргән Ғариф.

– Эйе шул, баш та ауыртып тора, – тип хуплаған Фәрит.

Бер «аҡ баш»ты төпләгәс, Ғариф:

– Мин малайға Ғәли тигән исем ҡушам. Олатай Ғәлимулла хөрмәтенә, – тигән ғорур ғына ҡиәфәттә.

– Ә мин Муса итеп атайым, – тип дауам иткән Фәрит. – Беҙҙең пәйғәмбәребеҙ ҙә Муса булған бит...

– Афарин! Бик шәп! Бик матур исемдәр! – тип хуплаған уларҙы Шамил. – Бына как раз ике метрика бланкыһы ҡалған, башҡаса юҡ. Районҙан иҫәпләп кенә бирәләр. Боҙмай ғына, матурлап яҙырға кәрәк.

– Яҙырға һин булдыраһың, шуның өсөн һин сельсовет бит. Өлгөрөрбөҙ, әйҙә, Фәрит, ҡой тағы.

Тағы бер шешәне бөтөргән былар. Ултыра торғас – өсөнсөһөн дә.

Нисек өйгә ҡайтҡандары, нимә яҙғандары, ни өсөн ауыл Советына килгәндәре береһенең дә иҫтәрендә ҡалмаған...

...Ғарифты иртәгәһенә ҡатыны Зарифа уята:

– Йә, шул тиклем эсмәһәң дә булыр ине инде! Ҡайҙа баланың метрикаһы, алып ҡуяйым документтар араһына.

– Ниндәй метрика? Ниндәй бала?

– Эсеп йөрөп, башыңды юғалттыңмы әллә? Кисә сельсоветҡа киттегеҙ бит Фәрит менән.

– Ә-ә-ә. Пинжәк кеҫәһен ҡара, шундалыр...

Зарифа Ғарифтың кеҫәһенән метрика килтереп сығара:

– Әстәғәфирулла! Был нимә?! Ниндәй Муса?! Беҙ бит Ғәли тип ҡуштыҡ балаға! Нимә эшләнең һин?! Бар, киренән күсереп яҙҙыр!

Ғариф, күҙҙәрен аҡайтып, бер нисә мәртәбә уҡып сыға метриканы: атаһы – Ғариф, әсәһе – Зарифа, ә баланың исеме – Муса!

«Был ни хәл?! Был – Шамилдың ғына эше! Минең менән шаярмаҡсы булған. Хәҙер барып кәрәген бирергә кәрәк!» – Шундай уйҙар менән Ғариф, сәй ҙә эсмәйенсә, ауыл Советына йүгергән... Ауыл Советы ихатаһына килеп барғанда Фәритте осратҡан...

– Һинең  малайҙың исеме нисек?

– Ғәли. Ҡатын өйҙә пыр туҙа...

Шамил рәйесте ауыл Советында тапмағас, йүгереп өйөнә барып, йоҡоһонан уятҡандар...

– Һин нимә эшләнең? Беҙҙең менән шаярырға уйланыңмы? Әйҙә, киттек конторағa, тиҙ генә күсереп яҙып бир!

Конторағa барып, үҙенең яҙмаларын тикшереп ҡарағас, Шамил шулай тигән:

– Ағайҙар, был хәлдә минең гонаһым юҡ! Мин һеҙгә әйттем: тәүҙә метриканы тултырайыҡ, шунан йыуырбыҙ, тип...

– Ә беҙгә хәҙер нимә эшләргә? Ҡатындарға нисек аңлатырға? Төҙәтеп, күсереп яҙ, давай!

– Юҡ, уны эшләй алмайым!

– Нисек инде эшләй алмайһың? Беҙҙән көләһеңме әллә?

– Мин бер кемдән дә көлмәйем. Беренсенән, минең бүтән метрика бланкыларым юҡ. Уларҙы районда һанап ҡына бирәләр. Һәр донъяға килгән бала башына иҫәпләп. Икенсенән, мин архив китабына теркәп ҡуйғанмын, ундағы яҙыуҙы төҙәтергә ярамай!

– Нимә эшләргә һуң? Был эште улай ҡалдырып булмай бит!

– Белмәйем, уйларға кәрәк... – Шамил тегеләрҙең метрикаларын, архив китабын тотоп уйға ҡалған. Бер нисә минуттан һуң шундай тәкдим яһаған:

– Бына нимә, ағайҙар. Мин бер нисә хәреф өҫтәйем яҙыуҙарыма. Был күсереп яҙыу ҙа, төҙәтеү ҙә булмай.

– Йә-йә...

– Бына шулай була: Ғариф ағай, һинең малай Мусағәли булыр, ә һинеке, Фәрит ағай, – Ғәлимуса. Әлегә шулай йөрөп торһондар. Ҡатындарығыҙға аңлатығыҙ: метрикә буйынса оҙон исемдәре – Мусағәли, Ғәлимуса, ә ҡалғандарға – Ғәли менән Муса. Ә мин уборка бөтөү менән, һеҙҙән ғаризалар алып, дөрөҫ итеп эшләп ҡуйырмын, районға барып...

Шулай килешеп таралышҡандар...

Шамил ағай, әйткән һүҙендә тороп, эшләп бөткән микән был эште-юҡмы, уныһын хәҙер бер кем дә белмәй... Мусағәли менән Ғәлимуса ағайҙар иһә күршеләр һәм дуҫтар булып һаман йәшәп яталар...

**Әмир СӘЙФУЛЛИН.**

## Йөрөгән аяҡҡа эләгә

Учалы – Силәбе маршрутындағы автобус Туңғатар ауылы урамы осондағы Уй йылғаһы аша һалынған күпергә күтәрелеү менән, артҡа ҡайырылып тәҙрә аша һулға ҡарайым. Ирәндек тау һырты моронона ышыҡланып Уй йылғаһына уңдан килеп ҡушылған йылға тамағын күреп ҡалырға ынтылам. Ул йылғаның исеме үтә ирмәк – Краснохты. Минең менән бергә барыусылар араһынан: «Йылғаның исеме карталарҙа дөрөҫ күрһәтелмәгән. Ҡаҫмаҡты ул», – тип ышандырырға тырышыусы ла табылды. Силәбегә ҡайтып еткәс, карталар атласын ҡарап, үҙем өсөн ошоно асыҡланым: йылға «Краснохты» исемле тау шәрәмәтенә килеп етә лә уның көньяҡ биттәрен яғалап урап үтә һәм, көнсығышҡа ҡарай аға биреп, Уйға барып ҡушыла. Тау тигәнебеҙҙең исеме «Ҡыраз Нәһтә» – «Гребнистая Штука» булалыр инде – йылғаны уның исеме менән атағандар. Башҡорт теленең диалекттары һүҙлегендә «Ҡыраз» – гребень (213); «Нәһтә» (247-се бит) нәҫтәкәй, нәмәстә, нәрҫә, нәрҫәкәй һ.б. варианттарҙа күрһәтелгән.

Беҙ бәләкәй саҡтарҙа күршебеҙ Ғәлиәхмәт бабай Ҡотлоәхмәтовтың скрипкаһына ҡушылып:

*«Ана бара бер нәҫтә,*
*Ҡуян микән аҡ нәҫтә.*
*Ваҡ-ваҡ итеп хаттар яҙҙым*
*Танымаған йәш нәҫтә»,*

– тип таҡмаҡ әйтеп, бала-саға күңелен асыуын онотормоҡ түгел.

Тағы бер исем – «Интер». Ул исемде күреү-ишетеү менән күптәр, бигерәк тә трактористар, Американан беҙҙең илгә килтереп һатылған «Интернационал» маркалы тракторҙы күҙ алдына баҫтырыуҙары бик мөмкин. Ә был – йылға исеме. Ҡурыуҙы йылғаһының Сәфәр ауылы янындағы ҡушылдығы Ҡолтырманың ҡушылдығы ошолай атала. Башҡорт телендәге «Интергә», «Интергәй» һүҙенән ҡыҫҡартып алынған (БТДҺ. 98-се бит.) «Тау битләп түбән ағыусы» йылға икән «Кәбәнтәй». Ошондай атамалы – тау тиһәң, тауҙың хәтере ҡалыр – Ураҙ, Илтабан ауылдары биләмәләре сигендә ҡуҡырайып ултырған бер ҡалҡыулыҡ бар, сейәлек менән ҡапланған. Халыҡ, уның дәүмәлен күҙ уңында тотоп, кәбәндәй-кәбәнтәй тип атаған.

«Барал» – йылға, Рисай ауылы янында Яйыҡ (Урал) йылғаһына ҡушыла. Уң ярындағы Бөрләтәү (бүкһә – бүтәгә) исемле, ҡош ашҡаҙанын хәтерләтеп ятҡан тау исемен рус теленә яраҡлаштырып, тау өлөшөн алып ташлап, «Барал» яһап, йылға исеме итеп таҡҡандар.

Силәбе өлкәһенең Ҡоншаҡ районындағы «Һәнәр» (Синарский) совхозына эшкә килгәс тә танышҡан, туҡһанды үткән Юлдай бабай Рәҙйәновҡа: «Ҡыштым ҡалаһы һеҙҙән йыраҡмы?» – тип һораным. Бабай миңә: «Ундай ҡаланы белмәйем», – тип яуап бирҙе. Ул ҡалала булған ҙур авария, шартлауҙы телгә

алғас: «Ә-ә-ә, улым, Кештәмде һорашаһың икән», – тине. Шул саҡта ғына мин ул ҡаланың башҡортса исемен ишеттем. Әүәл бит мин уны ҡышын ел-буран булмай торған, тын төбәк тип аңлай инем. Баҡһаң, ҡала йылға исеме менән атала икән. Кештәм үҙ ағымының күп өлөшөн ҡашлаҡ (ҡалҡыулыҡ)тың тәпәш кенә текә ярына һыйынып ҡына ағыусы бер йылға булып сыҡты.

**Булат ИҘРИСОВ.**
**Силәбе ҡалаһы.**

## Күрәһеләребеҙ алда әле...

«Тубыҡланған килеш» мәҡәләһен (авторы – Мәхмүт Хужин, «Ағиҙел», №7), шаҡтай күләмле булһа ла, бер тынала тиерлек уҡып сыҡтым да ошондай һығымтаға килдем: арабыҙҙа дәүләт күләмендә фекер йөртөтә, илдәге хәлдәргә тәрән анализ яһай, ил етәкселегенә ҡарата ла үҙ фекерен ҡыйыу әйтә алыусылар бар икән! Был мәҡәләлә халҡыбыҙҙың тормош кимәле буйынса Европа илдәренән, АҠШ-тан, хатта Азияның да байтаҡ ҡитғаларынан да ниңә артта ҡалыуының төп сәбәптәре дәлилләп асып бирелгән.

Автор әйткәндәргә өҫтәп мин дә ҡайһы бер фекерҙәремде еткермәксемен. Халҡыбыҙҙың ҙур күпселегенең, ерендә ҡаҙылма һәм башҡа байлыҡтарының ифрат күп булыуына ҡарамаҫтан (был йәһәттән беҙ донъяла иң бай ил!), фәҡир йәшәүенең төп сәбәбе хәрби маҡсаттарға сығымдарҙың бик күп булыуында. Тарихҡа күҙ һалайыҡ: Рәсәй империяһы һәр ваҡыт һуғыштар алып барған, үҙ биләмәләрен башҡа халыҡтарҙы буйһондороу, ерҙәрен көс менән тартып алыу иҫәбенә сикһеҙ киңәйткән. Ҡыҙғаныска ҡаршы, беҙҙең башҡорт халҡын да «пушка ите» сифатында ошо баҫып алыу һуғыштарында киң файҙаланғандар. Мәҫәлән, башҡорт старшинаһы Юлай Аҙналин поляк конфедераттарының баш күтәреүен баҫтырыуҙа ҡатнашҡан. Уға миҙал да биргәндәр. Әммә 1775 йылда уның ҡулдарына бығау һалғанда, маңлайына ҡыҙған тимер баҫтырғанда, ҡамсы менән һуҡтырғандан һуң мәңгелек һөргөнгә ебәргәндә уның батырлығы иҫәпкә алынмаған. Баш күтәреүселәрҙең ҡалғандары менән дә ошолай мөғәләмә иткәндәр.

Инде беҙгә яҡыныраҡ XX быуатҡа әйләнеп ҡайтайыҡ. Ул пушкалар гөрһөлдәүе тауыштары менән башлана: Рәсәй империяһы Алыҫ Көнсығышта япондар менән һуғыша ине. Быуат Төньяҡ Кавказда ҡанһыҙ һуғыш менән тамамланды: Рәсәй чечендар менән ҡан ҡойғос һуғышҡа бөтә ҡеүәтен ылыҡтырғайны, шул иҫәптән беҙҙең республика кешеләрен дә.

Мин әле ҡулыма тарихи белешмә алып иҫәпләп ултырам. Рәсәй-СССР-ҙың үткән быуатта тыныс хеҙмәт менән йәшәгән йылдары бик аҙ булған икән. 1904–1905 йылдар – Рус-япон һуғышы; 1914–1917 – Беренсе Донъя һуғышы; 1918–1921 – Граждандар һуғышы; 1921 – Кронштадт фетнәһен баҫтырыу; 1922–1923 – Тамбовта баш күтәргән крәҫтиәндәр, 1923–1929 – Урта Азияла баҫмасылар менән һуғыш. (СССР-ҙа баҫмасыларҙы башкиҫәрҙәр, яуыз дошмандар тип атаһалар ҙа, хәҙер уларҙы азатлыҡ алған республикаларҙа ирек өсөн көрәшкән милли геройҙар тип иҫәпләйҙәр). Артабан китәйек. 1936–1939 – Япония менән бәрелештәр; 1939–1940 – Совет-фин һуғышы; 1941–1945 – Бөйөк Ватан һуғышы. (Быныһы, моғайын, берҙән-бер ғәҙел, илде һаҡлау өсөн һуғыш булғандыр). 1956 – Венгриялағы ихтилалды баҫтырыу; 1968 – Чехословакияға баҫып инеү; 1979–1988 – Афғанстандағы хәрби кампания; 1994–2000 – чечендарҙың мөстәҡиллек өсөн баш күтәреүен баҫтырыу. 100 йыл эсендә күпме генә ил тыныс шарттарҙа йәшәүен иҫәпләп сығарығыҙ инде. Ә бит һәр

һуғыш – күпме кешеләрҙең ғәзиз ғүмерҙәрен өҙөү, күпме миллиард һумдарҙы утҡа ташлау, емереү, яндырыу.

Икенсе донъя һуғышынан һуң еңелгән илдәргә – Германия һәм Японияға армия тотоу тыйылғайны. Улар ҡыҫҡа ғына арала һуғыш емереклектәрен төҙәтеп, иҡтисади яҡтан иң алдынғылар сафына баҫты. Әле лә уларҙа тормош сифаты иң юғарыларҙан, сөнки хәрби маҡсаттарға сығымдар бик аҙ китә. Ә СССР-ҙа, империалистар һөжүм итә тип, иң ҙур армия тоттолар. 80-се йылдар уртаһында үҙгәртеп ҡороуҙар башланып, билдәлелек сәйәсәте килгәс, асыҡланды: ил ҡаҙнаһының яртыһы самаһы хәрби маҡсаттарға тотонолған. Беҙҙә генералдар, маршалдар иҫәбе бөтә донъялағынан күберәк, танкылар, ракеталар буйынса ла ил рекордсмендар рәтендә булған икән. Эшләп тапҡандың яртыһын хәрби маҡсатҡа тотонған ил нисек бай йәшәһен дә халҡы нисек бай булһын инде?! Беҙҙә бит тормош өсөн иң кәрәкле әйберҙәр: һыуытҡыс, мебель, һауыт-һаба, телевизор, еңел машиналар, кейем-һалым – барыһына ла ҡытлыҡ ине. Ә хәҙер шул заманда етештерелгән снаряд, бомбаларҙы юҡ итеп бөтөрә алмайбыҙ. Әле бында, әле тегендә шартлауҙар, янғындар булып тора, күпме ғүмерҙәр өҙөлә, матди ҡиммәттәр юҡҡа сыға.

Илдең әлеге етәкселеге бынан һығымта яһамайҙыр, тигән фекергә киленә, сөнки ҡаҙнаның иң ҙур сығымдары бөгөн дә оборона өлкәһенә китә, хәлбүки беҙгә һөжүм итерлек йәки шундай ниәтле ил-халыҡтар күренмәһә лә. Әммә «фронт» тигән һүҙ бөгөн радио-телевидениела, матбуғатта көнө-төнө яңғырай. Иң наҙан кеше өсөн дә был төшөнсәнең В. Путин тарафынан яңынан президент булыу өсөн «асылған» булыуы мәғлүм булып та, «фронт»ҡа яңынан-яңы ҡуштандар өҫтәлеп тора. Был хәлдәр ни менән бөтөр – әйтеүе ҡыйын.

Мәскәүҙә сыға торған бойондороҡһоҙ «Новая газета»ла илдәге һуңғы ваҡиғалар ыңғайынан халыҡҡа мөрәжәғәт баҫылып сыҡты. Уға күренекле кешеләр – билдәле ғалимдар, яҙыусылар, журналистар, төрлө һуғыш ветерандары ҡул ҡуйған. Улар В. Путиндың яңынан президент булырға ынтылыуы ыңғайынан тәрән борсолоу белдергән, бының ил өсөн хәүефле хәлдәргә килтереү ихтималлығын иҫкәрткән. Киләсәк өсөн Д. Медведевтың икенсе срокка ҡалыуы хәйерле буласағын белдергәндәр. Шулай итеп, авторҙар яҡындағы бер нисә ай илдең киләсәге өсөн хәл иткес буласаҡ, ти һәм халыҡты уяу булырға, әүҙемләшергә, үҙ фекерен әйтергә саҡыра. Иртәгә һуң булыр, тиҙәр.

Ошо уңайҙан М. Хужиндың, «Тубыҡланған килеш» йәшәргә ярамай, тип киҫәтеүе лә бик ваҡытлы. Ысынлап та, Рәсәй халҡының вайымһыҙлығы, «юғары»лағылар ни ҡылһа ла, шуға риза булып йәшәүе күңелһеҙ хәлдәргә килтерә. Тағы ла тарихҡа күҙ һалайыҡ: Рәсәйҙә берәй йүнле етәксе булдымы икән? Хәлбүки уларға халыҡ бик теүәл баһа биреп барһа ла: «Иван IV – яуыз Иван, Петр I – тиле батша, Екатерина II – фәхишә-падишаһ, Николай I – Палкин, Николай II – ҡанлы. Совет заманында ла шулайыраҡ: В. Ленинға хәҙер «авантюрист» тамғаһы һуғылды. И. Сталинды бөтә донъя инде күптән «ҡанлы тиран» тип атай. Н. Хрущев – волюнтарист, 18 йыл ил башында торған Л. Брежнев шөһрәт яратыусы, илде көрсөккә терәтеүсе булараҡ тарихҡа инеп ҡалды. М. Горбачев «һалҡын һуғыш»ты туҡтатыусы булып танылды. Ул донъя күләмендә ыңғай баһалана – Нобель премияһын тикмәгә бирмәйҙәр. Илдең иҡтисади үҫешенә ыңғай йүнәлеш бирә алмаған Б. Ельцинды халыҡта үҙе власта саҡта уҡ «алкаш» тип атайҙар ине. В. Путин менән Д. Медведев тарихҡа ниндәй баһа менән инер – әйтергә иртәрәк. Ғөмүмән, был баһа уларҙың үҙҙәрен артабан нисек күрһәтә алыуҙарына бәйле. Улар әле сағыштырмаса

йәш кешеләр бит. Беҙ ҙә был яҡты донъянан иртәгәнән үк китергә йыйынмайбыҙ. Беҙгә нимәләр күрһәтерҙәр... Иртәгә ниҙәр булыр.

**Хажи ӘХМӘТЙӘНОВ.**
**Бәләбәй ҡалаһы.**

# Сәнғәт философияһы хаҡында

Иҡтисад фәндәре докторы, профессор Хәлил Барлыбаевтың «Ағиҙел» журналының 2010 йылғы 10-сы һанында донъя күргән «Фән, философия һәм йәмғиәт: Башҡортостан үлсәме» тигән мәҡәләһендә шундай юлдар бар: «Философияның ҡайһы бер тармаҡтары республикабыҙҙа әле ныҡлап үҙләштерелмәгән, тип әйтергә кәрәк. Улар араһынан республика кимәлендәге сәйәсәт философияһын, иҡтисад философияһын, сәнғәт философияһын, әҙәбиәт философияһын, халыҡ психологияһы философияһын һ.б. йүнәлештәрҙе атарға мөмкин». Был һүҙҙәрҙә хәҡиҡәт барҙыр, сөнки, башҡа өлкәләрҙе белеп еткермәһәм дә, ғүмерем буйы сәнғәттә эшләгәс, ошо айҡанлы һәр саҡ борсолам. Ысынлап та, сәнғәт өлкәһе был йәһәттән бик ныҡ артта ҡалған. Башҡортостанда, мәҫәлән, сәнғәт фәлсәфәһе буйынса ғилми хеҙмәттәр юҡ дәрәжәһендә. Сәхнәлә фәлсәфә юҡ, тип әйтеп булмай, ҡайһы саҡ фәлсәфәле генә әҫәрҙәр тыуып тора, әммә барыһында ла түгел. Минеңсә, быны сәбәбе сәхнә әҫәре тыуҙырыусы ижад кешеләренең шул өлкәләге белем кимәленә бәйле.

Сәнғәт – ул шундай төшөнсә, унда бөтә тормош фәлсәфәһе һыя һәм шулай булырға тейеш тә. Ана шуға күрә лә: «Театр – ул тормош, ә спектакль ижад итеү – кандидатлыҡ диссертацияһы яҡлауға торошло хеҙмәт», – тип тиктәҫкә генә әйтмәйҙәр. Режиссерҙың йәки артистың шул тиклем аҡыллы һәм тәрән философ булыуы ихтимал, әммә философияһы халыҡҡа барып етмәй икән, ул философтарҙың сәнғәткә кәрәге лә самалы.

Күп осраҡта шулай килеп сыға ла, сөнки философияның булмауы психология (кеше күңеле) философияһын белмәүҙән килеүе мөмкин. Ә ул ғилем бик нескә, ә нескә нәмә бик ҡатмарлы була, кеше күңеле – бигерәк тә. «Кеше күңеле – ҡара урман» тип юҡҡа ғына әйтмәйҙәр бит. Тағы ла бер мөһим һыҙат: тормош үҙгәрә, ул үҙгәргән һайын кеше психологияһы ла үҙгәреүсән.

Сәнғәттең төп бурысы – тамашасының күңеленә үтеп инеп, йәғни үҙегенә үткәргәнсә әйтеп, уларҙы уйландырыу, тормошта булған төрлө фәлсәфәгә килтереү. Был бурысты режиссер түгел, сәхнәлә уйнаған артист ҡына аткара ала, сөнки режиссер юғарыла әйтелгәндәрҙе артисҡа төшөндөрөүсе һәм сәхнә артында ҡалыусы ғына. Тимәк, режиссер ҡоралы булараҡ, артисҡа бик ҙур бурыс йөкмәтелә. Тамашасының аң-фиғеле менән ул эш итә, тамашасыны тотоп, әйҙәп ул алып бара. Быны өсөн артиста тәбиғәт тарафынан бирелгән бар камиллыҡтың да булыуы зарур, хатта сихырсы һәләте лә. «Сихырсы» тигәс, уны ла аңлатып китеү ҙә кәрәктер, юҡһа ҡайһы берәүҙәрҙең дөрөҫ аңламауы бар. Русса уны «энергетика» тип йөрөтәләр. Был һүҙ ҙә ул төшөнсәне тулыһынса асып еткермәйҙер. Мин иһә уҡыусыларыма, артист сихырсы йә шаман булырға тейеш, тип аңлатам. Миҫалға Иннокентий Смоктуновскийҙың йә үҙебеҙҙең Зәйтүнә Бикбулатованың уйнауын килтерергә мөмкин. Улар ғаләм киңлегендә фекерләп, тамашасыларын да шул кисереш-уйҙарға әйҙәй белә ине. Уларҙың үҙ ролдәрен нисек башҡарыуын ҡарағас, байтаҡ ваҡыт уйға тарып йөрөйһөң. Смоктуновский юҡҡа ғына, мин – космос артисы, тимәгәндер. Ошо артистарҙың тормошо менән ҡыҙыҡһынып, мин шундай фекергә килдем: улар заманында сәйәси золомға дусар ителеп, ҙур уй-кисерештәргә тарыған, тамашасылары менән дә шулар менән уртаҡлашҡандарҙыр. Бына

ошо – күп артистар аңламаған төшөнсәлер, күптәр еткерә алмаған философиялыр, тим.

Ошондайыраҡ кисерештәрҙе мәшһүр йырсыбыҙ Абдулла Солтановты тыңлағандан, Риф Ғәбитовтың «Еҙ үксә» бейеүен беренсе тапҡыр ҡарағандан, йә булмаһа элекке артистарҙың уйнауын күргәндән һуң кисереп-уйланып йөрөй торғайным. Профессиональ сәнғәттең көсө лә шундалыр: тамашасыһын кисерештәргә дусар итеп, тормоштағы барлыҡ изге философияларға алып килеү.

Үкенескә ҡаршы, һуңғы йылдарҙа сәхнәлә ирҙәр энергетикаһы юғала башланы. Тимәк, ирҙәр күҙлегенән фәлсәфә йөрөтөү ҙә кәмей. Быны төп сәбәптәренең береһе итеп йәш быуын ирҙәрҙе – хатта артист оҫталығына ла – ҡатын-ҡыҙ тәрбиәләүҙән килеүен атарға кәрәк.

Сәхнәлә тыуҙырылған фәлсәфәне тамашасыларға артист еткерә, тинем. Шуныһы мөһим: әгәр артист сәхнәнән фәҡәт фәлсәфә генә тылҡый икән, уның фәлсәфәһе тамашасы аңына үтеп инмәүе лә ихтимал, сөнки кеше аңы һалҡын, ул, барыһын да беләм, тип уйлай. Шуға күрә артист сәхнәлә барған ваҡиғаларҙы күңеле аша үткәреп, тамашасы күңеленә үтеп инергә, йәғни уны ла тамаша залынан кисерешкә дусар итеп: көлдөрөп, илатып, шаҡ ҡатырып һәм шатландырып сығарырға бурыслы. Әгәр кешенең күңеле сәхнәлә күрһәтелгән тормоштан, ундағы геройҙарҙың кисерешенән тулҡынлана икән, тимәк уның күңел кисерештәре тынғы бирмәй уйландырасаҡ, тимәк ул ниндәйҙер фәлсәфәгә килә тигән һүҙ. Әммә ниндәй? Бына ошо мәсьәләне ижад кешеләре алдан уйлап эш итергә бурыслы, юҡһа әҙәм башына, кешелек донъяһына зыян килтереүсе фәлсәфәнең тыуыуы ла бар бит. Ана шуның өсөн дә сәнғәт әһелдәре һәр ваҡыт халыҡтың уй-фекерен, уның күңел торошон өйрәнергә, үҙ өҫтөндә арымай-талмай эшләргә тейеш, юҡһа уның тамашасыға кәрәкмәүе ихтимал.

Башҡорт сәнғәте философияһының ғилми әҫәр булараҡ юҡлығының сәбәптәре байтаҡ. Беренсенән, философ - ғалимдарҙың сәнғәт донъяһын эстән белмәүе; икенсенән, сәнғәт әһелдәренең был өлкәлә фәҡәт практик эш менән генә шөғөлләнеүе. Сөнки һуңғылары башҡарған эштәрен ғилми китап итеп яҙа белмәй. Уның өсөн һәләт, тәжрибә кәрәк.

Был проблема менән сәнғәт белгестәре шөғөлләнергә тейеш кеүек, әммә улар күберәк ижад ителгән сәнғәт өлгөләрен анализлау менән генә мәшғүл. Сәнғәт фәлсәфәһе хаҡында айырым хеҙмәт яҙылғаны юҡ. Унан әле эшләп килгәндәре лә олоғайҙы, ә йәштәр араһында күҙгә салынғандары күренмәй. Сәнғәт философияһы хаҡында айырым ғилми хеҙмәт булдырыу – бик ҡатмарлы һәм ауыр эш, минеңсә. Шуға күрә башҡорт сәнғәте хаҡында ғилем китабы яҡын арала ғына тыумаҫ. Бар өмөт киләсәк быуынға ҡайтып ҡала.

Килер заман: башҡорт халыҡ йырҙарын, бейеүҙәрен, театрлаштырылған тамашаларын тикшереп, заманында Тәңрегә табынған башҡорттарҙың ниндәй философия менән йәшәгәнен аңлатырҙар. Шулай уҡ Совет осоронда тыуған, бөгөн дә йәшәп килгән профессиональ сәнғәтебеҙҙең сәхнәнән халыҡҡа ниндәй фәлсәфә еткереп, аң-белемгә килтергәне тураһында ғилми китаптар сығарырҙар. Был сәнғәт тыуҙырыусылар өсөн дә ҙур һабаҡ булыр ине.

**Әхтәм АБУШАХМАНОВ.**
**Өфө ҡалаһы.**

# «АҒИҘЕЛ» ЖУРНАЛЫНЫҢ 2011 ЙЫЛҒЫ ЙӨКМӘТКЕҺЕ

## ● СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР

**Аҡъюлов Исмәғил.** Миңһеҙбикә. Хикәйә. ....3
**Алдырханова Әлнисә.** Батырлыҡ тәңкәһе. Новелла. ....7
**Буләков Тимерғәле.** Баҫым. Сиҙәм сәхифәләре. ....8-9
**Булатова Дилбәр.** Ҡунаҡ мунсаһы. Хикәйә. ....10
**Ғайсарова-Ғиззәтуллина Гөлсирә.** Быйылғы яҙ йоҡоларҙан яҙҙым. Хикәйә. ....8
**Ғибәҙәтов Әнүәр.** Ҡаҫҡы. Повесть. ....4
**Дауытов Хәбир.** Аҡтүш һағышы. Хикәйә. ....6
**Мусин Ноғман.** Хәтер шаңдауы. Эссе. ....6–7
**Мәүлит Ямалетдин.** Буян. Новелла. ....7
**Наил Ғәйетбай.** Бәхет сере. Эссе. ..1–2
**Ноғоманов Иҙрис.** Һаҡмарбаш. Тарихи роман. ....1–3
**Нурғәлиев Ишғәли.** Ҡарабаш турғай. Яҙмышнамә. ....5
**Садиҡова Мөкәрәмә.** Һағыш сәскәһе. Хәтирә-уйланыу. .... 5
**Ситдиҡова Гүзәл.** Уйынсыҡ һыйыр. Хикәйә. ....11
**Тапаҡов Хәйҙәр.** Ҡуласа. Хикәйә. ....12
**Хажиәхмәтов Шамил.** Яңғыҙ инә бүре. Повесть. ....9
**Хөсәйенов Ғайса.** Мәлдәр, әмәлдәр, ғәмәлдәр. Парсалар, барсалар. ..4
**Хужин Мәхмүт.** Дәүрән. Хикәйә. ....6
**Шәкүрова Шәүрә.** Өфө вокзалы. Повесть. ....10
**Шәрипов Сабир.** Гонаһлы шарлама. Повесть. ....7
**Әхмәҙишина Гөлдәр.** Яңғыҙ ҡайын. Хикәйә. ....7
**Әхмәтов Радик.** Эй, ағыла болот... Роман. ....11- 12
**Яҡупов Сәлмән.** Ҡуш ҡайындың береһе. Хикәйә. ....12

## ● ШИҒРИӘТ

**Абдуллина Лариса.** Зыяратта. Шиғырҙар. ....5
**Алтынбаева Зөһрә.** Башҡортостан – тыуған ергенәм! Шиғырҙар. ....1
**Бикбаев Рауил.** «Йәшәйбеҙ бит ике быуатта...» Шиғырҙар. ....12
**Бәширова Фирҙәүес.** Башҡорт ҡыҙы. Шиғырҙар. ....8
**Вафин Мөнир.** Ғүмер һуҡмағы. Шиғырҙар. ....1
**Гөлгизәр Фәйзи.** Үрһәләнеү. Шиғырҙар. ....2
**Ғәлимова Римма.** «Мөхәббәттә үткән заман юҡ ул». Шиғырҙар. ....10
**Ғәлим Дәүләди.** Нөгөш шишмәләре. Шиғырҙар. ....4
**Ғәниева Тамара.** «Офоҡтарҙы ашҡым килеп китте...» Шиғырҙар. ....6
**Закиров Мөхәммәт.** Матурлығың менән һин мәңгелек... Шиғырҙар. ......11
**Зөфәр Вәлит.** Рәсәйҙә генә түгел... Шиғырҙар. ....11
**Игебаев Абдулхаҡ.** Арнауҙарым – ихлас моңдарым. Шиғырҙар. ....8
**Инсур Артур.** Гөргөлдәк. Поэма. .....3
**Кәримов Марат.** Бер ҡатлы. Шиғырҙар. ....3
**Кәшфуллин Әсхәр.** Афәттәр үтер әле. Шиғырҙар. ....2
**Күзбәков Фәнил.** Йыһан үлсәмдәре. Шиғырҙар. ....1
**Күсмәева Мәрйәм.** Сит яҙ күңелемә ситен булды... Шиғырҙар. ....3
**Ҡарамышева Таңһылыу.** Таш өй. Поэма. ....7
**Ҡотлогилдина Зөһрә.** Башҡорт йыры. Шиғырҙар. ....9
**Ҡотоева Гөлназ.** Йәшәү ҡәҙере. Шиғырҙар. ....9
**Мифтахов Риф.** «Эҙләмә серҙе, шағир, тик күк йөҙөнән...» Шиғырҙар. .........4
**Мәхмүт Һибәт.** Ғаләм түңәрәге. Поэма. ....5
**Ниғмәтуллин Әхәт.** «Юҡ, әйләнеп ҡайтмаҫ инде...» Шиғырҙар. ....11
**Ниәтшин Тимер.** Шәп булдымы? Шиғырҙар. ....6
**Радик Хәкимйән.** Бер йылға булһам ине... Шиғырҙар. ....8
**Риф Дауыт.** Һаҡмар батыр. Ҡарһүҙ. ....8
**Рәмил Йәнбәк.** «Мин ашҡындым гелән иртәгәгә...» Шиғырҙар. ....6

**Салауат Рәхмәтулла.** «Эҙләп тапҡан алтын – ҡыйбат түгел... » Шиғырҙар. ....5
**Сафуан Әлибай.** Башҡортостан. Шиғырҙар. ............................................2
**Сәғиҙуллина Лилиә.** Ынтылыш. Шиғырҙар. ...........................................7
**Таһирова Әнисә.** Көҙгө балан. Шиғырҙар. ...........................................12
**Тимершин Рәдиф.** Хәҡиҡәткә күҙ йоммайым... Шиғырҙар. .................12
**Тойғон.** Осрашыу. Поэма. ................4
**Әхмәҙин Әфтәх.** Асыҡ ҡапҡа. Шиғырҙар. ..........................................10
**Чанышева Фәниә.** Йылдар ағышы – күңел һағышы. Шиғырҙар. ..............9
**Юлдашев Хисмәт.** Төпкөлдә. Шиғырҙар. ............................................7

## ● ӘҘӘБИ ТӘНҠИТ

**Ғиззәтуллина Рәшиҙә.** «Урал батыр» эпосында йога тәғлимәте. ......................4
**Ғөбәйҙуллина Ләйсән.** Зиннәтле күңел. ..............................................................6
**Ҡасҡынова Гөлнур.** Һәҙиә Дәүләтшинаның шиғри мираҫы. .............................1
**Ҡолмөхәмәтова Миләүшә.** Башҡорт әҙәбиәтендә фельетон. ............................8
**Рамазанова Сәриә.** Рамаҙан Өмөтбаев хикәйәләрендә замандаш образы. .......1
**Рамазанова Сәриә.** Яҙмышы – шиғырҙарында *(Рәмил Ҡол-Дәүләт ижады).* ....7
**Рамазанова Сәриә.** Рамаҙан Өмөтбаев – публицист. ...........................................12
**Хәбиров Әнғәм.** Аҫыл икән затың – һүҙең булһын алтын *(Шагирәләребеҙҙең быуат башында «Агиҙел» биттәрендәге ижадына бер ҡараш).* ..............................8-9
**Шаһиев Рәүеф.** Шағир йәшнәүе. ........3
**Шәрәфетдинов Дамир.** Уйландырырлыҡ әҫәр *(Әхмәр Үтәбайҙың «Тыштағы зыярат» романы хаҡында).* ......................7
**Әлибаев Зәки.** Ураy-ураy юлдарҙан. ..5

## ● ӘҘӘБИӘТ ҒИЛЕМЕ

**Гәрәева Гөлфирә.** Хәҙерге башҡорт прозаһында жанр, форма һәм стиль эҙләнеүҙәре. ..................................................5

## ● ӘҘӘБИ МИРАҪ

**Мәжит Ғафури.** Уҡыйыҡ, шәкерттәр! Шиғырҙар. ............................................4
**Ниғмәтуллин Рауил.** Булһын өсөн Башҡортостан! Шиғырҙар. ...............5

*9 май – Бөйөк Еңеү көнө*

**Дәүләтшин Рафаэль.** Һуғыш осоронда Башҡортостан ауыл хужалығы. ............5
**Зиннурова Тайфа.** Тыныс булһын донъялар. ..................................................5
**Шафиҡова Гөлсирә.** Бер ҡабым ғына... ..................................................................5
**Шарапов Ишмөхәмәт.** «Ейәндәрем уҡыр...» .........................................................5

## ● ШИШМӘЛӘР

**Бикташев Фәнис.** Әбетем – изге төйәгем; **Ҡотлогилдина Рәзилә.** Рәхмәтлемен һеҙгә...; **Сөләймәнов Ринат.** «Әкрен генә йылға көйләй көйөн...» Шиғырҙар. .........................................11

## ● ПУБЛИЦИСТИКА

**Бикбаев Рауил.** Халыҡтың хәтер көсө. ........................................................................1
**Зарипов Әлим.** Табын иле. .................4
**Нурғәлиев Ишғәли.** Башҡорт яҙмышы йәки параллель һуғыштар. ...................6
**Саҙрыев Миҙхәт.** Хәҙерге ғаиләнең социаль-философик нигеҙҙәре. ................1
**Сәхәүетдинов Венер.** Ағиҙел буйлап төшкәндә. .................................................1
**Хажиев Ризван.** Әйле башҡорттары: кисә, бөгөн, иртәгә. ................................4
**Хужин Мәхмүт.** «Ҡуян йылы»на ла аяҡ баҫтыҡ. ...............................................1
**Хужин Мәхмүт.** Климат ниңә көйһөҙләнә? ....................................................7
**Хужин Мәхмүт.** Тубыҡланған килеш. ........................................................................8
**Шаһиев Рәүеф.** Һәйкәлгә лайыҡ шәхес. ...................................................................12
**Әхмәтзәки Вәлиди Туған.** Төркөстандың киләсәге. .........................................12

*2011 – Башҡортостанда милләт-ара татыулыҡты нығытыу йылы*

**Агишев Ирек.** Вайымһыҙлыҡ һәм күндәмлек баҫа. .....................................12
**Саҙрыев Миҙхәт.** Дини әҙәплелек – тотороҡлолоҡ нигеҙе. ............................7
**Шаһманов Тәлғәт.** Ҡалала башҡорт булыу еңелме? ........................................7
**Шаһманов Тәлғәт.** Ауыл мәктәбенең әсе күҙ йәштәре. ...................................12

**Шәрәфетдинов Дамир.** Туйҙар әле үтмәгән... ..........10
**Хужин Мәхмүт.** Эскерһеҙлек һәм мәкер. ..........10

## ● БЕҘҘЕҢ ЮБИЛЯРҘАР

**Ғәбиҙуллина Фәниә.** Йырлы ғүмер *(Р. Ханановка 80 йәш).* ..........10
**Шәрипова Зәйтүнә.** Талант – тәүәккәллек ул *(Азат Абдуллинга 80 йәш).* ..........6
**Әлибаев Зәки.** Тормоштан илһамланып *(Ҡәҙим Аралбайға 70 йәш).* ..........9

## ● БЕҘҘЕҢ КАЛЕНДАРЬ

**Байышев Таһир.** Тырышҡан – ташҡа ҡаҙау ҡаҡҡан. Урта быуаттарҙа уртаҡ яҙма телдәр *(Таһир Байышевтың тыуыуына 125 йыл).* ..........8
**Баязит Бикбай.** Онотолмаҫ ғүмер *(Ғәлимов Сәләмдең тыуыуына 100 йыл).* ..........1
**Бейешева Ләлә.** «Мин көсөмдө аҡтығына тиклем бирер инем ғәзиз халҡыма» *(Әкрәм Бейештең тыуыуына 85 йыл).* ..........4
**Ергин Юрий.** Башҡорт тел ғилемен нигеҙләүсе педагог *(Закир Шакировтың тыуыуына 130 йыл).* ..........11
**Күзбәков Фәнил.** Мәғәнәһеҙлектәге мәғәнә *(Рус яҙыусыһы Сергей Довлатовтың тыуыуына 70 йыл).* ..........8
**Ҡотоева Гөлназ.** Йән йылыһын өләшеп... *(Ғәбиҙулла Зариповтың тыуыуына 50 йыл).* ..........11
**Шәрипов Сабир.** Йылмайып баҡты донъяға *(Марсель Искәндәрҙең тыуыуына 50 йыл).* ..........1
**Әхмәҙин Әфтәх.** «Ҡариҙел буйында ҡалам...» *(Ярулла Вәлиевтың тыуыуына 90 йыл).* ..........3

*Ғабдулла Туҡайҙың тыуыуына 125 йыл*

**Игебаев Абдулхаҡ.** Шағир һәм әжәл. Шиғыр. ..........6
**Поварисов Суфиян.** Шиғриәт пәйғәмбәре. ..........6
**Сәлихов Әхәт.** Туҡай һәм башҡорт әҙәбиәте. ..........6

*Ж. Ғ. Кейекбаевтың тыуыуына 100 йыл*

Мәшһүр лингвист һәм яҙыусы. ..........10
**Бикәнәсова Рәмзиә.** Ғалимдың шәхси фонды хаҡында. ..........10
**Вахитов Әнүр.** Төс йөкмәткеле роман. ..........10
**Ишбирҙин Эрнст.** Ж.Ғ. Кейекбаевтың ғилми-ижади мираҫы. ..........11
**Ҡунафин Ғиниәт.** Ғалим – әҙәбиәт майҙанында. ..........9
**Кейекбаева Зөһрә.** Ебәрелгән һәм алынған хаттар. ..........9 – 12
**Сөләймәнов Әхмәт.** Фольклор менән рухланып. ..........11

## ● САТИРА ҺӘМ ЮМОР

**Камил Фазлый.** Наркобарон. Юмореска. ..........5
**Мар. Сәлим.** Ҡотолоу. Ағас тел. Илһам ҡошо. Ялған донъя. Юморескалар. ..........4
**Әминев Марат.** Һуғым. Төтөн еҫе. Мөхәббәтле йорт. Осрашыу. Белгес. Башлыҡ ҡотлауы. Ҡоҙоҡ. Дауаландым. Йылмайыу хаҡы. Юморескалар. ..........3
**Әкбәров Закир.** Батырлыҡ. Замана ҡаҙанышы. Юморескалар. ..........2
**Ырыҫкужина Рәзилә.** Бәхетле ялҡау. Ижадсы. **Сәйфуллин Әмир.** Исем ҡушыу мәрәкәһе. Юморескалар. ..........12

## ● СӘНҒӘТ

**Аҡбулатова Фәрзәнә.** Зәйтүнә. ..........5
**Аҡбулатова Фәрзәнә.** Үҙ халҡының рух илсеһе. ..........12
**Ғәйнуллина Таңһылыу.** Халыҡ артисы – юғары исем. ..........5
**Турицына Нина.** Яҙға һәм яҡтылыҡҡа ғашиҡ рәссам. ..........1

## ● СӘХНӘ ӘҪӘРҘӘРЕ

**Асанбаев Нәжиб.** Сейәлетау. Драма. ..........11

## ● ҠӘЛӘМДӘШТӘР ТӨҪӨ

**Мостай Кәрим.** Көндәлектәр. ..........10
**Хөсәйенов Ғайса.** Мостай Кәрим менән әңгәмәләрҙән. ..........10

*Башҡортостан яҙыусыларының сираттағы съезды алдынан*

*Әҙәбиәт тормош дәреслегеме бөгөн?*

**Фәнил Күзбәковтың Зәки Әлибаев, Азамат Юлдашбаев, Әхмәр Ғүмәр-Үтәбәй** менән әңгәмәһе. ..........1

**Фәнил Күзбәковтың Суфиян Поварисов** менән әңгәмәһе. ..........................3
Балалар әҙәбиәте хаҡында һөйләшеү. **Ҡамса Мортазиндың Айһылыу Йәғәфәрова** менән әңгәмәһе. .......................2
Иншалар бәйгеһенә йомғаҡлау. ..........4

*Башҡортостан яҙыусыларының XV съезы материалдары*

**Бикбаев Рауил.** Яңы заман һәм яңы әҙәбиәт. ....................................................5
**Денисов Владимир.** Ваҡыт баһа бирер. ..........................................................5
**Наил Ғәйетбай.** Пьесалар бар, тик кәртәләр ҙә байтаҡ. ................................5
**Нәҙерғолов Миңлеғәли.** Ғилем үә тәнҡит нисбәте. .......................................5
**Рәшит Сабит.** Иғтибар үҙәгендә – йәштәр. ..........................................................5
**Туғыҙбаева Факиһа.** «Йөрәк ярып сыҡҡан бала икән...» ..............................5
**Хөсәйенов Айҙар.** Алға барабыҙ, камиллашабыҙ. ..........................................5
**Хәсән Назар.** Рух илсеһеме шағирҙар? .......................................................................5
**Шәрипов Сабир.** Бары ла, юғы ла үҙебеҙҙеке... ..............................................5

● ДУҪЛЫҠ КҮПЕРҘӘРЕ

**Аманжолов Ҡасим.** Һайра, һайра, һандуғасым. Шиғырҙар. .................11
**Сергөл Вурал.** Китәһең? Шиғырҙар. .......................................................................7

*«Ағиҙел»дә ҡунаҡта – Ҡалмыҡстан әҙиптәре*

**Эрдни Эльдышев.** Йыр уятһын беҙҙең дуҫлыҡ.
**Эрдни Эльдышев.** Әсә кәңәше. **Владимир Нуров.** Барыҫ йылы. **Александр Соловьев.** Әҙәм менән Һауа. **Алексей Скакунов.** Ҡалмыҡ ҡыҙы. **Николай Санджиев.** Тыуған тел. **Василий Чангонов.** «Далам минең! Алтын, һары далам...» **Валерий Хотлин.** Сығанаҡ. **Виктор Папуев.** Элегия. **Валентина Лиджиева.** «Эй далам һин минең, даланым...» **Лилия Щеглова.** Күҙгә алдында. Шиғырҙар.
**Николай Бурулов.** Бүре ҡапҡаны. **Николай Илюмжинов.** Мазул рудни-гында. **Игорь Гриньков.** Әҙәми шәүләләр. Хикәйәләр. .............................2

*„Ағиҙел"дә ҡунаҡта – Силәбе ҡалаһының М. Аҡмулла исемендәге әҙәби берекмәһе*

**Ҡамса Мортазин.** Һүрелмәй ижад ялҡыны. .................................................12
**Булат Батталов, Алевтина Вәлиева, Мәүлиҙә Ибраһимова, Дарвин Таһиров, Азамат Усманов, Венера Нуртдинова, Рим Рәхимов, Зимфера Ширванова, Айҙар Ишбирҙин, Эльвира Ҡолоева, Юлиә Вәлиева, Нәфисә Шакирова, Рафаэль Мөхәмәтйәнов.** Шиғырҙар .......................................12
**Гөлсирә Ғүмәрова, Урал Ҡолошов, Альвина Мөхәмәтйәнова.** Нәҫерҙәр. ...................................................................12

**„Ағиҙел" ҡунағы**

**Ҡотоева Гөлназ.** Әйтер һүҙем бар! (*Әхәт Сәлихов менән әңгәмә*). ...............12
**Хужин Мәхмүт.** Көнкүреш өлгөһө. (*БР-ҙың торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры Ирек Ялалов менән әңгәмә*). ...................................................................12
Китапһыҙ өй – ҡошһоҙ урман (*Зөфәр Тимербулатов менән Сабир Шәриповтың әңгәмәһе*). ..................................................9

● ДОНЪЯ ӘҘӘБИӘТЕ ҮРНӘКТӘРЕ

**Лао Шэ.** Ай урағы. Хикәйә. ..............6

● ШӘХСИ ФЕКЕР

**Йәнбирҙин Иршат.** Халыҡ мираҫына мөнәсәбәт. ................................................2
**Хисамов Ғәлим.** Сәсәнлекте тергеҙәйек. .............................................................2

● МУЗЕЙҘАР – МӘҘӘНИӘТЕБЕҘ КӨҘГӨҺӨ

**Тимерханов Илдус.** Уҙғандарҙан башҡа киләсәк юҡ. ......................................10
**Әхмәтйәнов Хажи.** Төбәк тарихы сағыла. ..............................................................8

● ЯҘМЫШТАН ҺЫҘМЫШ ЮҠ

**Гәрәев Мәгсүм.** Ҡаты һынауҙар аша. .......................................................................4

**Муллағолов Әхмәт.** Һынауҙар һындыра алманы. ....6
**Фәтҡолисламова Зәкиә.** Һағынам «кулактар» төйәген. ....7

● **ШАҢДАУ**

**Бикбаев Рауил.** Аңлатма биреү кәрәк. ....10

● **РУХЫБЫҘ ТАМЫРҘАРЫ**

**Асҡарова Гөлнара.** Аҡыл байлығын һаҡлаған усаҡ. ....9
**Ҡашҡаров Ғәбделхаҡ.** Ҡалмыҡ нәҫелдәре. ....10
**Минһажитдинова Хәмиҙә.** Сәсәндән һүҙ ҡала. ....3
**Нурғәлиев Ишғәли.** Кеше булғың килһә, китап уҡы! ....10

● **РУХИ ТАМЫРҘАРЫБЫҘ**

**Ғөбәйҙуллина Фәрзәнә.** Белем һандығы. ....11
**Хужин Мәхмүт.** Быуаттар менән күҙләшергә килегеҙ! ....12

● **РУХИ ХАЗИНАЛАР**

**Ғайсина Фәнирә.** Юлға бәйле ырымышаныуҙар, тыйыуҙар. ....4
**Солтангәрәева Розалия.** Мөнәжәттәр – көйлө иман һүҙе. ....5

● **РУХИ МӘҘӘНИӘТ**

**Рәшит Шәкүр.** Хәҙерге башҡорт матбуғаты һәм тел мәҙәниәте. ....1

● **РУХИ ЫНЙЫЛАРЫБЫҘ**

**Лео Яковлев.** Тормошо тураһында Ғүмәр Хәйәм үҙе һөйләгән бәйән. ....6

● **ТЕРЕ ХӘТЕР**

**Дилара Мәхмүтдинова-Мутикова.** Иле менән бергә күрҙе. ....8-9

● **ДИН ҺӘМ ФӘН**

**Имам Ғариф хажи Ғабдрахманов.** Дин эшмәкәре һәм мәғрифәтсе. ....7
**Нурғәлиев Ишғәли.** Аллаһы Тәғәлә – һуңғы таяныс. ....2

● **ЖУРНАЛ УҠЫУСЫЛАР ИЖАДЫ**

**Низамова Флүрә.** Рәми рухы менән һөйләшеү. Шиғырҙар. ....3
**Нәҙерғолова Рәйлә.** Телем. Шиғырҙар. ....3
**Сәғитов Харис.** Ҡайтып киләм. Шиғырҙар. ....3
**Тамара Сәйфуллина, Фәүзиә Йәнтилина, Гөлсөм Вәлиуллина, Хажи Әхмәтйәнов.** Шиғырҙар. ....6
**Хәҙисә Юдаева.** Мираҫ; **Хәлиҙә Шәйәхмәтова.** Хыял; **Әлфиә Садиҡова.** Көҙгө моң; **Нәйлә Әйүпова.** Бәхет ни өсөн кәрәк? Шиғырҙар. ....4

*Күмертау яҙыусылар ойошмаһына – 15 йыл*

**Кинйәғәли Абдуллин.** Башҡортостан; **Руша Солтанғолова.** Көйөргәҙе ере; **Нәсимә Йосопова.** Мин тормошто яратам; **Хәлиҙә Алтынбаева.** Һәйкәл; **Хәмзә Ишдәүләтов.** Урап үттең. Шиғырҙар. ....8

*4 декабрь – Дәүләт Думаһына һайлау көнө*

**Хужин Мәхмүт.** Вәғәҙәләр гөлләмәһе. ....11

● **«АҒИҘЕЛ» ЖУРНАЛЫНЫҢ 2011 ЙЫЛҒЫ ЙӨКМӘТКЕҺЕ**

12

● **«АҒИҘЕЛ»ГӘ ХАТТАР КИЛӘ**

4, 5, 7,12

● **ӘҘӘБИ- МӘҘӘНИ МӨХИТ**

1, 2, 3, 4, 5, 6, 7, 8, 10, 11, 12

Журналдың 2011 йылғы лауреаттары. ....12

# *Әҙәби-мәҙәни мөхит*

***

Атаҡлы ғалим, төркиәтсе, яҙыусы, йәмәғәт эшмәкәре Ж. Ғ. Кейекбаевтың тыуыуына 100 йыл тулыу айҡанлы БДУ-ла «Профессор Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаев һәм уның төрки, урал-алтай ғилемендәге хеҙмәттәре» тип аталған халыҡ-ара фәнни-ғәмәли конференция үткәрелде. Конференция эшендә Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары З. Й. Рәхмәтуллина, Башҡортостан мәғариф министры урынбаҫары А. Ш. Сурин, Татарстан Фәндәр академияһы академигы М. З. Зәкиев, Ҡазан дәүләт педагогия университеты проректоры, яҡташыбыҙ, профессор Ф. Ф. Харисов, К. Ж. Жубанов исемендәге Аҡтүбә дәүләт университеты доценты К. К. Садирова (Ҡаҙағстан), М. К. Аммосов исемендәге Көньяҡ-көнсығыш федераль университет профессоры Г. Г. Филиппов (Яҡут-Саха), үҙебеҙҙән профессорҙар М. В. Зәйнуллин, Ғ. С. Ҡунафин, Р. З. Мерәҫов, Т. М. Ғарипов, Н. А. Мәжитов ҡатнашты һәм докладтар менән сығыш яһаны.

Конференцияла академик М. З. Зәкиев БДУ-ның почетлы профессоры итеп һайланды, уға, университеттың традицияһына ярашлы, профессор мантияһы кейҙерелде. Ғалимдың ҡыҙы, педагогия фәндәре кандидаты, БДПУ доценты З. Ж. Кейекбаева ошондай мәртәбәле сара үткәргәндәре өсөн республика хөкүмәтенә, БДУ етәкселегенә рәхмәт һүҙҙәре әйтте.

Көндөң икенсе яртыһында конференция секцияларға бүленеп эшләне. Унда башҡорт филологияһы, урал-алтай телдәренең актуаль мәсьәләләренә арналған күп һанлы сығыштар тыңланылды. Ғилми форум аҙағында резолюция ҡабул ителде. Конференцияла ҡатнашыусылар мәшһүр ғалимдың фәнни һәм әҙәби мираҫын өйрәнеү маҡсатында бындай сараны һәр биш йыл һайын үткәреп тороу зарурлығын, Ж. Ғ. Кейекбаевҡа республиканың С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһын (үлгәндән һуң) юллау, БДУ-ға уның исемен биреү кәрәклеген күтәреп сыҡты.

Жәлил Кейекбаевтың 100 йыллығына арналған ғилми-ғәмәли конференция Сәйетбаба ауылында ла үтте. Уның эшендә дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәрҙәре, яҙыусылар, ғалимдар, юғары уҡыу йорттары, мәктәптәр уҡытыусылары, ғалимдың улы, РФ Дәүләт Думаһы депутаты Морат Кейекбаев ҡатнашты.

Ғалим исемен йөрөткән Сәйетбаба урта мәктәбендә уның тормошона һәм ижадына арналған асыҡ дәрестәр ойошторолғайны. Конференцияла сығыш яһаусылар Жәлил Ғиниәт улының фәндә, әҙәбиәттә ҡалдырған яҡты эҙе, ентекле өйрәнеүҙе талап иткән ғәжәйеп бай ижади мираҫы, тейешле кимәлдә баһалауҙы көткән асыштары хаҡында тәфсирләп һөйләне. Тантаналар артабан Ҡаранйылғала – ғалимдың тыуған ауылында – дауам итте. Юбилейҙа ҡатнашыусылар бында “Туғандар һәм таныштар” романы нигеҙендә театрлаштырылған тамаша ҡараны, Ж.Ғ. Кейекбаевтың йорт-музейы менән таныштты.

Район хакимиәтенең Жәлил Кейекбаев исемендәге премияһына быйыл яҙыусылар Лира Яҡшыбаева, Кәбир Аҡбашев, һуғыш һәм хеҙмәт ветераны Вилдан Шәрипов лайыҡ булды.

***

Тәүге тапҡыр төрки телле шиғриәт әҫәрҙәрен тәржемә итеүселәрҙең «Аҡ торна» халыҡ-ара конкурсы үткәрелде. Уны БР Мәҙәниәт министрлығы, БР Яҙыусылар союзы, «Культура» Бөтә Рәсәй дәүләт телерадиокомпанияһы филиалы – «Башҡортостан» дәүләт телерадиокомпанияһы, «Ағиҙел», «Бельские просторы» әҙәби-нәфис журналдары, «Имидж-консультант» консалтинг компанияһы ойошторҙо.

Конкурсҡа бөтәһе 370 эш ҡабул ителгәйне. Алтай, Ҡабарҙы-Балҡар, Саха (Яҡут), Тыва, Хакасия республикалары, Мәскәү, Ярославль, Әстрәхан ҡалалары, Ҡаҙағстан, Үзбәкстан, Украина, Германия һәм Австрия ижадсылары көстәрен һынаны. Бәйгеселәрҙең эше өс номинацияла: лирика, граждандыҡ шиғриәте, эксперименталь форма буйынса баһаланды. Ошо көндәрҙә Өфөлә халыҡ-ара конкурсҡа йомғаҡ яһалды. Еңеүселәр араһында Башҡортостандан Дамир Шәрәфетдинов, Светлана Чураева, Айҙар Хөсәйенов һәм Розалия Дәүләтбәкова бар.

***

Бөйөк башҡорт мәғрифәтсеһе, шағир Мифтахетдин Аҡмулланың тыуыуына 180 йыл тулыу айҡанлы республикала күп кенә юбилей саралары уҙғарыласаҡ.

Атаҡлы шағирҙың һуңғы төйәге – Силәбе өлкәһенең Мейәс ҡалаһында октябрь аҙағында уҡ "Аҡмулланың алтын көҙө" исеме аҫтында мәҙәниәт байрамы булып үтте. Мейәс ҡалаһы хакимиәте һәм Силәбе өлкәһе башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты тарафынан ойошторолған был сарала Башҡортостандан Бөтә Донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе урынбаҫары Вәлиәхмәт Бәҙретдинов етәкселегендәге абруйлы делегация саҡырылғайны. Сарала ҡатнашыусылар Аҡмулла ҡәберенә сәскәләр һалды, Силәбе һәм Ҡурған өлкәләренең мөфтөйө Ринат Раев Аҡмулла рухына аят уҡыны. Артабан ҡунаҡтар Мейәс ҡалаһының тыуған яҡты өйрәнеү музейында булып, унда Көньяк Уралдың төп халҡы – башҡорттарға һәм бөйөк шағир Аҡмуллаға арналған экспонаттар менән танышты.

Байрам Автозаводсылар мәҙәниәт һарайында дауам итте. «Аҡмулла уҡыуҙары»н Силәбенең М. Аҡмулла исемендәге әҙәби берекмәһе етәксеһе Ҡамса Мортазин алып барҙы. Әҙәбиәт һөйөүселәр филология фәндәре докторы, шағир Рәшит Шәкүрҙең Аҡмулла ижадына арналған әңгәмәһен, шағирҙар һәм ғалимдар Мәүлит Ямалетдин, Ҡәүи Кәримов, Зәки Әлибаев, Ғәйнислам Ибраһимов, Азамат Юлдашбаев, Рәшит Аҡкөбәков, тыуған яҡты өйрәнеүсе Әсләм Арыҫлановтың сығыштарын тыңланы. Мейәстә йәшәүсе башҡорттарҙың туған телен, мәҙәниәтен һаҡлау һәм үҫтереүгә арналған «түңәрәк өҫтәл» дә эшлекле шарттарҙа үтте. Кисен мәҙәниәт һарайында Сибай дәүләт филармонияһы артистары сығыш яһаны.

***

Силәбе өлкәһенең Сосновка районында башҡорт әҙәбиәте классигы Ғәлимов Сәләмдең тыуыуына 100 йыл тулыу уңайынан конференция үтте. Саҡырылған ҡунаҡтар: Силәбе өлкәһенең М.Аҡмулла исемендәге һәм Магнитогорск ҡалаһынан «Урал ынйылары» әҙәби берекмәләре етәкселәре Ҡамса Мортазин, Файза Мәғәсүмова, яҙыусылар Мәүлит Ямалетдин, Азамат Юлдашбаев, шағирә Алевтина Вәлиева, Әбйәлил районы Ташбулат мәктәбе уҡытыусыһы Гөлсөм Хисмәтова сығыш яһаны. Долгодревенское мәҙәниәт һарайында Силәбе өлкәһенең йәш ҡәләм тирбәтеүселәренең ҡулъяҙмалары тикшерелде. Магнитогорскиҙан «Урал ынйылары» әҙәби берекмәһе ағзалары Азамат Усманов менән Бибикамал Шәйҙуллинаның ижадтары ыңғай баһа алды. Сирюсинск мәктәбендә Учалы районының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары инновацион технологиялар ҡулланып тәжрибә уртаҡлашты, интернет-дәрес үткәрҙе.

Ошо сара сиктәрендә Сосновка муниципаль биләмәһе хакимиәте булдырған Ғ. Сәләм исемендәге премияның лауреаттары ла билдәләнде: өс номинацияла – публицистика, тыуған яҡты өйрәнеү һәм әҙәбиәт өлкәһендә шөғөлләнеүселәр араһында – Мәүлит Ямалетдин, «Усаҡ алдында» әҙәби берекмәһе етәксеһе Урал Ҡолошов һәм Ҡамса Мортазин лайыҡ булды был абруйлы бүләккә.

***

Р. Ғарипов исемендәге Республика гимназия-интернаты коллективы Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Ноғман Мусин менән осрашыу уҙғарҙы. Унда әҙиптең ижад биографияһына арналған видеоматериалдар, интернат таланттары әҙерләгән концерт күрһәтелде. Оло ҡунаҡ уҡыусыларҙың бихисап һорауҙарына фәһемле яуаптарын бирҙе.

***

Зәки Вәлиди исемендәге Милли китапханала Тойғондоң Башҡортостан «Китап» нәшриәтендә быйыл сыҡҡан «Мөхәббәттән донъя ҡотайыр» йыйынтығының исем туйы үткәрелде. Фекер алышыуҙа китапхана директоры Азат

Ибраһимов, яҙыусылар Рәшит Низамов, Ринат Камал, шағирҙар Николай Грахов, Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина, Лилиә Һаҡмар һ.б. ҡатнашты. Йәш әҙиптәр Зиниә Байназарова менән Фәрит Әхмәт тә, шиғырҙарына ҡушып, үҙҙәре башҡарыуында моңло йырҙар бүләк итте. Атаҡлы ҡурайсы Роберт Юлдашевтың ҡурайҙа һыҙҙырыуы, М. Исҡужин исемендәге 136-сы башҡорт лицейының XI синыф уҡыусыһы Ләйсән Фәттәхованың бейеүе, Өфө дәүләт сәнғәт академияһының III курс студенттары Лиана Байназарованың – думбырала, Айрат Шакировтың баянда өҙҙөрөп уйнауҙары кисәне тағы ла йәнләндереп ебәрҙе.

***

Яҙыусылар союзы идараһы йортонда шиғриәт секцияһының сираттағы ултырышы үткәрелде. Унда йәш шағирҙар Алмас Шаммасов, Олеся Әхмәтрәхимова, Зөлфирә Ҡарағужиналарҙың ҡулъяҙмалары тикшерелеп, “Китап” нәшриәтендә сығарыуға фатиха алды.

***

**Архангел.** Прозаик Әмир Әминев менән шағир Фәнил Күзбәков район үҙәгендә, Валентиновка мәктәбендә (әйткәндәй, данлыҡлы яҡташыбыҙ, авиация маршалы Пстыго – ошо ауылдан) уҡытыусылар, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре, юғары синыф уҡыусылары менән «Ағиҙел» журналы эшмәкәрлеге, бөгөнгө әҙәбиәт, ижад мәсьәләләренә бәйле осрашыуҙар үткәрҙе. Сарала ҡатнашыусыларҙың Башҡортостан әҙиптәренең төп баҫмаһына дәррәү яҙылырға теләк белдереүе – йәнле әңгәмәләрҙең һөҙөмтәһе ул.

Район хакимиәте башлығы F.X. Ғәбитовтың редакция вәкилдәрен ихлас ҡаршылауы, журнал менән яҡындан ҡыҙыҡһыныуы, район мәғариф бүлеге етәксеһе Н.М. Йосопованың осрашыуҙарҙа әүҙем ҡатнашыуы ла район халҡының әҙәбиәткә, ваҡытлы баҫмаларға ҙур әһәмиәт биреүҙәре тураһында һөйләй.

***

**Федоровка, Бишбүләк, Йәрмәкәй.** Әҙиптәр Фәнил Күзбәков менән Сабир Шәрипов, матбуғатҡа яҙылыу мәсьәләләренә бәйле, Федоровка районының (мәғариф бүлегенең туған телдәр буйынса методисы Г.Ш. Хәйбуллина ҡатнашлығында) Бала Сытырман урта дөйөм белем биреү мәктәбендә (директоры Ә.Б. Ғәлиәкбәрова), Бишбүләк районы үҙәгендә (мәғариф бүлеге етәксеһе А.Г. Ченжуров, туған телдәр буйынса методист И.F. Хисмәтова), Ҡаныҡай ауылы мәктәбендә (директоры Р.Н. Әхмәтшин), Йәрмәкәй районының (мәғариф бүлеге етәксеһе Ә.М. Мөхәмәтйәнов) Рәтамаҡ, Усманташлы, Иҫке Турай, Иҫке Шах ауылдары мәктәптәрендә (директорҙары Р.Р. Баһауетдинов, А.Ф. Мөхәмәтшина, F.F. Хәсәнов) уҡытыусылар, китапхана хеҙмәткәрҙәре, уҡыусылар менән осрашыуҙар үткәрҙе.

***

**Благовар. Стәрлебаш.** “Ағиҙел”гә алдағы ярты йыллыҡҡа яҙылыу мәсьәләләренә бәйле, баҫманың баш мөхәррире Әмир Әминев менән бүлек мөхәррире Фәнил Күзбәков Благовар районының Языково, Һарайлы дөйөм урта белем биреү мәктәптәрендә (директорҙары И.Ф. Васимов, Р.Р. Ғүмәров) уҡытыусылар, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре менән осрашыуҙар үткәрҙе. Ҡунаҡтарҙы район мәғариф бүлеге етәксеһе З.Р. Ишмәтов оҙата йөрөнө.

«Ағиҙел» журналының баш мөхәррир урынбаҫары Рәмил Йәнбәк менән публицистика бүлеге мөхәррире Мәхмүт Хужин Стәрлебаш районында ижади осрашыуҙар уҙғарҙы. Иҫке Ҡалҡаш, Ибраҡай, Стәрлебаш, Ҡабыҡҡыуыш, Йәлембәт ауылдарында улар әҙәбиәт һөйөүселәргә журнал хаҡында һөйләне, әҫәрҙәрен уҡыны, һорауҙарға яуап бирҙе. Журналистарҙы район хакимиәте башлығы урынбаҫары М.М. Усманов, район мәғариф бүлеге етәксеһе М.F. Заһиҙуллин ҡабул итте.

**Ҡотлайбыҙ!**

Рәсәй Федерацияһы Президенты Указы менән мәҙәниәт өлкәһендәге ҡаҙаныштары һәм оҙаҡ йылдар уңышлы эшләгәндәре өсөн яҙыусылар Ғәйетбаев Наил Әсҡәт улына һәм Йыһаншин Камил Фәрухша улына «Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре» тигән маҡтаулы исем бирелде.